# Ағиҙел

Өфө,
июль
2009

7 (1036)


ӘҘӘБИ-НӘФИС ӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ


Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республика ы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Тамара Ғәниева, Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррирҙәре),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир),*
Харис Сәғитов *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Зилә Йәнбәкова, Сәлимә Байгилдина *(корректорҙар),*
Рәйсә Камалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе),*
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар).*

Журнал Башҡортостан Республика ының Матбуғат әм киң мәғлүмәт министрлығында
1992 йылдың 10 декабрендә теркәлде.
Таныҡлыҡ № 646.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды әм биттәргә алынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.07. 2009. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитура ы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 000 экз. атыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0086.09.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакция ы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

---

Баҫма Матбуғат әм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республика ының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятие ында баҫылды.
(450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в ГУП РБ «Уфимский полиграфкомбинат»
(450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р /с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

©«Ағиҙел», 2009 (7, 1036)

# БЫЛ АНДА:


СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Гөлнур Яҡупова.** Ҡатындар. Т р и л о г и я . Ҡыҙ бала. Беренсе китап. ....................................................................................5
**Түләк Ғирфанов.** Митинг. Х и к ә й ә . ............................................73

ШИҒРИӘТ

**Тимер Йосопов.** “Мәңгелектең керпек ҡаҡҡанындай, шундай ҡыҫҡа икән ғүмерҙәр...” Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................77
**Марис Нәзиров.** “Бала саҡтан бирле үрәт күрәм, ил ам ғазаптары кисерәм...” Ш и ғ ы р ҙ а р . ..................................84
**Кәүсәриә Шафиҡова.** “Ҡулымда – аҡҡош ҡауырыйы...” Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................................................90

«АҒИҘЕЛ» КОНКУРСЫ

*«Күңелемдә – донъя сере»*

**Гөлнара Яҡшыбаева.** Ленараны йоҡлатҡанда. Ш и ғ ы р ҙ а р . .......94
**Мөнир Иҡсанов.** Сәйерлек. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..................................96

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Флүрә Хәмиҙуллина.** «Сыбар шоңҡар» романында милли идея сағылышы. ....................................................................................98

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Фәрзәнә Аҡбулатова.** Ус төбөндәге Йыһан *(Булат Рафиҡовтың тыуыуына 75 йыл тулыу айҡанлы).* .............122

ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

**Шакир Сәлим.** Уҡыусыма. Ш и ғ ы р ҙ а р . ...................................132

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Ғәли Ибраһимов.** Кинйә. Т а р и х и р о м а н . III китап. Бүгәсәү батша анаты. Дауамы. ..................................................138

ПУБЛИЦИСТИКА

**Мәжит Алкин.** Юғары мәктәптә белем сифатына идара итеү кризисының сәбәптәре. .............................................................164
**Марсель Ҡотлоғәлләмов.** Икмәгебеҙҙә ниңә әрем тәме? ..............169
**Рәүеф Насиров.** “Башҡорттар исеменән...” ................................177

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

КИТАП КӘШТӘҺЕ

**Миңлеғәли Нәҙерғолов.** Милли батырыбыҙға рухи һәйкәл. .........192

ПРОЗА

**Г. Якупова.** Женщины. *Трилогия*. Девчушка. *Начало.*
**Т. Гирфанов.** Митинг *(рассказ)*.

ПОЭЗИЯ

**Т. Юсупов, М.Назиров, К.Шафиков**а *(стихи)*.

КОНКУРС "АГИДЕЛИ"

*В душе – тайна мира*

**Г. Якшибаева, М. Иксанов** *(стихи)*.

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Ф. Хамидуллина.** Отражение национальной идеи в романе "Кречет мятежный".

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Ф. Акбулатова.** Космос на ладони *(к 75-летию со дня рождения Б. Рафикова)*.

МОСТЫ ДРУЖБЫ

**Шакир Селим.** Моему читателю *(стихи)*.

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Г. Ибрагимов.** Кинзя. Послы Пугачева *(исторический роман. III книга)*. *Продолжение.*

ПУБЛИЦИСТИКА

**М. Алкин.** О кризисах качества высшего образования.
**М. Кутлугаллямов.** Откуда в хлебе вкус полыни?
**Р. Насыров.** “От имени башкир...”

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

КНИЖНАЯ ПОЛКА

**М.Надергулов.** Духовный памятник национальному герою.



Гөлнур
ЯҠУПОВА

# ҠАТЫНДАР

## ТРИЛОГИЯ

## Ҡыҙ бала

### Беренсе китап

1

Ҡарурманда, бүре уҡмағында, осрашты улар — ике ҡырағай йән. Бере енең урмандан әҙәми заттарға, икенсе енең, кире енсә, әҙәми заттарҙан урманға ҡасып барышы. Ике е ике яҡтан, ҡапма-ҡаршыға, саба торғас, түштәре менән йырып алға этәреп килгән ауа тулҡындары, ни айәт, тасма-тас бәрелешеп, юғарыға урғылды. Был күҙгә күренмәҫ тығыҙ урғым алдында бер мәлгә туҡтап ҡалдылар: тирә-йүн уларҙың тик ике енә генә аңлашылған мәғлүмәти еҫ-тойомдар менән тулды. Зә әр ялтыраған күҙҙәр, тыржайған томшоҡтар, ҡарпайған ҡолаҡтар шул мәғлүмәтте аңдыны. Ул арала урғым нисек бар бул а, шулай юҡҡа сыҡты. Әлеге икәү ике е ике яҡҡа мөҡәддәс юлдарын дауам итте. Уларҙы ошо ынтылыштарынан дүндерер көс юҡ. Ҡарар күҙгә ифрат ныҡ оҡшаш алар ҙа, был ике йәндең эске булмышы аҡ менән ҡара кеүек айырыла: бере е азатлыҡ хаҡына әҙәми заттың муйынын сәйнәп ырғытырға әләтле, икенсе е шул уҡ әҙәми затҡа тоғролоҡ хаҡына ҡоллоҡҡа төшөргә, муйынына ҡарғы кейҙертергә лә риза...

Күп тә үтмәне, минең нәҫелем көн иткән Толпарлы ауылы таң ҡалдырғыс хәбәр менән тулды: Әхмәҙин унарсының бүре е эт булып өрә башлаған!

Ул бүрене Әхмәҙин бабай өңөнән бәләкәй генә көйөнсә алып ҡасҡан, ҡыҙыҡ өсөн микән, урынына колхоз келәттәрен аҡлаған кәнтәй овчарканың көтөйөн ҡалдырып киткән. Заманында урман ҡарауылсыһы булып эшләгән, мәргәнлеге менән дан ҡаҙанған һунарсы хәҙер үҙе лә шул овчарка менән бер ҡатар янғын үндереү арайында төнгө һаҡта тора. Был хеҙмәтенән ул ифрат ҡәнәғәт: төндәрен,

*Гөлнур Яҡупова — шиғриәт әм проза, балалар әҙәбиәте өлкә ендә егәрле ижад иткән, маҡтаулы исемдәргә эйә күптәнге авторыбыҙ. Өфөлә йәшәй, тыуған яғы — Ғафури районы. Әҙибә дөйөм идея әм сюжет менән бәйле "Катындар" тип аталған трилогия тамамланы әм шуның беренсе китабын "Ағиҙел"гә тәҡдим итте. Журнал алдырыусылар уны мауығып уҡыр, тип ышанабыҙ.*

йә уйланып, йә һуғышта алған яраларынан  ыҙланып, барыбер йоҡо оҙ уҙғара, ә былай яҡындағы машина-трактор паркынан өҙөлмәгән ир-ат менән иртәле-кисле күрешә, гәпләшеп кинәнә, исма ам. Өйө лә яҡын, Келәт тыҡрығында ғына.

...Ә теге "бүре өргән" көндө ҡарт, ғәҙәтенсә, таң  ары ы менән үҙенең ихата ына ҡайтып ураны, йорт-ҡура ына күҙ  алды. Ҡара а — бүре е юҡ! Ҡарғы ынан  ыпырылып ҡасҡан? Тағы ҡара а — бүре е урынында. Текләберәк ҡара а — теге бүрегә үтә лә ныҡ оҡшаған эт, дөрөҫөрәге, бүрэт тора?! Күҙе үткер, яҙа күрмәҫ, әүәлге  унарсы ла а, мал айыра. Ни бул а ла булыр, тине лә бүрэткә яҡынлашты, уны ы ыңғай ғына торғас, теге енән ҡалған ҡарғы-муйынсаны йәпләп башынан кейҙерә  алды. Анау бүре еме – бүре е, йәнә е, кешегә әйтмәҫ тә ҡуйыр дөрөҫөн: ана бит, был да сымыры  кәүҙәле, ҡыҫыҡ сикәле, уҫал күҙле. Шул саҡ бүрэт тешен ыржайтып ырылданы ла артҡы тәпәйҙәренә баҫты  әм ҡапыл алғы тәпәйе менән дөмбәҫләтә йорт эйә енең яңағына килтереп  уҡты. Бер арый был икәү, бүрэт менән  унарсы, күҙгә-күҙ ҡарашып шым торҙолар. Ахырҙа һунарсы: “ арыгүҙ?” — тип бышылданы. Бүрэт: "Танының мы?" — тигәндәй, ҡойроғон болғаны ла өрөргә тотондо. Лаулауы сәйерерәк ине унын.

Уңарсы бабайын ҡаршыларға тип күтәрмәгә сығып баҫҡан әбейе сәрелдәргә тотондо:

— Бүре  уҡты, бабайҙы бүре  уҡты!

Ҡыҫҡа ы, төшкөлөккә үк Әхмәҙин  унарсыға ҡушамат әҙер ине: Бүре уҡҡан.

Ә ысын дөрөҫөн Әхмәҙин, әй, Бүре уҡҡан бабай, үҙе генә белде: ниндәйҙер серле тәҡдир илә, бүре өйөрөндә аҙаштырған көтөйө —  арыгүҙ үҫеп, хас та бүре булып ҡайтып ингәйне. Әммә, оҡша а ла, бүре түгел ине  әм яманатлы бүрэткә лә әүерелмәгәйне һымаҡ ул, шөкөр. Исемде көтөйгә үҙе ҡушҡайны, күҙенең төҫө сылт  ары булғанға. Шуға ла, әле килеп, күҙенән, ҡарашынан таныны  арыгүҙҙе. Тимәк, инә бүре ят көтөйҙө быуып үлтермәгән, имеҙгән, үҫтергән?  арыгүҙ үҙе лә сос ине, бүре көсөктәренә тиҙүк эйәләшеп, таһылдарын үҙләштереп тә алғандыр?

Аҙна буйы һағалап йөрөп, инә бүре ауға сыҡҡан саҡта, йәпле генә итеп атҡарып ҡуйғайны ниәтен  һунарсы – әллә ниңә бүре балаһын ҡулға  эйәләштерергә сәмләнде лә йөрөнө шул осор, гонаһ шомлоғо... Ата бүре нишләп үҙе ризыҡ ташымаған балаларына? Моғайын, уға бер-бер хәл булғандыр, юғиһә бит ул яҙ мәлендә (апрель башы ине) көнөнә бер нисә ҡоралайҙы йыға ала хатта. Меҫкен ҡоралайҙар көндөҙ ҡояшта иреп, төндә бысаҡтай ялтырап туңған ҡар киртләстәренә тояҡ-бәкәлдәрен йәрәхәтләп, шәп саба алмайҙар шул.  унары уңмағанда ла ата бүре ас итмәй балаларын, тапҡан ризығын әҙ-әҙләп ашҡаҙанына йыя, эсәктәренә ебәрмәй, өңөнә алып ҡайтҡас, кире сығара... Шуларҙы эсенән генә фаразлап, оҙаҡ ҡына шаҡ ҡатып баҫып торҙо Әхмәҙин ҡарт.

***

Ҡәүемемде ҡужғытҡан ошо ваҡиға, бәғзе башҡа хәлдәр ҙә миңә мәғлүм. Әммә ул ҡәүем ара ында әлегә юҡмын, донъяға тыуып өлгөрмәгәнмен. Мин — яралғы. Бар булған мөхитем   ыу менән тулы, шунда бәүелгеләп йөҙөп йөрөйөм. Моғайын, мин күлдә — балыҡ яралғы ы, йәғни селбәрәмендер? Йә сүмесбашмын, абау, баҡа булырмынмы икән? Бәлки,  ауала осар ҡошмон — әлегә күкәй эсендәге шыйыҡсала болғанлайымдыр? Юҡ та инде... Минең бит аңым бар?! Мөхит эсендә (ул мөхиттең инәлек, әсә ҡарыны тип аталғанын да ишеттем) ваҡытлыса, ҡурсаулыҡта икәнемде  иҙемләйем. Бында имен үҫә ем, тәбиғәт инселәгән ҡиәфәтемә инә ем бар. Ә ҡиәфәтем матур буласаҡ! Сөнки мин — әҙәми зат яралғы ы. Ҡайҙан беләмме? Әллә...

Минең әле Оло йы анға, донъяға тыуа ым бар. Әлеге мөхитем, тимәк, – кесе

йы аным. Мин — эстә; тыштағы, Оло йы андағы Ай тигән есемде күрмәйем, тоям ғына: өс тапҡыр тулды ул, дүртенсегә кителә башланы әм... тап шул мәлдә кесе йы андағы тәүге кисерешемә — ҡурҡыуға дусар булдым. Мине, бәләкәс йәнде, үҙенең ҡарынында бар иткән дәү йәндең яр ыуы күҙәнәктәремә үтеп инде: "Төшөртәм!" Дәү йәндең был ниәте тыныс мөхитемдең аҫтын өҫкә килтерҙе. Тыумаҫ борон, етлекмәҫ борон кесе йы андан төшөп ҡалып юҡ булырға?! Ҡурҡыуымдан асырғанып туларға тотондом, йәшәргә дәғүәмде белдерҙем шулай. Дәү йән мине йәлләне, ниндәйҙер шомло тупһа аркылы үтеп, әжәл тырнағына эләктек тигәндә, кире боролдо. Ҡыуандым! Инде миңә ике хис-тойғо таныш — ҡурҡыу әм ҡыуаныу. Киләсәк ғүмерҙә ошо тәүге икәүҙән бихисап яңы кисерештәр шытып сығырын аңғармайым, ҡан хәтерен, аң-мәғлүмәт күсәгилешен дә әлегә белмәйем.

...Ни айәт, тыуҙым! Ай ете ҡабат тулды, ете ҡабат кителде лә (көнөм тулманы бит әле?!), дәү йән менән бергәләп кисергән тулғаҡ ыҙалары аша үтеп, кесе йы ан шаршауын йыртып килеп сыҡтым Оло йы анға, донъяға. 1948 йылдың 28 сентябре...

Инде мин үҙ аллы йәшәй башларға тейешмен?! Дәү йәндән айырып, кендегемде киҫтеләр. Үҙемә тын алырға кәрәк хәҙер: ауыҙымды асыуға йырмаслап эскә инеп киткән ауа үпкәмде урталай телеп ебәргәндәй итте лә, түҙмәй, ҡысҡырып илап ебәрҙем. Тәүге ауыртыу, тәүге күҙ йәше. Тәүге ауаз!

Күҙемде асҡас, дәү йәнде, ниһайәт, тыштан күрҙем: ул ысынлап та шундай дәү, ике аяғы өҫтә ҡыймылдай, ҡулдары — уртала, башы аҫта тәгәрләп йөрөй. Унан һаман да айырылып уҡ бөтмәгәнмен әле. Инде мин дәү йән менән йылы йомро имсәктәре аша тоташам, уларҙан алмаш-тилмәш баллы өт имәм. Кем өйрәткән мине тыуыу менән ул имсәктәрҙәге кескәй имгестәрҙе табырға, ҡар аланып ауыҙыма ҡабырға әм йәшәү уты ура башларға?

«Әсәй!» Ҡолағыма гелән шул үҙ яғыла. Әсәй икән дәү йәндең исеме. Хәҙер ул баштүбән йөрөмәй. Бәлки, мин тыуғанға шатланып тәү мәлдә шулай йөрөп алғандыр әҙерәк? «Балам!» Тағы ошо үҙҙе әйләнгән айын ишетәм. Мин дә ә ул бала — иң-иң ҡәҙерле йән эйә е. Юҡ а, ниңә шулай өйөрөләләр минең тирәмдә, тындарын да ҡапылда сығармай, ел ебәрмәй, эстәренә тартып торалар?

Шуны аңғарып ҡалдым: мине бәпләүсе тағы өсәү бар әм улар бер ишерәктәр икән. Әсәйем ымаҡ кейенәләр, имсәктәре лә бар, мине ҡыҫып яратҡандарында иҙәм дә ә ул йомроҡастарҙы. Бигерәк тә ихластар миңә, еҫтәре тан ыҡ, ҡулдары йомшаҡ. Уларҙың Зөлхизә өләсәйем менән Рәйхана ҡартәсәйем икәнен айырмайым әле, бөҙрә сәсле көләкәс берәүҙе лә ике туған апайымдыр тип белмәйем — үҙемә бик-бик ғәзиз, кәрәк икәндәрен барыбер тоям...

Мине бит был өйҙә, дүрт мөйөшлө донъяла, тик ҡатын-ҡыҙ уратып алған! Ошоно аңлағанда, телем сыҡмағайны әле. Әммә сағыштыра белеү өсөн телдең хәжәте лә юҡ — күҙ бар ҙа а. Сағыштырҙым: үҙем дә шулар ыңарымын икән, йәғни — ҡыҙ бала.

Ә бер көндө... Бер көндө яғылған мейес ыртына таяна-таяна, устарыма өф итә-итә йөрөп арығас, иҙән урта ына лып барып ултырҙым әм тәҙрә ҡашаға ынан көн тимәй, төн тимәй, ҡасан күҙемде ас ам да, әр дайым миңә бағып торған рәсемдәге кешегә ҡараным да ҡысҡырып өндәштем:

– Ата-а-ай!

икелә, мине күҙәтә-күҙәтә, батмуста борсаҡ тәгәрләтеп ултырған әсәйем ҡапыл икереп торҙо. Сүп ара ынан әрсеп, айлап алынған йомро аҡ борсаҡтар йылтыра-

шып ибелеп, иҙән ярығына төшөп китте, берәү ен генә тотоп алып, уртыма йомоп ҡалдым. иҙгер генә әсәйем был юлы шуны ла күрмәне, аптырауы көслө булғандыр инде. Ә мин, ысын, мутлаша ла беләм хәҙер, бер йәшем тулып килгән ҡыҙыҡаймын.

Дүрт ҡатын итәгенә йәбешеп үҫ тә, "атай!" тип телең асыл ынсы?! Тереләй ис юғы бер күр әң ул атайҙы? Әсәйемдең борсаҡтары шуға аптырашып иҙәнгә икерешкәндер инде...

Шул дүрт ҡатын өсөн мин, уларҙың Нуриялары (исемемде биләүҙә үк отоп алғайным),– иң матур, иң аҡыллы, иң камил баламын. Әлеге дүрт мөйөшлө өйдонъяламы? Тотош Ер йөҙөндә, Оло йыһанда, белгегеҙ килһә! Әле һөйләгәндәрем дә уларҙан ишеткәндәремдер: юғиһә, бәпес сағын кем хәтерләһен, ти? Ә, бәлки?!.

2

— Нурия, айт! Нишләп ултыра ың бында, йүгер өйөңә, атайың ҡайтҡан, ана, моряк Баязит ҡайтҡан, тим!

— Алдашма, Бүре уҡкан олатай, бар, үҙең ҡайт, беҙ сорлауыҡ уйнайбыҙ, — тим тауышымды баҫып ҡына, әтеү мине ишетеп ҡал алар, малайҙар тиҙ үк эҙләп табасаҡтар.

— Бар, йүгер, ысын әйтәм – атайың ҡайтҡан, ултырма бында сорлап. Урынын да тапҡан – баҡса арты. Бында килеп ине кем эҙлә ен, дуҫ малайҙарың күптән өйҙәрендә бәрәңге ашап, ҡатыҡ эсеп ултыра.

Эсем көтөрҙәп ҡуйҙы, асыҡҡаным икән. Бер сәғәт кенә барҙыр ошонда килеп йәшенеүемә. Ә сорлауыҡ шундай уйын ул: берәүҙе көтөүсе итеп ҡалдыра ың да (шыбаға тотошоп инде, хәрәм еҙ) төрлө ергә боҫошаһың, кем ҡайҙа барып етә ала. Сабир, ана, әллә һимеҙлегенән, яйман булғас, беҙҙең ҡара-ҡаршы күршебеҙ Гөлбикә апайҙың өй артына саҡ йәшенеп өлгөрә. Уны шундуҡ табалар, мышнап тын алыуы бер саҡрымдан ишетеләләр әле. Шунан башҡаларҙы икәүләшеп, ахырҙа күмәкләшеп, ҡыҙырып эҙләргә тотоналар. Мине таба алмай аҙапланалар. Гелән. Үҙҙәре минән әҙерәк өлкәнерәктәр әле, һы... Ары-бире сорлап та алыу шарт йәшенгән кешегә. Бөгөн әллә нисә сорланым, әммә аман килеп тапмайҙар. Алты малай бер ҡыҙыҡайҙы, ысынлап эҙлә ә, тапмаҫ тиме. Эт менән бер ҙә ә улар, эҙенде еҫкәп килеп сығырҙар өҫтөңә. Ә был юлы нишләп мыштырлайҙар?

Шул минутта яҡында ғына, Күрәнле ҡултығында, үгеҙ үкереп ебәрҙе. Тертләнем-тертләүен, әммә ҡурҡманым. Баҫтырып, осло мөгөҙө менән әләктереп ала алмаясаҡ – ысын үгеҙ түгел, ә мөншөгөр тигән ҡош ул, шулай үкерә. Йылғаның яҙғы ташҡында өҙөлөп ҡалған бөгөлөндә, ҡамыш араһында, оя ҡора, бала сығара. Былтыр боҫоп ҡына күҙәтеп ултырҙым: оҙон суҡышы менән балыҡты, ваҡ ғыраҡ тәлмәрйендә йәлп иттереп әләктереп ала. Ошо бөгөлдә йофар ҙа йәшәй ул, ярҙы өңөп оя яһаған да, шунда. Ана, осло томшоҡло оҙонса башын һоноп, бәләкәс кенә күҙҙәрен сылт-сылт йомғолап минең яҡҡа ҡарап тора. Балыҡтыҡы кеүек тәңкәле ҡойроғон һөйрәп, йылт итеп һыуға төшөп китте шунан...

Ҡабатлап бер-ике сорланым да асыҡ урынға сыҡтым. Күр ендәр ҙә... Бәй, таралышҡандар. Шыйыҡ эңер баҫып килгән тирә-яҡты тағы бер өҙөп байҡап алдым да өй яғына ыңғайланым. Ныҡ ҡына һыуытып та ебәргән – май башы ғына бит әле. Уф, йомшаҡ ҡына бер нәмәгә баҫтым? Шәмәхә төҫөндәге умырзая икән, сирень сәскәһенә лә оҡшап тора әҙерәк. Эйелеп, турайтып ҡуйҙым, әлдә һынмаған. Өҙмәнем дә – күпме генә ғүмере ҡалған былай ҙа, йәшәһенсе.

Өй ни, урынында ултыра. Тик ул тарафта барыбер ниҙер үҙгәргән кеүек. Шул

уҡ өй инде, башы таҡта менән ябылған, таҡта ы мүкләнеп, йәшкелт төҫкә ингән. Ҡапҡа ла ҡәҙимге, бер яҡ бағана ы янтайғас, ябылыр-ябылмаҫ тора. Шул ҡапҡаны әллә ниңә әлеге лә баяғы Бүре уҡҡан олатайға оҡшатам: бишмәтенең төймә ен гелән яңылыш элә лә, бер салғыйы өҫтә, икенсе е аҫта салышайып йөрөй. Ашығып кейенәлер ул, шәп атлап, салыш салғыйҙарын ел-ел елтләтеп йөрөй, артынан бүре ҡыуа төшкән тиер ең. Хи-хи, ҡалай ҡыҙыҡ үҙ... үҙ тигәндәй, "атайың ҡайтҡан" тине лә ә шул бабай. Бәс, үҙгәргәнсе өй: беҙ бер ҡасан да эңерҙән үк шәмгә ут алмайбыҙ, ә бөгөн бөтә тәҙрәләрҙә лә яҡты балҡый, тимәк, бер түгел, ике шәм яна! Ә мин, иҫәүән, Бүре уҡҡан бабайға ышанмаған булып, ауыл осонда сорлап йөрөйөм. Атай ынлы атай үҙе ҡайтып төшкәндә, ниндәй уйын ҡайғы ы ти ул?

Йүгереп туп аға мендем, ишектәге аҫтараҡ, минең өсөн махсус ҡағылған бәләкәй тотҡаға үрелдем тигәндә, танауыма тәмәке еҫе бәрелеп, туҡтап ҡалдым. Беҙҙең өймө был? Беҙҙең өй, беҙҙең ишек, бына ла а минең тәтәй тотҡам. Уңарсы ишек асылды, әм күҙ алдымда ул, атай кеше, пәйҙә булды. Ирек еҙҙән эске яҡҡа, теге кәртешкәгә, ҡарай алып алдым — урынында, тәҙрә ҡашаға ында. Ә был оҙон буйлы, киң яурынлы баһадир минең «тере көйөк» (ҡартәсәйем шулай ти) атайым?! Баһадир шул, ана нисек мине, ҡурсаҡтай итеп, еңел генә күтәреп алды. Әллә нимәгә илағым килде шул минутта, ә күҙемдән йәш сыҡманы. Биш йылға яҡын бөтә өй эсе менән көткән, мин иһә әле ғүмеремдә тәү тапҡыр күргән атайыма уны шаҡ ҡатырырлыҡ үҙҙәр әйткем, телдәрлегем, үҫкәнлегем менән оҡландырғым килде, әммә телем тирбәлмәне. Әйтер ең, был дәү, көслө кеше ҡапыл мине ташҡурсаҡҡа әйләндерҙе, бына-бына ул аң ыҙҙан төшөрөп ебәрер ҙә, селпәрәмә килермен. Ҡурҡыуым телемә ҡеүә бирҙе:

— Ныҡ тот, атай, ысҡындырма, иҙәнгә төшөп ватылам, әтеү, — тинем дә, әҙерәк тынысланғас, өҫтәп ҡуйҙым: — Әй, мин ташҡурсаҡ түгел дә ә!

Барыбер шаҡ ҡатырҙым, күрә ең, атайымды. Башын артҡа ташлап, ҡысҡырып көлөп ебәрҙе лә, кәүҙәмде ҡымтып тотҡан ҡулдарын алға уҙып, оҙаҡ итеп миңә ҡарап торҙо. Мин дә, аяҡтарымды ауала әлендергән килеш, шымтайҙым да унының күҙҙәренә баҡтым. Оҙаҡ, бик оҙаҡ бағыштыҡ ымаҡ. Сәмләнеп китеп, керпегемде лә ҡаҡмай ҡараным атайымдың күҙҙәренә, уларҙың төҫөн күкшел-йәшел күрән япрағына оҡшаттым. Атайым ахырҙа биреште, ҡарашын ситкә алды. Шунан мине икегә алып барып баҫтырҙы ла тағы күкрәгенә ҡыҫты, сәнскеле яңағын битемә терәне, көр өндө...

Йоҡларға яҡҡас, йөрәгемдең дарҫлап типкәненә ғәжәп иттем. Ҡурҡманым да инде? Шатландым ғына. Ә йөрәк, ҡурҡҡандағы кеүек, дөп-дөп тибә. Ҡурҡыу күптән, кесе йы анда саҡтан уҡ, таныш миңә. Кисә, ана, быҙау ҡыуып барғанда, тыҡрыҡтан күҙе аларышып ике эт ырғып килеп сыҡты, уф, тертләнем! Өрмәйҙәр ҙә ис юғы, үҙҙәрен белгертеп. Ә быҙау меҫкен ҡай ылай шөрләне, баҫтырып саҡ алдынан алдым. ы... шатлыҡты ла белмәйем түгелсе. Тик йөрәгем былай дарҫылдамай торғайны. Моғайын, быға са бәләкәйерәк шатлыҡ-ҡыуаныстар булғандыр, ә быны ы — ҙур, бик ҙур! Теге юлы кесе йы андан төшөп ҡалыуҙан ҡотолғандағы кеүекме?.. Был шатлыҡтың еҫе лә бар, ҡулдарымды елккелә әм, нығыраҡ иҙелә: бит һабыны менән тәмәке ыҫы бергә ҡушылып аңҡый. Күҙгә-күҙ бағышҡанда, атайымдың шырт йөн баҫҡан сикәләрен, үҙем дә аңғармаҫтан, ыйпап алғайным, шунда еңә һалғандыр ҡулыма был әлегәсә ят еҫ.

Атай еҫе...

***

Иртәгә енә таң менән танауымды ҡытыҡлап уятты атай еҫе. Төрлө еҫ-тәмгә

тамшанып уянғаным булды әлегәсә: йылымыс ыуҙа бүрткән өрөк, йөҙөм еҫенә, тағы уймаҡтай ғына бәләкәй сәйнүктә (барник тибеҙ) бөркәп кенә төнәлтелгән бөртөклө сәй тынына — улар ирәк, әллә ҡайҙағы Кимерәү[1] яҡтарында төпләнеп донъя көткән Дәүләтбикә тигән өс туған апайымдан, Зөлхизә өләсәйемдең ейәнсәренән була инде, посылка килеп төшкәндә генә тарала беҙҙең өйҙә. Ҡыҙҙырылған бойҙай, йәғни ҡурмас, ыуыҙ ҡоймағы, яңы быҙаулаған ыйырға бер биҙрә итеп быҡтырылған мәтрүшкә сәйе... Иҫлә әм, мине татлы йоҡомдан айырырлыҡ еҫтәр күп булған икән дә ә. Ә был көндө шым ғына мейес артындағы киң икенән төштөм дә, иҙән урта ына баҫып, танау япраҡтарымды киреп еҫкәнә-еҫкәнә, өй эсенә күҙ йүгертеп сыҡтым. Ҡартәсәйем – мин уның менән бер һикелә эргәләш йоҡлайым – ҡорама юрғанын төрөп, мендәрен ҡабартып ултыртып ҡуйған, үҙе күптән аяҡ өҫтөндәлер. Элек Шәрифә апайымдың бирнә андығы ултырған мөйөштә ят әйбер күренә – дүрткел сумаҙан. Әйткәндәй, Шәрифә апайым – тыумышымдың тәү көнөнән үк (хатта ки кесе йыһанда сағымда уҡ!) белгән теге дүрт ҡатын-ҡыҙҙың бере е ул, эйе, атайымдың бер туған еңле е. Үҙебеҙҙең ауылдыҡы Әлтәф ағайға, хәҙер еҙнә инде, кейәүгә барғайны былтыр көҙ, шул әүрәтеп ҡалаға – Өфөгә алып сығып китте. Атайым, ауылға ҡайтышлай, уларға кереп сыҡҡан, арыуҙар, ти. "Әүрәтеп" тип әлеге ҡартәсәйем әйтә инде... Урҙала апайымдың ҡыйыҡ яулығы, косынка ы, эленеп тора, "күҙ көйөгө" булып. Быны ы ла ҡартәсәйем үҙе. Күҙҙең көйөгө булалыр шул? "Йәнем көйә" тип тә әйтеп ҡуя ҡай саҡ, ярай инде, уны ы көй ә лә көйәлер, эстә бит ул йән, күренеп тормай... Әй, әллә ҡайҙа төшөп киттем, өйөбөҙҙө тикшереп тороуым да а. Әсәйемдең тимер карауаты ҡайҙа ул? Төптәрәк, тәҙрәһеҙ мөйөштә. Урынындаһы. Ә, шаршау элгәндәр икән. Эре ҡыҙыл мәктәр төшөрөлгән зәңгәр шаршау — ҡасан элеп өлгөргәндәр? Тотоп та ҡараным, баҡса арты күршебеҙ тегенсе Татар әбейгә йыш барып йөрөйөм, шуға тауар рәтен беләм: ялтлап торған беше сатиндан был шаршау. Өҫтәлдә лә яңы әйбер бар: аяҡлы йомро көҙгө тора, ике яҡлы — бер яғы, абау, ҙурайтып күр әтә. Быны атайым алып ҡайтҡандыр. Көҙгөләге табаҡ битле ҡыҙыҡайға тел күр әттем, уф, имәнес, ыйыр теле бәләкәйерәктер. Шулай иҫем китеп торғанда, өй ишеге асылды, туп аға ир кеше килеп ултырҙы. Быңа ҡайҙан килгән теге ят та, хәҙер әҙерәк таныш та атай еҫе — ул тышта тәмәке тартып торған. Арҡа ы ишек яҫылыҡ был әзмәүер минең атайым шул! Уҫлаптай кәүҙәле, тиер ине ҡартәсәйем. Ул шулай минең әле ҡатмаған, ығылмалы зи енемде тос, бәҫле үҙҙәр менән тыңҡыслап тултыра, үҙе әйтмешләй. "Бәләкәс Рәйхана" тип арҡамдан өйөп тә ҡуя бәғзе инәйҙәр. Мин улар ара ында күп йөрөйөм, сөнки ҡартәсәйем ил йөҙөндә берәү — төш юраусы, йылан арбаусы, ҡот ҡойоусы. анай башла аң, тағы күп уның өнәрҙәре. Әле һанап торорға ваҡыт юҡ, ана, ул туп ала ултырған атайымды орош:

— Нишләп ултыра ың туп ала, ярамай ҙа а, ҡот китәреп. Өй эйә е генә ултырырға хаҡлы туп а-түрҙә, бәс.

— Мин дә ә был өйҙөң эйә е, — ти атайым, шаярта, йәнә е.

— Ситтә сителеп, ҡырағайланып бөткән был бала... Өйҙөң аҡсы ын әйтәм, белмәмешкә алышма! Беҙҙе, дүрт ҡатынды, тағы, ана, ҡыҙ баланы ин юҡта кем аҡланы ти ең? Ул, өй эйә е... Ҡоҙағый ҙа, бер яңғыҙына мәшәҡәтләнеп ултырмаҫтан, күпселек беҙҙә йәшәне, Нурияны ҡарашты. ин ҡайтҡас, тағы үҙенә күсенде. Әллә рәхәт булған ти еңме ир-ат ыҙ? Ярай әле, Бүре уҡҡан ағай ярҙамынан ташламаны. Атайың мәрхүмдең ҡорҙаш дуҫы ине, шуның хаҡына инде...

— Әсәй, ин кисә, бик ҙур эш бар иртәгәгә, тигәйнең?

---

[1] *Кемерово ҡалаһы, Новосибирск өлкәһе.*

Атайым йәпле генә итеп үҙҙең муйынын бороп ебәрҙе.

— Әй, эйе шул. Килен менән орлоҡлоҡ бәрәңгене тоҡҡа тултырып соланға ҡуйғайныҡ, шуны ҡояшҡа сығарырға ине, тигеҙ генә итеп йәйеп, ерҙә бер нисә көн ятҡыр аҡ, уянып, шытып китер. Кеше, ана, ултырта ла башланы бәрәңге ен, июнь тыуырға тора ла а.

Йә әт кенә ҡуҙғалды ла атайым, солансан ике тоҡто ике яурынына алып тышҡа атланы. Алпамыша икән ул! Әкиәти батыр! Әсәйем ыңар тоҡтоң ауыҙынан, ҡартәсәйем ике осонан тотоп, икәүләп саҡ өйрәп сығара торғайнылар.

— Берәрләп ташы, балам, биленде биртендереп ҡуйма. Әшәүәт еҙ кесерткән тоҡтары бит. Ҡайтырынды ныҡлы белмәй ҙә инек, кемгә ышанып лыҡа тултырғанбыҙҙыр? Тиҫтерҙәрең өс йыл тигәндә тып итеп ҡайтты ла төштө, ә һине көтә-көтә күҙ тондо...

Кесерткән тоғон кесерткәндән уғалар икән, ул зә әр үләндең үҙен тултырыр өсөн уны шулай ҙур, ҡалын иткәндәрме? Ысын, сельпо йыйҙырта ул кесерткәнде, малай-шалай уны урып, киптереп тапшыра ла әҙме-күпме аҡса ишараты төйнәй. Мин дә ҡыланып ҡарағайным да, сигендем: кесерткән минән дә бейек, йыландай саға үҙе! Бахыр Элиза, Шәрифә апайым өйләгән әкиәттәрҙәге ҡыҙыҡайҙы әйтәм, ниндәй түҙем, батыр булған икән, үгәй әсәйҙәре сихырлап аҡҡошҡа әйләндергән ун бер ҡусты ын яңынан кеше ҡиәфәтенә ҡайтарыу өсөн ун бер күлдәк бәйләгән кесерткәндән. Уны ҡара төндә, зыяраттан барып өҙгән бит әле, ҡурҡмайынса! Өф-өф, аман иҫләйем кесерткән сағып, өрөләп-өрөләп сыҡҡан бармаҡтарымдың ыҙлауын... Ә уң әлеге тоҡтарҙы уғыусылар нисек эшләй икән?

Уф, бына шундай ул мин, нимә күр әм, шул хаҡта уйылып уйлап алам да китәм. Кесерткән тоғо ла булдымы ваҡиға, атайым ҡайтты ла а!

Атайлы донъя бөтөнләй икенсе икән ул. Бәрәңгене уҡа артынан ултырттыҡ, ә тигәнсе булды. Ултырттыҡ, тием шул, мин дә эшкиндемсе әҙер бураҙнаға орлоҡ ырғытып йөрөргә. Уртаға бүленгән бәрәңгеләрҙе ҡартәсәйем бәләкәй ҡула биҙрәгә тултырып ҡулыма тоттора ла уҡа артынан йүгертә: "Йә әт бул, әсәйеңдең биҙрә ен тултырып биргәнсе, ала тор, шытымлы ыртын өҫкә ҡаратып ал, салҡатан әйгәҙәгән әрмәнде ише ағарып ятма ындар", — тип ныҡытырға ла онотмай. Күргәнем бар ул әрмәндене, ошонда, бәрәңге баҡса ында, тупраҡта йәшәй ул, баҡылдаҡ йәшел баҡа ымаҡ күлдә түгел. Ҡор ағы ап-аҡ, эйе, түтәл утағанда ла йыуан алабута тамырына эйәреп килеп сыға, әсәйем сай-сой килеп үләне-нийе менән атып бәр ә, гелән шап итеп арҡа ы менән барып төшә лә ята тарбанлап, мәхлүк. ы...Бер ҡараһаң, ни хәжәте бар икән был донъяла ул баҡа-әрмәнделәрҙең? Тәлмәрйен тигәндәре лә шул уҡ баҡа ишараты шикелле? Хәйер, тәлмәрйендәренең файҙаһы тейеп ҡуя. Былтыр көҙ улар арҡаһында ҡара-ҡаршы күрше Гөлбикә апайҙы еңдем. Үҙенә иптәшкә тип, мине бәшмәккә өгөтләп эйәрткәйне, шунда, Күрәнле йылғаһы аша сыҡҡанда, әйтеп тә ҡараным уға: ана, тәлмәрйендәр ярға сығып баҡылдай, ямғыр яуасаҡ (өләсәйем һынамышы), тип, барыбер ныҡышып алып китте. Урман ауыҙына барып етеүгә, ямғыр һибәләй башламаһынмы?!

– Ваҡ күҙле был ямғыр, әйҙә, кире боролайыҡ, ваҡ күҙле ямғыр оҙаҡҡа килә ул,– тим. Тыңламай Гөлбикә апай, һыны ҡатып көлә, етмәһә:

– Ике ҡарсыҡ араһында үҙең дә ырымсыға әйләнеп бараһыңмы, әллә тәлмәрйен ҡолағыңа шыбырланымы? – тип мәрәкәләй.

Өндәшмәнем. Үсекмәнем дә. Мин белгән һынамыштар һәр саҡ дөрөҫкә сығып тора бығаса. Күптән түгел генә, ана, Көйәнтәсе бабай эшләп биргән бәләкәй көйәнтәмде ергә һалып ҡуйғанмын – тиҙүк кәрәгемде алдым: ашатлап ҡына сығайым тиһәм, өҫтөнә баҫтым да, яңылыш – ботома килтерҙе лә һуҡты бер ҡы-

ры менән. “Әйтмәнемме һиңә, көйәнтәне ашатлаһаң, бот төбөңә ҡыяраҡ сығырын, ярай ҙа башыңа эләкмәгән!”– тип өләсәйем килә һалып етте эргәмә. Ә ҡартәсәйемдең һынамыштары тағы ла серлерәк. “Йылан мөгөҙөн күргән бәхетле булыр”,– тигәнен ишетеп ҡалдым яңыраҡ, шунан бирле, ҡайҙа барһам да, аяҡ аҫтына абайлап ҡарап йөрөргә тырышам: мөгөҙөн һалып китмәгәнме берәй йылан? Бәхетле булғы киләсе?!.

– Өшөтә башланы, ысынлап яуа лаһа, бәшмәге лә юҡ,– тип, ниһайәт, еңелде Гөлбикә апай.

– Тәлмәрйенде тыңламағас, шулай була ул! – үҙемде өҫкә сығарып ҡуя беләм ул мин...

Эйе ләһә! Баҡаларҙы иҫләп, ситкә китеп барған яңы тәьҫоратымды күңелемдә нығытып ҡуйҙым: атайлы донъя, ысын, икенсерәк шул. Ә атай ыҙ донъя ниндәйерәк ине? Әй, иҫләмәйем дә – күп тигәндә бер йыл ҡул ара ына кереүемә, йомошҡа йәпләнеүемә, зарланмайым әле. Атайлы саҡты ғына беләйем дә ҡуяйым.

***

Бәхетле көндәр тиҙ үтә. Беҙҙән өс өй аша ғына яңғыҙ йәшәгән Ғәҙилә инәйҙең белгән үҙе шул. Тағы бер үҙ белә, имеш, әле ул: "Минең Әрәшитем ҡайтып килмәйме, күрмәнеңме?" — ти ҙә орай, кемде генә осратһа ла. Минән дә йөҙ орашты инде Әрәшитен. Ҡайҙан беләйемдер уны, мин тыуырҙан алты йыл элек уғышҡа китеп ҡайтмаған ағайҙы?

Аптырағас, шул инәйгә юлыҡмаҫ өсөн, бәпкәләрҙе быйыл икенсе урам аша, ураուҙан, төшөрә башланым Күрәнлегә. Әйтәгүр, шәйләп ҡалып, ҡартәсәйем бот сапты:

— Нишләп улайтып арытып, сарсатып йөрөтә ең был бәләкәстәрҙе, шилма ҡыҙыҡай, ә?

— Анау Ғәҙилә инәй ҙә ә, тәҙрә ен аса ла хәбәр орай, Әрәшит, ти ҙә, әллә хыялланған.

Ҡартәсәйем инде орошор ти әм... тирә-яғына ҡарай алды ла бер усы менән ауыҙымды ҡапланы, икенсе усы менән башымдан ыйпап, шыбырланы:

– Аслан улай тимә бүтән, рәнйетмә ҡартәсәң шайы оло кешене. Хыялланған шул әҙерәк, бисараҡай.

– Иҫәр Әсән кеүекме?

– Юҡсы. Әсән дөм иҫәр ҙәһә... Үҙ көнөн үҙе күрәсе Ғәҙилә күрше, колхозда ла эшләнесе. Берҙән-бер улы ине Рәшите, хәбәр еҙ юғалды анау ҡә әрле уғышта. Юҡ-юҡ тигәндә лә ҡайтып төшә бит ҡай ы бер яугирҙар, кем әсирлектән, кем ҡайҙан... Көтә инде, тәҙрә төбөнән китмәй, урамдан күҙен алмай. Ҡыш бул а, ҡапҡа төбөнә сығып баҫа, уларға күпер яғы күренеп тора бит, шул яҡты күҙәтә. Ярай ҙа бесәйе бар иптәшкә, уны ы итәгенән тешләп, тартҡылап алып инә өйөнә...

— Бабайы ҡайҙа булған?

— Ул да уғыштан ҡайтманы...

— Ғәҙилә инәй бер ҙә "бабайым" тип иламай, ” Әрәшитем” ти ҙә тора?

— Бала — бәғер ите, ҡолоҡасым, ир ҡайғы ы — итәктә.

— Итәктә? Ә ниңә Әрәшит тип боҙоп әйтә ул?

— Ул сирмештәр нәҫеленән, улар шулайыраҡ өйләшә. Миңә лә Әрәйхана ти, иғтибар итмәй еңме ни? Теле ҡатҡан инде уның хәҙер, ындыра алмай...

Телде ындырып булалыр шул? Колхоз эшенән, быйыл ул йәшелсәлә, төшкө ашҡа ғына ҡайтҡан әсәйемә эйәреп ҡартәсәйем өйгә инеп китте, ә мин, иҫемә төшөп, бәпкәләрҙе анарға тотондом. Берәү е юҡ? Бер, ике, өс... ете, игеҙ... ун

бер... Ҡайҙа теге оя төбө? Йыхрыт, моғайын, аҙашып ҡалған! Ғәҙилә инәйҙең рәнйеше төштөмө? Йүгерҙем бәпкәмде эҙләргә. Ярты юлда үлән ара ында ҡаңғырып йөрөп ята, сәсрәмәгере! Тиҙ генә тотоп алып итәгемә алдым да бүтәндәренә алып барып ҡуштым тегене. Ошо инә ҡаҙ, аңшайған, туплап ҡына йөрөтә белмәй бәпкәләрен. “Етәкләргә ҡулың булмаһа, ҡанатың бар ҙаһа, бәпләә балаларыңды. Шилма!” Ҡартәсәйемдең мине ороша торған үҙен инә ҡаҙға әйтеп, сыбыҡ күр әттем: тәпәйеңә эләктер әм әле! Иҫе лә китмәй, шыпырт ҡына үлән ашауын белә, суҡышында игәүе бар инде, шуның менән игәп өҙә үләнде. Бәпкәләре шунда япраҡ осон ғына китеп ҡабып йөрөй әлегә.

Аҡыл алғас, ыу буйынан ҡайтышлай, шилмаланмай ғына Ғәҙилә инәйҙәр тапҡырынан үттем.

— аумы, инәй, — тип әйтеп тә өлгөрмәнем, ул орай алды:

— Күрмәнеңме Әрәшит ағайыңды, алдаттар ҡайтмағанмы әле?

– Юҡ шул, күрмәнем, — тинем дә йүгереп китеп барҙым. Илағым килде ҡапыл...

***

Раҫ икән, бәхетле көндәр тиҙ үтә ... Атайым ҡайтҡанға өс ай ҙа булып киткән, имеш. Өс көндәй ҙә тойолманы. Ана ул ең ыҙғанып ураҡта эшләп йөрөй, МТС-тан яңы комбайн килгән, шуға ултырттылар. Ҡулы оҫта, техникаға башы эшләй, ти ҙәһә уның тураһында Бүреһуҡҡан олатай. Ун синыф уҡыған бит атайым. Тағы уҡыйым, институтҡа керәм, тип әйтә, ти, әле ул. Уҫлаптай кәүҙә е менән, оҙаҡламай мәктәпкә төшөргә йөрөгән ҡыҙы булған көйөнә, һаҡалы ағарғансы уҡып йөрөрмө икән? Былай уның әле аҡалы юҡ, егерме өс йәшлек кенә сағы. Әсәйемдең барыбер эсе боша, ә үҙе, әллә барымы булмаған, алты синыфтан ары китә алмаған.

... Август аҙаҡтарында, бер ҙур ҡабаҡтың эсенән емештәрен аралап алып ултырғанымда, әсәйем менән Зөлхизә өләсәйемдең өйләшкәненә иғтибарлап ҡолаҡ һалдым. Атайым да, ҡартәсәйем дә өйҙә юҡ ине, шул мәлде һайлап серләшә әсәле-ҡыҙлы былар.

– Артабан уҡығым килә, ти бит, өҙмәй ҙә ҡуймай, уҡыр-уҡыр ҙа ташлар ул мине Баязит, — тип һалдысы әсәйем.

— Әйтеп ҡарағайным да иңә, тоҡомо менән уҡымышлы улар, ынтылма, тип, тыңлай ыңмы ни... Ярай ҙа, никах уҡытып ҡалдыҡ, кейәү әрмегә китерҙән алда, тим. Туйлап бирә алманым һине, бер бөртөк ҡыҙымды. — Өләсәйем, баҫынҡы ғына уфтанып, өҫтәп ҡуйҙы: — Ике бала күтәреп тороп ҡалыр ың микән?

Ике бала?! Мин ... һәм? Был орау башымда зыр-зыр әйләнде лә телемә килеп тә сыҡты:

— Минең туғаным буламы? — Ҡапыл ҡысҡырып ебәреп, тертләттем хатта тегеләрҙе. Шунан әсәйемә туп-тура текләп ҡараным да ашығып әйтә алдым: — Төшөртөп ҡуйма туғанымды. Өләсәй, ин дә тый уны, үҙең, ана, ҡартайып бөткәс табып ятҡан ың әсәйемде, бер ҙә төшөртмәгән ең!

Ни әйттем уң әле мин ул тиклем, ҡаршымдағы ике ҡатынды шаҡ аптыратырлыҡ? Асҡан ауыҙҙарын яба алмай, өн-тын ыҙ тораларсы.

— Әй ошоно, Рәйхана бала ы, белеп тыуған...

Әсәйем шулай тигән булды ахырҙа. Дөрөҫ әйтә, мин әле уның ҡарынында, кесе йы анда уҡ, белә инем ул ҡурҡынысты – саҡ “төшөп” әрәм булмай ҡалдым даһа.

— Эйе, башыңа ла килтермә, үҫтерербеҙ ҡай ылай ҙа! — тип телгә килде өләсәйем дә, — сабый үҙ ризығы менән тыуа ул. Баязит кейәү ҙә, нишләп ташлап кит ен, ти, ине, бынау алтын баланы (мине әйтә!). Китмәҫ, иншалла. Хаты

килмәйерәк торғас, теге ваҡытта, "төшөртәм" тип бер яр ып алғайның шул... Яндырайлылығың бар ҡай саҡ, атайыңа оҡшап... Онот шул уйҙы — Рәйхана ҡоҙағый үҙенде кәпкәкләп тормай, киленемә бер эш сыҙамай, үҙемә тартҡан, егәрле, тип кенә тора. Әлдә минең ымаҡ мыҙыҡа булмаған ың, шөкөр.

— Мыҙыҡамын ти ҙә, үҙ донъяңды үҙең көткән ең дә ә. ин алған орден егәрле даны сыҡкан ҡәйнәмә лә эләкмәгәнсе. Әй, ҡәйнәм тигәндән, ул әйтеп торҙо әле, ҡоҙағый беҙгә ыйырын етәкләп килгәйне Баязит армияла саҡта, быйыл, уғым ыҙ ҡал аҡ ҡалырбыҙ, араяҡ башмаҡты[2] уның аҙбарына алып барып бәйләрбеҙ, тип.

— Әстәғәфирулла, минең етмешкә кереп барғанды онотҡанмы әллә Рәйхана ҡоҙағый? өтлө генә, йортауай ғына берәй кәзә аҫыра ам булыр, бөтөнләй аҡ ыҙ ҡалыу ярамаҫ. Үҙемә иптәш тә булыр, әүрәрем шуға... Ә ыйырға көс етмәҫ, оло мал бит. Ғүмер буйы колхозда һауынсы булғаным да еткән, бармаҡтарым да кәкрәйеп, өйәктәре суҡайып сығып бөткән, ыйыр имсәген тартырлыҡмы хәҙер? Ике өйгә бер ир, кейәүҙе әйтәм, бесән әҙерләп хәле бөтөр. Колхозы ла ҡыҫа, сабынлыҡ юҡ. Ана, үҙемә тәғәйен яланды еҙгә инселәп ҡуйҙым инде.

— Зөлхизә яланынмы? — тип ҡыҫылдым мин тағы. — иңә уны орденлы ауынсы булғанға биргәндәр, эйеме? Өләсәй, шул орденыңды алырға Мәскәүгә барыуыңды өйләр ең әле берәй ваҡыт, йәме.

— Йөҙ өйләнем дә...

— Ә ин миңә аңлат, өләсәй, нисек итеп, уҡый-яҙа белмәгән көйөңә, Мәскәү ынлы Мәскәүгә барып йөрөнөң. Сығыш я аным, ти ең бит әле Сталин бабай алдында? Алдаша ыңдыр ул?

— Ысынсы! Орденды үҙе тапшырҙы.

— Ә урыҫса нисек өйләнең, әйт шуны?

— Бер-ике ауыҙ үҙ әйттем инде. Беҙҙе бик үткер, белемле кешеләр ҡарап йөрөттө, улар өйрәткән йөмләләрҙе ятлап алдым. Поезда юл буйы ҡабатлап барҙым. Онотором, тип ҡурҡҡайным, иҫләнем. Ай, унда!.. Меңәрләгән әҙәм керпек ҡаҡмай ҡарап ултыра иңә. Ҡайҙа баҡма — ҡыҙыл буҫтау. Түшәмдә күҙҙең яуын алған шәмдәлдәр...

— Ярар, уларын өйләгәнең бар. Кискә барыбер һиңә иптәшкә ҡуна барам, ҡырҡтан уҙған көйөңә бала таптырған ҡурайсы олатайым тура ында өйләр ең, тамсы ла йәшермәй, әтеү?

Шунан, ҡартәсәйем бер эш ҡушҡайны, тип йә әт кенә китеп барҙым. Өләсәйемә, йәлләрмен тип, күтәрелеп ҡараманым: беләм, әллә ҡасанғы йәшлеген, үҙе әйтмешләй, "берәҙәк ҡурайсы" ын хәтерләп, мәлийерәп, күҙен йәшкәҙәтеп тороуылыр.

***

Ә ҡартәсәйем Татар әбейгә (атаҡ, ысын исемен белмәйем икән аман) йомошҡа барырға күндергәйне, артыҡ-бортоҡ, кейем бескәндән ҡалған тауар ярпылары юҡмы икән, тип белешергә. Ҡорама юрған ырытырға уйлаша, күрә ең. Хәҙер бына иҙәм кемгә икәнен — минең буласаҡ туғаныма!

Татар әбей мине ярата ул. Маҡтанып әйтмәйем, үҙемде ҡыр тибеп тороусылар ауылда юҡ та. өймәлегең бар, ти ҡартәсәйем... Күтәрмәнән менгәндә үк ишетәм: теген машина ы текелдәй. Унан да оҫта тегенсе булмағас ни, эше күптер.

— аумы, Татар әбей! — тип елпелдәп барып индем.

Ул башын ҡағып ҡына ҡуйҙы, күҙен тегененән алманы, машина ын текелдәтә бирҙе. Әллә үпкәләгән? Нимәгә? Бәс, ҡушаматы менән өндәшкәнгәлер... Юҡсы, үпкәләмәгән, ана ла а, эшен ҡуйып, күҙлеген алып, миңә йылмайып ҡарай.

[2] *Ҡышлаған көҙгө быҙау.*

— Үт-үт, үтә күр, күршекәем, Нуриякаем, балакаем, — тип матур үҙҙәрен дә теҙгәс, шөб әм таралды.

— Татар әбей, әйт әле, исемең кем инең? Әтеү, әллә нисек былай... Үпкәләнеңме әллә, тип торам, башта миңә күтәрелеп тә ҡарамағасың.

— Жиң утырта идем, балакаем-Нуриякаем, иң катлаулысы шул ич... Ә исемем Та ура булыр. Күнгәнмен инде, ауылда миңа алай дәшүче дә юк. Башта татар килен идем, кемгә – жиңги инде, аннары үзең күрәсең — Татар әби. Жанкисәк тә булдым берәүгә...

— ин әбей түгел ең әле, күҙлек кей әң генә оло сырай керә әҙерәк, — тип йыуаткан булам уны, ыңғайына. Үҙемә күрә мин дә беләм үҙ рәтен, юлымды уңдырарым да бар ҙа а. Ҡартәсәйемдең, йылы һүҙ йыланды өңөнән сығарыр, тигәнен дә иҫтә тотам. Юҡсы,Татар әбейҙе йыланға оҡшатыуымдан түгел, ә йыландар батшаһы Шаһимаранды күрергә ине, тип ошо осор хыялланып йөрөүемдән башыма килеп инде был әйтем. Аҡ йылан, ти, ул, бар теләктәрең ҡабул була, ти, уға әйтһәң. Күп һорамаҫ инем, мин нәфселе түгел, атайымды ситкә китеү ниәтенән төңөлдөр, зинһар, тип кенә үтенер инем...

— Алайсаң, син, Нуриякаем, миңа "Татар әбекәй" дип дәш, яме?

— Ярар, Татар әбекәй...(«Жанкисәк» ҡолағыма киртелеп ҡалды мәгәр).

— Ана бит ул, элеп тә алды, алай да акыллы бала булыр икән. Лоскутлар кирәкме, курчак уйнамыйсыңдыр ла? Хәзер карыйбыз, бар ул, бар лоскутлар.

Бигерәк изге күңелле инде был Татар әбей (Татар әбекәй!), йомошомдо әйтергә баҙнат итмәйерәк тора инем. Ямаулыҡ, ярпы-йорпо киҫенте (унынса — лоскут) орап килеүсе бер миндер шул? ис буш сығармай, хатта махсус миңә тип матурматурҙарын йыйып тора. И, йомартҡайым, Татар әбекәй генәм! Был үҙемде лә эсемә йәшереп торманым, үҙенә әйтеп ишеттерҙем.

***

Ҙур ғына төйөнсөк тотоп ҡайтып индем өйгә. Өләсәйем үҙенең өйөнә ҡайтып киткән, ҡартәсәйем һике башында баҫып тора: йыуылған ҡултаҫтамалдарҙы икегә бөкләп, өҫтөнән уҡлау тәгәрләтеп йомшарта. Алдына алып барып ҡуйҙым да төйөнсөгөмдө:

— Мә, бәпескә юрған тышына! — тинем.

Белә икән шул, сылт та итмәне, төйөнсөктө ситкәрәк этәрҙе лә уҡлауын тәгәрәтеүен дауам итте.

— Йәймә йәйә еңме әллә?

өйләштерергә әйтәм, әлеге хәбәрҙе әҙерәк сурытырға ҡырсынам. Минең булаҫаҡ туғаным тура ында ла а!

Ҡартәсәйем улай уҡ тешләм кеше түгел, әммә үҙе өнәмәгән үҙгә әйҙүкләп төшөрөрмөн тимә: туҡ та туҡ килеп уҡлауы ғына тауыш бирә, үҙе ләм-мим.

— Татар әбекәйҙең исемен белдем әле, — тигән булам, күҙле бүкән шикелле торайыммы ни, — Та ура икән.

— Әй, шулай ине шул, Та ура еңгә... — Ыҡҡа килде кеүек ҡартәсәйем. өйлә ен әле бер асылғанда: олоғара ауылға берҙән-бер татар ҡыҙы килен булып төшкән дә ә заманында — тарихы ғәләмәттер, иҙәм. Хәҙер ни әллә нисәү улар, татар килендәр, мәрйәләре бар хатта. Ә өйләшеүҙәре, ташҡа үлсәйем, ни татарса, ни башҡортса, ни урыҫса түгел — бутҡа бешерәләр, бығыр-бығыр килтереп: тары ы ла шунда, бойҙайы ла, оло о ла... Мин әйтәмме быны? Юҡ, ҡартәсәйем шулай тип уҡрана ҡай саҡта.

Әле лә шул турала уйлап алған, күрә ең, шуға ла үҙенең башы юҡ, дауамы ғына бар:

— Әлләсе, беҙҙең Та ура еңгә тейер-теймәҫкә ярам аҡланып, телен боҙоп йөрө-

мәне, ул үҙенсә сутырҙаны, беҙ — үҙебеҙсә. эттойоҡ аңлаштыҡ, өйрәнештек. Ҡушаматы йәбеште инде, атаҡ, был хәтлем ҙур ауылда ҡушамат ыҙ кем бар? Ана, бер оста ғына, Биксәнәй осонда, әллә нисә Сәғүрә, нисек айыра ың уларҙы ҡушамат - ыҙ?

Ә мин әҙер генә ултырам йүпләргә, анай ҙа башлайым:

— Салпа Сәғүрә, Тыпый Сәғүрә, антый Сәғүрә, Ете ҡуллы Сәғүрә... Көләкәс Сәғүрә е Келәт тыҡрығында инде, Бүре уҡҡан бабайҙа?

— Ун-ун биш өйлө Айыусыла ла ҡушамат ыҙ әҙәм ирәк, — тип дауам итте ҡартәсәйем. — Ғәҙәт... Халыҡҡа тел сарлап алырға ла кәрәк тә ә.

— ин – Зирәк Рәйхана, иветә? — ти алам, үҙем бесәй һымаҡ ҡартәсәйемә ырпаланып алам.

— Ат аяғын дағалағанда, баҡа ботон ҡыҫтырған, шул кәнт ин, ҡолоҡасым.

Әкәмәт — үҙем баҡа, үҙем ҡолоҡас? Ә шулай ҙа мин бөтә әкәмәт үҙҙәрҙе, ғәләмәт хәбәрҙәрҙе "йотоп" ҡына йөрөйөм. Аҙаҡ дуҫ малайҙарға (алтау улар) өйләйем. Уларҙың ҡолағын сайыр ҡаплаған бит, бер нәмә ишетмәйҙәр, белгәндәре – ат йөҙҙөрөү, атыш уйнау... Барыбер малай-шалай ара ында йөрөү ҡыҙыҡ, сөнки мин уларҙан бик күп өнәр отоп алам. Берәй ҡыҙыҡайҙан ора балыҡ тотоу серҙәрен — әйтә алмай, селәүсенде нисек шаңҡытып ҡармаҡҡа кейҙереүҙе лә белмәй ул хатта. Ә теш ара ынан сыртлатып кем алыҫҡараҡ төкөрә? Малайҙар! Өйрәтеп ҡарағайным былтыр әхирәт булышҡан Мәүлиҙәне, үҙенән ары китмәй төкөрөгө, шайығын ағыҙып, түшен еүешләтеп бөттө лә ғәрләнеп илап ҡайтып китте. Ан ат ҡыналыр шул... Мин хәҙер Гөлбикә апайҙың зәңгәр ҡапҡа ына төшөрөлгән ҡош үрәтенең (әллә күгәрсен, әллә аҡҡош) тас күҙенә генә төкөрә алам, вәт! Ә беҙҙең ҡапҡа төбөнән уларҙыҡына кәмендә ун аҙымдыр әле.

Ана, тәҙрә асыҡ, ҡапҡалағы әллә күгәрсен, әллә аҡҡош миңә әле лә ҡырын ғына ҡарап тора — ә ә!

— Нишләүең был, мут-шилма ҡыҙыҡай? Әйткәйне лә Гөлбикә күрше, ышанмағайным. Ҡара ин уны, өй эсенән төкөрөп ултырасы, ҡайҙа уҡлауым! Яп тәҙрәне, өйҙө елләтеп алайым әҙерәк тигәйнем, яп тиҙерәк, тышта ел ҡупҡан, ана...

Уҡлауы ҡартәсәйемдең гелән ҡул осонда ғына. Тайҙым тиҙерәк, ныҡ уҡма а ла, эләктереүе бар — бүтән төкөрмәҫтәй булыр ың. Әй, тиҙ һыуына ул, ҡайтыуыма онотор. Шулай уйланым да тоҡойҙом Ҡыҙылъярға (Күрәнленең ҡыҙыл балсыҡлы текә ярын шулай атағандар). Унда, сөңгөллө тәрән ятыуҙа,теге алты дуҫымдың икәүһе – Фатих менән Кәйҙерем Кәбир тап ошо ваҡытта ат һуғара торған. Яр буйында ғына колхоздың кирбес арайы, ул аттар шунда мисәүҙә йөрөп балсыҡ баҫа. Кәйҙерем Кәбирҙең ата ы Исламетдин ағай аттарҙы буйтым балсыҡ, ҡом өйөлгән, күп итеп ыу алынған ҙур түңәрәк соҡор эсендә сәғәттәр буйы тапандыра ла, кирбес уғырға эшкинерлек иҙмә әҙер булғас, арып хәлдән тайған малҡайҙарҙың башын малайҙарға тоттора: тирҙәре саҡ ҡына ҡатҡас, һыуға төшөрөргә. Шул мәл мин тып итеп килеп тә етәм Ҡыҙылъярға. Әле Фатих, әле Кәйҙерем менән парлап ултырып йөрөйөм әле Күгаттың, әле Турайғырҙың арҡа ына — малайҙар үпкәләмә ен, тим. Әлдә килгәнмен, бында ошо арала эш туҡтаясаҡ икән, көҙгө һыуыҡта кем балсыҡ менән булашып ултырһын...

Уңарсы Исламетдин ағай ыҙғыра: аттар инде башҡа эшкә егеләсәк, кисә уғып, ҡалыптан алып елəҫ урында киптерелгән кирбестәрҙе яндырып сыныҡтыра торған ҙур мейескә утын ташый ы бар. Ә арай эсендә ике апай ҡара-ҡаршы ултырып кирбес уға: "ҡап-ҡоп", "шап-шоп"... Торғаны завод, ә! Шунда эшлә әң ине ул, бәхетең булып? Әммә хыялланып торорға ваҡытым юҡ, гелән уйнап ҡына йөрөмәйем дә ә, тәғәйен бурыстарым да бар өйҙә. Йүгерҙем ҡайтыу яғына.

Ҡайт ам, ҡартәсәйем аман тур айып йөрөй. Онотмаған баяғыны? Ярай, әләй-

әң, мин үсегә белмәйемме ни? Тиҙ генә солан иҙәнен, тышҡы болдор икәлтәләрен йыуып сыҡтым, аяҡ аҫтында ята торған иҫке тоҡто ҡағып кәртәгә элдем. Был сәғәттә ни ошо инде атҡара торған эшем. Бәс, тәҙрә буҫағаларын өртмәгәнмен, унда ҡойолған гөл япраҡтарын йыймағанмын. Бәс, солан иҙәнен дә, болдорҙо ла бер үк сепрәк менән йыуғанмын, иҫ еҙ... Ҡартәсәйем әйтеп тормаҡас ни... Ә бит оҙаҡламай, сөмбөлә айы уҙғас, алтынсы йәшемә китәм – ауылда беҙ, алтыете йәшлек ҡыҙҙар, көтәбеҙ донъяны! Кем ҡарай ҡаҙ-өйрәкте, кем йылғанан ыу ташый, кем өй йыйыштыра? Беҙ ҙә ә. Әсәйҙәр алыҫтағы ҡойоға, Биксәнәйгә бара инде барыуын, көнөнә бер — самауыр сәйенә. Хәҙер үҙебеҙ ҙә йөрөй башланыҡ унда, Мәүлиҙә әхирәтем менән кисә генә барҙыҡ, өс кенә туҡтап ял иттек. Мәүлиҙә мәүешерәк инде ул, әйттем дә ә, түшенә төкөрә, тип... Эштән башы сыҡмай уның. Дүрт бала үҫәләр бер өйҙә. Ул — өсөнсө, алдынан – ике ҡыҙ, артынан — бер малай, төпсөктәре. Бәхетенә күрә, апайҙары бар. Күмәкләшеп шул оя төбөн — Ишбирҙене ҡарайҙар. Исемен атайҙары (уҡытыусы ул) ҡушҡан. Йәнә е, Хоҙай уға, көтә торғас, иш биргән: өс ҡыҙ ара ында бер малай. Уны ының әле иң бимазалы сағы: ни атлай алып китмәй, ни тик ултырмай, шыуышып йөрөп тә донъяны зыр ҡыйрата, әле өҫтәлдән ашъяулыҡты өйрәп төшөрә, әле бесәйҙең ҡойроғонан тартып аҡырта... Аяғына баҫа ла йығыла, йығыла ла шарылдап илай. Бер көндө мин дә шуларҙа инем, самауырҙы барып тотҡан, бармаҡтарын бешергән. Была ҡупты сар-сор! Бер апа ы Мәүлиҙәне иҙән еперә торған ҡанат менән бәргесләп алды – Ишбирҙене ҡарамаған өсөн. Миңә әүрәп күҙ яҙҙырған шул әхирәтем ул бәләкәс кенә ен ботағынан. Ярай ҙа, атайҙары өйҙә юҡ саҡ ине, юғи ә, ай-һай, ҡыҙыу ҡанлы кеше ул. Күҙе насар күргәнгә уғышҡа ла эләкмәгән, ә барыбер нервы ы ҡаҡшаған. Әҙерәк "ҡыйыш тейәп" тә ал а (әлдә ул хәле ирәк була), тамам бәрейе ҡуба уның. Рабиға апай, Мәүлиҙәнең әсәһе, үҙе әйтә лә ә шулай тип...

— Ауыртамы? — Беләген ыпырғылап буҙлап торған әхирәтемде йыуатырға була, ҡапыл вәғәҙә итеп ҡуйҙым: — Мәүлиҙә, мин ине Бүре уҡҡан олатайҙарға алып барам, йәме. Ул беҙгә Ыласынын күр әтәм, тине.

— Эйе иңә, йышпыта ың?! Атайым әйтә ине шул, ни сыҡһа, Әхмәҙин ағайҙан сыға – әле бүре, әле бөркөт, тип...

— Билла и, алып барам.

Вәғәҙә бирҙем дә ул... Бүре уҡҡан олатай ни тиер? Әле миңә, мәрхүм дуҫ-ҡорҙашының ейәнсәренә лә, бер тапҡыр ғына күрһәтте Ыласынды, ят күҙҙән йәшереп аҫырай, бала ҡош, ти.

***

Ыласын тура ында беҙҙең өйҙә лә өйләп- өйләп алдылар ошо осор. Была бөгөн дә, киске аштан һуң, атайым да өйҙә саҡта, тағы ҡуҙғалды шул хаҡта һүҙ.

— Бөркөтсөләр булған улар элгәре, — ти ҡартәсәйем. – Төлкөгә унар иткәндәр бөркөт менән.

— Ниңә, Бүре уҡҡан ағайҙың атаҡлы ҡушкөбәге бар ҙа а? Беҙ малай саҡта күрә инек шуны аҫып урманға китеп барғанын... – Быйдай хәбәрҙән атайым да ситтә ҡалмай, ғәҙәттә, ул үҙ ҡатмай, шым ғына уйға батып ултыра йә китап уҡый. Уҡымышлы!

Өлкәндәр үҙ юҫығында гәпләшә, ә минең баштан баяғы Ишбирҙе сыҡмай. Дөрөҫө, унда ла түгел хәсрәтем, ә тыуасаҡ туғанымда. Ул да, әсәйемдең ҡарынындағы яралғы ла, малай бул а? Әлеге кеүек өйөбөҙ сынъя ау ғына тормаҫ, тимәк? Тотош болартып бөтөрөр инде... Ҡарын тигәндәй, Зөлхизә өләсәйем мине алдап маташа, имеш, бәпесте әсәйем ыу буйынан, Күрәнленән тотоп алып ҡайтасаҡ. Балыҡтыр шул ул?! Әйтмәнем инде, ыйыр быҙаулағанын күрмәнеңме ни ауынсы сағында, тип. Быҙау инә енең эсенән шаршауы-сыуы менән килеп сыға, башы

йә тояғы менән үҙе бүҫмә ә, шуны йырта алырға кәрәк, тонсоғоп ҡуйма ын өсөн. Мин бер тапҡыр ша ит та булдым инде тыуым тигән мөғжизәгә. ыйырыбыҙ былтыр ҡыш быҙауланы, аҙбарҙа шәм тотоп яҡтыртып торғанымда тотош күрҙем...

— Ила и Раббым, мал ни ҙә, әҙәм ни — бер иш, — тине шунда ҡартәсәйем, — ҡотолдоң, Мәрйенем, иншалла, бушандың имен-аман...

Мин дә әүкәшебеҙҙең муйынынан ыйпаным:

— Мәрйен, Мәрйенкәй... Мин иңә тип йәй көнө бер көлтә мәтрүшкә йыйғайным...

Был уйымдан арынғанда, өлкәндәр күптән инде онотҡан Бүре уҡкан олатайҙы, шым ғына икенсе нәмә хаҡында өйләшәләр. Ә ә, Сталинды телгә алалар. Ә мин беләм уны, Сталин бабайҙы. Ҡашаға ында атайымдың кәртешкә е торған тәҙрәгә ҡаршы стенала унын үрәте эленгәйне. Гелән бер-береһенә ҡарашып торҙолар шулай. Ә мин уларҙың икеһенә сәңгелдәктә ҡарап яттым. Атайымдың кәртешкә енә бөтә е лә төртөп күр әтеп, көн дә әйтеп торҙолар, тыуа-тыуғаным бирле, ә мыйыҡлы кеше менән таныштырыусы булманысы. Таҫтамал менән ҡаймалап, түргә ҡуйғандар үрәтен, моғайын, яҡын кешебеҙҙер?

Аң белгәс, ҡартәсәйемдән һораным:

– Кем ул ?

— Сталин бабай! — тине ҡартәсәйем.

— инең атайыңмы, әллә Зөлхизә өләсәйемдекеме?

— Бөтәбеҙҙең дә ата ы ул, — тине лә ҡартәсәйем мине күтәреп икегә ултыртты, үҙе ихатаға сығып китте. Мыйыҡлы кешегә текләп ултыра торғас, йоҡлап киткәнмен...

Шуларҙы иҫләнем дә тағы өйҙәге хәбәргә ҡолағымды ҡарпайттым:

— Лавкаға барғайным, шунда өс-дүрт фронтовик, әллә әсе балды күберәк емергәндәр, ҡыҙып китеп, эй гәпләшәләр, Сталинды әрләйҙәр... Ҡурҡмайынса?! уғыш булырын белә тороп, армияны әҙерләмәгән, тиҙәр. Ҡырҡ беренселә киткәндәрҙе, салғы менән үлән сапҡан ише, тотош ҡырып алған инде дошман, уны ы беҙгә лә мәғлүм... — Ҡартәсәйем тымғас, атайым дауам итте:

— еҙгә бында, төпкөл ауылда, күп нәмә ҡараңғы инде ул. Мин унда, армияла, төрлө милләт ара ында күпте аңланым. Сит ил моряктары менән дә фекер алыша торғайныҡ, мин бит сухопутный моряк булдым, ҡырҙан килгән судноларҙан йөк бушаттыҡ, үҙебеҙҙең сырсаны уларға тейәнек... Сталиндың хаталары етерлек, был уғыш ул хәтлем ҡанлы булмаҫ ине, әгәр юлбашсы алдан күр ә.

— Бер үҙе нисек бары ын уйлап бөт өн, ярандары ҡайҙа ҡараған?

— Ярандары? Улар ҡурҡып, ярам аҡланып өндәшмәгән, ә тура үҙлеләренең башы төрмәлә серегән. Утыҙ етенсе йылдарҙа иң шәп командирҙарҙы атып бөтөргәндәр.

— Сталин ыҙ фашисты еңер инекме, ин шуны бел! — Ҡартәсәйем инанып әйтте быны, атайым да үҙ көрәштермәне, килеште, ахыры ы. Тағы баяғыса ҡабатланы:

— еҙгә ни, төпкөл ауылда...

Ҡартәсәйем уға үҙен осларға ирек бирмәне:

— Ниткән хәбәр ул, "төпкөл ауылда" ти ҙә торасы. Үҙең ҡайҙан ың, ә? Беҙ бында, тылда, күргәнде, асыуым да килмәгәйе, бәғзе алдат та күрмәгәндер әле, уф, Аллам! Көфөр булмағайым... Бер ус бойҙай өсөн, ана, Гөлбикә күршене ер аяғы ер башына – ҡатырға өрҙөләр. Ире фронтта булып ҡалды. Ҡайтманы ул, ҡара ҡағыҙы ла килмәне үҙенең. Ғәрләнгәндер Гөлбикәһененең хәленән, башын сит яҡка олаҡтырғандыр һуғыштан һуң, тип фараз итеүселәр ҙә булды. Бахыр ғына, Гөл-

бикә ауырлы ине, ташмайып бөткән көйөнә ҡулдарын ҡайырып алып киттеләр. Үҙең дә күреп торҙоң даба а! Иҫ кергән сағың...

— Эйе, каторгаға... Ҡырҡ икенсе йылда, — тине атайым шымтайып ҡына. Ҡартәсәйемдән әҙерәк шөрләй әллә ул? Биш йыл буйы хеҙмәт итеп, диңгеҙҙәр, караптар күреп, урыҫса шартлатып өйләшеп йөрөгән бә леүән атайым шөрләйме? Юҡтыр, әсә енә итәғәте булғанға өндәшмәй ҙә ҡуялыр...

— Бүреккә ал аң да, урманға ҡасыр бүре бала ы...– Шулай тип тағы һүҙ башланы ла ҡартәсәйем,ҡапыл ярты юлда туҡтап ҡалды.

Аңламайым, ниңә ҡартәсәйемдең һаман кәйефе юҡ? Ниндәй бүре тағы?..

Атайым шунда ҡапыл орап ҡуйҙы:

— Ул ҡайҙа? — Күҙе менән кемделер эҙләне үҙе. Кемде? Бында тик үҙебеҙ генә.

— Ышаныслы урында, — тине ҡартәсәйем. – Ярар, орау алма минән.

— Әсәй, бөттө хәҙер орау алыуҙар, шымсылыҡ, эҙәрләүҙәр. Ул – юҡ!

— Ул булма а, бүтәне килер. — Шулай тип ҡартәсәйем әлеге әңгәмәне нығ итеп өҙөп ҡуйҙы.

Тағы Сталин тура ында икән үҙ, атайым теге үрәтте эҙләгән, китель кейгән мыйыҡлы кешене. Уны ҡартәсәйем, ҡара кәшмир яулығына төрөп, андығына алып ҡуйҙы – быйыл март айында, 5 мартта, Сталин үлгәс. Ул көндө ҡартәсәйем ныҡ ҡайғырҙы. Мине эйәртеп колхоз кәнсәләре янындағы митингыға алып барҙы. Бар әҙәм илай ине шикелле. Әллә ул мыйыҡлы кеше ысынлап та бөтә енең дә ата ы булғанмы?! Ҡайтышлай Мәүлиҙәләргә инеп сыҡҡайным (бер урамда йәшәйбеҙ), бәс, уның ата ы ҡояштай балҡып йөрөй, ис тә ҡайғырмағайны Сталин бабай үлгәнгә. Тағы аптыраным...

***

Ә теге үҙ башынан үткән фажиғәле хәлде миңә Гөлбикә апай үҙе өйләгәйне, атайым ҡайтырҙан ике-өс көн алда ғына. Күрше йәшәгәс, кергеләп йөрөйөм уларға. Ҡартәсәйем уны бик өнәп бөтмәй әллә, йомош-фәләнгә мине индерә лә ебәрә. Шул бер йомош ине инде гелән: уның ҡыл иләге бар, ә беҙ ошоғаса йүкә иләк менән көн күрҙек. Ошоғаса, тим, сөнки атайым армиянан бер түгел, ике ҡыл иләк алып ҡайтты, мохтажлыҡты белгәс ни.

Ҡыл иләккә тип һуңғы ингәнемдә Гөлбикә апай оҙон көйгә йырлап ултыра. Туп ала туҡтап тыңлап торҙом, әй, моңло икән тауышы, ағышлы. Шул юлы өйләне күргән ғазаптарын.

...Төнө буйы ырҙын табағында ҡул молотилка ында арман ыҙ булып эшләп ҡайтып, итек ҡунысына бүҫкә генә итеп тултырған бойҙайын бушатып ҡына торғанда, хәрби кейемдәге ике ир килеп инә лә шарылдатып ҡысҡыртып алып сығып китә уны. Иртәнге хәжәтен атҡарып, әбрәкәй яғынан киләяткан әсә е Миңлебаныу инәй был күренештән ҡото осоп йығылып ятып ҡала, ҡулынан ысҡынып тәгәрәгән ҡомғанын теге хәрбиҙәрҙең бере е тибеп осора...

Гөлбикә апай, хилаф эш ҡылғанын аңла а ла, ул ҡәҙәрем дә ҡаты яза бирерҙәр, тип уйламаған шул. Халыҡ дошманы! Абау... Бынау бәләкәй генә башым менән мин дә аңлайымсы, ошо наҙан ғына, йыуаш бер апай ҡалайтып халыҡҡа, тимәк, илгә, зыян ҡыла ал ын, ти, ул? Бойҙайҙы ла асыҡҡанға урлағандыр, йөклө булған бит.

Артабан күҙ алдымда тағы хәтәрерәк, ҡот осҡос хәлдәр пәйҙә була.

...Ик еҙ-сик еҙ даръяла баржа тигән ҙур ал йөҙөп бара. Көн йөҙә, төн йөҙә... Магадан лагерына табан йөҙә. Ҡайҙа баҡма — офоҡ менән тоташҡан ыу. Күрәнленән дә киң ыуҙар бар икән?

Баржаның ҡаҡ иҙәнендә ултырған йөклө ҡатындың башы ҡапыл еңгәҙәтә килтереп уҡкан яҙмыш күҫәгенән тубал булған, уйҙары инеп-сығып йөрөй шунда... Тик башы түгел, эсе өҙөп-өҙөп ауырта, биле әсетеп ыҙа. Ул ыҙланыуға сыҙар ғына әмәле лә юҡ бисараның, әммә өн сығарырға ҡурҡа. Кисә хәсрәтенә түҙмәй ыңҡылдап илағанын ишетте лә, бер аҡсы тимер сынйыр менән ҡайыҙланы арҡа ын. Әле арҡа әрнеүе иҙелмәй ҙә, сөнки эсендәге киҫкен ауыртыныу унлата көслөрәк! "Ай, Аллам!" Барыбер ҡысҡырмай түҙә алманы. Туҡма ындар, типкеслә ендәр — уға барыбер...

— Әллә балаларға итә? — тип өйләшә аҡсылар.

— Ахыры ы. — Шунан ҡатынды, башҡа унын ише тотҡондар араһынан йолҡоп алып, өйрәкләп бер мөйөшкә илтеп алдылар. Күпмелер ваҡыттан һуң килеп ҡаранылар:

— Кәнтәй, берҙе лә түгел, икәүҙе тапҡан.

Ҡатын шул тирәлә ятҡан тоҡмо-нимәме ярпыларына төргән сабыйҙарын күкрәгенә ҡыҫты.

— Ҡайҙа, бир әле бында, күрәйек! — аҡсылар төргәктәрҙе тартып алып, иҙәнгә алып тағатты. — Малайҙар. Бере е үлгән, икенсе е тере ымаҡ?

Тере сабыйҙы ботонан тотоп ырғыттылар:

– Мә!– Ҡатын саҡ тотоп ҡалды, ҡаҡ иҙәнгә төш ә, шундуҡ йән бирер ине ғәзизе. Икенсе енең мәйетен сыр яланғас килеш дарьяға ташланылар. Балыҡ ҙурлыҡ ҡына аҡ кәүҙә баржа ҡубарған тулҡын күбеге аҫтында юҡ булды.

Тетрәнеүҙән арынырға ҡатынға ҡулындағы сабыйҙың тәзелдәүе ярҙам итә. Балыҡ-бала үле тыуҙы ул... Игеҙәк булғандар икән, әйтәм, эсен айҡайҙар ине, ҡыбырҙашып. Етлекмәй тыуҙылар, ете ай ҙа тулмаған... Быны ын йәшәтергә ине, тере бит. Сабыйына имсәк ҡаптырырға итә, юҡ, алмай имсәкте, хәл еҙ. Хәйер, өт төшмәгән түшенә...

Әсә сабыйын баяғы тоҡ киҫәгенә биләне лә күкрәгенә ҡуйып йылытты. Исма - ам, өшөмә ен.

Арыу-йонсоуҙары сиктән ашҡайны, йоҡлап киткән. Төш күрҙе: имеш, Гөлбикә – йәш, матур сағы – Күрәнлелә ыу инә, ә ап-аҡ ҡына ике балыҡ унын тирә ендә уйнап йөҙә. Ҡурҡмайҙар ҙа унан, тотоп алыр тип белмәйҙәрме? Балыҡтарға ҡулын уҙҙы... әм уянып китте. Ҡулындағы бәпесе тубығына тәгәрәп төшкән, күҙҙәре йомоҡ... Йоҡлаймы? Тын алмай ымаҡ? Әсә сабыйының кескенә кәүҙә ен танауына терәп тигәндәй тыңланы: улышы бармы, юҡмы? Юҡ... Үлгән!..

Был сабыйҙы ла аҡсылар дарьяға ырғытты. Үҙенән саҡ ҡына алдан киткән игеҙәк туғаны артынан ул да аҡ балыҡ булып сөңгөлгә сумды...

Ошо хәтлем аяныслы хәлдәрҙе минә, бала-сағаға, өйләне Гөлбикә апай. Күңелен кемгә бушатырға белмәгән мәле булғандыр, күрә ең. Япа-яңғыҙ шул ул. Әсә е анау саҡтағы тетрәнеүенән мантый алмаған, йөрәк өйәнәгенән вафат булған.

Хайрандар булып ҡайттым да әлеге ҡыл иләкте көтөп көтөк булған ҡартәсәйем менән әсәйемә өйләргә тотондом теге тарихты. “Беләбеҙ, кәрәкмәй, зинһар, өйләмә,”– тиҙәр. Ә мин түҙмәйем, барыбер үҙемсә теҙә барам. Шул тиклем тәьҫоратты тышҡа сығармай нисек сыҙайым, ти?!

Аҡ балыҡ булып дарьяла ҡалған сабыйҙар тура ында өйләнем дә, күҙемә йәш килеп, туҡтап ҡалдым:

—Иләгеҙ оноғоҙҙо, шул бер елкәүес он өсөн...

– Сейәнкә бит, үтә лә ҡәҙерле аҡ он, – ти ҡартәсәйем.– Йә, артабан ни булған?

– Әллә нисәмә өйләгәндер инде ул хәбәрҙәрҙе Гөлбикә апай еҙгә. Әйтәм,

ҡартәсәй, үҙең бер ҙә кермәй ең йомошҡа, йөрәгенде өшөткөң килмәй икән. Ә минеке өшө ә лә яраймы?

— инең кеүек итеп тасуирлап бәйән итеүсе юҡ, белгең кил ә.

— ы, йүкә шына ҡағалар... Башта шуны әйтегеҙ әле: кем ошаҡлаған теге юлы Гөлбикә апайҙы?

— Ауылдаштарҙың эше түгелдер,— ти һалды ҡартәсәйем. — Ул осорҙа, сәсеү йә ураҡ мәле етһә, НКВД кешеләре, тағы әллә кемдәр килеп етә һала ине — тирә-яҡ ауылдарҙың игене лә беҙҙең ырҙын табағына килтереп эшкәртелә торғайны, шуғалыр. Тикшереп, аңдып ҡына йөрөнөләр... Йә һөйлә, тим, аҙағына сыҡ инде хәбәреңдең, бер башлағас!

— Аҙағы ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та түгел. Ултырған төрмәлә... Көн дә аҡ аҫтында быяла заводы өсөн сеймал — һүнгән вулкан итәгендәге көлдө, ти,— тейәтергә йөрөткәндәр, көн дә кәбеҫтә урпа ы эсергәндәр. Тағы? ...Күрше баракташылар алтын йыуыуҙа эшләнеләр, уларға иң ауыры тейҙе, иҫән ҡайтҡандары һирәктер, тине. Гөлбикә апайҙан икенсе юлы шуларҙы һөйләтәм әле: нимәһе ауыр булған икән, алтынды бер тотоп ҡарауың ни торалыр ҙаһа? Бик күп тотҡондар штрафбатҡа оҙатылды, иҫән ҡалмаҫтарын белеп торһалар ҙа, фронтҡа китеүҙәренә һөйөндөләр, тине тағы... Ә үҙе, белә егеҙҙер, һуғыштан һуң, ураҡ мәле ине, ти, әйләнеп ҡайтҡан ауылға. Лагерға немецтарҙа әсирҙә булғандарҙы килтереп тултырғандар икән...

Әсәйем ондо иләп тә бөттө мин хәбәремде ослағансы. Эйәһенә ҡабат алып барып тапшырырға тип, ҡыл иләкте тотоп урамға сыҡтым. Ҡапҡа төбөндә ҡартәсәйемдең тауышы ҡыуып етте:

— Килен, бына иҫеңә алып ҡуй, ошо бала ла уҡып кеше булма амы! Мин әйтте, тиер ең. Ҡойоп ҡуя хәбәрҙе, ә? Торғаны бәйәнсе.

Бәйәнсе? Ҡартәсәйем миңә йыш өндәшә ул, йә, ни хәлдәр бар ауыл араһында, бәйән итеп ебәр, тип. Әсәйемдең яуабын тыңлап торманым, ашыҡтым. “Нәҫелегеҙгә тартып, уҡымышлы бул а, ғәжәпме?” — тигәндер, күп бул а. Шул бер ынығы булды унып, исма ам, етенсене бөтөрмәгән, үҙе ғәйепле. Ул ваҡытта беҙҙә мәктәп ете йыллыҡ ҡына ине, ҡалғаны миңә эләкмәне, тиер ҙә ҡуйыр ине. Атайыма, ана, эләккән, әсәйемдән бер йылға һуңыраҡ тыуғас: ул етенселә саҡта мәктәпте ун йыллыҡ итеп ебәргәндәр. Зөлхизә өләсәйемдең " уң тыуған, иртә өлгөргән" тигәне шул микән? Әй, белмәмешкә һалышып торамсы, атайымдың ун һигеҙе тулмаҫ борон, армияға киткәнсе үк, бала я ап китеүенә кинәйәләй ҙәһә ул.

Ҡартәсәйем иһә әсәйемдең яуабын, ғәҙәтенсә, йә хуплап, йә баҫып ҡуйғандыр. “Уҡыу кәрәк. Күҙең асыҡ, ҡолағың тишек булып та, был донъя емәйтергә әҙер ул әҙәм бала ын. Ә ҡатын-ҡыҙҙы бигерәк бөрөп алып бара, ҡол итергә, аяҡ аҫтына алып тапап, иҙергә генә тора...” Йыш ҡына шулай ти ул, был юлы ла, бәлки, ошо уҡ һүҙҙәрен ҡабатлағандыр. Кемде, ҡасан аяҡ аҫтына алып иҙгәндәр икән ауылда, белмәйемсе?

***

Зөлхизә өләсәйемә ҡуна барырға һүҙ биргәйнем дәһә, шунда юлландым. Аласығында табаҡ- ауыт ҡыштырҙатып йөрөгән була.Тиҙ генә кәртә башында түңкәреүле биҙрәләремде көйәнтәмә тағып, ыуға китә алайым, ти әм, иҙеп ҡалды:

— Кем булһын, үҙемдең уң ҡанатҡайым икән, бар, бар, Күрәнлегә йүгер, хәҙер көтөү ҡайта, кисеп буйратыр, әтеү.

Ел ҡапҡаны яртылаш асҡан килеш, көйәнтәмде бороп туҡтаным да теге, ҡабаҡ емеше сүпләгәндә башыма килгән уйымды телем менән уйып ҡуйҙым:

— Үкенә ең дә йөрөй өң, өләсәй, әсәйемдәргә хәҙер я а ла ҡуйығыҙ туйҙы. Бер байрам булыр. Ҡартәсәйем, ана, тик ятмай, атайымды яңы ғына өгөтләп ултырҙы, загысҡа барығыҙ, яҙылышығыҙ, тип...

Ҡурҡыныс  үҙ микән әллә ул ЗАГС? Өләсәйем мин Күрәнленән әйләнеп ҡайтҡанда ла аласыҡ алдында алйып баҫып тора ине. Ҡобара ы осҡан. Мине күргәс, иҫенә килгәндәй,  өйләнә башланы:

— Баязит кейәү ситкә сығып китергә булдымы икән ни? Өс бала менән ҡалдырып... Үҙ тиңен  айламағас... Әнкәләр осондағы Барый күпме йөрөнө күҙ атып, барып ҡына ҡуйманы шуға. Ай, Аллам, ярлыҡа — ул егет  уғышта башын  алды. Кейәү саҡ ҡына эләкмәй ҡалды, унан алдағылар, 28-ҙәр, алынды фронтҡа. Барыйҙың ҡусты ы Мансур шул йылғы ине, аҙағыраҡ,  уғыш тыма башлағасыраҡ, киткәйне лә, сулаҡ булып ҡайтты... Беҙҙең Баязит кейәү, иншалла, оҙаҡ йөрө ә лә, тыныс хеҙмәттә булғас,  ап- ау килеш әйләнде. Муйыны оҙон, асҡаҡ ҡына бер  онтор ине, ҡай ылай мыҡтыланып, өрлөктәй булып киткән  хәҙер. Ситкә тартыла унын күңеле, сителгән шул әрмеһендә. Ҡоҙағый ҙа тотоп тора алмағас...

Ошо өләсәйемдең! Бер  амаҡлай башланы иһә, туҡтар тимә. "Өс бала" тигәне ғәжәпләндерә әле мине был юлы, ҡалғаны  аман бер хәбәр инде. Өс бала?! Был  үҙ  ис башыма  ыймай, нисә хисапла ам да — беҙ икәү: мин  әм тыуасаҡ туғаным. Әллә үҙен ҡушып иҫәпләйме? "Мин хәҙер бала хөкөмөндә, ҡартайҙым", — тип ҡуя лаһа  ирәк- аяҡ...

Әһә, ҡартәсәйемдең ниңә кәйефе бөтөп йөрөүе хәҙер аңлашыла: атайым булып сыға теге "бүреккә  ал аң да, урманға ҡасыр бүре"?

— Өләсәй, тотош  ауыттарыңды тултырҙым, дүрт көйәнтә  ташыным, — тинем дә китергә йыйындым.

— Ана, сүмес буш та а, — ти өләсәйем, ул шулай  ыуға тип сүмесенә тиклем сығарып ултырта. Ҡай ы бер көндө юрамал  сеүәтәләрен дә теҙеп ҡуйып, тултырып китәм ирмәк өсөн. Ә бөгөн миндә шаярыу ҡайғы ы юҡ, ҡуна ла ҡалмайым, тиҙерәк кире ҡайтып, өйҙәгеләрҙән төпсөнөргә кәрәк: ниндәй өс бала һуң?

Төпсөнөп торорға ла тура килмәне. Атайым ҡайҙалыр сыҡҡан, ҡартәсәйем илап шешенеп бөткән әсәйемде йыуатып йөрөй :

— Килен,  ин бөтөрөнмә ул тиклем, ҡайтып алам ғаиләмде, ти бит,  үҙендә торор, ышан. Аяғына тышау ғына  алманым бит инде, ауылда миңә толҡа юҡ, донъя күргем, кеше күргем килә, ти ҙә ашҡына. Беҙ кеше түгелдер шул... Үҙгәләнгән унын күңеле, килен, барыбер баҫылмаҫ, йөрөп ҡайт ын.

Атайым армияла тапҡан дуҫы, урыҫ егете Вася менән хатлашҡан, малдарҙы ҡураға япҡас та Караганда тигән яҡҡа шахтаға китергә  өйләшкәндәр икән.

— Өс баланы ҡалдырыпмы? — Йәнәһе, шаҡ ҡатырам тегеләрҙе. Йәпле, минән хәбәр йәшермә ендәр!

— Миңә оҡшаған инде киленем, ҡәйнә тупрағынан, атайыңдан алда игеҙ ҡыҙ тапҡайным, аҙна ла торманылар... Көнө тулмай тыуғайнылар. Йәшлегемә барып, эшкә ауан булдым, ауыр күтәреп имгәндем. Инде балаға башҡа уҙмам, ахыры ы, тип ныҡ ҡайғырҙым, тағы байтаҡ йыл биҙәү йөрөнөм дә ҡуйҙым. Шунан, Аллаға шөкөр, башта – атайың, ике йылдан  Шәрифә апайың тыуҙы.

– Игеҙәк туғандарым буласаҡмы?

–  өйләп торам да а...

– Ә ҡайҙан белдегеҙ, игеҙ түгелдер, бәлки, үтә күренәме ни?

– Хәҙер генә ул бальнисҡа йөрөйҙәр, унарсы мин инем кендек инәһе был ауылда.  инең кендегендә лә үҙем киҫтем, килен баҡсала бәрәңге сығарып йөрөгән еренән тулғаҡлап китте лә... Ете айлыҡ булып тыуҙың, ҡолоҡасым. Сентябрҙә, сөмбөлә  тулып, бер аҙна үткәс.

–  Ете айлыҡ...Етлегер өсөн унда, кесе йыһанда, тыныслыҡ кәрәк тәһә! – Минең был һүҙемә илтифат биреүсе булманы. Әсәйем яңынан буҫлығып иларға тотондо.

Ҡартәсәйем унғы араларҙа мине тиң күреп өйләшә кеүек. Бына әле лә, әҙәмгә анап, орауыма яуап биреп тора. Минең "ҡатын" булыуым шул микән әллә: "Был бала шәп ҡатын булмаҡсы",— тип әйткәне бар ҙа а ҡартәсәйемдең?

— Әсәй, тим, илама әле, туғандарым ҡурҡыр! — тинем. Ә баяғы уйым мине ото-ро ҡыйыуландырып ебәрҙе: — Беҙ — дүрт ҡатын, бирешмәҫбеҙ!

Илауынан шып туҡтаны әсәйем.

– Кем ул, дүрт ҡатын?

– Ҡартәсәйем менән өләсәйем, мин, тағы ин үҙең — дүртәү түгелме ни? — Ни әйтерен беләм, шуға алдан алып ҡуйҙым: өләсәйем бала хөкөмөнә кермәгән әле, бушты өйләмә ен, ә мин ул хөкөмдән сыҡҡанмын, вәт!

***

Күңелем көҙөкләнеп тик торҙо ошо араларҙа. Тышта – эт сыуағы, көндәр ҡо-яшлы, елеккә үтмәле һалҡын. Ер туңған, оҙаҡламай ҡар күҙе лә күренер. Атайым баҫыуҙа туңға һөрөүҙә йөрөй. Өйҙәгеләрҙең кәйефтәре юҡлығын һиҙәм, сәбәбенә төшөнә алмайым. Сетерәйеп-сетерәйеп шул сәбәпте юллайым.

аплап ҡына алған фекер ебем ҡапыл өҙөлдө, ҡапҡа асылған тауыш ишетелде. Атайым ҡайтып килә, ҡулында бүре тире енән тегелгән бүрек. Тотоп ҡарамайын-са уҡ беләм: Бүре уҡҡан олатай атайыма тип иләп ҡуйған тирене әллә күпме ваҡыт соланында киреүле тотто, ә яңыраҡ бесеп, бүрек тегеп ултыра ине. Йыйы-на атайым, шик юҡ, башына бүре тире е ҡаплап китергә йыйына. Бына – мин юл-лаған сәбәп тә...

Донъябыҙ былай бөтөн ҡаласаҡ: баҙ тулы бәрәңге, ҡабаҡ унды, көнбағышыбыҙ ике тоҡ булды. Аҙбар ҡыйығында – тыңҡыслап тултырылған бесән, лапаҫ аҫтын-да – ике-өс йылға етерлек утын, бысып ҡына түгел, ярып та өйөлгән. Быларҙы ҡартәсәйем ҡабат-ҡабат барлап сыға, үҙен шулай йыуата. Ә мин "ир ҡулы тейгән донъя", "атайлы бала – арҡалы" тигән ымаҡ үҙҙәрҙең башымда уралыуына сыҙа-ша алмай, иларға тулышып йөрөйөм.

## 3

Яңы йыл байрамын "дүрт ҡатын" — бере е мин — үҙебеҙ генә ҡаршыланыҡ.

Атайым, Вася ынан хәбәр килгәс, туғандарымдың тыуыуын да көтөп торма-ны, теге дүрткел сумаҙанын тотоп Карагандаға сығып китте. өйләшеп ҡуйған кеүек, дүртебеҙ ҙә күҙ йәше күр әтмәнек уға, оҙатҡас ҡына буҙлаштыҡ.

— Өйөмдөң өрлөгө ишелде! — тип иланысы шул көн ҡартәсәйем. Күтәрелеп ҡараным – өрлөк шылт та итмәгәйне?!

Март урта ында, үҙ сәғәтендә, кесе йыһан ҡабағы асылды – минең туғандарым унан Оло йы анға сыҡты. Ҡыҙ әм малай!

Атайымдан әллә нисә хат килде. Игеҙәктәр тыуыуын һөйөнсөләп хәбәр иткәйнек, шуға яуабында: "Ятаҡта айырым бүлмә алғас, ине ҡайтып алам, Гәү әр, борсолма", — тип яҙған. Миңә тигән айырым юлдарҙа ул: "Әсәйеңде аҡла, ҡартәсәйеңде, өләсәйеңде тыңла", — ти ҙә ҡабатлай. аҡсылыр шул мин йә тәрти-п еҙ бер ҡыҙыҡайҙыр. Йәнем көйҙө лә (ана ҡай ылай тип көйә икән ул йән), әсәйемдең яуап хатындағы бер асыҡ урынға үҙ ҡулым менән яҙҙым да ҡуйҙым: "Мин — шәп ҡатын!" Китте ул хат Карагандаға. Әсәйем әллә күрмәне яҙыуымды, әллә күреп тә өндәшмәне. Ә мин бер ыңғайҙа уның хатын уҡыным да ҡуйҙым, рөхсәт еҙ бул а ла. Енел уҡыным, әсәйем эре хәрефтәр менән яҙа, асыҡ ҡына итеп. "Ике имсәк бала ын күтәреп әллә ҡайҙа бара ым юҡ, үҙең ҡайт!" — шулай яҙған-дыр ти әм, ләм-мим был хаҡта. Ете ят Васяны орашырға, уға сәләм әйтергә белгән, ә игеҙәктәре менән төндәр йоҡламай ыҙаланыуын яҙмаған. Әйтер инем мин сәләмде ул Васяға, ҡәҙерле кешемде ситкә олаҡтырып алып сығып киткән

ҡотҡосоға. Атайымдың былай ҙа оҙон-оҙаҡ моряк хеҙмәтенән байтаҡҡа һуңлап ҡайтыуына ла шул урыҫ ағай ғәйепле икән, икәүләп портта аҡса эшләп йөрөгәндәр, ти. Әйтәм, теге дүрткел сумаҙан тулы бүләк ине. Ана, миңә алып ҡайтҡан ҡупшы башлығы – хәҙер тотоп утҡа ырғытам! Уф... Икмәк мейесендә дөрләп янған утындарға битем бешә яҙғансы оҙаҡ итеп ҡарап торҙом да ҡырт боролдом: атай төҫө булып ҡалған әйберҙе ни, яндыра алманым... Ҡыш етһә, кәрәге лә тейер, бәй.

Ә үҙем атайымды шул тиклем ағынам! Ҡартәсәйем иҙенә, ҡыҙ бала ла атайҙы шулай яҡын итер икән, тип аптырап ҡуя берсә. Ҡыҙ бала... Йөрәге бар ҙаһа ҡыҙ баланың да!

Әлдә туғандарым тыуҙы, шулар менән йыуанам. Шул тиклем оҡшашҡан улар, айырып та булмай. Мәүлиҙә әхирәтем менән ҡыҙыҡ булып бөтәбеҙ: әсәйем бере - ен имеҙеп килтереп тоттор а, бәхәсләшә башлайбыҙ, Камилмы был, Камиламы, тип. Икеһенең дә бер иш йүргәктәрен тағатып ҡарайбыҙ, кемебеҙ еңгәнен белер өсөн. "Камил бит, мин дөрөҫ әйткәнем, — тип ҡыуана Мәүлиҙә, — ана ла а турғайы!”

Ысын, әхирәтем тиҙ айыра игеҙәктәрҙе, ә мин йыш яңылышам. Ғәрләнәм аяу - ыҙ шуға, үҙ туғандарымды бутап ултырғас ни.

—Мин бит ен ботағы Ишбирҙе туғанымды ҡарап үҫтерешкән кеше, — ти Мәүлиҙә.

— Ә шулай ҙа нисек айыраһың?– тип төпсөнәм.

— Малайҙарҙың маңлайы туң була, — ти ҙә рәхәтләнеп көлә әхирәтем, — туң баш бит улар!

Инде икәүләшеп йығылып ятып көләбеҙ.

Ни генә эшлә әм дә, йығылып ятып көл әм дә, күңелем китек шул. Кистәрен, йоҡлап китә алмай, таҫрайып өрләккә ҡарап ятам. Өрләк... Әллә ниңә ҡартәсәйемдең анауы «өрләк ишелде» тигән сәйер үҙе иҫемдән сыҡмай. Ҡарай торғас, былай ҙа аҡ, шыма өрләк ай яҡты ында тағы ла ағарып, нурланып киткәндәй була, гүйә, атайымдың йөҙө. Ана, ике күҙе — күкшел-йәшел булып ялтырай... Шыбырлап ҡына өндәшәм:

— Атай! Атай, ҡайт, Камилды, малайыңды, күргең килмәйме ни? Ул иңә иш булыр. Әлүктән ҡыр танаулы, иңә оҡшаған. Камила ла — тас үҙең. Күр әң, айыра ла алмаҫ ың ул матурҡайҙарҙы. Мин йәм еҙ шул, табаҡ битле, йәмшек танаулы ҡарасман — Зөлхизә өләсәйемә тартҡанмын, әллә шуға яратмай ың!? Ташлап китмәҫ инең... Әсәйем ылыу ҙа инде, уны яратып алған ың бит, егетенән – Барый ағайҙан алдырып алып, маңҡа ғына көйөңә. Ултыра хәҙер атайлы етемдәр ҡосаҡлап, бер түгел, өсәүҙе...

— Нимә мығырҙай ың, Нурия, йоҡла! Бәләкәстәрҙе уята ың бит. — Эргәмдә үҙе лә йоҡламай, шым ғына уйға сумып ятҡан ҡартәсәйем яурыныма ҡулын ала. Өрләк-атайым менән ҡысҡырып өйләшә башлағаным әллә? Тағы ҡарайым өрләккә: ике күҙ тигәнем тәҙрә яҡ баҡсала үҫкән сейәнең япраҡтары икән, ай нурында күләгәләре сағылған. Бәй, түшәм тулы икән ул серле "күҙҙәр", керпек ҡаҡмай миңә баҡҡандар...

***

Оҙаҡ арына алманым атайымдың ҡырға сығып китеү ҡайғыһынан. Үҙемде әле саҡ ҡалҡып килгән ҡанатын имгәткән бәпкәләй итеп тойҙом... Уҡырға төшөүемдең шатлығын да тойманым хатта. Күпме күҙем ҡыҙып йөрөнө мәктәпкә минән бер йыл алда барып уҡып йөрөгән дуҫ малайҙарыма, баяғы алтауға, күпме көттөм шул көндө, ә үҙем өйөнмәнем дә ҡуйҙым. Тырышып-тырышып өйөнөргә иттем – булманы, эсем бошоп тик торҙо. Ә уҡырға мине Мәүлиҙәнең ата ы Әмин абый

(беҙҙә уҡытыусыларҙы "абый", "апа" тип йөрөтәләр), өйҙәгеләрҙән дә һорап тормай, етәкләп алды ла китте. " Етең тулып килә, әхирәтең менән бергә уҡыр ың, ин унан да сосораҡ", — тине лә Мәүлиҙә менән икебеҙҙе бер партаға индереп тә ултыртты. Ул көндө оҙаҡ уҡыманыҡ, тиҙ ҡайттыҡ. Әй, хәреф танырға Әмин абый Мәүлиҙә менән мине йөҙ былтыр элек үк өйрәтеп ҡуйғайны инде. Атайымды аптыратырға ярап ҡалғайны лаһа шул белемем: тәмәкеһенең ҡабындағы яҙыуын уҡыным да бирҙем – "Каз-бек". Үҙем тағы һорай һалдым, нимә ул, ҡайҙа ул Казбек,тип. Атайым бик етди итеп һөйләгәйне Кавказ тигән яҡтар, ундағы Казбек тауы, папаха кейеп, биленә хәнйәр тағып йөрөгән грузиндар, аварҙар, лезгиндар, чечендар һәм шул төбәктә йәшәгән башҡа халыҡтар тураһында... Папиросы бушағас, мин Казбек ҡабына кәнфит ҡағыҙҙары һалып ҡуйҙым – асмалы бит ул, тышына тау яғалап сапҡан, ҡара бурка кейгән һыбайлы төшөрөлгән .

Эсем бошҡанда, аулаҡта шуны асып ҡарап йыуанам хәҙер. Унда кәнфит ҡағыҙҙары менән бергә ялтыр шәшке ватыҡтарын да һаҡлайым, ике-өс матур төймә лә ята. Бәхетле, атайлы көндәр төҫө булып ҡалған тәмәке ҡабын еҫкәп-еҫкәп ябып ҡуям да тышындағы һүрәткә ҡарап уйға талам: тауға ҡарап елгән һыбайлы атайым кеүек күренә башлай күҙемә...

Ярар, бошонорға ваҡытым инде ҡалмаҫ та, мәктәпкә төшкәс. Өлкәндәр риза булырмы әле?

— Мин уҡырға барҙым, тауар бирегеҙ, алъяпҡыс тектерәм Татар әбекәйҙән, — тигәс, ҡартәсәйем икегә ултыра төштө. Ул ғына өйҙә ине, эше иртәле-кисле – колхоз кәнсәләрен йыйыштыра. Таң менән өс мейескә ут яға, кистән иҙән йыуа. Мин киске ен ярҙамлашам ҡай саҡ, яҙлы-көҙлө ауыр уға, иҙәндәге бысраҡты тимер көрәк менән ҡырып ташлай тәүҙә, шунан ғына йыуа, йүкә йыуғыс менән. Мин өҫтәлдәрҙе өртәм, рәйес бүлмә енең иҙәнен еперәм, унда таҙараҡ була ғәҙәттә. Хисапсы сулаҡ Мансур ағайҙың, әсәйемде алам тип йөрөгән Барыйҙың ҡусты ының инде, өҫтәлендәге сатнаҡ зәңгәр тәрилкә тулы тәмәке төпсөктәрен сүплеккә сығарып ташлайым. Күп тарта ул ағай, бүлмә е лә, тәрилкә е кеүек, зәпзәңгәр булып тороп ҡала артынан. Ишекте асып, епертке менән елтәп ҡыуалайым зәңгәр тәмәке төтөнөн. Уф... Ҡартәсәйемә оҡшатып, үҙҙәре юҡта, кәнсәләрҙә эшләгән ағайҙарҙы орошоп йөрөйөм бер арый:

— Өйҙәрендә лә шулай ҡыланамы былар, итектәрен тышҡы туп алағы ҡырғыста әҙерәк ҡырғылап кер әләр булмаймы? Үләнгә лә өртөп алырға буласы, белек - еҙҙәр...

Нишләптер, шул үҙҙе әле килеп ҡабатлап әйттем дә ҡуйҙымсы, топ-тойоҡтан:

— Белек еҙҙәр!

— Бына ла а, андыҡ аҡтарып ултырам, тауар эҙләп, сабыр ит! — тине ҡартәсәйем ҡаты ғына тауыш менән.

— ине әйтәмдер шул.

Ҡартәсәйем үҙ хәбәрен сурытты:

— Үҙем дә бер уйлап ҡуйғайным, әллә бирергәме ине мәктәпкә, тип. Дәфтәрҡәләмдәрең бар, Шәрифә апайың посылка айын ҡыҫтырып ебәрә. Шул атайыңдар өсөн борсолоп, иҫемдән сығарғанмын һине, ҡолоҡасым. Рәхмәт инде Әмингә, мөғәллим ҡустыға, ҡанатыңды бәпләп тора. Бүреһуҡҡан олатайыңа, Татар әбекәйеңә лә Алла ғүмерҙәрен бирһен, ошо баламдың күңелен үҫтереүҙәре уларҙың... ин дә уҡымаһаң – башың тулы аҡыл. Әхирәтең дә барғас мәктәпкә, иңә ни ҡала, уҡы шул, уҡы. Мәүлиҙә һинән йәшкә күпмегәлер өлкәнерәк, буғай... Ҡалышмаҫ ың, уҙҙырып ебәрер ең әле унан, иветә?

— Иветә! — Шулай тинем дә, ҡартәсәйем биргән ике төргәкте, аҡ әм ҡара сатинды, ҡултыҡ аҫтыма ҡыҫтырып, Татар әбекәйгә йүгерҙем.

Аҡ алъяпҡысым кискә үк әҙер булды, әбекәйемдең ваҡ-төйәк йорт эшен

бөтөрөшөп, күҙҙән тектереп алдым.

— Бу бәйрәм алъяпкычы, купшы булсын, — ти әбекәй, — яурыннарына канат кебек итеп әберкә салам, сиңа беренче бу фасон, бел. Күргәч, бүтәннәр дә сорар инде шундыйны, барыбер сиңа — беренче, Нуриякаем! Кара алъяпкычны, көндәлеккә, ябаерак итәрмен, кесәләр басармын, яме. Иртәгә килеп алырсың.

И, Татар әбекәйем! Күпме эштәрен ситкә ҡуйып, мине, бер баланы, шатландырам тип, күҙ нурҙарын түгеп ултыра бит! Ҡосаҡлап, ике битенән үптем дә әбекәйемдең, ҡанатлы алъяпҡысымды күкрәгемә ҡыҫып, ҡайтыу яғына остом.

***

Башыма хәсрәт керҙе, йөрәгемә ағыш арылды шул... Ә бит әле минең башым да, йөрәгем дә, Бүре уҡкан олатай әйтмешләй, ыуыҙ ғына. Яңыраҡ мине үҙе килеп алды, Ыласынды тағы күр әтмәгә. Ҡышҡы каникул мәле – һөйөнөп эйәрҙем олатайға. Ярай, барғанмын, ярай, күргәнмен шул ҡошто, күкрәгемде бөрөп, ҡыҫып торған күҙгә күренмәҫ ҡулса ысҡынды һымаҡ, ни айәт. Тыным иркенәйҙе.

Нисек башым еткән ошо Бүреһуҡкан бабайҙы олатайым итеп алырға? Ауылда һуғыштан һуңғы осорҙа олатайһыҙ үҫкән бала әҙме ни, әлдә өлгөрөп ҡалдым, берәйһе уны үҙенә инсеrange ләмәҫ борон.

Атайым армиянан ҡайтмаҫ элек булды был ваҡиға. Ҡартәсәйем Бүреһуҡкан бабайҙы кәртә-ҡура йүнәтешергә саҡырғайны, шунда, эш араһында, әйтеп ҡуйҙы:

– Нурия йәштәрендәге ике ейәнем бар минең дә, тиң генә үҫеп киләләр. Йыраҡталар шул, Иҙел аръяғында. Ни арҡаларынан ҡағып-һөйөп булмай, ни белгәнемде өйрәтеп, ҡолаҡтарына киртеп булмай...

Өйөлөп ятҡан һайғау өҫтөндә ултыра инем, һикереп төштөм дә бабайҙың салғыйына барып йәбештем:

– Мин олатай итеп алам һине, ҡайғырма!

Холҡома күнеп бөткән ҡартәсәйем дә аптырап ҡалды:

– Нурия ҡолоҡасым, нишләүең?

– Ә нейә, бик мәслихәт. Нишләп үҙемдең дә башҡа килмәгән был уй? – тип шатланып китте Бүреһуҡкан бабай (хәҙер – олатай),– миңә хәләл ул, атыбал ҡорҙашым урынына олатай булам, аһа, нейә булмаҫҡа?

...Ошоларҙы әле килеп иҫкә төшөрҙөм дә:

— И, Бүре уҡкан олатай! Әлдә ин бар! — тинем уға, бала саҡтағы кеүек ырпаланып. (Эйе, теге кистә, өрлөк-атайым менән өйләшкән кистә, бөткәйне кеүек минең бала сағым.)

— И-и, — тип ҡабатланы ул, мине үсекләгән ише, — Татар әбекәйеңдән отоп алдыңмы, башҡа кем шулай әйтә тағы?

— Мин әйтәм.

— Холҡоң Рәйханаға тартҡан, ул да күҙгә ҡарап, танмай өйләшә. Әй, атыбал дуҫым йәл! Иҫән бул а, ошо Ыласынды икәүләп сығарыр инек унарға. Уның яурынына ҡундырыр инем был бөркөттө. Киң яурынлы, мө абәт ир ине ҡорҙашым, инең ҡартатайың атыбал. Биҙгәк сиренән әрәм булды, йәшләй генә.

атыбал? Сәйер исем, ауылда берәү. Ниңә шулай ҡушҡандар? Бүре уҡкан олатайҙан орарғамы әллә? Юҡ, аҙаҡ берәй төпсөнөрмөн әле. Хәҙер мин олатайҙың лапаҫына атлығам, шунда аҫырай ул Ыласынды. Оҙаҡ күрмәй торҙом ул ҡошто...

— Киләһе ҡыш ысынлап унарға сығабыҙ. Ҡуянға, төлкөгә... Әлегә өйрәнсек кенә беҙ.

Шулай тип әллә үҙен, әллә Ыласынды өгөтләп, олатай лапаҫ яғына ыңғайланы. Унда иркен, бейек кенә, яҡты. Бер мөйөш түбәгә тоташтырып йыш ағас рәшәткә менән тотоп бүленгән, унда ҡайыры ыҙырылған тарбай ағас өйәп ҡуйылған, ике түмәр ҙә тора — Ыласын ҡунырға. Лапаҫ ҡапҡа ын эстән бикләгәс, олатай рәшәткә ишекте асты, бөркөт ирәүәнерәккә сыҡ ын, тип.

— Ҡайҙан тоттоң был ҡошто, олатай? Аҡбейектәнме? аман орамайымсы?

— Фронтташ дуҫым Буранбай килтереп бүләк итте уны миңә. Үҙе йәшәгән яҡта, Ирәндек тауында тотҡан, бөркөттәр төйәгендә.

— Әле бөркөт, әле Ыласын ти ең?

— Исемен Ыласын ҡуштым, үҙе ысын бөркөт ул — ҡоштар батша ы. Улым бул а, Ыласын тип нарыҡларға хыялланғайным... Бер бөртөк ҡыҙ насип итте Хоҙай, ул ни, ҡанатлы ҡоштай, осоп китеп барҙы оя ынан — күрше районда кейәүҙә,Үтәгәндә.

— Банат Батырова ауылындамы?

— Эйе, шилма ҡыҙыҡай, ишетмәгәне юҡ үҙенең. Ике ейәнем бар, һинең тиҫтерҙәр, тигәйнемме?

— Эйе. Ә был Ыласын?.. — ти алдым, олатайҙың уйы әллә ҡайҙағы Үтәгән яғына китеп барыр, юғи ә.

— Дуҫымдың ошондай ҙур бүләген кире бора алманым шул. Атҡа тиң иммәтле бүләк инде, аңлаған кешегә... Йәл үҙе, баштараҡ ҡаты бәғерле булырға кәрәк: уҫаллығын бөтөрөр өсөн ай буйы күҙен ҡаплап, бауға баҫтырып тоттом. Ун көн йоҡлатманым, бауын йыш-йыш һелкетеп торҙом. Бахырҡай, йыуашланды яйлап. Шунан күҙен ҡаплаған сепрәкте систем дә иркенерәккә сығарҙым, ҡулдан ашата башланым – мине хужа итеп тоя хәҙер. Хәлемдән килерме уны ысын унар ҡошо итергә, юҡмы — әллә. Белгән өнәрем түгел...

— Дуҫың, Буранбайың, ниңә өйрәтмәй?

— Эйе, ул белә, уның бөркөтсө булып теше сыҡҡан.Тәүге аулаған йәнлегенең йөрәген ашатырға кәрәк, ти, бөркөткә, әтеү бүтәнсә һунар итмәйәсәк, ти.

— Ә инең бүресе булып сыҡҡанмы тешең?

— Әтеү. — Шулай тип кенә ҡуйҙы олатай, ярай ҙа, үпкәләмәне. Эй, ошо телемде! – Шәкетау бүреләренең ҡото осоп торор ине, мин һунарға сыҡһам!

— Шәке-шәке, әшәке,– тип ҡуйҙымсы ерле юҡтан.

— Әшәкенең бында бер ҡыҫылышы ла юҡ, “шәке” – борон бүре тигәнде аңлатҡан.

— Бүре тауымы, әтеү? Аңланым. өйлә инде тиҙерәк, Бүре уҡҡан, әй, Әхмәҙин олатай, зарыҡтырма! Ыласын әле нимәләргә өйрәнеп өлгөрҙө? Ҡалай ҙурайған хәҙер, ҡанаттары яҫырған, ә суҡышы — хәтәр! — Шулайтып бабайҙы йүпләй алдым тиҙерәк. Өҫтәп тә ҡуйҙым: – ине хәҙер Бөркөтсө ти әм дә була, иветә — бер үҙеңә өс исем?

Шаштырып ебәрҙемме, олатай миңә ҡарап башын сайҡап торҙо. Әммә яуап ыҙ ҡалдырманы:

— Әхмәҙинләп торма аң да була, ә Бөркөтсө ти әң, нейә, ризамын. Инде миңә апаруҡ эйәләште, Ыласынды әйтәм, бына тигән унар ҡошо я айым унан. Заманында бүрене өрөргә өйрәткән кеше әле мин!

— Бүрең ҡасып китте бит урманға, этең әйләнеп ҡайтты, арыгүҙең, шул өрөп тора ла инде.

Был үҙем, билла и, артыҡ булды – бабайҙың төҫө үҙгәрҙе, күҙ алдында бурлаттай ҡыҙарып сыҡты.

— Кем әйтте? Үҙемдең әбей ҙә белмәгән хәлде... Рәйханаға ғына өйләгәйнем, аслан серҙе сисмә, тип ныҡытҡайным. Ышан был бисә-сәсәгә. Тоғро ҡатын, ти әм... Ошо остоҡ ҡыҙыҡайға өйләгән? Нисә йәш әле иңә? Тыумағайның да ул саҡта.

— Нишләп мин "остоҡ" булайым. Белгең кил ә, мин дә, ҡартәсәйем кеүек, "тоғро ҡатын", үҙемдә тора беләм. Анттыр бына, берәүгә лә ысҡындырмам арыгүҙ хаҡында.

— Әйт шулай ҙа: кемдән ишеттең?

— Үҙем беләм, ҡартәсәйем бер нәмә лә өйләмәне. Кесе йы анда саҡта уҡ ишеттем... ине нисек һатайым, ти, Ыласындың ғына түгел, үҙемдең дә ҡанатымды бәпләгән кешене!

Бүре уҡҡан олатай (инде – Бөркөтсө) ғажиз булып, ҡул елтәне. Әлдә төпсөнмәне, әйтәгүр, кесе йы анда белгәндәремдең Оло йы анда ла ҡай саҡ ысын булып сыҡҡанын уға нисек аңлатайым?

***

Мәңгегә килгәндәй булып, донъяны ҡалын ҡар менән бурап ташлаған ҡыш та үтте, гөр-гөр йырлаған гөрләүектәренә эйәреп яҙ ҙа ағып китте, йәмле йәй йәйрәне.

Бөркөтсө олатайға йыш, көн дә тиерлек йөрөй башланым. Әбейе, теге биш Сәғүрәнең бере е, — Көләкәс Сәғүрә инәй ҙә өм өрөн ҡойоп тормай, йылмайып ҡаршылай: "И и- и (хәбәренән алда келтерләтеп көлөп ала), Гәү әрҙең ҡыҙы килгән", — ти ҙә ихлас итеп лапаҫ яғына ишаралай, йәнә е, бабайы шунда. Белә лә ә кемгә килгәнемде.

Мәүлиҙәне бер генә эйәрттем, апа ы уны ҡанат менән бәргесләгән көндө генә. "Ыласындың холҡо боҙола, сит кешегә күп күр әтергә ярамай”,— тип олатай ҡаты ғына киҫәтеп ҡуйғас, ҡолаҡҡа элдем.

Ә Ыласын күҙгә күренеп эйәләшә Бөркөтсөгә. Яурынына, ҡулының ыртына килеп ҡуна, тырнаҡтарын ҡалын күн бейәләйенә батыра ла ҡаҡайып ултыра бирә. Мине лә ят итмәй, башын саҡ ҡына бороп, ҡырын ҡарап ҡуя. Әкәмәт ғорур үҙе! Ә аҡылы! Бөркөтсөнөң әр ишара ын аңлап тора кеүек.

— Көслө сағымдараҡ килеп ҡунманы был Ыласын минең яурынға, әкренләп кәр кәмей, — тип мыжып та ала Бөркөтсө олатай. — Үҙ үҙле ҡош ул, бәғзе ваҡыт берәй нәмә менән алып бәрерҙәй булып китәм, фронтта бөткән нервылар сыҙамай... Буранбай дуҫ яҙа, бөркөт ғәрсел ҡош, асыуын онотмай, тейеп ҡуйма, тип. Ярат а, ныҡ ярата, тоғро ярата, хаслаш а, үлемесле дошман була икән был... Берберебеҙгә эҫенештек кеүек былай. әр хәлдә, ары-бире йәнде көйҙөр ә лә, мин уны яратам! Әлеге кәр китә башлауы ғына борсолдора, төндә йоҡлатмай, яралар ыҙлай...

– Үтә ҡарт түгелһеңсе, нисә йәш әле һиңә, олатай?

– Иллегә генә инеп барыш та ул... уғыш алып ҡалды беҙҙең йәшлекте лә, һаулыҡты ла, Нурия ҡыҙым.

— Мин иңә ярҙамға Кәйҙеремде бирәйем, Бөркөтсө олатай! — Шулай тип ысҡындырғанымды иҙмәй ҙә ҡалдым.

— Кем тағы уны ы?

— Кәбир ул, мин генә Кәйҙерем тип йөрөтәм. Исламетдин ағайҙың улы.

— Ә, Исламетдиндыҡы булғас, йүн еҙ малай түгелдер?

— Унан да йүнле малай юҡ, олатай. ыбай елгәнен күр әң — оса ғына. Ата ының ярты эшен эшләшә кирбес арайында.

— Бир, әләй әң, миңә ул Кәйҙеремде, — тине Бөркөтсө, күҙен мут ялтыратып, хатта йәшәреп китте.— ыбай йөрөү ма ирлығы бик кәрәк беҙгә, бөркөтсөләргә.

Бөркөтсөләргә? Йүнле, тигәс тә, Кәйҙерем дә булғанмы бөркөтсө. Көләкәс инәй көлмөшләй, и и- и...

Улай ҙа, әйткән үҙ — атҡан уҡ, Кәйҙеремде килтерҙем эйәртеп Бөркөтсө олатайға. Күҙе ныҡ ҡыҙҙы тегенең, икереп төштө, барам, тип. Дәртле ул, ҡушаматы ла шуға Кәйҙерем — кәйҙереп, шәп атлағанға. Әммә башҡа берәүгә лә форсат бирмәй үҙенә улай өндәшергә, йоҙроғо тос... Ә миңә теймәй, “Кәйҙерем”дән алдырып тик йөрөйөм үҙен. Нишләп түҙә шуға? Әйтәгүр,үҙем таҡтым даһа уға ҡуша-

матты! Малайҙарҙың бөтә уйындарын да беләм, таһыллыҡта уларҙан уҙҙырып та ебәргеләйем – шул хаҡта әйттемме әле? Мәҫәлән, һыу өҫтөнән таш кәйелтеүҙә миңә етә алмайҙар. Йоҡаҡ ҡына ялпаҡ яҫы ташты кәйелтеп ебәрәм, әллә нисә ҡат һыуға сәпәтеп осорам ғына тегене. Нисә сәпәтәһең, шунса «ҡоймаҡ» ҡояһың. Кәбир бигерәк сәмле, бер мәлде, уғата мауығып китте әллә, хатта ки теле көрмәлде: “Иң күбе мин кәйҙерпелттем, ун ҡоймаҡ кәйҙергәнски!” – тип һөрән һалды. Миңә ни етә ҡалды...

***

өйөнөп бөтә алманым аҙаҡ Кәйҙеремде "бөркөтсө" итеүемә. Олатайға шәп ярҙамсы булды ла китте. Әллә нисек өлгөрә: атаһы егелгән колхоз йөгөн дә тартыша, өйҙә лә булыша, ыуына тиклем ташыша — торғаны Кәйҙерем инде. Өлкән малай шул ғаилә ендә, тағы ике бәләкәс еңле е бар, уларын өләсәйҙәре бағыша. Әсә е — сөгөлдөрҙә, ауыр эштә.

Колхоздың йәшелсә баҡсаһында эшләгән беҙҙең әсәйҙәргә лә еңел түгел. Мәүлиҙә менән мин беләбеҙ инде, йәй буйы шунда елкәбеҙ сейләнгәс. Йәшелсәгә туҡтау ыҙ ыу ибергә кәрәк, елкәнән көйәнтә төшмәй... Таңғы ибеүгә уятмайҙар, ә киске енән беҙҙе ҡалдырмайҙар. Быйыл яҙ ҡоро килде, вәт күрҙек Мәүлиҙә менән күрмәгәнде! ыуҙы көйәнтәләп тәүҙә аҙлыҡтан ташыйбыҙ: яҡын да, ыуы ла йылы. Баҡалары ерәйеп ултырып ҡалғансы ығып алып бөтәбеҙ ыуын. Шунан Күрәнленән йырылған арыҡҡа йөрөйбөҙ. Үҙе тәрән, үҙе тар ул арыҡҡа ҡояш нуры төшмәй, ыуы зәңкеткес алҡын. Эйелеп кенә алып та булмай ыуын, төшөргә кәрәк. Мин төшәм инде, Мәүлиҙә кәүҙәгә бәләкәй, биҙрәләрҙе аҫтан күтәреп бирә лә алмай. Дүрт биҙрәне тултырып өҫкә күтәргәнсе аяҡ иҫ еҙ булып туңа... Шуға, сөгөлдөр тура ында хәбәрҙәр ҡуйыра башлағас, эстән генә ҡыуандыҡ хатта. Ә ҡыуанырлығы булмаған ул эштең, тамуҡ көткән унда беҙҙе әм беҙҙең әсәйҙәрҙе...

Ҡай ы бер көндө йәшелсә баҡса ына Кәбир килеп китә кәйҙереп кенә. Әҙерәк ыу ҙа ташыша, шул арала Ыласынды ла өйләй ала:

— Буранбай дуҫы олатайға посылка алған, Ыласындың башына кейҙереп, күҙен ҡаплай торған ҡаплауыс ебәргән. Күндән тегелгән, үҙе хас шлем һымаҡ, башҡортса торҡа инде – олатай шулай йөрөтә. Беҙ, бөркөтсөләр, беләбеҙ инде, — ти Кәйҙерем, оторо маҡтанып, — күптән өйрәткәнбеҙ Ыласындың күҙен ҡапларға. Бөркөттөң күҙе осҡор, юғарынан тотош ауылды, Аҡбейекте, Күрәнлене бер ҡарауҙа күрә, бәләкәс кенә сысҡанды ла ысҡындырмай, шундуҡ уны эләктерергә шыҡыя. Ә бит ул сысҡан аулай торған ябалаҡ түгел, ә бүре, төлкө кеүек эре йыртҡыстарға унар итә торған ҡыйғыр ҡош! Белгең кил ә, кисә Ыласынды һеҙҙең сабынлыҡҡа – Зөлхизә яланына алып сыҡтыҡ, үрләс ергә.

— Шунан?!

— Ә ә, ҡыҙығыр ың тигәйнем дә.

— Йә, өйлә тиҙерәк! — тим, ә үҙемдең эсем бороп-бороп ала көнләшеүҙән: Бөркөтсө олатай менән мин йөрөргә тейеш тә ә. Әллә иҙеп ҡалды хәлемде, Кәйҙерем ерле юҡтан ошо хәбәрҙе килтереп ҡыҫтырҙы:

— ыбай мендек үрләскә. Бабай шәп йөрөй әле эйәрҙә, бирешмәй.

Аңланым тел төбөн (мин ыбай йөрөй алмайым, йәнә е), әммә белгертмәнем:

— Ул бит ғүмер буйы урмансы булған, өҫтәүенә унарсы ла, гелән ат менеп йөрөгән, хәҙер генә — төнгө ҡарауылсы,– тинем.

— Беләм дә инде, янғын мискә ен ҡарауыллай. "Мин ҡарауылсы түгел, ә янғын үндереүсе, пожарник!" — ти үҙе.

— Кәләкәс инәй өйләне инде уның нисек янғын үндергәнен, иһи-һи! — Әйттем дә ҡуйҙым, Ыласынды мин еҙ яланға сығарғанына олатайға асыуым килеп. Әйт ә, мин дә барыр, күрер инем. Кәйҙерем менән бер атҡа ултыра алмайым-

мы ни? Хәҙер теге ләкәпте өйләргә тура килә инде был малайға...

— Мин инең телеңдән тартманым, үҙең башланың, йә! — ти, ана.

Ҡотолоп булмай Кәйҙеремдән, өйләтмәй ҡалмаç.

— Тыңла, әтеү. Илгә таратма! Ололар беләлер белеүен... Мин тыумаç борон булған ул хәл, ун йыллап элек.

— Борон шул!

— Шаяртма, бүлмә үҙҙе! ин минән дә боронғораҡ, ул саҡта ин сәңгелдәктә илап ятҡан ың.

— Ярар инде, еркә е ыу күтәрмәç ошо Нурия — өйләй ал!

...Ҡараңғы төшөп, кеше аяғы тынғас, бабай янғын арайын бикләгән дә, сәй эсеп киләйем тип, өйөнә ҡайтып киткән. Шул арала бер келәттең мөйөшө янып киткән. Йәй көнө, келәт буш, ашлығы юҡ. Барыбер ҡаралты ла а. Шул оста йәшәгәндәр күреп ҡалып, тиҙ генә үндергәндәр әлдә. Ундай хәбәр ни, тиҙ йөрөй, колхоз рәйесенә лә барып еткән, ул ат менеп килә алған. Шул саҡ яй ғына атлап беҙҙең бабай килә ята, ти. Үҙе аптырай икән, нимә тип шунса халыҡ йыйылып киткән бында, төнгә табан?

— ин, ҡарт, ҡайҙа йөрөй өң эш урыныңды ташлап, ана ла а пожар сыға яҙған! — Рәйес ағай быны тетә башлаған. Ә беҙҙең бабайҙы белә ең дә ә, иçе лә китмәгән:

— Ниңә әле еҙ минең эшемә ҡыçылып, арай ишеген рөхсәт еҙ ҡайырып асып йөрөй өгөҙ? Янғынды ни, сыҡ а ни, яйлап үҙем үндерер инем әле, — тигән. әм өçтәп ҡуйған: – Рәйес ҡустым, фарман бир, иртүк йоҙаҡты йүнәт ендәр, мискәгә ыуҙы тултырып ҡуй ындар!

Рәхәтләнеп көлдөк. Шунан Кәйҙерем Ыласындың тәүге ынау көнөн тасуирланы. Мин, нишләптер, унының урынында тик үҙемде күрҙем.

...Бына, имеш, мин ҡуян тиреһенә һарыҡ йөнө тултырып яһалған ҡарасҡы тағылған оҙон бауҙы өйрәтеп еләм. ыбай елмәйем дә ә, ерҙән йүгерәм (алдаҡсы был Кәйҙерем!), теге «ҡуян» да саба. Ғүмерендә тәүге тапҡыр унар ҡомарын татыясаҡ хәҙер Ыласын. Минең дә эшем яуаплы: шәп йүгерергә, бауҙы ҡулдан ысҡындырмаçҡа, берәй ҡыуаҡҡа өрлөгөп ятмаçҡа тейешмен. Тырышам, артыма ҡарамай, алға йүгерәм генә. Олатай, башына кейҙергән күн торҡа ын сисеп алып, бөркөттө күккә сөйҙө. Бына бер мәл ҡыйғыр ҡош, аҡкан уктай, мин өйрәп килгән ҡарасҡыға йомолдо.

Ҡеүәтле ҡойроғо "ҡоп" итеп ергә ҡағылды, типкер тырнаҡтары «ҡуян»ды матҡыны. Мин, ҡурҡмай-нитмәй, бөркөткә ҡарап торам. Ул да туп-тура миңә ҡарай! Уңарсы олатай килеп етте, ул да бөркөт менән ҡарашып торҙо байтаҡ. Бер-береенән ҡәнәғәт ине бөркөт менән бөркөтсө. Олатай кеçә енән сей ит киçәге килтереп сығарҙы ла Ыласынға ондо, табышын ысҡындырырға ишараланы. Теге е буй ондо, үткер тырнаҡтарын бушатты, суҡышын асып, хужа ы ҡулынан итте оғондо. Бөркөтсө олатай йәш унар ҡошон күкрәгенә ҡыçты, башына тағы торҡаһын кейҙереп, күҙен ҡапланы ла яурынына ултыртты...

Әйтер ең, кино ҡараным: бөркөт унары хаҡында мауыҡтырғыс кино, ә бер геройы — үҙем. Түгел шул! Ана бит, эргәмдә баçып тора ул герой, ауыҙын йырып. Минең уға Кәйҙерем тип әйткем килмәне лә ҡуйҙысы хәҙер. "Бөркөтсө Кәбир" — ошолай килешә. Олатайға ни, ҡатлы-ҡатлы ҡушамат нимәгә, әүәлгеһе, өйрәнелгәне менән йөрөр. Ләкин әлегә Кәбиргә бер ни тип тә өндәшмәй торам, былай ҙа, ҡабыҡ ҡанат, маҡтанырға мас ҡына.

Уңарсы дуçым сер уртаҡлашырға тотондо :

— Ҡыш унар итәсәкбеҙ Ыласын менән, әлегеһе өйрәнмеш кенә. Йәй уртаһында ҡуян-бүре ауламай һунарсылар, тыйылған... Ҡулыңа бейәләй, яурыныңа ҡаплауыс, ә Ыласынға тағы бер торҡа тек ен, Татар әбейгә алып бар, тип олатай үҙе-

нең иҫке күн итегенең ҡунысын ҡырҡып бирҙе әле.

Ана, тағы ҡупая. Көтөп тор он яңы ҡушаматын. Тағырмынмы, юҡмы әле ?!

***

Беҙ, дүрт ҡатын (бәләкәс Камиланы иҫәпкә алмайым, исма ам, өс йәше тул ын, шунан беленер: шәп ҡатын сығырмы унан, сыҡмаҫмы), әүетемсә донъя көтәбеҙ. Быйылғы йәй яңылыҡ артынан яңылыҡ килеп тора. Гел арыу яңылыҡтар. Зөлхизә өләсәйемә, элекке данын иҫләп, алты мөйөшлө өй алып бирҙе хөкүмәт. Өмә итеп, тиҙүк күтәреп, башын ябып та ҡуйҙылар. Әле күрше Николаевканан Уста знакум тигән урыҫ бабайы мейес сығара. “Был арандай өйҙә мин нишләрем икән бер үҙем", — тип өләсәйем йөрөй унын янында ҡаңғырып.

Кисә мәрәкә булды. Йүгереп кенә өләсәйемдең хәлен белеп сығайым тип ин әм, күрше ауылдан бер бабай килеп инде, мейессене күрергә тип. Юрый тыңлап торҙом, бабай Уста знакум менән ҡай ылайтып урыҫса өйләшеп килешер икән, тип. Моғайын, мейес сығартырға тип йөрөйҙөр бит инде?

— Тоже печку надо? — тип ораны Уста знакум, яңы мейескә ымлап.

— Әбизәтелнә!

— Через два дня придешь. — Уста знакум ике бармағын күр әтте лә ныҒытып ҡуйҙы: — Ладно?

— Әбизәтелнә!

Шулайтып, урыҫса бер генә үҙ белеп тә, йомошон йомошлап ҡайтып китте бабай. Әкәмәт...

Ҡайтҡас, көлә-көлә ҡартәсәйемә өйләгәйнем: "Ерекленән Әбизәтелнә ағай булған, күрә ең", — тип кенә ҡуйҙы, бер ҙә аптырамаңы. Көлмәне лә.

***

Камила менән Камилды бер ҡарауҙан айыра башланым: шул да яңылыҡ түгелме ни? Ике йәш тә булып китте уларға. Сирәмдә тәгәрәтеп уйнатып бер булам үҙҙәрен. Ҡыҙыҡ та а: бүкән кеүек тәгәрәйҙәр – ике аяҡлы, ике ҡуллы, күҙле бүкәндәр. Шулай сағыштырам да, ҡурҡышымдан тиҙ генә тәүбә әйтеп, берәм-берәм күкрәгемә ҡыҫып өйәм туғандарымды. Бәләләре бик төшмәй уларҙың миңә. Зөлхизә өләсәйем тағы гелән беҙҙә, ул ҡараша. Рәйхана ҡартәсәйем дә йәй айын атҡарған кашауарлығынан (колхоз бесәнселәренә аш бешерә торғайны) баш тартты шул бәләкәстәр хаҡына. Ә нисек айыраммы? Кейеменән түгел: әсәйем уларға һаман бер иштән, оҙон ғына, тоҡ ымаҡ күлдәк ишараты кейҙерә лә ҡуя, бестәтәү ҙә йөрөгөләйҙәр. Юҡ, "турғай" ҡарап та тормайым... Хәҙер уларҙың, төҫкә ике тамсы ыу кеүек оҡшаш алар ҙа, айырмалары етерлек. Камилды бигерәк яратам. Атайымдыҡы кеүек йәшкелт күҙҙәрен йомрайтып ҡарап ултырыуҙары шуның! Камила ы илаҡ, етмә ә – ейгәк. Инде тота ың аяғын, инде күл итә лә ултыра... Ике енә лә тыуа-тыуғандары бирле өйрәтә өләсәйем, белдерегеҙ, “бес” иткегеҙ кил ә, тип. Камилы шуны аңлап, сәңгелдәктә сағында уҡ ы ылдап буҙарып бөтөр, аҫтына ебәрмәй, аяғын тотҡанды көтөр ине. Ә Камила ы... Барыбер уны ын да яратамсы, үҙемдең бер бөртөк еңлемде ни.

Ә иң ҙур яңылыҡ, өләсәйемдең ҙур өйөнән дә ҙурыраҡ яңылыҡ — атайым ҡайтасаҡ. Тотошлайға түгел шул... "Июль урталарында ҡайтып төшөрмөн, отпуск алам, — тигән хатында. — Гәү әр, игеҙәктәр менән ине алып китәм, бүлмә бирҙеләр. Нурия ҡыҙым әлегә ҡалып торор..."

Шул хатты уҡығас, шым ғына урамға йүгереп сыҡтым да, Гөлбикә апайҙың соланына кереп, башымды бүрәнәгә бәреп-бәреп иланым. Башым күбеп-күбеп сыҡты, ауыртыуына тағы иланым. Ҡысҡырып-ҡысҡырып... Улай ҙа илағаным юҡ ине ымаҡ. Әлдә Гөлбикә апай өйҙә юҡ, был ваҡытта ул сөгөлдөрҙә.

Битемде соландағы ыулы биҙрәгә сумырып алдым да, ҡапылда өйгә ҡайтҡым

килмәй, Мәүлиҙәләргә барып ураным. Әмин абыйҙың тауышы тышҡа уҡ ишетелә: «Өй тулаһы ҡатын-ҡыҙ, ә донъя бола, әйбер табырлыҡ түгел, ҡайҙа минең йыйылышҡа таға торған галстук?" – тип дыу ҡуба. Инеп торманым, үҙебеҙгә боролдом.

Ә үҙебеҙҙә ҡәйнәле-киленле икәү бер ҡарарға килеп ултыралар: ауылдан берәү ҙә китмәй! Әллә ҡайҙағы урыҫ ара ында, әҙәм ишетмәгән Карагандала — нимә ҡалған унда?

— Мин урыҫса белмәйем, ҡала ерендә эш табыр өнәрем юҡ, таш өйҙә бикләнеп, ҡасан ҡайтыр был, тип ситлектәге ҡоштай ултырырым...

— Аҡсаң бөт ә, ауып эсер ыйырың юҡ, барып төңкәлер кешең юҡ. Ете ят ара ында...

Бына килешкәндәр, ике е бер төптән былар? Зөлхизә өләсәйемдән, хисапҡа алып, фекер ораусы юҡ инде, ә минән уң — ниңә орамайҙар? Мин дә бар бит әле был донъяла!

***

Өс көн ҡаты уйландым. Нишләргә? Атайымдан ҡалмайым, тегеләр эйәрмә ә, мине алып кит ен үҙе менән, бәй. Урыҫса уҡырмын, өйрәнермен. Атайым эштән ҡайтыуға әрсеп бәрәңге бешереп торормон, ҡоймаҡ та ҡоя беләм. Кер-фәлән йыуырға эшкинәм, ауыт- аба, иҙән йыуыу тура ында әйтеп тә тормайым... Юҡ... Камил менән Камиланы нисек ҡалдырып китәйем? Теге бөркөтсөләрҙең ҡышҡы унарын да күрә ем бар. Мәүлиҙә әхирәтем мин еҙ тамам мәүешләнер. Ата ы ла, уҡытыусы башы менән, холоҡ оҙланып ала. Төнәгөнгө бырхыуынан һуң баҫылғандыр инде тип, бөгөн тағы барғайным уларға (исмаһам, Мәүлиҙәгә һөйләр инем эс серемде), Әмин абыйҙың һаман ерле бушҡа енләнгәнен күреп: "Әлдә атайым юҡ,"– тип ҡуйҙым эстән генә.

Ҡайт ам, өйҙә, гүйә, кесе ҡор йыйылған: өс ҡатын дүртенсене, мине, көтөп кенә ултыралар. анға һуғалар ҡай саҡ...

— Рәйхана ҡоҙағый, шуны кәңәш итергә килдем әле, — тип үҙ башланы Зөлхизә өләсәйем, — әллә тағы бергәләшәйекме, Баязит кейәү армияла саҡтағы кеүек? Ҡыйын да а миңә ике араны тапау. Бер башыма ҡаҙан аҫып ултырыуы ла йәп еҙ, күпселек еҙҙә ризыҡланам да барыбер...

— Ишегеңде бикләп, төйөнсөгөңдө тотоп, кәзәңде етәклә лә кил дә ин, ҡоҙағый, ин беҙгә артыҡ өйәк түгел, — тип өҙөп кенә яуапланы ҡартәсәйем, ике уйларға урын юҡ был йә эттә, тигәнде аңлатып.

— Ни бит әле... Ҡоҙағый, миңә тигән яңы өйгә күсен әк, күмәкләшеп?

— Бына иңә, иҫке ауыҙҙан яңы үҙ... — Ҡартәсәйем аптырап ҡалды. Ә унын шулай ҡаушап тороуын мин быға са ирәк күрҙем, бәлки, күрмәнемдер ҙә?

— Ярар, биғәйбә, кейәү ҡайтҡас хәл итербеҙ микән? Мине ни, бала хөкөмөнә кереп бөткән ҡарсыҡты, әрләмәгеҙ инде...

— Ошо ҡоҙағыйҙың... Ә бит... уйлап ҡара аң? Күсенәбеҙ, бәй, ниңә? Баязит ҡайтҡансы уҡ күсенәбеҙ. Тәүәккәлләйбеҙ ҙә ҡуябыҙ. Игеҙәктәр үҫә барған айын ныҒыраҡ беленә был өйҙөң бәләкәйлеге...

— Мейесте яғып ҡараныҡ Уста знакум менән, яҡшы тарта. ылап, аҡларға ла... Бына Гәү әрем әҙерәк буша а?

Ҡартәсәйем, хәл иткес берәй эшкә әҙерлән ә, гел шулай итә, ендәрен тер әгенән өҫкә үк төрөп ҡуйҙы ла бөйөрөнә таянды:

— Килен, йәшелсәңдән тура ҡоҙағыйға бар, беҙ балалар менән шунда булырбыҙ, төшкө аш әҙерләп торорбоҙ. Мин Исламетдиндән берәй көйәнтә балсыҡ һорап алып килермен, аҡбурҙы төйөп ҡуйырмын, Нурия күп итеп ыу ташыр. Тамаҡ ялғап алырһың да тотонор оң шул мейескә. Йәме?

— Ярар. — Әсәйем, Карагандаға китмәҫ өсөн, ун мейесте һылап бурларға ла

әҙер, күреп торам. — Ярҙамға берәй ен саҡыр ам?

— Бынау уттай эш мәлендә кемде табыр ың икән? Бөтә бисә-сәсә сөгөлдөр баҫыуында, аяҡтарын саҡ өйрәп арып ҡайталар.

— Мәүлиҙәнең әсә ен саҡыр, Рабиға апайҙы, — тип үҙ тығып ебәрҙем. — Көндөҙ ул буш бит. Ишбирҙе ен әхирәт менән икәүләп ҡарарбыҙ. Ҙурайған ул, элекке кеүек үк ен ботағы түгел, "ярамай"ҙы белә башлаған.

Шулай иттек тә. Эңер төшөп, көтөү ҡайтҡансы эш осланды. Мейес әҙерәк кипшенгәс, тағы бер-ике көн ут яғып һынап ҡараныҡ та Яңы өйгә (шулай атаныҡ) күсендек тә килдек. Әлеге лә баяғы Бүре уҡҡан олатай янғын үндереү хеҙмәтендәге атын арбаға егеп, мөлкәтебеҙҙе күсереште. Әҙләп-әҙләп, тағы бер-ике көн йөкмәп тә ташыныҡ әле: бик ҙур булмаған дүрт мөйөшлө өйгә шул тиклем күп әйбер ыйған, имеш.

Өйҙөң тәҙрә пәрҙәләрен алманыҡ, ҙур икене лә урынынан ҡуҙғатманыҡ. Ҡартәсәйем шулай ҡушты: "Ул икелә әле минең мәрхүмә ҡәйнәм бәпес биләгән... Баязитымдың ата ын, атыбалымды", — тине.

Ҡола ялан ҡалғас, өй нык йәл була икән. Ҡартәсәйем күҙ йәшен күр әтмәне әлдә. Күтәрмәгә сығып баҫҡас, ихатаны байҡап алды ла әйтеп ҡуйҙы:

– Биғәйбә.

– Хуш, Атай йорто! – быныһын мин өҫтәнем. Уйлап та әйтмәнем, телемә шулай килде.

— Кейәү риза булырмы икән? — тип иҫкәрткән булды Зөлхизә өләсәйем.

– Кем орай уның ризалығын? Нигеҙен йәтимһерәткеһе килмәһә, йөрөмә ен тегеләй-былай тәгәрләп, далалағы ҡамғаҡ шикелле. (Ниндәй икән ул — дала ҡамғағы?)

Ҡартәсәйемдең бәғере ҡатҡан икән, ҡай ылай уҫал әйтте. Бәғер нимәме? Йомшаҡ сағы ҡай ылай ҙа унын, ҡаты сағы ниндәйме? Ә ниңә ҡата ул? Ошондай һәм башҡа төрлө һорауҙар хәҙер миндә һирәгерәк тыуа, йәшем ырай ҙаһа, күп үҙҙәрҙең мәғәнә ен үҙлегемдән үҙем аңлайым да ҡуям, тәү тапҡыр ишет әм дә. Зөлхизә өләсәйемсә, әллә «белеп тыуғанмын»? Татар әбекәй ҙә әйтә: "Нуриякаем, ике ягында ике фәрештә — зур әнкәләрең, шунлыктан синең зи енең үткер. Дөньяны үтеп чыккан хатын диярсең, сөйләшүеңә карап, и, бәбекәем, кечкенә кызчык бит әле соң үзең ..."

Өс йәшемәсә, сабыйлыкта инде, себендәй мыжғып тора ине ул һорауҙар – башымда ла, баш осомда ла, аяҡ аҫтымда ла, тирә-яғымда ла... Әсәйем менән Шәрифә апайым: “Теңкәгә теймә! – ти ҙә ҡасып китәләр ине минең ҡырҙан. – Ана, ҡартәсәйеңдән ора йә өләсәйеңдән — улар күп йәшәгән, күп белә”, – тип ҡотолалар. Ә инде дүртемә китеп, "шәп ҡатын" буласағым фаразланғас, мин хәбәрҙең айышын үҙ аллы аңғарырға өйрәндем. Бер мәлде ҡартәсәйем әсәйемде шелтәләп йөрөй: "Шул тауыҡ баш Сәғүрәгә ышанып, сүптән сүмәлә өйөп, эсеңде күм етеп йөрөмә, тип иңә күпме әйтәм, ә, килен!" Минең тыштан килеп ингәнде иҙгәс, туҡтанылар. Бына хәҙер уйлапмы уйлайым бит инде: ауылда биш Сәғүрә бар, ҡай ы ының башы тауыҡтыҡына оҡшаған икән? Урам ҡыҙырып йөрөп, бише ен дә барып ҡараным – бәй, бөтә е лә ҙур башлы, ә Салпа Сәғүрәнеке беҙҙең аласыҡта малға бәрәңге ҡапсығы бешерә торған көршәктән ҙурҙыр әле хатта – сәсе ҡуйы, бөҙрә. Юҡ, осона сыға алманым был үҙҙең. Өйҙәгеләрҙән орамайым, сәмләнәм. Күпмелер ваҡыт үткәс, барыбер белдем!

— Тауыҡтар иҫереп тәгәрәшеп ята, — тип бырхый бер көндө әлеге ҡартәсәйем. — Килен, тим, әйттем иңә, күп алма ҡамыр әсетке енә ҡомалаҡты, күнәктән ташып сыҡма ын, тип. Ана, бер мейес икмәклек ҡамырың күпсеп артылған, тауыҡтар шуны ашаған.

— Әй, бер семтем ҡомалаҡҡа тәгәрәгән тауыҡтарын әйтер инем, — тигән була әсәйем.

— Шуңа тауыҡ баш бит улар, мейеләре бәләкәс булғанға!

Ә ә, мейе е бәләкәс, тимәк, аҡылы әҙ? Ә ә, теге — антый Сәғүрә икән, төшөндөм!

Ул апайҙар мине тыуа-тыуғаным бирле аптыратты. Баштарын ҡарап йөрөгәнгәсә, ҡулдарын һанап сыҡтым әле: Ете ҡуллы Сәғүрәне эҙләнем.

– Бөтәһенең дә ҡулы икешәрсе!

Ҡартәсәйемә шулай тигәйнем, ул бот сапты:

– Ауыл гиҙеп, Сәғүрәләрҙең ҡулын һанап йөрөнөңмө? Шилма ҡыҙыҡай... Унға тиклем һанай белә икән берәү. – Үҙе көлә, асыуланмай. Шунан аңлатты: – Егәрле ул Сәғүрә. Егәрленең ҡулы етәү, ти халыҡ.

– Ә-ә. Ҡушаматты маҡтап та тағалармы, әтеү? Салпа, антый – ямаҡ таһа?

– Төрлөсә була инде уныһы. Төҫкә, буйға, нәҫелгә лә ҡарайҙар, күпселек – холоҡҡа.

“Теңкә” тигән сәйер һүҙҙең дә ғәмәлдә түҙемлек, сабырлыҡ мәғәнәһендә икәнен дә аңланым шул араларҙа, юҡһа мин уны, күҙгә күренеп тормағас, эстәге бауыр йә йөрәк кеүегерәк берәй ағза микән, тип баш вата инем...

4

Яҙмыш ҡушҡанса Яңы өйҙә йәшәй башлағас, атайыма эйәреп китеүҙән ваз кистем. Ерлегенә зәңгәр бәпкәләр төшөрөлгән бумазый күлдәгемде, ҡанатлы аҡ алъяпҡысымды, Шәрифә апайым ебәргән зәңгәр ебәк таҫмам менән еҫле абынымды төрөп тә ҡуйғайным, ҡапыл китеп бар ам, тип. Киренән тағаттым төйөнсөгөмдө.

Барыбер тынысланып бөтмәнем әле. Бер ни ҙә ҡылмай, башты эйеп ҡалғы килмәй... Бесән эшләшермен, ике-өс аҙна торормон, тигән атайым хатында. Ҡайтыр ҙа тағы китер, тимәк. Нишләмәк һуң?! Әллә? Таптым юлын — атайымды кире китмәҫлек итергә кәрәк. Сихырларға! Әсәйемә ҡуша ҡаплан ын да ҡуй ын. Ана ла а, Әнкәләр осондағы Фариза еңгә Хәйрулла ағайҙы шулай иткән. Ун бер йәшкә өлкән, ти бит, шул еңгә ағайҙан. Ғибрәт?! Хәйрулла ы уның өҫтөнән ике тапҡыр йәш кәләш (ҡыҙҙан, ти!) алып ҡараған, тора алмаған. " өйҙәргәс эсерҙем!" — тип әйтә, ти, Фариза еңгә. Шуға Хәйрулла ағай уға кире әйләнә лә ҡайта, моғайын.

Элеккеләрен, мин тыуғанғаса булғандарын, белеп үк бөтмәйем, мәгәр Хәйрулла ағайҙың уңғы тапҡыр ҡайтыуын хәтерләйем. Халыҡты дыу килтергән был хәлгә өс йыл булып килә шикелле. Хатта ки ләстит әллә ни ҡуйыртылмаған беҙҙең өйҙә лә өрләккә етеп өйөлдө кеүек ул саҡта хәбәр.

— Инде ултыраҡланыр был Хәйрулла, ҡырҡты ҡыуалыр ҙа а, — тине ҡартәсәйем, өйҙәге имеш-мимешкә сик ҡуйырға теләгәндәй. — Ауылдың иләк ауыҙы оҙаҡ ябылмаҫ әле...

— Ғәйнулла ҡәйнешем менән Нәфисә килендәш иҫән бул а... — Өләсәйем башлағайны тағы, ҡартәсәйем ҡырт киҫте:

— Иҫән ваҡыттарында аҡыл бирмәнеләр улдарына, дыуамалландырып бер булдылар уны, хәҙер инде, гүр эйә е булғас, ни ҡыл ындар? Хәйрулла үҙе лә аумаҡай. Яраҡкас, тор ине шул Фаризаң менән. Яраҡкан — йылан ите ашаған!

— Эйе шул...

Беҙгә нәҫелерәк булып сыға Хәйрулла ағай, өләсәйем әйтеүенсә. Ә Фариза еңгә уға Силәбенән эйәреп ҡайтҡан, ағай шунда хәрби заводта эшләгән уғыш йылда-

рында. Алкинда уҡ айлап алып, шөрөп я арға ебәргәндәр уны. Ниндәй Алкин, ниндәй шөрөп? Әй, уны ы миңә нимәгә хәжәт, теге " өйҙөргөс" баштан сыҡмай әле. Нисек Фариза еңгәгә юл табырға икән – әмәлләп бир ен ине шул өйҙөргөстө. Атайым әсәйемде уштан яҙып өй өн, кәртинкә кеүек ҡала мәрйәләрен күрмәҫ бу-л ын, бер ҡайҙа ла китмә ен, беҙгә, хәләл балаларына, сат йәбеш ен — ана шулай ҡаты итеп, ғүмерлеккә сихырла ын ине!

Бер көндө тәүәккәлләнем. Төш ауышҡас, Фариза еңгәләргә юлландым – Әнкәләр осондағы күркәм генә өйгә. Шул оста Әнкә менән Әнфискә исемле мәрйә инәйҙәр йәшәй, һуғыш осоронда эвакуацияға килгәндәр ҙә беҙҙә тороп ҡалғандар. Тик был юлы улар ҡайғыһы түгел миндә, берәй иҫләрмен әле. Фариза еңгәне уйлап килешем. Бик уңған, йүнсел, ти, ул. Дебет шәл бәйләй ҙә ҡалаға алып барып ата, тиме. Бәйләй инде, ҡулын бала бәйләмәгәс... Бар, ти, тәүге иренән бер улы, Силәбелә ҡалған икән уны ы. Ә бына Хәйрулла ағайҙан бала тапмаған. Ә барыбер ағай уға йәбешеп ята. өйҙөргөсө бар шул, көслө шул — бүтәнсә ҡалай?

Үҙем китеп барам, үҙем сәбәп уйлайым: нимәгә килдем, тиергә? өйҙөргөскә, тип ҡапыл-тура әйтергә ярамай ҙа инде. Килешмәй. Шәл бәйләргә өйрәнгем килә, ти әм?

Былай, ул еңгәне күргәнем юҡ түгел, ауынсы булып эшләгәнен беләм. ауын араһында китап уҡый ҙа ултыра, балаһы булмағас, өйөнә атлығып тормай, тип тә һөйләйҙәр... Бәс, мин унан берәй китап орап барған булайым ?

— Бына, биш-алты китап бар, күберәк ине лә, шулай орап килгеләй бала-сағa... — тине Фариза еңгә, ис аптырамай ғына. — Ана, кәштәлә, ҡарап ал үҙең. Кем ҡыҙы әле ин?

— Рәйхана ейәнсәре. — Шулай тинемсе, ата-әсәмде әйтергә кәрәк тә ә?

— Ә-ә, Зөлхизә инәйҙең дә ейәнсәре инде, әтеү? Гәү әр менән Баязиттың ҡыҙы. Атайың ҡайта, тиҙәр ине? Шәрифә апайың ҡайҙа, Өфөләме? Мин уны шәл бәйләргә өйрәткәйнем...

Шулай алсаҡланып өйләште еңгә минең менән. Был юлы өйҙөргөс хаҡында үҙ ҡуҙғатырға ҡыйманым. Мостай Кәримдең «Беҙҙең өйҙөң йәме» тигән китабын айлап алдым да ҡайтып киттем. Артыҡ ваҡыты ла юҡ ине еңгәнең дә: "Хәйруллама нимә бешерәйем икән?.. Хәйруллам килеп инер бына-бына, тимерлек яғынан тауыш килмәй шикелле? Тиҙгә генә йүгереп ҡайттым, аш хәстәрләргә. Эше ауыр бит Хәйрулламдың..." — тип һамаҡлап ебәрҙе хатта.

Беҙҙең өйҙә улай өлтөрәп көтөп торорлоҡ ир-ат булмағас, миңә сәйер тойолдо еңгәнең ҡыланыштары. Ҡартәсәйемә әйтмәнем (шундуҡ йә иҙенер), Зөлхизә өләсәйемә бул а ла әлеге күргәндәремде өйләмәй түҙмәнем. Китап алырға барҙым, тип баштан уҡ ҡамап ҡуйҙым, нишләп йөрөй өң унда, тип бәйләнмә ен. Шунан иплəп кенә өләсәйемдең хәбәр йомғағын тартҡыларға тотондом.

— Хәйрулла ағай беҙгә туған, буғай, атайым яғынанмы?

– Юҡсы, минең ҡәйнештең улы ла а. — Ә ә, бер тартыуҙан осон тотоп алдым, хәҙер тағата ул өләсәйем йомро-йомро йомғаҡҡайын!

— Әсәйем нәҫелеме ни?

— Юҡсы, беренсе ирекәйем Төхвәтулланың бер туған ҡусты ы Ғәйнулла ҡәйнештең улы ул Хәйрулла. Шул бер бөртөк кенә уландары булды. Ә беҙҙеке икәү ине: Рәхмәтулла менән Зәйнулла. Анау ҡә әр уҡҡыр Гитлер әләк итте өрләктәй уландарымды. Рәхмәтулла ы кәләш алып өлгөргәйне. Дәүләтбикә ейәнсәрем дә ә — унын төҫө. Кимерәүҙә йәшәй. ирәк кенә ҡайта. Ҡыҙ бала ни, эшкә барған ерендә кейәү табып, шунда тамырланды ла ҡуйҙы. Сит тупраҡта ятып ҡалыр микән өйәккәйҙәре? Әй!.. Зәйнуллам ҡырҡынсының көҙөндә алынғайны әрмегә. у-ғышҡа әләкте шунан... Йәш кенә көйө әрәм булды, егермелә генә. Исма ам, орло-

ғо ҡалманы... Улар менән әсәйең – инә бер, ата башҡа туғандар.

— Беләм, өләсәй, беләм уларын. ин миңә Хәйрулла ағайҙы өйләй башлағайның?

Бына бер ваҡыт үтелә башланы йомғаҡ! Өләсәйем, бер ихласлан а, оҫта ул, тәфсирләп өйләй. Әле алға, әле артҡа тәгәрәп, аҙашып киткеләй унын йомғағы, барыбер бүлмәй тыңларға тырышам, үҙемә кәрәген ҡолағыма киртеп ултырам.

– ...Ҡәйнеш тиһәм дә, иремдең ҡустыһы булғас, Ғәйнулланы әйтәм, минән ун йәш сама ы өлкәнерәк ине. Әзмәүерҙәй кеше үҙе. Минең бабай, Төхвәтуллам, унан ҡайтышыраҡ. Ҡартыраҡ бит инде, кәүҙә е сауыҡҡан. Мине алғанда уҡ иллегә кереп бара ине. Никах көнөндә тәү күрҙем уны, мин бит күрше ауылдан, Ерекленән.

— Ә инә... ун өс йәш кенә, оло бисә е биҙәү булып, бала таба алмағас, икенсегә өйләнгән бабайың, — түҙмәнем был юлы, бүлдем өләсәйемде, бигерәк төпкә төшөп бара, әтеү.

— Йә, бутамасы башымды! Ике йыл миңә ҡағылманы әле Төхвәтуллам. Ун етемдә Рәхмәтулламды ҡулыма алдым. Шул бер бала менән ҡалырбыҙ, ҡартымдың арҡынты ы булғандыр, ти әм, Рәхмәтуллам ун бишенә етеп, егет ҡорона инеп барғанда, тағы буйға уҙғанмын да ҡуйғанмын. Зәйнулламды утыҙ ике йәшемдә таптым. Бабайым ни, етмешкә инеп бара ине. Эйе... Шунан уң өс кенә йыл йәшәп ҡалды, бахырҡайым. Эйе... Оло бисә енә, Мәғүҙәгә, рәхмәт, балаларҙы ҡараштты, мине лә ҡаҡманы. Малайҙарым ыңғайына мин дә уны "инәй" тинем дә йөрөнөм. Әй, Хәйрулланы һорашаһың бит... Ул нисәнсе йылда тыуғайны әле? Минең Рәхмәтуллам яңы быуат башындараҡ, мең дә туғыҙ йөҙ етенселә, ҡарайҡка ҡар ныҡлап ятҡас тыуҙы.Ун алты йәшкә бәләкәй Хәйрулла унан, теүәл ун алтыға . Нәфисә килендәшем уң тапты улын, ҡырҡтың өҫтөндә, буғай. Эйе, ҡәйнеш уны айырманы, ғәйеп үҙендә булғанғалыр... Ғәйеп тигәс тә, тәҡдир инде. Бер шулай, сейәгә барғанда, Сейәлетүбә башына кем тиҙерәк йүгереп менә, тип бәхәсләшкәндәр. Яман текә бит ул түбә! Менеп еттем тигәндә, Нәфисә е бер ташҡа өрөнөп йығылған да аҫҡа тәгәрәп төшөп киткән, биҙрәләре-ние менән. Йәш саҡ, дыуамал саҡ... Килендәшемдең шунда ауыры төшкән дә ҡуйған. Күп бул а ике-өс айлыҡ булғандыр. Шул бармаҡ башындай яралғыларын япраҡҡа төрөп, бер имән төбөнә күмгән булғандар, аҙаҡ гел барып, илашып йөрөгәндәр. Быларын миңә Мәғүҙә инәй өйләне. Мин Толпарлыға килен булып төшкәнсе булған хәлдәр... Ҡайны кеше, имеш, үтә аран булған. Урамындағы ҡойо он йоҙаҡ менән бикләп тотҡан. " ыуҙың тамыры инең биләмәңдә, ас ҡойоңдо, интектермә, исма ам, күрше-тирәнде", — тип аҡ аҡалдар әйт ә лә, тыңламаған. Халыҡ әүәлдән Биксәнәйгә йөрөгән инде эсер ыуға, ул, эргә ендә аҙлыҡ ятҡас, бер ҡасан да ҡоромай. Ә бер йылды хатта ул да ҡорой яҙған, ыуҙы сәғәттәр буйы көтөп, сүмесләп кенә алыр булғандар. Әммә беҙҙең ҡайны барыбер тотондормаған ҡойо он. Ахырҙа, берҙән-бер көндө, шул ҡойо ҡороған да ҡуйған. Мәсет ҡарттары теләк теләп, Хоҙай Тәғәлә ыу тамырын Биксәнәйгә бороп ебәргән, тиҙәр.

— Шунан? Быны ни ҡыҫылышы бар уң Хәйрулла ағай менән Фариза еңгәгә? Улар аран түгел дә ә?!

— үҙ ыңғайы ғына... Атайҙарының ана шул аранлығы арҡа ында нәҫел тамыры ҡороған, тип үсәгән толпарлылар Төхвәтулла менән Ғәйнулланы, тим. Балалары булмағас, тим. Ары табанмы? Ҡәйнеш менән килендәште өйләй инемме? Эйе... Яратышалар ине улар. Мына бер мөғжизә, бала ыҙлыҡҡа күнеп бөткәстәрен, Хәйрулла килде лә тыуҙы, Хоҙай насип иткәс ни. Әйткәндәй, ҡәйнәм мәрхүмә үҙе лә Ғәйнуллаһын ҡырҡ дүртендә тапҡан, бәс, ул йәштә бәғзе ҡатын ырыуҙан ҡала... Нәҫелдәренең бер ғилләһе әлләә? Йөклө сағында Нәфисә енән бер

көйәнтә ыу ҙа күтәртмәне ҡәйнеш, билла и ғазим, алдамайым. Тотош үҙе эшләне эште, килендәшем өйҙә генә, аш- ыу тирә ендә генә ҡыштырҙап йөрөнө. Ҡәйнеш, әлеге Хәйрулла ы кеүек, тимерсе ине. ай, ғәййәр ир ине ул!

— Өләсәй, әллә шул ҡәйнешеңә күҙең төшкәйнеме? Бабайың ҡарт булған бит...

— Кит, мынау бала, әллә ниндәй яҙыҡ үҙ әйттерер ең... Бүлмә әле. Эйе... Хәйрулла тыуҙы. Ҡәйнеш, дәртләнеп, яңы өй буратып ташланы. Уға ни, өнәре булғас, күп кешенең көнө төшә, бергәләштеләр. Шунан донъялар буталып алды, әртил тигәндәре башланды. Мал-тыуарҙы ойоштороrға тотондолар. Ҡәйнеш шул тимерлегендә эшләй бирҙе, хәҙер инде – әртилгә. Тотош өйлә әң, оҙаҡ... Нәфисә килендәш менән бер фермала ыйыр ауабыҙ, йәй көнө йәйләүҙә ҡуна-төшә йәшәйбеҙ. Күңелле. Минең дә апаруҡ йәш саҡ, ҡырҡҡа кермәгәнмен. Шул йылды...

— Шул йылды Белорет тауҙарынан минең олатайым килеп төшкән, ҡурай тартып! — Ай! Ысҡынды бит телем, өләсәйем үпкәләр инде?

— Эйе шул! Гәү әрем тыуырға, мына инең кеүек алтын киҫәге яралырға була килеп төштө шул Биләрит тауҙарынан минең насибым — Абдрахманым.

ы, сер бирмәне, маладис, бала хөкөмөндәге өләсәйем. Иркәләп кенә шулай өйләнеп ала ул, ә үҙе, кәрәк саҡта, хәтәр зи енле, хәтәр ныҡлыҡай. "Оло көндәшенә шул йомшаҡлығы менән ярағандыр..." – тип әллә маҡтап, әллә хурлап ала уны ҡай ы ваҡыт Рәйхана ҡартәсәйем. Йомшаҡ уҡ бул а, орден ала алмаҫ ине әле?!

— Өләсәй, орден алыуҙарынды төшөрөп ҡалдыр. Хәйрулла ағай менән Фариза еңгәне оноттоң? — тип теге йомғаҡты таҡыр юлдан төшөрөп ебәрҙем тағы.

— Иркәләттеләр Хәйрулланы, артыҡ әстүкләнеләр. Йәйләүҙә беҙгә эйәреп йөрөнө ул. Гәү әрем дә шунда буй еткерҙе. Толомдарын Күрәнле ыуында күпертеп йыуып, икенән үреп ебәрер ине... — Тамаҡ ҡырып алдым ошо урында. иҙә өләсәкәйем, тағы миңә кәрәк үҙҙе юллап ала: – Шунан Нәфисә килендәштең аяҡтары ырматиз булып ыҙлай башланы. Ҡыш фермала боҙло ыу кисеп йөрөйбөҙ, эрзинкә итек менән, нисек ауырымай ың. Йәш кенә бер ҡатын төбөркөлөзгә һабышып үлеп ҡуйҙы. Килендәшемдең гөп шешеп китә аяҡтары, ауыртыуы йөрәккә төшә, ти торғайны, меҫкенкәйем. Эшләй алманы фермала бүтәнсә, ирәк- аяҡ башҡа берәй эштә ҡатыша ине, бойҙай утауҙамы... Ә мин аман ыйыр ауҙым, колхоз ойошҡандан алып уғыш бөткәнгәсә эшләнем шунда. Ә-ә, Хәйрулла?.. Ул ни, матур егет булып үҫте лә етте. Үҫеп кенә еткәйне, әлеге уғыш башланды. Ата ы эргә ендә тимерлектә йөрөп, оҫтарып ҡына бөткәйне, әрмегә фарман килде. Ҡырҡ өсөнсөлә, шикелле. Ярай ҙа, Алкин стансаһында, Өфө яғында, алып ҡалып, Силәбегә ебәргәндәр, завод эшенә.Тимерселеген белгәндәр әллә? Хөкүмәттең дә йөрәге бар, күҙе барҙыр ҙа а, берәүҙәрҙең берҙән-бер улы, тигәндер, ут эсенә алып барып керетмәгән. Әй, минең уландарым ғәзиз түгелме ни, баштарын алдылар... Дөмөккөрө, ләғнәт төшкөрө Гитлер!

— Төшкән уға ләғнәт, дөмөккән ул Гитлер күптән!

— Беләм дә... Бәғерем теленә, сыҙар әмәл юҡ. Нишләр инем, Гәү әрем булма а?! Ғәҙилә кеүек ултырыр инем, дөм хыялыйға әйләнеп. Әй... Хәйрулла, ти ең бит әле. Нимәгә шулай ныҡыша ың әле, балаҡай, ни хәжәте иңә ул хәбәрҙең?

— Фариза еңгәнән китап барып алдым, тием дә ә, шуға ҡыҙыҡ ынып киттем. Ҡарт түгелсе ул еңгә әллә ни? Хәйрулла ағайға текләп ҡарағаным юҡ, ҡасан күр әм дә, ҡара ҡоромға буялып йөрөй.

— Тимерсенең ни, бите ҡором була инде. Минең ҡәйнеш тә, мәрхүм, гел шулай... — Өләсәйем тағы үҙен үҙе туҡтатты: — Әй, бер иҫләй башла аң, туҡтамай өс көн, өс төн иҫләргә булалыр... Ә Хәйрулла Фаризаны Силәбенән етәкләп ҡайтты. Ҡайтыу менән тимерлеккә сыҡты, уғыш осоронда унда ата ы эшләп торғайны.

Бөтә ауыл менән шаҡ ҡаттыҡ та ҡуйҙыҡ: һыу өлөгө кеүек егетебеҙ үҙенән оло, балалы ҡатын алған. Ауыл тулы йәп-йәш тол килендәр ултыра, ҡыҙ-ҡырҡынға кейәү юҡ, ә был?!

— ылыу ҙа инде Фариза еңгә?

— ылыулыҡҡа ылыу, ул сағында бигерәк тә унан күҙҙе айырып алып булмай ине. Баштараҡ килендең Хәйрулланан өлкәнерәк икәнен дә белмәйерәк торҙоҡ... Үтеп китә ауыл урамынан — өлгөргәне йүгереп сығып ҡарай, өлгөрмәгәне тәҙрәгә ҡаплана.

— ыбайлы төшөп ҡарай, йәйәүле ятып ҡарай, тип тә ебәр әң, өләсәй?

Шул һүҙ ыңғайына, гүйә лә, минең күҙ алдымда тағы серле пәрҙә асылып китте лә ғәжәйеп ваҡиғалар пәйҙәләнде: өләсәйемдең көйлө тауышы, мауыҡтырғыс тасуирҙары артынан эҙ яҙҙырмай эйәреп, уның хәтер даирәһендә түгелмәй-сәселмәй һаҡланып ҡалған сәхифәләрҙе тергеҙәм, имеш.

...Хозур йәйге көн. Кәнсәләр ихата ындағы бейек бағана башына эленгән ҡара көләпәле радионан моң ағыла. Аяҙ күктән көлтә-көлтә нур яуа. Баҫыу яғынан иҫкән ел тан ыҡ еҫ тарата: арыштар баш ҡоҫа. Башаҡты өҙөп сәйнәп ҡара аң, ауыҙыңа ҡаймаҡлы ағыҙ тула, ашлыҡтың ыуыҙ мәле. Ә ауыл урамынан бер ылыу ҡатын атлай. Уға ҡарап, гүйә, бар тирә-яҡ арбалған: ҡоштар, осоуынан туҡтап, ауала ҡанаттарын бер урында зырылдатып тора, өй алдындағы емешкә төйнәлгән алмағас кәртә аша сығырҙай булып ботаҡтарын тышҡа уҙған, ҡапҡа төбө айын баҫып торған әбейҙәрҙең, бала-сағының күҙҙәре шар булған. Был минутта әр өйҙөң, әр тәҙрәнең, хатта ки әр бағананың күҙе бар ымаҡ, — булыр ҙа булыр, быңдай ҙа сибәр булмаҫ! Баҫып килеүҙәре — юлдың бөртөк саңын да ҡуҙғатмай, әллә аяҡтары ергә теймәй? Маңлайындағы сәс бөҙрәләре, ҡарлуғас ҡанатылай елпенгән ҡыйғас ҡара ҡаштары күңелде елкендерә, уның ҡаршы ына йүгереп сыға ы килә! Сығыр ың бына — эргә ендә ыласыны бар был матурҙың: Хәйрулла ы. Ана, ул киң яурындарын киреп, башын текә тотоп ҡурсалап килә кәләшен.

Әле берәү ҙә белмәй Фаризаның Хәйрулланан олораҡ икәнен, тәжрибәлерәктәре иҙен ә лә, ун йәшләп айырма барҙыр, тип башына ла килтермәй. Ике-өс йәшкә, бәлки... Әле бөтә әҙәм килендең муйыл ҡара күҙҙәренә, оҙон керпектәренә, ынйыы тештәренә оҡлана. Бәғзеләр көнләшеп тә ҡуя: эләктергән беҙҙең аҫыл егетте, сибәрлеге менән ҡыҙыштырған, тип.

Ә бер көндө, йыландай ыҫылдап, ғәйбәт тарала: ҡарт бисә, үҫеп бөткән улы бар икән, әсәһендә ҡалдырған. Ирен ташлап, Хәйруллаға йәбешеп килгән. Йәше утыҙҙан уҙған, тисе. Ул йәштә йүнле ҡатын өләсәй булырға йыйына башлай. әм- әм- әм... — ямғырҙан уң ҡапыл тупырҙашып килеп сыҡҡан ағыулы бәшмәктәр кеүек, үрсей генә ләстит.

— Нәфисә килендәш улай я ил ымаҡ түгел инесе, кеше үҙе кеше үлтерә, тигәндәй, тик торғандан Фаризаны кәпкәкләргә тотондо. Көн юҡ бахыр киленгә. Ә ташлап ҡайтып китмәй Силәбе енә, түҙә.

Өләсәйем үҙенең хәбәренән тәм табып өйләй, теш еҙ ауыҙын сәпелдәтеп, төкөрөгөн йотоп ебәрә ара-тирә. Баяғы пәйҙәләрҙән арынып, тағы уның хәтер йомғағы артынан эйәрәм.

...Колхоз бер ваҡыт, һуғыш бөткәндең икенсе йылына, Саҡмайылға тигән ерҙә, тау ара ында, башмаҡ имертеү ферма ы төҙөнө: малды яҙҙан ҡыуып алып китеп, ҡыш та шунда тотоп, икенсе көҙгә генә уғымға алып ҡайтырға. Ә унда эшләргә кемде ғаилә енән айырып ебәрергә? Йәшәргә тигән өйҙөң бура ы ғына әҙер, бер йәй эсендә күтәртеп, башын ябып инә е бар, ти. Йәш-елкенсәктең ҡулынан

килмәҫ? Башлыҡтар шулай баш ватып ултырғанда, Хәйрулла үҙе килеп ризалығын белдергән.

— Ә тимерлектә кем ҡала? — тип аптырайҙар.

— Яҙғы сәсеүгә сәскес-тырмалар әҙер, көҙгә тиклемен күҙ күрер. Ана, атай ҡарт эшләп торор, әкренләп...

— Ярҙамға ике егетте бирәбеҙ, йорт-ҡура күтәрешергә, ә ҡышҡы ын үҙегеҙ генә ҡала ығыҙ инде. Киленде эйәртә еңдер?

Килешәләр. Хәйруллаға башмаҡтарҙы ышандырырға ярай, илап ҡалырға баласаға ы ла юҡ.

Бер көтөү башмаҡты әйҙәп китәләр. Барып ет әләр, ҡырағай урман,ти. Мал өсөн иркенлек: түңәрәк яландар, саф ыулы йылғалар, тирә-яҡта бейек тауҙар. Башмаҡтарҙы өйөрөп кенә йөрөтөп көтөргә уңайлы. Ялан кәртәнең бағаналары ҡағылған, айғауҙары тырым-тырағай ята әлегә, ҡағып ҡуя ы бар. Ферма арайы мүкләп күтәртелгән, ҡышҡылыҡҡа иҫәп тотоп, башы ла ябылған, ә тәҙрәләре ҡуйылмаған. Быяла килтер әләр, уны ын Хәйрулла ә тигәнсе эш итер ҙә ул... Бына үҙҙәренә тигән өйҙө нисек өлгөртөргә? Бөгөндән көн күрә башларға ла берәй мөйөш кәрәк тә ә.

Өләсәйем, ошо урында туҡтап, аласыҡҡа сығып әйләнде. Самауырының торба ына сыра тоҡандырып тыға ла килә ул. Ҡойо ыуы, үле күмере әҙер генә. Шуға алдынан алып, үҙем эшләйем, тип икереп торманым: аяҡтарын яҙып йөрөп ал - ын, ҡан йүгертеп, үҙе әйтмешләй. Ана, килде лә әйләнеп.

— Иҫемә төштө, әле самауырҙың мөрйә ен ҡуйып тор ам, ҡылт итеп иҫемә төштө: барҙыҡ бит беҙ унда, Саҡмайылғаға, — тип дауам итте өләсәйем (фекеренең ебен юғалтмаған әлдә). — Нәфисә килендәш өгөтләп алып китте. Ҡәйнештән йәшерҙек, йәнә е, еләккә йыйындыҡ. Әй, тупар еләге уңғайны ул йылды, бер урынға сүкәйеп ал аң, шул тирәнән генә уратып йыйып, биҙрәнде тултыра ың да ҡуя ың. Яҡында ғына, Ҡырластау битләүендә лә, суҡмарылып ята еләк, ә беҙ ары киттек. Унда Әхмәҙин энекәш көтөп тора, ат егеп. Урман ҡарауылсыһы сағы. Ҡәйнеш тә алып барыр ине, тимерлеккә тәғәйен ат бар ул, уға әйтмәнек бит инде. "Ана, ыйҙырмай инең киленде, хәҙер ҡойроҡ болғап барырға итә еңме?" — тиер ҙә ә Нәфисә енә.

Барып еттек. ай, сәхрә! Яландар мәтрүшкә еҫенә тулған, баҫырға йәл — аяҡ аҫтында шау ғына сәскәлек. Беҙҙең ыйырҙарға был үлән эләк ә, икешәр биҙрә өт бирерҙәр ине! Эйе... ирәк кенә ҡарағай ара ында ҡыуыш ғәләмәте ултыра, алдында уйыр таштарҙан мөрйә еҙ мейес ымаҡ бер нәмә әтмәләнгән, өҫтөнә ҡалын яҫы тимер һалып ҡуйылған. Бүреһуҡҡан энекәш атын туғарып, юшатырға ҡуйҙы ла, анауҙа сәтләүеклек бар ине, иҫән микән, ҡарап әйләнәйем әле, тип ашығып китеп барҙы, беҙ теге ҡыуыш яғына ыңғайланыҡ. Дүрт эре бағана ҡаҡҡандар ҙа, кәртәмәртә менән тоташтырып, алабаш йүкә енең ҡайыры менән көпләгәндәр, башына уртаға ярылған айғау теҙеп, бесән менән ҡаплағандар — ҡыуыштары шунан ғибәрәт. Эсенә керҙек: кергәс тә сымыры ғына урындыҡ тора, уртала дүрт аяҡлы өҫтәл, мөйөштә ике — бөтә е лә яңы ғына юнып эшләп ҡуйылған. икегә турпыша ябылған, юрған-яҫтыҡ та күренә. Өҫтәл яланғас, урта ында сәскә ҡуйылған ҡалай ауыт тора. Урындыҡта ултырабыҙ, ушыбыҙ китешеп.

— Йәй көнө йәшәргә була инде, сәхрәлә... — тип ҡуйҙы Нәфисә килендәшем. Шунан ҡапыл ҡыуыш урта ына барып баҫты ла «Бейеш»те йырланы ла ебәрҙе:

*Йәйгелеген индә йәйләнем дә,*
*Ҡышҡынайын ҡайҙа ҡышлайым...* — тип.

Харап та матур ине уның тауышы, килендәшкәйемдең. Ныҡ йәне көйгәндер инде бер бөртөк улыҡайының ошолайтып көн күреп ятыуына. Ауылдың иң хә-

йерсе әҙәме лә иң ауыр заманаларҙа ла былай, ҡабыҡ ҡыуышта, йәшәмәнесе. Балбабайҙың йүкәлектә бар ине ҡыуышы, уң ул бит өс көнлөк, умарта күсергәнсе генә.

Ул арала килен ялтырап килеп инде ҡыуышҡа. Барыбер донъя ылыуы инде уныһы. Ике биҙрә мөлдөрәмә еләк тотҡан, башына сәскәнән таж үреп кейгән. Өҫтөндә барсалы ситса күлдәге — тегә лә бит ул, эйәрткән бирнә е лә – теген машина ы. Кешегә текмәй, Татар инәйҙең кәсебен алмайым, тигән. Ә нәҫел-нәсәпкә теккеләй. Эйе. Килеп керҙе Фариза килен, таң ҡалды беҙҙе күреп. Самауыр төтәтеп ебәрҙе, анау әшәүәт еҙ мейес ишаратында ҡоймаҡ ҡоя алды. Етеҙлегенә күҙ эйәрмәй! Нәфисә килендәш миңә ҡарап ҡуйҙы, ул да килененә оҡланып ултыра. Юҡ шул, ғәфү итә алмай уның улынан унлап йәшкә оло булыуын. Шуны иҫенә төшөр ә, ағыу эскәндәй, сырайы сирылып, бер ағарып, бер буҙара ла китә.

— Хәйруллам арғы көтөүлектә, шул яҡта еләк йыйҙым бына, уға төшкөлөккә ризыҡ алып барғайным, — тип сутылданы Фариза килен. — Ҡай ылай йәпле булды, ҡәйнәм, иветә, Зөлхизә инәй?

– Эйе шул,– тигән булдым.

Уңарсы тирә-яҡты ҡыҙыра алып байҡап, Бүре уҡкан энекәш килеп етте, гәпкә ул оҫта, әүетемсә генә өйләшеп сәй эстек.

Киске ауынға өлгөрәйек, тип ҡайтып киттек, төшкө өн былай ҙа әхирәттәргә ышандырып киткәйнек. Берәр биҙрә әҙер еләк тотторол ҡайтарҙы беҙгә Фариза килен...

Ике ҡыш шунда, Саҡмайылғала, торҙолар. Теге өйөн эш итеп кергәндәр инде. Унда ферма яйлап киңәйеп китте, малы үрсене колхоздың, тағы ике ғаилә күсеп барҙы. Нәфисә килендәштең аяҡтары ыҙлап, йорт эсендәге эш-көш тә ҡулынан төшә башлағас, ҡәйнеш тә тимерлектәге ауыр эштән йонсоғас, былар Хәйрулла менән киленде ҡайтарырға уйлашты.

Фариза килен ныҡ торған. "Саҡ башымды йырып алдым ундағы ләститтән, ҡайтмайым, — тигән. — Артымдан, күрә алмай, ут көйҙөрөп ҡарап ҡалалар, сыҙар хәлем ҡалманы, әлдә ошонда, ожмахҡа, юл асты Хоҙай", — тип тә өҫтәгән.

Миңә ошо урында тағы әллә нимә булды. Күҙ алдымда алыҫ ағымдар төҫмөрләнде, үҙем дә һиҙмәҫтән шунда инеп тә киттем, гүйә.

...Ауыл урамынан ылыуҙарҙан- ылыу Фариза еңгәм китеп бара. Уның артынан ир еҙ тилмергән, шунлыҡтан микән, урты тулы зә әр ағыу булған тол ҡатындар, ҡарт ҡыҙҙар нәфрәтләнеп ҡарап ҡала. Бына бере енең, иң көнсөлөнөң, әллә күҙенән, әллә ауыҙынан бер көлтә ялҡын сығып, еңгәнең итәгенә икерҙе. Ул әле иҙмәй, башын юғары тотоп атлай бирә. Ә ут өҫкә үрмәләй, толомдарын өтә, арҡа ын ялмай. Фариза еңгәм ут зә әренә түҙмәй, ҡысҡырып ебәрә: “А-а-ай!”

— Йә, Хоҙай, тим, нишләүең, Нурия, сеү?! өйләмәйемме? Етер, эш ҡалдырып, сәғәт буйы хәбәр атып ултырабыҙ.

— Юҡ, юҡ, өләсәкәй, өйләп бөт, бер башлағас!

Маңлайымды тотоп ҡара ам, янып бара. Әллә ауырыйым? Хыялый шикелле, тәьҫиргә бирелеп, ҡысҡырып ултырамсы...

Барыбер әлеге хыялыйлығымдан сыҡкым килмәне, ҡыҙған маңлайымды өләсәйемдең яурынына терәнем дә, уйыма тағылып, тағы Саҡмайылғаға елдем.

...Әллә ҡайҙарҙағы Силәбенән өйгәнем тип килеп, урман ара ындағы ҡабыҡ ҡыуышта ожмах тапҡан ылыу еңгәмде мин, игеҙ йәшлек остоҡай, бөтә күңелем менән аңлайымсы? Бәй, мин дә бит — ҡатын заты! Еңгәмдең йөрәк яныуҙары бар булмышымды дер ҡалтырата, яр ыу кисерештәре зи енемде айҡай. әм ҡапыл, ысындай, үҙемдең бәләкәй кәүҙәмдән һыпырылып сығам да омғол, матур ҡатынға әүерелэм. Мин — Фариза. Минең ихтыярым ныҡ, ғорурлығым көслө. Телә әм,

алдымда тауҙар тубыҡланыр, сәмем таш ярыр! Мин бер ниҙән дә, бер кемдән дә ҡурҡмайым, сөнки янымда ыласындай йәрем бар.

Сеү! Арба тәгәрмәстәре дыңғырҙай, дөңк-дөңк итеп дегет биҙрә е хәбәр алып килә: Фариза, инең ожмахың тар-мар ителәсәк!..

Ҡайным икән. Беҙҙе, Хәйрулла менән икебеҙҙе, алырға килгән. Ҡайтығыҙ, бергә йәшәрбеҙ, тимәксе. Йәшәп ҡараныҡ бит инде? Әммә ҡайным миңә ҡарамай ҙа, әйтер ең, юҡмын бында, ғөмүмән, донъяла юҡмын, ул улына ғына төбәп өндәшә:

— Йыйын, ҡайт, мин тимерлектә эшләр йәштә түгел, әсәң сирләй. иңә тип көткән донъя, йыйған хәләл мал бар, йөрөмә елгә еленләп, боҙға быҙаулап, сыпранлаған алама ыйырҙай. ( ыйыр тигәне мин — Фариза инде, аңлап торам.) Йә, ҡуҙғал тиҙерәк!

Хәйруллам, ба адир ынлы йәрем, башын эйеп баҫып тора, маңҡа малайҙай булып. Кешегә нимәнелер биреп еткермәйҙер шул был Хоҙай, Хәйрулламдың ҡулы алтын, йөрәге ҡайнар ҙа — ихтыяры йомшаҡ. Ата-әсә енә тик бер тапҡыр үҙ шартын ҡуй асы!

— Киленде лә эйәрт, — тине ахырҙа ҡайным. Хәйрулламдың яурындары яҙылып китте, күҙҙәре нурланды: тәтәйен тартып алмайҙар икән был сабыйҙың.

Беләм, үкенермен. Илармын. Бәгеремә ҡан ауыр. Ләкин үҙемдең, теләгән ергә ҡыуалап эйәртергә, мал түгеллегемде лә беләмсе! Көйө килгәндә уйнап, килмәгәндә ырғытып ҡуя торған сепрәк ҡурсаҡ та мин түгел. Үҙ бәҫемде, үҙ ба амды юғалтмау миңә бар нәмәнән зарур. Мин — ҡатын, ир-аттан бер генә ерем дә кәм түгел!

Үҙ яҙмышымды үҙем хәл иттем:

— Бер ҡайҙа ла ҡуҙғалмайым. Көткән донъям бар, эшем бар. Быйыл йәш таналар килтереп бәйләргә торалар, ауынсы булып ҡалам.

— Донъяң бар, эшең бар, ә ирең — бармы?

— Уны ын, ҡайным, ул үҙе әйт ен... Минең менән ҡал а — булыр ирем, ҡалма-а...

Яр ып китеп, артығын әйттем, аңлайым. Әммә кире сигенә ем юҡ! Мин бит алыҫ ҡаланан уға ышанып килдем, ир тапмағанға түгел, яратҡанға. Трудәрмис ирҙәр унда, хәрби заводта, быуа быуырлыҡ ине.

Эйе, артығын әйтеүемдең шундуҡ алдым әжерен. Хәйрулламдың көрәктәй ҙур ҡулдары йәл булып ҡалтыранып китте, тауышы, ер аҫтынан сыҡҡандай, ҡарлығып сыҡты:

— Ҡалма а, ана ғына әүеректәр, ә? (Ошонда мал көтөп йөрөгән егет йораттарын әйтә.)

Их, ошо үҙенде телеңә сығарма аң, ни тиклем эстән ныҡ булырға тырыш ам да, кире сигенә башлағайным инде, Хәйруллам. Ата-әсәң олоғайған, бүтән кемдәре бар, ләстит тә баҫылыр әле бер заман, тип, үҙемде ауылға ҡайтырға күндерергә тотонғайным... Ә ин?! Миңә шик ташланың? Атаң алдында, ул хәҙер ни уйлай?

— Эйе, шул әүеректәр менән ҡалам, — тинем. — Йәш ирҙәрҙе әүрәтеп өйрәнгән баш, — тип өҫтәп ҡуйҙым, етмә ә.

Аталы-уллы ҡайтты ла киттеләр. ындары күк монарға инеп юғалғансы арттарынан ҡарап ҡалдым. Хәйруллам, исма ам, бер тапҡыр башын минең яҡҡа борманы...

Ул ҡыш шөкәт еҙ килде. Буранлай ҙа буранлай. Ферма ҡапҡа ынан өй ҡапҡа - ына арҡан баулап ҡуйҙым, шуға йәбешеп барам эшкә бәғзе күҙ аҫҡы ыҙ буран көндәрҙә. Ярай ҙа, көтөүсе Сәғәҙәттең бисә е Хәтимә күп итеп кәзә мамығы алып килгәйне, шуны тетеп, иләп-бәйләп бер булабыҙ ҡышҡы оҙон төндәрҙә. Әйбәт ул Хәтимә, бер ҡатлы, шул арҡала күп үҙ өйләп йәнемде лә көйҙөрә ҡай саҡ.

Хәйруллама кәләш алып биргәндәрен унан ишеттем.

— А !..– Күкрәгемдең иң төпкөлөнән, тәрәндән (ундай уҡ тәрәнлегем барын әлегәсә белмәй инем?) урғып, ҡубарылып сыҡты был ауаз. Уф, әлеге шул ишеткән бер хәбәрҙе күҙ алдыма килтереп, күңелемә ала торған сәйер ғәҙәтем... Әммә үҙемә харап та оҡшай ул халәтем – нисәләр минутҡа ғына булһа ла икенсе бер донъяның пәрҙәһен саҡ ҡына асып ҡарағандай буламсы?

— Нурия, һапамды, тим! — Өләсәйемдең ҡото осҡан. Унын ыңғайына минең дә осто ҡотом, тиҙ генә бит-башымды, тәнемде әрмәп сыҡтым: үҙеммен, ҡаҡса бер ҡыҙсыҡмын. Ә Фариза еңгә? Әле, моғайын, үҙем бәләкәс булғас, аҡылым да әллә ни ҙур түгелдер, әммә шул аҡылым да еттесе миңә унын хәлен аңларға. Теләктәшлегем шул дәрәжәлә көслө булдымы, баяғы ауазды бар иткән тәрәнлектә йәшеренгән берәй ҡөҙрәт мине юрамал ынап ҡаранымы — белмәйем, саҡ ҡына бул а ла кисерҙем ымаҡ Фариза еңгәнең шул мәлдәге күңел ғазабын...

— Әй, ошоно, ҡурҡаҡ бәрәс, шаяртам да инде, — ти алдым минең "а ”ыма аман да ҡойолоп төшөп торған өләсәйемә. – Үҙең дәһә шулай оҫта бәйән итәһең (бәс, бәйәнселегем менән мин уға тартҡанмынмы?)

Артабан өләсәйем тарихты ҡыҫҡа тотто.

...Бер ҡыш йәшәгән дә яңы кәләше менән, уны ташлап, Хәйрулла ағай кире Фариза ына, тәүге енә, ысҡынған – Саҡмайылғаға. Ә теге кәләше вербовка менән ҡайҙалыр ҡырға китеп барған, ғәрлегенә сыҙамай. Ике йылдан Ғәйнулла бабай вафат булған. Хәйрулла ағайҙы ауылға өгөтләп ҡайтарып, тимерлеккә эшкә ҡушҡандар. Колхоз, тотош халыҡ тимерсе еҙ ҡала алмай ҙа а. Фариза еңгә аман эйәреп ҡайтмаған. Хәйрулла ағай уны көткән-көткән дә өсөнсөгә өйләнгән. Яңғыҙ йәшәй алмай инде ул ир-ат (бынынһы – үҙе бер йомаҡ). Толпарлыла берҙәнбер яңғыҙаҡ бар, ул да булһа – Иҫәр Әсән, ә ирһеҙ ҡатындар быуа быуырлыҡ.

Яңы ҡатыны менән Хәйрулла ағай арыу ғына йәшәп алып киткән. Малайҙары тыуған. Тик... Көндәрҙән бер көндө Толпарлыға Өфөнән театр килгән. Беҙҙә ундай ваҡиға ифрат һирәк була, төпкөлдә ятабыҙ бит инде, юл юҡ. Клубҡа халыҡ бөтә күрше тирә-яҡтан йыйылған, Саҡмайылғанан да килгәндәр – ул бәләкәс кенә бер ауыл булып бара. Фариза еңгәм дә ҡалмаған, килгән, Силәбе ендә, ҡала ерендә, кейә торған ҡыҫҡа еңле ебәк күлдәген, бейек үксәле туфлийын кейеп. Тағы бөтә әҙәмдең күҙе унда – театрың ситтә тор он. Хәйрулла ағай шул кисте үк еңгәне Саҡмайылғаға оҙата киткән. Ә еңгә уны юрамал ҡыумағандыр, үс итеп әлеге йәш бисә енә? Бер аҙнанан ғына әйләнгән ауылға ағай, тәғәйенле эше бар бит. Бәс, бисә е ул арала үҙенең әсә енә ҡайтып киткән. Үсегеп. Шул ғауғаларға ҡайғырыпмы, Нәфисә инәй бигерәк бирешкән, аяҡтан ҡалған, былай ҙа саҡ йөрөгән бит инде. Күп ятмаған, донъя ҡуйған. Ҡәйнә е ятаҡланып киткәс, баяғы үсексән килене кире ҡайтҡан, тағы бергәләшеп йәшәй башлағандар. Ишле нәҫелдән булған ул килен, дүрт аға ы килеп, Хәйрулла ағайҙы дөмбәҫләгән, тип тә өйләйҙәр. Әммә, нисек ит ә иткәндәр, ахырҙа кейәүе менән еңлеләрен Белоретка күсергәндәр. Бында йәшәй алмаҫтарын беләләр ҙә ә.

Ят ерҙә донъя ҡорор булып ниәтләнгәс, Хәйрулла ағай тыуған йортон ҡырҙан килгән ветеринар ғаилә енә атып киткән. Ә инде бер йылдан, уларҙың районға күсенеүҙәрен ишетеп, Фариза еңгәм сослоҡ күр әткән: өйҙө кире үҙе аҡан да алған ветеринарҙан. әм Толпарлыға күсеп ҡайтҡан. Боло ла булғандыр, колхоздың эш хаҡына ҡарап тормағас, йылына унар шәл бәйләп атҡас...

Ошо тәңгәлдә Фариза еңгәмә ҡарата үпкәм дә ҡабарып ҡуйҙы кеүек: ике бисәгә үк еткермәҫкә ине иренде, ҡайның вафат булғандан һуң да ҡайтмағанһың, артыҡ наян ҡыланғанһың?!

***

Ҡалғанын өләсәйемдән өйләтеп тә торманым. Хәйрулла ағайҙың Фариза еңгәгә аҙаҡҡы әйләнеп ҡайтыуына үҙем ша ит. Хәҙер ташлап китмәҫ инде еңгәне, өйҙөргөс эскәс?

Их, шул өйҙөргөстө нисек ҡулға төшөрөргә?

ылтауым бар ҙа а: китапты уҡыным, шуны алып барып биргән булайым да, берәй яйы килеп сығыр, бәлки, үтенесемде әйтергә?

"Беҙҙең өйҙөң йәме"н йотлоғоп уҡыным.Үҙемде кескәй Оксана итеп тойоуы миңә һис кенә лә ҡыйын булманысы – ҡыҙғандым да, һоҡландым да... Их, яҙыусы бул аң ине лә шулай оҫта итеп теҙеп яҙ аң ине! Ә нимә хаҡында яҙырым икән? Бәс, ана ла а Фариза еңгәмдәр яҙмышы, әҙер тарих...

Ике көн саҡ-саҡ түҙҙем дә киттем Әнкәләр осона, ни булһа ла булыр, ниәтемде ташлап ҡуяһым юҡ.

— Оҡшанымы? — тип ораны Фариза еңгә, күҙемә ынап ҡарай үҙе, әлләшикләнә. — инең йәшендә, ғәҙәттә, әкиәт уҡырға әүәҫ булалар.

— Әкиәт? Миңә өләсәйем менән ҡартәсәйем сәңгелдәктә ятҡан сағымда уҡ өйләп бөттөләр инде Урал батыр, Аҡъял батырҙар тура ында. Саҡ менән Суҡ бәйеттәрен...

— Ә Мәскәй әбей хаҡында? — ти еңгә, йылмайып.

— Мәскәй әбей, үгәй ҡыҙ, аҡалы мең ҡарыш, үҙе бер ҡарыш яуыз кәрлә... Шәрифә апайым оҫта ул әкиәткә, "Ҡырағай аҡҡоштар" тигәнде йөҙ ҡабатла а ла, тыңларға әҙер инем.

— Мин иңә, бына, әүбән менән Нәркәс тура ындағы китапты әҙерләп ҡуйҙым. Уҡығың киләме? Мә. — Еңгә миңә тамбур ебе менән тегеп төпләнгән ҡалын дәфтәр тотторҙо. Тышына ҡыҙыл ҡәләм менән «Аҡбуҙат» тип яҙылған.

— Ҡулдан яҙылған?

— Эйе, элек, китап юғыраҡ заманда, күрше апайҙан күсереп алғайным. Ул бик уҡымышлы ине, кемдәндер өйләтеп яҙып алғайны был тарихты. Иҫем китеп уҡыным, донъяла шундай мөхәббәт булмайҙыр, тип. Әкиәттер, тип...

— Әкиәтме, әтеү? Мөхәббәт юҡмы? — Дәфтәрҙе әле асып та ҡарама ам да, еңгәнең серен белгем килә: өйөүе ысынмы беҙҙең Хәйрулла ағайҙы? Теүәлен генә белмәһәм дә, дөм һиңмай түгелменсе – әҙәм араһында йәшәйем дәһә, ҡолаҡ һалам: әҙәмдәрҙең иң ҡыҙығып, мөкиббәндәр китеп һөйләгәне — һөйөү, мөхәббәт, ғишыҡ.

— Әкиәти мөхәббәт яҙылған бында...Үҙең татып ҡарағас ҡына яуап табыр ың орауыңа, бикәсем.

— Татыма ам?

— инме? ин татыр ың, үтә күрәм — эсең тулы хис.

— Эсемдә шау эсәк-ҡарын да а? — Йәнә е, шаяртам.

— Ҡор аҡты әйтмәйем, эске халәтеңде, асылыңды әйтәм.

— Ә-ә?..

Юҡ, ошондай ҙа алсаҡ, миңә ышанып, мине тиң күреп өйләшкән ылыу еңгәм менән ике йөҙлө була алмайым! Дөрөҫөн әйтәм дә ҡуям.

— Фариза еңгә, һиңә ифрат ҙур йомошом бар...

— Әйт, ниндәй йомош? индәй өймәлекле бикәсемә ни алып, ни бирергә белмәй торам әле. Әйт!

— Бикәс кем, ҡәйен еңле буламы? — тип ораған булдым, аңлап тор ам да. Шунан тәрән итеп тын алдым да (ярҙан ыуға икергәндәге кеүек) ярҙым да алдым:

— өйҙөргөс эшләп бир, еңгә! Зин ар! Бик тә, бик тә кәрәк миңә шул өйҙөргөс!

— өйҙөргөс?! — Еңгәм ни көлөргә, ни асыуланырға белмәй торҙо ҡапылда.

— Эйе, өйҙөргөс, атайым ҡайта оҙаҡламай, уға эсерергә ине шуны. Китмә ен кире сит яҡҡа, әсәйемде уш ыҙ булып өй өн, башҡа бер кемгә, хатта ары сәсле, зәңгәр күҙле мәрйәгә лә, күҙе төшмә ен!

— Мин, әллә үҙең берәй малай остоғона ғашиҡ булған ыңмы, тип торам?

— Кит, еңгә, минең башым йәш тә ә әле...

— Кем әйтте иңә ул өйҙөргөс тура ында? Уйың үҙеңдән оло, бикәсем.

— үҙ эйә е менән йөрөмәй... Ҡартәсәйем шулай ти.

— Рәйхана апай әйтер. Шәп апай ул, шәп ҡатын.

— Ул миңә лә әйтә, шәп ҡатын булмаҡсы ың, ти.

— Әлүктән күренеп тора, булыр ың, бикәсем.

Мин Фариза еңгәгә шул тиклем мөлдөрәп, инәлеп ҡараным, ахыры ы, еңелде, ни айәт: "Ярар, — тине лә соланына сығып китте. Унда быяла шешәләр шалтыраҡан тауыш ишетелде. Күп тә үтмәй, еңгә бәләкәй генә ауыт килтереп тотторҙо. – Асма, ғәйрәте ҡайтыр, атайыңа өс тапҡыр ыуғамы, сәйгәме ҡушып эсерер ең. иҙҙереп ҡуйма! Кешегә өйләмә!" — тип иҫкәртте.

Түбәм күккә тейеп ҡайтып индем өйгә. Алан-йолан ҡаранып, өйҙөргөстө йәшерергә урын эҙләргә тотондом. Ҡайҙа ҡуй ам да, өйрәп килтереп сығарасаҡ игеҙәк туғандарым. Бигерәк тә Камила ы бутанып ҡына йөрөй... Баҙға төшөрөп йәшерҙем ахырҙа. Иң-иң төпкә, нигеҙ буйына күмеп ҡуйҙым. Ҡайт ын ғына атаҡайым, өйҙөргөс менән сихырлап, әсәйемә ҡуша йәбештереп ҡуйырмын үҙен — ныҡ итеп, мәңгелек итеп, айырылмаҫлыҡ итеп, вәт!

Баҙҙан сығып килгәнемдә өләсәйем күреп ҡалды, аласыҡ менән өй ара ында кәләп алып[3] йөрөй бит ул көн оҙоно. Күҙәтеп тор аң, үҙе бер мәрәкә. Аласыҡҡа инә лә: "Нимә тип керҙем әле ошо аласыҡҡа, әбә-ә", — тип оҙаҡ ҡына баҫып тора, шунан өйгә инә, унда ла: "Нимәгә керҙем әле?" — тип тағы үҙенән үҙе орай, кире аласыҡҡа йүнәлә әм, ярты юлда туҡтап, яңынан өйгә борола, тағы өйләнә: "Йәмкә менән оҫко кәрәк тә ә, аласыҡ мейесенең көлөн алырға ине, күпме тылҡыйым ошо Гәү әргә, Хәйруллаға әйт, шуларҙы тағы берәрҙе я атып алайыҡ, тип... Ҡат-ҡат ике арала тапанам, рәхәтме ни миңә?»

Бөгөнгө өн шулай онотоңҡора а ла, элекке ен ныҡ яҡшы хәтерләй өләсәйем. Әле минең баҙҙан сығыуға, нишләп унда төшөүемде лә ҡапылда орамай, ҡабаланып өйләргә тотондо ( үтелгән шул унының хәтер йомғағы ошо осор):

— Нурия, иң ҡыҙығын әйтмәгәнем теге юлы иңә, Хәйрулла тура ында, тим. Улар Саҡмайылғала ике ҡыш торҙолар, тигәйнемме? Ике йәй, ике ҡыш шикелле. Шулай бер саҡ, ураҡ өҫтө етеп килгән мәл ине, ыбай саптырып Хәйрулла килеп туҡтаны йәйләүебеҙгә. Төшкә ауымдан уң әҙерәк эш-көш менән булып йөрөйөм. Шул йәй серәкәйле булды, өт өҙөргә тигән марлыны ферма өйөнөң асмалы тәҙрә енә ҡуйырға йыйына инем.

— Хәйрулла ағай атынан икереп төштө... — Шулай тип үҙҙең айышына килтереп төшөрмә әң, серәкәйҙән себенгә, себендән тағы әллә нимәгә төшөп китмәҫ тимә был өләсәйем. – Әй, эйе лә ә, ашығып ҡына килгән. Йомошон әйтә алды:

— Зөлхизә инәй, атайым әйтә, Төхвәтулла ағайымдың иген уға торған шыбағасы бар ине, берәй ергә элеп ҡуйғандыр еңгәм, аҡсыл бит ул, ти.

— Шулай тиме, аҡсыл бит ул еңгәм, тиме, әй, ҡәйнешемде! Бар ул нәмә, нишләп ташлайым, ти, ҡомартҡыны.

— Инәй, күрергә ине шуны, ҡайҙа тора, әйт, ә тигәнсе ауылға барып урайым.

— Атаҡ, ул хан заманындағы ҡорамалдың ни кәрәге төштө?

[3] *Ике арала өҙлөкһеҙ йөрөп тороу. Тура мәғәнәһе: ике осо саталы кәләп таяғына иләнгән епте аяҡлау.*

— Иген сәстем быйыл, инәй, бойҙай, шуны уғырға кәрәк.

— Әстәғәфирулла, — тим, — хәҙер уның менән кем хитлана, машина уға ла а игенде.

— Инәй, Саҡмайылғалағы ун сүмәлә бойҙай өсөн кем комбайн бир ен? Йә, ҡайҙа шыбағасың — әйт тә, барып алам.

— Эшкинә микән? Сереп-туҙып бөткәндерсе...

— Мин уны ҡарайым ғына, яңыны эшләйем, тимерлеккә ыу сыҡмаған,– тип ныҡыша был.

Өйрәтеп ебәрҙем. Ул шыбағас аҙбар ҡыйығында йәпле генә бер мөйөштә ята, нисә йылдыр инде.

Хәйрулла атына менеп ауыл яғына сапты, ә мин йәш сағымды, Рәхмәтулламдың бәләкәй генә ваҡыттарын, Төхвәтулламды, ҡартыҡайымды, иҫләп ултырҙым...

Өләсәйем яулығын башынан сисеп, усын төкөрөкләп сикә сәстәрен ыпырып рәтләп, ҡайтанан бөхтә итеп ябынып ҡуйҙы ла йәйрәп китеп хәтерләй башланы. Ташлап сығып кит әм, үпкәләр, ултырайым әҙерәк тыңлап. Минән башҡа эсен бушатыр кеме бар тағы...

Бер тында ғына, өт сепараторы кеүек гөрөлдәп кенә сыға өләсәйемдең тауышы, шуға әллә иҙрәп йоҡлап киткәнмен. Төш тә күреп өлгөрҙөм шул арала.

...Көн аяҙ, тымыҡ. Таҡыр итеп еперелгән ырҙын табағында суҡайышып бойҙай көлтәләре ултыра. Өсәр-дүртәр көлтә, баштарын терәштереп, сүмәләгә ҡуйылған.

Бер апай менән үҫмер малай шул көлтәләрҙең билен сисеп, тағатып, ергә теҙеп йөрөй. Башаҡтар, керпектәрен асып, бер-бере енә ҡарап ятҡандай. Алъяпҡыс бәйләгән, башына аҡ яулыҡ сөйгән апай хас та әсәйем, ләкин барыбер ул түгел. Әсәйем улай кейенмәй ҙә инде: был апайҙың күлдәге оҙон, киң, аяғында сабата. Бәс, был минең өләсәйем дә ә! Уның йәш сағы. Ә теге малай Рәхмәтулла бабайымдыр? Ҡайҙан килеп сыҡтылар бында, мин нисек сырамыттым уларҙы — бабайымды күреп белмәйем дә инде. Ләкин шигем юҡ, тап ул йүгереп эшләп йөрөй ырҙын табағында.

Бына бер мәлде, елкәләренә ағас аплы нәмә күтәреп, ике ағай килеп етте. Бере е, олорағы, көлтәләр тағатылған түңәрәкте урап сыҡты, туҙыныбыраҡ ятҡан башаҡтарҙы рәтләне лә:

— Йә, Ғәйнулла ҡустым, ынап ҡарайым инең был ҡоралыңды! — тине.

— Таяҡ менән уҡкандан арыуыраҡ булыр әле, ағай.

Шунан "ҡорал" тигәндәрен тотоп ҡарап тикшерә башланылар икәүләп.

Йәше аңлата:

— Быны ы, оҙоно, апмы һап инде, тырма абы кеүек, был ҡыҫҡа ы — шыбағас, ҡайыш менән бәйләп беркеттем. Оҙон апҡа ҡайын яҡшы, ә шыбағас туҡмағына имән йә саған кәрәк. Туҡмаҡты шып-шыма итеп йыша ың, шырау-фәлән ҡал а, башаҡты эләктерә, эште боларта.

— Үҙең ҡушҡанса, Төхвәтулла, ун ике көлтәне сисеп алдыҡ, — тине ирҙәр эргә енә килеп баҫҡан баяғы апай, йәғни Зөлхизә өләсәйем. Ә Төхвәтулла ы — уның тәүге ире лә ә. Мәш килеп донъя көтөп, ашлыҡ уғып йөрөүҙәре.

Ирҙәр, шыбағас менән елтәнеп, бойҙай башаҡтарын туҡмарға тотондо. Бер-бер артлы, алмаш-тилмәш гөпөлдәтәләр генә. Әҙерәк эшләгәс, туктап, бойҙай а-баҡтарын ҡуҙғатып, елккеләп ҡаранылар.

— Ҡара әле, ҡустым, ашлығы ҡойолоп, аламы ғына ҡалып бара, — тип шатланып өйләнде өлкән ир. — Башаҡҡа ғына төшөрөргә тырышайыҡ был шыбағасты, аламы ныҡ тетелеп, саңға әйләнмә ен.

— Та ыллашырбыҙ яйлап, эштең башы ғына әле. Егермеләп көлтәне ике рәт ҡуйып, уғып ҡарарға ине?

— Ҡулың алтын, энекәш! Хәҙер тимерлегенде бикләп, ағас менән булашыр ың инде. Күр ҙә тор, бөтөн әҙәм иңә киләсәк был ҡорамалды орап.

— Ағай, шыбағасты тотош, бөтә кәүҙә менән, башаҡҡа барып төшөрлөк итеп уғырға кәрәк, ә, тауыҡ суҡыған кеүек, осон ғына тейҙереп алмаҫҡа. Бар көскә, ҡолас киреп килтереп бәр. Ә хәҙер аламды ситкәрәк этәбеҙ ҙә, — бына, ялтырап ята бойҙай, мәкинә ен елгәрергә генә ҡала.

— Былай күпкә ырамлы бит эш, ә? Таяҡ менән, ана, малайым уғыр, ҡул ара - ына кереп килә, ә үҙем ошо ҡорамалға яйлашырмын, иншалла. — Өлкән ирҙең ныҡ күңеле булғаны күренеп тора. — Кисә көткәйнем ине, килмәнең?

— Малик байҙың ат молотилка ын йүнәтештем. Ағас барабан эсендә әйләнеп торған тимерҙең тештәре ҡойолған, шуларҙы ҡуйҙым. Көнөнә йөҙ арба көлтәне уға ла бирә молотилка. Яңғыҙ кешенең эше түгел инде ул, хеҙмәтселәрең булма а...

— Нисә кеше, улай ҙа?

— анайыҡ әле! Ат ҡыуыусы, көлтә ташыусылар, уны тағатып, барабан тамағына ырғытыусылар, аламды өйрәп алып тороусылар — ун бишләп кеше. Быйыл көҙ матур килде, молотилка ырҙында түгел, баҫыуҙа эшләй, көлтә ташып этләнә е юҡ. Ишетә еңдер тауышын, ағай?

— Ишетмәгән ҡайҙа? Малик байҙың баҫыуы Толпарсыҡҡан күленән бирерәк, саҡрым-саҡрым ярым ғына бынан, молотилка ының үкереүе таң менән ҡолаҡты тондора башлай. Көнөнә унарлаған арба көлтә уҡҡас, ул Маликтың нисә бот ашлығы йыйылыр икән?

— Ярар, ағай, хәйерле сәғәттә, эшеңде башла. Мин үҙемдең ҡул молотилка ын ебәрәм иртәгә, килер ең. Икәүләп әйләндерергә кәрәк уны. иңә лә етешер, игенебеҙ уғылмай ятып ҡалмаҫ.

— Ҡәйнеш, тим, айран бул а ла эсеп кит! — Яулығын сөйөп ябынған ҡатын (сибәр генә булған икән дә өләсәйем) йәш иргә күпереп торған эсемлек алынған аплы сүмес ондо. — Бына үҙең эшләп биргән еҙ ижау, харап уңайлы, рәхмәт төшкөрө, ҡәйнеш...

— Нимә эҙләнең бая баҙҙа? — Өләсәйемдең орауына уянып киттем. Иҫенә төшкән, ә?

— Өләсәй, ин бер бабай менән ашлыҡ уғып йөрөнөң, яулығыңды сөйөп ябынып, — тим. — Төштә күрҙем, әле генә.

— Төш, тисе, апамды, шуны өйләп ултырам да а ҡасанан бирле. Нишләнең баҙҙа, бәс?

— Бесәй бала ы мыяулаған кеүек ҡолағыма салынғайны, шуны төшөп ҡараным. Юҡ икән, – тип алданым. өйҙөргөс йәшереп йөрөнөм унда, тиергәме ни, әтеү.

Эйе шул, бар минең ҡулда хәҙер ҡөҙрәтле сара — һөйҙөргөс!

## 5

Атайым ҡайтманы. Яңы ғына күгелйем-йәшел иген баҫыуҙары алтын ыу төҫкә инде. ыҙа буйындағы баландарға ал йүгергән, йыраҡтан уҡ күҙгә ташлана. Ураҡҡа төшмәҫ элек тип, бөтә халыҡ үҙенә бесән әҙерләй, колхозға тигәне күптән кәбәндә ултыра. Беҙ ҙә Зөлхизә яланында мәш киләбеҙ. Ҡартәсәйем менән әсәйем бесән саба, өләсәйем таған аҫып аш бешерә, сәй ҡайната. Мин туғандарымды ҡарайым. Улары тик кенә ултырмай, туйтанлап китә лә баралар, нимә тура кил ә, шуны өҙөп ҡабырға әҙерҙәр. Ас түгелдәр ҙә инде! Уф, мин шулай иңмай булма-

ғанмындыр! Күҙ яҙҙырмайым, йә берәй ярамаған нәмә йотоп ҡуйырҙар тип. Йоҡла алар тағы бөлә: күгәүен-фәләнде ҡыуалап торам. Әй, түҙерем әле, бесән эше оҙаҡҡа бармай ул, ямғыр ғына яума ын. Әлдә алыҫ түгел яланыбыҙ, йәйәү барырлыҡ. Ат алдырып йөрөр хәлебеҙ юҡ та а. Атай ыҙ...

Өләсәйем иң асыҡ урынға ултыра ла, күлдәген күтәреп, арҡа ын ҡыҙҙыра. Ҡыҙыҡ иттем әле уны: шым ғына барҙым да ҡалын тауыш менән " о!" тип ҡысҡырҙым. Терт итеп ҡалды. Мин икәнде белгәс, орошто:

— Кит, апа, ҡотто алды, ир-ат икән тип торам!

— Ниндәй ир-ат ошо хәтлем ергә килеп йөрө өн, инең сырыш арҡанды күрер өсөн (« апа» тимә ен).

Асыуланманы, көлдө лә тағы ҡабатланы:

— Мына апа ҡыҙыҡай...

— Исем таҡма, өләсәй, әтеү үсегәм. Ҡайтырым да китерем, ана, атайлы ҡыҙҙар Күрәнлелә ыу инеп рәхәтләнә...

— Яратып ҡына әйтәм дә ә, мәрхүмә әсәйем мине шулай ти ҙә тупылдатып өйөр ине, иҫән сағында. Йәшләй генә үлде шул... Үгәй әсә гелән мыҙыҡанан ҡырҡып торҙо, бала ғына көйөмә бабайға тоттороп ебәрҙе шунан...

— Ни тигән үҙ уң ул " апа"?

— Әлләсе. Үҙ әсәйем әйткәс, матур үҙҙер. Аҡ һөттөң апаһы – һауынсының һапаһы,тигәндәре лә бар...

— Мәүлиҙәне лә әсә е: "Кил әле, бисурамды, бер өйөп алайым", – ти ҙә йөрөй. Бисурамы ни матур үҙ?

—Әлләсе...

Шул мәл арыгүҙ уҫал итеп өрөргә тотондо, уны Бүреһуҡҡан олатай, иптәшкә тип, беҙгә эйәртеп ебәргәйне. Сабынлыҡ осондағы суҡ муйыл тирәһендә сабыулай ине, шунан килә тауышы. Ә муйыл төбөндә – ҡара йылан ояһы!

Бесәнгә төшөр мәл етһә, өлкәндәр мине бер тауыштан киҫәтә башлай:

– Муйыл янына барма, уның төбөндәге соҡорҙа, яҫы таш аҫтында, йылан бар, аслан тейеп ҡуйма!

– Ә ул саҡһа?

– Зыяның теймәһә, саҡмаҫ.

Барыбер шул соҡор тирәһендә уралдым, теге йыланды күрә-күрә йөрөнөм.Таш өҫтөндә бөгәрләнеп йоҡлап ятҡанын да күҙәттем. Шулай бер ҡарап тора инем, йылан ҡапыл ғына башын күтәреп сәкәйтте лә осоп барған күбәләкте тотоп йотто. Тағы бөгәрләнде. Икенсе юлы күргәндә уның эсендә йоҙроҡтай бер ғәләмәттең ҡыймырлағанын шәйләнем.

– Баҡа йотҡандыр йә сысҡан,– тине өләсәйем, аптырамай ғына. – Ҡошҡа ла һунар итә ул. Йөрөмә шул соҡорға яҡын, аңһыҙҙан үҙеңә ырғып ҡуймаһын, тәүбә-тәүбә!

– Ә ул йыландың балалары ҡайҙа икән?

– Балаламаған әле, август аҙағында йә сентябрҙә инде... Шишмәгә һыу эсергә төшә ул, юлын бүләһе булма, ишетһен ҡолағың.

– Ә ниңә, өләсәй, үлтерәйек тә ҡуяйыҡ шуны, берәйһен саҡмаҫ борон.

– Ерле юҡҡа тере йәнде ҡыйырға ярамай. Хоҙай бар иткән икән, ул мәхлүктең дә кәрәге юҡ түгелдер. Ағыуынан дарыу яһайҙар,ти ҙәһә...

Быйыл ғына барманым йыланлы муйыл эргәһенә, игеҙәктәрҙе ҡурсалайым бит. арыгүҙ ныҡ абалағас, улай ҙа киттем шул яҡҡа, Камил менән Камиланы өләсәйемә ышандырып ҡалдырҙым да. “Сығыр булһаң, сыҡ, йылан. Сыҡмаҫ булһаң, ят, йылан, ятҡан ерҙән ҡат, йылан,”– тип һамаҡлап-арбап киләм, белгәнемсә,

йәнәһе, һаҡланам.

арыгүҙ өрөүенән туҡтаны, әллә йылан саҡтымы уны? Барып етһәм, ни күрәм: эт соҡор башында ҡымшанмай ҙа арт аяҡтарында ултыра, аҫта — теге йылан ҡойроғона баҫып, башын күтәреп ыҫылдай. Икеһе лә бер-береһенән күҙен алмай аңдышалар. Килгәнемде һиҙеп, арыгүҙ минең янға тайпылып ырғыны, яҡларға әҙерлеген белгертте, тоғром! Йылан да йылт ҡына таш аҫтына шылды...

Ямғыр яуманы, бесәнебеҙҙе өс көндә сабып, киптереп, күбәләп бөттөк. 9 күбә сыҡты. Бер ыйырға 6-7 күбә етә, ти ҡартәсәйем, тағы башмаҡ, ике баш арыҡ бар әле. Мамыҡ кәзә ен дә тотонмаҫҡа ине — килә е ҡыш мине шәл бәйләргә өйрәтмәкселәр. Үҙем дә ҡыҙышып йөрөйөм шул өнәргә. Бәлки, Фариза еңгәгә барып өйрәнермен, ныҡ үҙһенәм уны, хатта ағынып китәм, оҙаҡ күрмәй тор ам.

***

Атайымдан посылка килде. Эсендә яҙыуы ла бар: "Быйыл отпускамды бирмәнеләр, ҡайтыу икенсе йылға ҡалды инде, яңы шахта асылды, эшләргә кеше етешмәй,– тигән. — Институтҡа документ тапшырҙым, көҙгә имтихан бирәм", — тип тә өҫтәп ҡуйған аҙаҡтан ғына. Игеҙәктәргә кейем алған: Камилаға – ҡупшы күлдәк, Камилға – моряк костюмы. Әй, килеште бынау Камилға шул костюм, бәләкәс кенә моряк булды ла ҡуйҙы. Кәмит! Тағы тәгәрәтеп яраттым туғанымды, "Хәстрүш!" тип үбә-үбә, битен әлендереп бөттөм. Ә ә, үҙем дә — хәстрүштән алдырҙым шалҡан кеүек ҡустымды? Әй, яратып ҡына ла а. Миңә лә бумазый күлдәк ебәргән атайым. Алдан асмалы, билле, кеҫә ҡапҡастары бар, ә кеҫә е юҡ. Ерлеге сейә ҡыҙыл, шунда зәңгәр үрҙәк бәпкәләре төшөрөлгән. Кем хыялыйы шулай я - аған, зәңгәр бәпкә була тиме? әр кемгә өлөш сыҡты, әсәйемә иң күбе: ал ыу косынка, ялтыр муйынсаҡ, туфли. Кейеп ҡарағайны туфлийын, тап-таман. Ала белгән ярағанын, онотмаған әсәйемде, тимәк, аяғына тиклем хәтерендә тотҡас... Өләсәйем менән ҡартәсәйемә яулыҡтар, тағы ике киҫәк күлдәклек тауар, бөртөклө сәйҙәр әм ҡағыҙлы кәнфиттәр (ҡағыҙҙары матур, теге «Казбек» ҡабына таҫлап һалып ҡуйырмын). Байрам иттек, ҡыҫҡа ы. Атайымдың ҡайтыр-ҡайтмауын тикшермәнек. Әсәйем: "Уҡырға уйлай икән аман", — тине лә, тауышын сығармай, күкрәк төбөнән генә уфтанып ҡуйҙы.

Шул уҡ кисте яңы күлдәгемде ҡотлатырға Мәүлиҙәләргә барҙым. Әмин абый мине аптыратты: "Бына үҙе килә, Мәүлиҙәне йүгертәм иңә, тип тора инем", — ихлас ҡаршы алды ул, әйтер ең, мин – бер өлкән кеше. Әхирәтем тиҙ генә ҡолағыма шыбырланы: "Беҙҙе өсөнсөгә " икертергә" уйлай атайым, риза булмайыҡ!" Абау, тағы ни ҡыландырмаҡ был Әмин абый? Ҡыҙмаса сағында ыҙалатҡаны бар беҙҙе, әллә ниндәй ҡатмарлы мәсьәләләрҙе системәм тип. Математиканан уҡыта ул, өлкән синыфтарҙы, өҫтәүенә завуч та үҙе. "Мин ике балалы булғас уҡыным Учительский институтта, шул арала, бер ҡайтҡанда, яҫап киттем һине, математиканы яҡшы белергә тейешһең, әбәзәнә!" – ти ҙә бәйләнә Мәүлиҙәгә. Ә миңә нимәгә уның синус-косинустары – минең "яҫалыуым"да абыйҙың ҡыҫылышы юҡ!

— Мин еҙҙе аша икертәм! — тип Әмин абый үҙе башланы теге хәбәрҙе. — Өсөнсө синыфҡа. Икенсене үҙем тиҙ генә үткәрәм дә, әле бер айлап ваҡыт бар мәктәпкә, шунан комиссия имтихан алыр.

— Бирә алма аҡ ул имтиханды?

— Ана, кеше бала ы, аңлап тора үҙенең файҙа ын, — тип абый миңә йүкә шына ҡағып алды. Ә мин ысынлап та ҡыҙығып торам. Беҙҙе оло йәштәге апа уҡыта, ошоларҙы сығарам да китәм, тип йөрөй. Маҡтаулы уҡытыусы ул, бәлки, ҡасан-

дыр шәп тә уҡытҡандыр, тик әле түгел. Беҙгә берәй юл хәреф яҙырға ҡуша ла ултырған еренән күҙен йомоп йоҡлай башлай. Арифметиканан да шулай: андарҙы теҙеп яҙып ултырабыҙ, дәрес буйы. Мәүлиҙә менән мине Әмин абый әллә ҡасан уҡ уҡырға ғына түгел, андарҙы ҡушырға-алырға ла өйрәтте, әлбиттә, ә бүтәндәр? Ижек тарта белмәгәндәр ҙә күп.

— икерегеҙ, әтеү сей наҙан ҡала ығыҙ ул йоҡо сүлмәге менән, — тип абый дөрөҫ әйтә. Мәүлиҙә өйләгәндер инде апаның “сүлмәк”леген? Дүрт синыф буйына хәреф яҙып ултыр аң, харап та а.

— Ризалашайыҡ, — тим Мәүлиҙәгә. – Икәүләп тырыш аҡ, булдырырбыҙ.

— Кәйҙерем менән уҡығың киләме? — тип һалмаһынмы шунда әхирәтем. Башыма ла кереп сыҡмағанды...

— Абый, икерәм!

Шулай тинем дә ҡайтып киттем, Мәүлиҙәгә боролоп та ҡараманым.

Иртәгә енә үк килеп еткән әхирәтем, көйәнтә ен аҫып: әйҙә, йәнәһе, Биксәнәйгә. Ярашырға итһә, оҙаҡҡа һуҙмай, һылтауҙы тиҙ таба, хәйләкәр. Минең дә үпкәм бөткәйне, Кәйҙерем менән бергә уҡы аҡ, шәп тә ә? Имтихан тигән нәмәне биреп тә торманыҡ, абыйға ышандылар, моғайын. Шунда теге "Әлдә атайым юҡ" тигән уйымдан ваз кистем. Бына ла а, Мәүлиҙәнең ата ы арҡа ында икәүләп бер синыф алға киттек. Атайлы – арҡалы инде ул...

***

Өсөнсөләрҙе педтехникум бөтөргән йәш уҡытыусы Рәйлә апа уҡыта ине. Баштараҡ беҙҙе дәрестән уң ҡалдырғылап, сумырып өйгә эш биреп ҡаҡшатты. Тырыштыҡ. Мәүлиҙә уҡыуға әләтле, миндә лә сәм бар. Икенсе сиректә ҡыуып еттек яңы синыфташтарыбыҙҙы. Шунан ғына Кәбиргә сират етте минең менән өйләшергә. "Тороп тор әле, ваҡыт юҡ", — тим дә ҡуям. Ул түҙмәй, ошо осор бигерәк тә, әллә ниндәй яңылығы барҙай ҡылана. Ә бул а? Моғайын, Ыласын менән унарға сыҡҡандарҙыр?!

Ошо уй мейемә инеп ултырғас, минең дә түҙемлек бөттө. Хеҙмәт дәресе бара ине, келәй орап торам тип ылтау сығарып, парта ы эргә енә барып, күҙенә ҡараным. Күҙенә генә түгел, маңлайына яҙылған Кәбирҙең: ҡышҡы унарҙы башлағандар! "Бергә ҡайтырбыҙ", — тип шыбырланым. Ул баш ҡаҡты.

Ҡайтышлай Кәбир өйләй, мин, ғәҙәтемсә, күҙ алдыма килтерәм, ишеткәндәремде кино итеп ҡора барам. Был юлы Ыласын унарында үҙемде түгел, Кәбирҙе ҡатнаштырам — ярай инде, булдырған бит, ебеп ҡалмаған. әм шуға үҙем дә аҙаҡ ғәжәпләнәм: Бүре уҡҡан олатай ҡайҙалыр ситтәрәк йөрөй, ә ваҡиғалар урта ында — Бөркөтсө Кәбир.

...Таң менән, яҡтырып та бөтмәҫтән, Бөркөтсө Кәбир ат менеп Аҡбейеккә юл тотто. Яурынында — Ыласын. Улар, тау яғалап, үргәрәк күтәрелде. Өйкөм имәнлекте үткәс, күҙ сағылдырырлыҡ ап-аҡ ҡар менән ҡапланған киң аҡландар асылды. Әһә! Кәбирҙең осҡор күҙҙәренә яңыраҡ ҡына ҡыялатып үтеп киткән йәнлек эҙҙәре салынды. Бүре уҡҡан олатай уны "Урман Әлифба ы”н танырға өйрәткәйне инде, шик юҡ, был – төлкө эҙе. Кәбир Ыласынды күккә сөйҙө. Ҡыйғыр ҡоштоң бейеккә күтәрелеп, кәйелеп осоуын күҙәтте. Ыласын түңәрәк я ап талғын ғына оса. Төлкөнө күктән ағалай, ул уны күптән күреп ҡалған. Кәбир, унар ҡомарына бирелеп, эйәренән икереп төшөп, баяғы эҙҙе юллап йүгерә, яланда ҡар әле бик ҡалын ятмаған, март урталарында була торған аҡман-тоҡман бурандары бар алда. Ана бит ул төлкө, Кәбир ҙә күреп ҡалды уны. Үҙенән йыраҡ та түгел баҫып торған кешегә көлтә ҡойроҡтоң иҫе лә китмәй, Ыласынды шәйләгән ул. Ҡойроғон күтәреп, арҡа йөнөн тырпайтып, тештәрен ҡурҡыныс ыржайтып,

төлкө үлемесле алышҡа әҙерләнгән. Бүренән ҡала, иң аҡыллы йыртҡыс ул, ти Бүреһуҡҡан олатай төлкөнө. Хәйләкәр йыртҡыс аҡлан йөҙөндә Ыласындан ҡасып ҡотолоп булмаҫын яҡшы аңлай, шуға ҡыуаҡлыҡҡа ыйынған. Уға йомолған сағында ғына ситкә ырғып, дошманын алдап ҡарамаҡсы: ҡыйғыр ҡош яңынан күккә күтәрелеп аҫҡа томоролғансы, урман эсенә инеп йәшенергә өлгөрөр, бәлки. Нишләп Ыласын аман тибеп алмай был төлкөнө, нимә андый ул күктә кәйелеп? Кәбир унарсы иҙеме менән Ыласындың уйын аңлап алды: төлкөнө нисек тә ҡыуаҡ төбөнән өскөртөргә, аҡланға сығырға мәжбүр итергә кәрәк. Көлтә ҡойроҡ сабып китеү менән, Ыласын уны күҙ асып йомғансы типкер тырнағына эләктереп тә аласаҡ. Кәбирҙең йөрәге дарҫлап тибә, сөнки белә (Бүре уҡҡан олатай бит уның остазы): төлкө – көслө йәнлек, йәш бүренән кәм түгел. Йәшәү өсөн көрәшәсәк ул, йәнтәслим алышасаҡ.

Ошо урында кино таҫма ы, әйтер ең, өҙөлдө, Кәбирҙең тауышы ғына яңғырап ҡалды:

— Бүре уҡҡан бабай аты менән килеп етте лә, тунын сисеп, төлкө яғына ырғытты. Теге, моғайын, Ыласын ябырылды, тип уйланы, ҡыуаҡлыҡтан аҡланға икереп сыҡты. Ә унда инде арҡа ына, ысынлап та, Ыласын уҡтай килеп тә төштө!

Кәбир менән бер-беребеҙгә ҡараныҡ та ҡаттыҡ. Икебеҙ ҙә ахмалға төшөп тирләп бөткәнбеҙ, ныҡ әҫәрләнгәнбеҙ, әйтер ең, теге яландан ҡайтып төшөп кенә торабыҙ.

— ин әле өйләгәнде тыңлап ҡалтырап тора ың, ә күр әң унда беҙ нисек ауланыҡ ул көлтә ҡойроҡто! Ике көндән бүрегә сығабыҙ, — тине Кәбир иҫ киткес ғорурлыҡ менән. Ғорурланырың бар, маладис, тип маҡтай ы урынға, дуҫыма тупаҫ итеп:

— инең әкиәтеңә мин ҡалтырап торҙоммо? — тинем дә ҡуйҙым. Әкиәт түгел икәнен белә тороп, нимәгә шулай ҡыланырға инде миңә?

Шунда тәү тапҡыр үкенесле дәғүә яралды күңелемдә: ниңә малай булып тыумағанмын, ошо Кәйҙерем урынына мин йөрөр инем Ыласын сөйөп?!

Был көтөлмәгән тойғо мине тетрәндерҙе. Төнөн күҙемә йоҡо эленмәне. Ҡыҙыҡайҙар, малайҙар тура ында ғына түгел, ирҙәр, ҡатындар тура ында уйланып алып киттем. Ҡай ы енес эйә енә рәхәт был донъяла, кем бәхетлерәк — ирме әллә ҡатынмы? Кем мө имерәк, кәрәгерәк тормошта? Әлбиттә, ҡатындар алып бара донъяны, улар кәрәгерәк! Уларҙың ҡулынан бөтә эш килә. уғыш барғанда баҫыуҙы кем өргән, кем үҫтергән игенде — ҡатындар ҙа а. Бына беҙ, дүрт ҡатын, насар көтәбеҙме әллә донъябыҙҙы? Атайымдың арҡаһы алыҫта булһа ни, үҙем ҡуйырмын арҡамды игеҙәк туғандарыма, ел-ямғыр тейҙермәм уларға!

Хәҙер минең ошо дәғүәләремде раҫларға, күңелемде инандырырға бер кеше кәрәк ине. Өйҙәгеләргә өндәшмәнем, телә ә нәмә уйлап йөрөмә, тиерҙәр. Мәүлиҙә ҡай ылайыраҡ ҡарай икән ирҙәргә, йә, ярай — малайҙарға, ти?

Иртәгә енә үк, оҙон тәнәфестә, баяғы бөтә дәлилдәремде әхирәтемә теҙеп әйттем. Хатта арттырып ебәрҙем, ирҙәрҙең бер хәжәте лә юҡ, тип. Килешеп, баш ҡағып торҙо ла, Мәүлиҙә минең мейемә әлегәсә инмәгән дәлилде ярҙы ла алды:

— Бәс, ирҙәр булма а, донъя бөтә лә ә.

— Нишләп бөт өн, беҙ, ҡатындар, бар ҙаһа.

— Беҙ ҡартайып үлгәс, барыбер бөтә инде донъя.

Кире ҡаҡҡы ыҙ хәҡиҡәтте ҡапыл аңлап, тел еҙ ҡалдым. Үлгәс... Балалар ҡалырға тейеш тә ә беҙҙең урынға. Ә улар ирҙәр еҙ тыумай шикелле? Ана, ауыл тулы ҡыҙ көйө ҡартайған апайҙар, ҡартәсәйемсә, бала ыҙ ҡыуарып ултыра. Егеттәре уғыштан ҡайтмаған. Бер нисә е балалаған, улары ла, рисуай булып, кеше ире менән йөрөгәнгә генә. Эйе шул, кәрәк икән шул ирҙәр.

Ошоно үҙ башым менән дә аңлай алыр инем дәһә? Күптән түгел ауыл осонда,

кирбес һарайы эргәһендә, Заҡуан менән Фәрит исемле ике ағайҙың яғалашҡанын, әсәйем менән Рабиға апай ыңғайына, мин дә күреп торҙом, Исламетдин ағай саҡ айырып алды уларҙы — шул хәл дә асмаған күҙемде?

— ин минең биләмәгә ингәнһең, әҙәм аҡтығы! — тип екерә ағайҙарҙың береһе.

— Нимә, закон сыҡҡанмы һинеке тип, йә ЗАГС-ың бармы? — ти икенсеһе.

— үҙ бирештек бит, ир һүҙе бер була !

— ин үҙеңме һүҙен тота торған әҙәм, Миңләхмәт биләмәһенә кермәнеңме, ыристан кәзә тәкәһе!

Ниндәй биләмә, ниндәй кәзә тәкәһе?

Рабиға апай аҙаҡ әсәйемә был хәлде шым ғына аңлатып һөйләп алды — бер ҡолағыма инде, икенсеһенән сыкты — атайымды уйлап тик торҙом: ул бынау ағайҙар кеүек һуғыш суҡмары түгелдер... Хәҙер ҡабаттан төшөп хәтерләп маташам Рабиға апай әйткәндәрҙе. уғыштан иҫән әйләнеп ҡайтҡан ирҙәр, имеш, тол ҡатындарҙы үҙ-ара килешеп бүлешеп алған, һәр ҡайһыһына унар-ун бишәр өй тура килгән, шикелле. Йәғни «биләмә». Хәләл ефеттәренә белдермәй генә йөрөштөргәндәр шулай... Заҡуан ағай үҙ биләмәһендә тыуып-үҫеп килгән бер малайҙың тас Фәрит ағайға оҡшағанын шәйләп сығырынан сыҡкан икән...

Төшөнәм һымаҡ...

Ниңә тормош тап ошолай ҡоролған, ә бүтәнсә түгел? Мәҫәлән, өләсәйем алдарға тырышып ҡарағанса, баланы Күрәнлегә барып, ыуҙан тот та ал ине?! Юҡ шул, ҡатындар уны туғыҙ ай ҡарынында йөрөтөргә, ыҙаланып тыуҙырырға, күкрәк өтөн имеҙергә тейеш. Бәрәкәт, ирҙәр ҙә тап ын ине бала, ҡорһаҡтары бар ҙа а, ҡорондар ине шунда кесе йы анды?

Башым тубал булғандыр, әшәүәт еҙ ҙурайғандыр был ғәләмәт уйҙарҙан? Ә кисерештәрем мейемде киңәйтеп кенә түгел, ҡабырғаларымды этеп, күкрәк ситлегемә ыймай, эсемде лә көпәйтте, унда ла тулды кеүек. Уҡыуҙан ҡайтҡас, йүгереп барып өләсәйемә Сталин бабай бүләк иткән (Мәскәүҙән алып ҡайттым, орденға ҡушып бирҙеләр, ти бит) ҙур көҙгөгә ҡараным — үҙгәрмәгәнем.

Тик барыбер мин элекке Нурия түгел, яңы халәттәмен һәм был халәтемде шулайырак күҙаллайым: әйтерһең, серле бер тарафта бәүелеп торам; ҡара сәсле кескәй ҡыҙыҡай мине уяу ҡурсалай, сигенергә, ҡолап төшөргә бирмәй; ҡулдарымды юғарыға уҙғанмын, шунда, имеш, нимәгәлер йәбешеп торам... Теге ҡыҙыҡайҙың минең бала сағым, ә юғарылағы тарафтың киләсәгем икәнен аңғарам... Ошо халәт мине ташламаҫ булды. Көндән-көн, айҙан-ай, йылдан-йыл юғарыға, бер йәбешкәс, та ыллыраҡ үрләрмен (сәмле бит мин), әммә бала саҡҡа боролоп ҡарарға онотмам (хәтерле лә мин): ул эскер еҙ, тоғро йөрәкле телдәр ҡыҙыҡай мине ташламаҫ, ярҙамға килергә әр саҡ әҙер булыр ымаҡ?..

Ошо ике арауыҡта япа-яңғыҙ ҡалдым. Йәшәйештең ҡатмарлы табышмаҡтары хаҡында ни тиклем генә серәшеп уйланһам да, үҙ башым ғына етмәй, ҡартәсәйемдең ҡалын аҡылынан һабаҡ алмай булмаҫ. Унын менән иркенләп ҡайҙа һөйләшергә хәҙер, өйҙә игеҙәктәрҙән тынғылыҡ юҡ. Әлбиттә,— кәнсәләрҙә. Ҡышын унда беҙгә эш тә әҙерәк, батҡаҡ һөйрәп йөрөүсе юҡ... Бер кисте ҡартәсәйемде рәйес өҫтәле артына етәкләп алып барып ултырттым да тантаналы иғлан иттем:

— Хәҙер һүҙ иптәш Ҡарамырҙинаға бирелә!

— Шаярырға тиһәң, һиңә ҡуш.— Күндәм генә барып ултырған еренән ҡуҙғалырға иткән ҡартәсәйем янына тағы бер ултырғысты килтереп ҡуйып, йәһәт кенә ҡамай һалдым.

— Йә,ни әйтерһең,— тине ул, миңә ғәжәпләнеберәк ҡарап.

— Ҡартәсәй, бына беҙ, биш ҡатын (Камиланы ла ҡыҫтырҙым,ҡул араһына инеп килә ләһә) ир-атһыҙ ҙа ап-арыу итеп йәшәп ятабыҙ. Үҙең дә әйткеләйһең,

тылда ҡатындар ер ҙә һөргән, утын да ҡырҡҡан, йәғни...

— Самаланым тел төбөндә, туҡта. — Ҡартәсәйем күпмелер ваҡыт, фекер төйнәптер, һүҙһеҙ ултырҙы. Ниһайәт, йәпләберәк ултырып, башланы нәсихәтен:

— Атабыҙ Әҙәм ғәләйһиссәләмде, тәү әҙәм затын, Аллаһы Тәғәлә балсыҡтан бар иткән, уға йән өргән. Әҙәмдең ҡабырғаһынан анабыҙ ауаны яралтҡан, һәм, ғаләмдәге барса тереклек һымаҡ, улар ҙа парлы булған. Әҙәм вә ауа, бер-береһенә мөхәббәтле булып, татыулыҡта, ожмах хозурында ғүмер һөргәндәр, Хоҙайыбыҙҙың һөйгән балалары хөкөмөндә. Иблис Ләғәнә, әғүәсе шайтан, уларға хаслашып, гонаһҡа батырмаҡ йөрөгән...

...Рәйес бүлмәһендә ултырғанымды оноттом. Ап-асыҡ күреп, ишетеп торам: илаһи нур бөркөлгән гүзәл мөхиттә емешен өҙөү, тәмләү тыйылған алмағас үҫеп ултыра. Ә мин, имеш, — ауа, шул алмағасҡа ымһынып-ымһынып ҡуям... “Алмаһы ябай түгел, уны өҙөп тәмләгән аҡыллыраҡ, сибәрерәк, мөхәббәтлерәк була!” — Алмағастың олонона уралған юха йылан шулай тип вәсүәсә һала... Йыландан да ҡурҡмайым, уның ғәмәлдә Иблис әүермәһе икәнен дә уйлап бирмәйем, аҡыллыраҡ, сибәрерәк, мөхәббәтлерәк булғым килеп, алмағасҡа яҡынлашам, алмаһын өҙөргә тип ҡулымды һонам...

— Ҡыҙыҡтыңмы? Нәфсе...— тине ҡартәсәйем, ҡулымдан тотоп алып. Аңлаптойоп торалыр ул мине.

— Шунан?

— Шунан ни, ҡанун боҙоп, тыйылған емеште өҙгәс, Әҙәм вә ауа ожмахтан Ергә һөрөлгәндәр. Әлмисаҡтан парлашып ғүмер кисерәләр, уттар-һыуҙар кисәләр...

— Аңланым. Аллаһ инселәгән тәҡдирҙе үҙгәртеп булмай, ярамай, йәшәһен ираты ла, донъя тар түгел,— тинем, ҡартәсәйемдең һынап баҡҡан күҙҙәренә ҡарап. Алдаманым, инанып әйттем.

Әҙәм вә ауа серенә төшөнгәс, хыялсан халәтем тағы үҙгәрҙе, инде үҙ-үҙемде бөтөнләй мөғжизәүи рәүештә фаразлайым: мин — ауа заты, әҙәми ҡиәфәттәге тере есем, ике кендегем бар, бере е, ҡыҫҡарағы, өйөмә, ауылыма, Күрәнлегә, Аҡбейеккә, Ыласын ҡанатын ҡаҡҡан Толпарлы күгенә тоташҡан, икенсе е — Оло йы анға, ул кендек ғәйәт оҙондор... Ике кендегем дә ныҡ кәрәк үҙемә, шуны апасыҡ тоям. Әлегә ҡыҫҡа кендек тирә ендә минең йәшәйешем, улышым. Саҡ ҡына алыҫлашһам да, ул ҡанай башлар, әрнер кеүек. Ә бит ҡасан да бер алыҫлашырға, хатта айырылырға тура килер унан (киҫепме?) — Оло йы анды тотош күргем, белгем, урап сыҡҡым килә минең!

6

Ҡыҫҡа кендеген атайым бөтөнләй өҙөп ташлағандыр, ти әм, мин бишенселә уҡып йөрөгәндә, ҡыш ахырында,ҡайтты ла төштө бер көндө. Алдан хат яҙып та торманысы.

Ә мин һиҙгәйнем. Төшөмә керҙе. Имеш, хозур йәй мәле, иҫ киткес матур бер күлдә йөҙөп йөрөйөм. Тирә-яғымда һары екәндәр тирбәлә, ҡоштар сутылдаша, әкиәти гүзәл күбәләктәр осоп йөрөй. Нәркәс икәнмен дәһә мин! Ә әүбән ҡайҙа? Яр буйында кемдер ҡурай тартып ебәрҙе. Таныйым, имеш,— көтөүсе Тарауыл ҡарт бит. Шул саҡ күлде ҡапыл урғылып тулҡын баҫты, һәм аҡ күбек эсенән толпар аттар килеп сыҡты, көтөү-көтөү булып. Бәй, был бит — үҙебеҙҙең Толпарсыҡҡан күле! Мин шул арала Нурияға әүерелдем дә бер һомғол толпарҙы үҙебеҙҙең ихатаға әйҙәп алып ҡайттым...

Төшөмдө ҡартәсәйемә һөйләмәнем, үҙаллы юрап ҡараным: атайым ҡайтыр?

Юрауым юш килде: ике көн дә үтмәне, ҡайтты ла инде атайым. Тәүҙә ҡарт-

әсәйемде ҡосаҡланы, ике ҡуллап өләсәйем менән күреште, шунан мине күкрәгенә ҡыҫты. Теге юлы, армиянан ҡайтҡандағы кеүек, билемдән генә тотоп баш осона тиерлек күтәрмәне, оҙаҡ итеп күҙҙәремә ҡараманы. Мин үҙем уға йотолоп ҡарағайным, башын ситкә борҙосо?

— Ҡайҙа игеҙәктәр? — Атайым, гүйә, киң итеп ҡанатын йәйҙе, ҡулдарын ике яҡҡа уҙып, саҡ ҡына сүкәйә бирҙе: Камил менән Камиланы күтәреп алырға әҙерләнде. Улар хәҙер түр бүлмәнән туптырлап килеп сығырҙар, тип көттө, ахыры ы.

— Тышта уйнап йөрөйҙәр, сана шыуалар , — тине күрешергә үҙ сиратын көтөп торған әсәйем.

Атайымдың аптырашлы сырайын бөтәбеҙ ҙә күрҙек әм аңланыҡ: игеҙәктәрҙе ул аман бәләкәс кенә бәпестәр тип күҙаллайҙыр. Ә уларсы бишенсе йәштәрен тултырып бара.

— Эйе, — тигән булды ла атайым, әсәйемде етәкләп түр бүлмәгә инеп китте. Ишектән кергәндә башын бәрҙе, унының ымаҡ оҙон буйлы, уҫлаптай кеше ашатлар өсөн яраҡлашмаған был туп а... Эстән әсәйемдең: "Бер ҡайҙа ла китмәйем!" — тигәне ишетелде. Беҙ, бирьяҡтағы өсәү, бер-беребеҙгә ҡараштыҡ та, әр ҡайһыбыҙ үҙ эшебеҙгә тотондоҡ. Ҡарсыҡтар ҡашығаяҡ шалтыратты, мин игеҙәктәр артынан йүгерҙем: уйын ҡасмаҫ, атайҙары ҡайтҡан да а!

өйҙөргөс тә ысын булмай сыҡты. Фариза еңгәм, мине йәлләп, шешәгә ҡәҙимге ыу алып биреп ебәргән. Аҙаҡ үҙе иплән әйтте. Барыбер ярҙамы булды ул өйҙөргөстөң, мөғжизәгә инанып, күңелем баҫылып торғайны бер арый...

Хәҙер атайымды Толпарлыға, өйөбөҙгә, үҙебеҙҙең итәгебеҙгә бәйләп ҡуйыр әмәл юҡ! Өс көн генә торҙо ла тағы олаҡты. "Ситтә күп йөрөнөм, Уралыма ҡайтам", — тип китте. Бер ни аңламай, ҡай ылай фаразларға ла белмәй, аптырап тороп ҡалдыҡ.

Поезға атайымды ат менән Бүре уҡҡан олатай сығарғайны, ул аңғартты:

— Екатеринбурға, хәҙер Свердлау инде, ҡайтырға уйлаша Баязит. Уҡыуын да шунда күсермәксе. Инженер буласаҡмын, ти, тағы ике йылдан, шикелле? Свердлауҙа завод күптер...

— Нимә ти, килеп алам, тимәйме быларҙы? — Ҡартәсәйем әсәйемә, үҙенең ике тубығында ултырған игеҙәктәргә ымланы (мине иҫәпкә лә алмай).

— Өндәшмәне ул хаҡта... “Тауҙарымды, урмандарымды, көндө, ҡояшты ағынам,– тип үҙәкте өҙҙө. –Шахтала, ер аҫтында, айҙар, йылдар буйы ҡояш күрмәнем бит: көндөҙ төш әм, сыҡҡанда — төн, төндә төш әм, көндөҙөн йоҡларға, ял итергә кәрәк ауыр эштән уң, ҡалған ваҡытты ситтән тороп уҡыу ала”,– тине.

— Уф, балам, бәгеремде телде генә ул! — Ҡартәсәйем ығылып төштө. Әллә ҡасанғыны хәтерләп, Яңы өйҙөң ҡарағас ағасынан сутланған өрләгенә күтәрелеп ҡараным. Мин, ун йәшлек, йәғни үҫеп бөткән ҡыҙыҡай, шул минутта саҡ килеп аңланым: түшәмде тотҡан өрләктөң ныҡ булыуы бик тә мө им өйөң имен бул ын өсөн, әммә бит ҡартәсәйем ҙурыраҡ мәғәнә алған булған теге саҡта әйткән үҙҙәренә. Күҙ терәп торған улына ышанысы ишелгән унының — бына нисек? “Бөтөрөнмә, ҡартәсәй, үҙем булырмын еҙҙең өсөн донъя өрләгө, беҙ, ҡатындар, бирешмәбеҙ!” — тип әйтә ем килде ошо минутта. Ләкин, ихластан уҡталһам да, ҡысҡырманым, сөнки "вәғәҙә — иман" икәнен аңлай инем инде. Эсендәге — тышында булған, уйлағаны шундуҡ теленә сыҡҡан Нурия бала саҡта тороп ҡалды, буғай, унын урынына ҡапыл онторайып киткән, оҙон ҡуллы, оҙон аяҡлы, оҙон муйынлы (абау!) берәү пәйҙә булды. Ҡаштары ҡуйы, ҡара, танауы әүәлгесә үк ныҡ

йәмшек түгел. Толомдары ҡалын, йүгергәндә арҡаһын ҡайышлап теңкә енә тейә. Ә күҙҙәре — сөм-ҡара, әр нәмәгә, әр кешегә туп-тура ҡарай, ынай, үтә күрергә тырыша. Тирә-яҡҡа, ергә-күккә, донъяға тап ошо минуттағы күсермә ен ала алып ҡалырҙай булып ҡыҙыҡ ынып, йотлоғоп, оҡланып ҡарай ул күҙҙәр. Эйе, был мин — бөгөнгө Нурия.

***

Әсәйем дә үҙгәрҙе, атайым ҡайтмаҫҡа тип ил-йорттан киткәс. Элек үҙенең рәүешен таба алмай йонсоған микән: башын баҫып йөрөй йә көтмәгәндә яндырайлана ла китә ине. Хәҙер, холҡо әлмәкләнеп, кәүҙәгә әҙерәк йомроланып алғас, әсәйемде танырлыҡ та түгел: бөтә ҡиәфәте "Мин — шәп ҡатын!" тип ҡысҡырып тора ымаҡ. Үҙе лә шуны иҙмәй түгелдер, йөҙөн асылтып, йылмайып ҡына йөрөй. Йыш ҡына элекке күршебеҙ (Яңы өй Атай йортона ике урам аша) Гөлбикә апайға бара, йә унының беҙгә килә, икәүләп кис ултыралар, шәл бәйләйҙәр, серләшәләр...

Ҡартәсәйемә әллә оҡшамай әсәйемдәге үҙгәрештәр, артынан әйтеп ҡалғылай:

— Сөгөлдөргә төшөр әләр, белер ең әле! Ана, меҫкен бисәләр, аяҡтарын саҡ өйрәп йөрөй. Уйнаҡлап ҡал, ярай...

Өләсәйем шымтайып йөрөйсө ошо осор. Нимә булған? Мин генә ҡыуанам әсәйемдең шулай дәртле, елкетә баҫып йөрөүенә.

Уйнаҡлап, имеш. Былай ҙа йәшелсәлә түгел беҙ хәҙер – унда апаруҡ еңел булған икән. Былтыр йәй кирбес уктыҡ, шул эштән дә ауыр түгелдер әле сөгөлдөрө. Әйткәндәй, беҙҙә уны "ысвикла" тиергә өйрәнеш итеп алдылар, йәнәһе, урыҫсалап. Ә Толпарлының бөтә ҡатындары ла тиерлек хәҙер бер ҡушаматта йөрөй: "ысвикла бисәләре". ыҙа буйы тигән ыҙанғаса (күрше колхоз сиге) һыҙылған ҙур баҫыуға уларҙы иртәнсәк бер машина итеп тейәп алып китәләр,ә кис үҙҙәре, кем нисек, ҡайталар. Ҡай ы берҙәрен ирҙәре ат менән барып ала. Әллә, берәү ҙә ятып үлмәгән әле ул сөгөлдөр баҫыуында. Уйнаҡлап йөрөмәйҙәр йөрөүен, ҡара эш бит. Әсәйем дә аҡ эштә түгел, уғып ҡара ындар, ана, көнөнә 400—500 дана кирбесте!

Әллә ниңә беҙҙе алып барып ҡуштылар шул кирбескә? Быға са өйрәнеп бөтөр инек «ысвикла бисә е» булып. Беҙ тигәнем – әсәйем менән мин һәм Рабиға апай менән ҡыҙҙары, һаман бер мисәүҙәбеҙ. Иҫәүәнләнеп, кирбестә беҙҙән алда эшләгән апайҙарға көнләшеп торғаным хәтерҙә – әллә шуның ҡоһоро булды был ауыр эшкә килеп ҡабыуыбыҙ?

...Көнөбөҙ кисәге кирбестәрҙе "домна"ға ташыуҙан башлана, машина ыйырлыҡ оло мейесте Исламетдин ағай шулай тип йөрөтә, башы һалам менән ябылған кирбес һарайын "завод" тип фәстерә. Кирбестәрҙе домна эсенә сатрашлап теҙеп тултырғансы, Исламетдин ағай менән Кәбир арай урта ындағы ҙур түңәрәк соҡорға ыу ташый, балсыҡ, ҡом өйә. Шунан Кәбир ат менән шул өйөмдө тапатырға тотона, атаһы мейескә ут яға ла атты үҙе йөрөтә башлай. Әҙерәк тамаҡ ялғап алғансы, кирбеслек балсыҡ баҫылған була. Исламетдин ағайҙың атты түңәрәктән алып сығып китеүен дә көтөп тормай, беҙ, ҡарсыға шикелле, әҙер балсыҡҡа ташланабыҙ. Көс еткәнсә йомарлаҡлап күтәреп, әсәйем менән мин арайҙың – уң яғына, Рабиға апайҙар — ул яғына, ташыйбыҙ балсыҡты. Кем күберәк эләктерә, кирбесе лә артығыраҡ була, тимәк, эш хаҡы ла мулыраҡ төшә. Күр ә икән берәй е беҙҙең нисек сәмләнеп йәбешкәнде балсыҡҡа, нисек өҙә-йолҡа, түшкә терәп уны йүгерешкәнде! Анау ен ботағы Ишбирҙегә тиклем, баштан-аяҡ масманлап, балсыҡты күмәстәй әүәләп үҙҙәренең яғына ырғытып тора. Рабиға апай баштараҡ әҙмәҙ ташыштыра ла, өлкән ҡыҙы менән оҙон эскәмйәгә ҡара-ҡаршы ултырып, ҡа-

лыпҡа алып уға ла башлай кирбесте. Ғәрлегемдән (артта ҡалабыҙ бит!) күҙемдән йәштәр атылып сыға, әммә ул беленмәйҙер, сөнки сәс ара ынан бит буйлап күптән эре тир йыбырлап аға. Тегеләрҙең яғында балсыҡ күбәйә, соҡорҙағы ы әҙәйә, бына-бына беҙ “еңеләбеҙ”. Әсәйем тилбер, көслө, мин дә уға бәрәбәрмен, тик барыбер улар күмәк — Ишбирҙеләре менән биш кеше! Шул саҡ атын Ҡыҙылъяр ятыуында тиҙ генә уғарып өлгөрә лә кәйҙереп Кәбир килеп етә. Йүгереп соҡорға төшә, умырып-умырып алып, беҙҙең яҡҡа балсыҡ ташый башлай. Ахырҙа бер сама булып китә ике яҡтағы өйөм дә. Балсыҡты соҡорҙан алып бөткәс, әсәйем дә кирбес уға башлай.

Кәйҙерем тиҙ генә китмәй әле, шап-шоп өйөлгән балсыҡты ҡалыпҡа алырлыҡ ҡына итеп йомрайтып, әсәйем янына килтереп йөрөй. И, дусҡайым! Күкрәгемдә әллә ниндәй ҡайнар тулҡын бәүелә — мин уны рәхмәт хиселер тип уйлайым. Нисек рәхмәтле булмасҡа мөмкин шундай дусҡа?

Ә инде кирбес уғыуҙа әсәйемдең алдына берәү ҙә сыға алмай. Рабиға апай йыбытҡыраҡ ул. Уға оло ҡыҙҙары ярҙамлаша, алмаш-тилмәш ҡаршы ына ултырып, байтаҡ эшләшәләр. Өлкән синыф уҡыусыларына ла сөгөлдөр бүлеп биргәндәр икән, апайҙары шунда киткәс, Мәүлиҙә Ишбирҙе менән тороп ҡала. Хәҙер улар менән ярышыу ҙа ҡыҙыҡ түгел, етмә ә, Ишбирҙе йонсоп, мыжый башлай, ҡамасаулап ҡына йөрөй.

Әсәйем көн дә көмендә 400 кирбес уға, мин шуны киптерергә ташып ҡуям. Дүрт ҡат үтә кирбес ҡулдан: балсыҡ көйө; сей кирбес көйө; унан — мейескә яндырырға ташый ың; аҙаҡ мейестән сығарып өйөп ҡуя ың. Бер ысвикла бисә е лә сыҙамас был эшкә?!

Рабиға апайҙар ҙа шул уҡ өҙөмтәгә өлгәшә. Әсәйем көн дә күрше енә ҡалған балсығын уғып бөтөрөргә ярҙамлаша, ә мин Мәүлиҙәгә кирбестәрен елләтергә теҙеп ҡуйышам. Бахыр әхирәткәйем, йәшкә минән ҙурыраҡ бул а ла, быуыны шыйығыраҡ, исе китеп арый. Уға әле ен ботағы туғанын йылғаға төшөрөп йыуындырырға кәрәк, әсә е аҙаҡҡы кирбесен түңкәрә лә өйөнә йүгерә: иренә ашарға әҙерләй е бар! Шундай саҡта, ул ирҙәрҙең мәшәкәтенән башҡа бер файҙа ы юҡ, тип тә уйлап алам. Әсәйем уйлап ҡына түгел, әйтеп тә ҡуя шулай тип. Рабиға апай өндәшмәй, ҡул ғына елтәй...

Ғәжәп хәлдәр ҙә булғылаһы кирбес арайында. Бер көн кил әк, урыҡтырырға тип ҡуйылған кирбестәрҙең бер нисә енең ҡабырға ына "Н+К" тип соҡоп яҙып киткәндәр. Мәүлиҙә менән баш ватабыҙ: кем ҡылған был хаслыҡты?

— Моғайын, Сабирҙыр, — ти Мәүлиҙә.

— Нишләп ул?

— иңә күҙе төшкән.

— Кемдең? Кемгә!

— Сабирҙың — иңә, бәс. Тағы берәүҙең...

Шаҡ ҡаттым. Мин йәнә Мәүлиҙәнән иңмайыраҡ булып сығам?

— Тағы кемдең?

— Үҙең белә ең!

— Әйт, бер ауыҙыңды асҡас.

— К-ның! Белмәмеш булып торасы, Кәйҙеремдең, бәс. Уның эшелер әле был яҙыу, бәлки.

Уф, ниндәй ғәрлек! Ике малайҙың миңә күҙе төшкән. Ер ярыл а, шунда төшөп китер ең оятыңдан. Ә ниңә? Нимә е оят, минең күҙем төшмәгән дә ә, улар исәр булғанға мин ғәйепләме?

Барыбер ниҙер булды миңә шул ваҡиғанан уң. Кисенә, Кәбир менән Сабир, Фатих, тағы өсәү — минең менән сорлауыҡ уйнаған дус малайҙар — ыу инергә, ат

йөҙҙөрөргә саҡырғайнылар, баш тарттым. Нисек мин шулар менән эске күлдәксән генә ыу инеп, ҡушарлап ат менеп йөрөгәнем ошоғаса? Юҡ, хәҙер мәңге улар тирә ендә ыу төшмәйем.

Мәүлиҙә менән икәүләп мыштым ғына икенсе урында, ерек ара ында, балсыҡҡа буялған тәнебеҙҙе йыуыштыҡ та өйләшмәй генә ҡайтыштыҡ. Ул нимә уйлағандыр, мин әлегә китаптарҙан ғына уҡып, кешенән ишетеп кенә белгән мөхәббәт, өйөү, ғишыҡ тотоу тигән нәмәләр хаҡында уйланымсы. Әлегә бит быларҙы Фариза еңгәнең «эсенә кереп» кенә тойомлап ҡараным һымаҡ. Улар бер-бере енән ни менән айырыла, әллә өсө ө лә бер үк әйберме? Китапҡа ышан аң, бер иш мәғәнәлә ымаҡ мөхәббәте лә, өйөүе лә, ғишҡы ла. Ә яратыу тигәне? Юҡ, ул икенсерәктер — мин, мәҫәлән, тары ҡоймағы яратам. Әй ҙә, буталдым да...

Эйе,шул көндө, «Н+К» көнөн әйтәм, мин тағы (инде нисәнсегә?!) үҙгәрҙем кеүек. Нисегерәк үҙгәрҙем — аныҡ ҡына аңлап етмәйем әле. Теге, «киләсәк» тигән юғарыға ҡулдарым менән ныҡлы тотондомдай, их, күҙ ала ы ине әҙгә генә: ниҙәр бар унда, ни көтә? Ә иң ҡыҙығы: бармы унда теге өсәү — мөхәббәт, өйөү әм ғишыҡ?

***

Апрель уртаһы еткән шул, ҡар муртайған, яҙ еле ҡыйыҡтарҙа эленеп торған боҙимсәктәрҙе ялап кинәнә. Кирбес һуға башларға ла күп ҡалмаған. Теге тамғалы кирбестәрҙе үҙем генә белгән урынға йәшереп ҡуйғайным, теүәл яталар микән?

Уф! Үткән ғүмер... Атайымды иҫләп, күкрәгемдә нимәлер ауыртып алды: бәғер микән, әллә ул өҙөлдө микән? Түҙмәнем, өс бит хат яҙҙым – яңы адресына, Свердловскиға.

Иң тәүҙә арыгүҙҙең һәләк булыуын хәбәр иттем: марттан бирле шул тетрәнеүҙән арына алмай бер булам. Кесе йыһанда сағымдан уҡ белгәнгәме, ифрат та яҡын ине миңә арыгүҙ...

Бүреһуҡҡан олатай этен (ауыл халҡы уны һаман да бүре тип уйлай) һирәк-һаяҡ сылбырынан ысҡындыра ине. Быйыл яҙ арыгүҙ оторо бәйһеҙләнеп киткән, өс көн, өс төн ояһына ҡайтмай, ҡарығып йөрөгән. Ә ауылдың башҡа арландары уға гелән теш ҡайрап, һағалап йөрөгән – бүре еҫе, бүре ҡомары һирпелгән барыбер арыгүҙгә. Элегерәк ул бирешмәгән, хәҙер иһә ҡартая төшкән, ә теге арландарға ҡон ҡайтарырға форсат сыға: мәлен аңдып,өйөрө менән ташланғандар, һәләк иткәндәр Бүреһуҡҡан олатайҙың йорт һаҡсыһын, күңел йыуанысын!

– Ҡартлығын көтөп ятып, ояһында шыңшып үлер зат түгел шул, үҙе теләп йомолғандыр алышҡа,– тине олатай...

Шуларҙы бәйән иттем дә, өй эсенән сәләм күндереп, бер урында "әсәйем өсөн борсолма, ул хәҙер уйнаҡлап йөрөй" тип ҡуйҙым. Шуны яҙғас, үсем ҡанғандай хис иттем: эсе бош он әле!

Күпме ағын ам да, ғәфү итә алмайым атайымды. Шул тойғо күңелемдә таш ымаҡ ҡатылана бара. Хаттарында ул миңә төшөндөрөргә тырыша: ауылда аңлашып, таянып йәшәрлек иш юҡ, имеш, уға, өнәре – завод өнәре, фәлән дә фәсмәтән...

***

Иш юҡ минең атайыма ауылда. Ошо хаҡта яҙлыҡмай уйланам. Яҙ артынан йәй килде, кирбес заводы асылды... Йәй бөттө, алтын көҙ үтте, инде — ҡара көҙ. Мәктәптә мине октябряттарға вожатый итеп ҡуйҙылар. Мәшәҡәт күп, иң йәшерен уйҙарымды төндә, әллә ниндәй әсе әрнеүгә түҙмәй уянып китеп уйлап ятам. Тән әрнеүе түгел был, йән әрнеүелер... Иш юҡ, тигән атайым?! Ул – уҡымышлы ла, бындағылар наҙан, тимәксеме? Беҙҙең Бүре уҡкан олатайҙан, ана, Өфө ғалимда-

ры килеп аҡыл орап йөрөй әле. Өсәү ен: олатайҙы, Кәбирҙе әм Ыласынды кәртешкәгә төшөрөп алып киттеләр, бөркөтсөләр хаҡында китап сығасаҡ тиме. әр кемде лә китапҡа яҙып тормайҙар! Әмин абыймы тағы наҙан? Сулаҡ Мансур ағаймы? Яңыраҡ, ҡартәсәйемә кәнсәләр йыйыштырышырға барғанда, Мансур ағайҙың күпте белгәненә, үткерлегенә иҫем китте.

Эш бөтөүгәрәк бар аҡ, кәнсәләр солаҡы тулы ир-ат; тәмәкене рәхәтләнеп тарталар, төтөн эсендә үҙҙәре лә күренмәй, тауыштары ғына ишетелә. Ҡартәсәйем, тауыштарынан таныптыр:

— Мансур энекәш, Исламетдин ҡусты, Йәнмырҙа ағай, Иҡсан, абау, китегеҙ, күтәрмәгә сығығыҙ! Әхмәҙин ағай, иңә был тәмәжниктәр ара ында нимәң ҡалған? Хәйрулла ҡоҙа, тартмай инең дә ә... — тип исемләп орошоп алды. — Ҡайтышығыҙ, өйөгөҙгә һыу сыҡҡанмы әллә?

Ир-ат үҙ еҙ генә күтәрмәгә күсте, өй ҡайғы ы түгел икән уларҙа, сәйәсәт тикшерәләр. Мансур ағай әйтә:

— Никита Сергеевич Америкала сығыш яһағанда ҡата ы менән килтереп уҡҡан да трибунаға: "Я вам покажу Кузькину мать!" — тип ҡысҡырған. Теге капиталистарҙың күҙе маңлайына менгән, вәт.

— Кузька ы кем, эт көсөгөмө, шуның инә ен күр әтергә итәме икән Хрущев американдарға?

— Әллә, урыҫтың үҙенең исеме Иван да Әндрәй инде, хәҙер бына Никита...

— Украин бит ул Хрущев...

Шулайтып өйләнеп алдылар.Шым ғына, Мансур ағайҙың тауышын ҡапламаҫтан, уны ы туҡтамай сурыта. Ә мин солан иҙәнендәге эре сүптәрҙе, тәмәке төпсөктәрен оҫҡоға епереп алып йөрөйөм, ҡыҙыҡ ынып тыңлайым.

— Маршал Жуковҡа был батшанан изем юҡ, Сталин, ярай, үҙенең яңылышын ваҡытында аңлап, ғәскәр башына ҡуйғайны уны. Жуков, эйе, үҙен дә ҡыҙғанманы, йоҡо төҫө күрмәй, фронт менән командалыҡ итте, алдатты инде ул бөтөнләй аяманы. Барлыҡ алыштарҙа ла уның приказы тик бер төрлө булды: сигенмәҫкә, уңғы алдатҡа, уңғы патронғаса уғышырға! Беҙҙекеләр ҡырылды ғына... Атакаға мәйеттәр өҫтөнән йүгереп барҙыҡ.

— Ә мин Мәскәү оборона ында уғыштым, — тип тауыш бирҙе Бүре уҡҡан бабай.

– Әйтәм дә шул, ин ҡатнашҡанға нимес Мәскәүгә керә алмаған икән, — кемдер, шырмый Иҡсан шикелле, тоҙ оҙ ғына үҙ ҡыҫтырҙы. Берәү ҙә быға иғтибар итмәне, ә Мансур ағай дауам итте:

– Жуков Сталинға Мәскәүҙән китмәҫкә кәңәш биргән – армия, бөтә халыҡ юлбашсының баш ҡалала икәнен белергә әм был алыштың хәл иткес, изге алыш икәнен бөтә йөрәге менән тойорға тейеш! Тик шул саҡта ғына баштан-аяҡ ҡоралланған, ярты Европаны теҙләндергән фашистик Германияны сигендереп буласаҡ, тигән.

— Сталин буй онған, тиген, ә? Сталин үҙе!

— Ә Хрущев белә Жуковтың кем икәнен, шуға яҡын юллатмай ҙа үҙ тирә енә. Бөйөк Ватан уғышы геройы, почетлы хәрби начальник — имеш, хаҡлы ялда, сәйәсәткә ҡыҫыла алмай. Ғәмәлдә өргөндә инде Жуков... Ә Сталиндың ғәҙеллеген иҫләһәк? Сталинград һуғышында һынылыш булғас, Рокоссовский маршал Паулюсҡа парламентарийҙар ебәрә, әсир төшөгөҙ, тип, ә ул аттыра беҙҙекеләрҙе, мөртәт. Ахырҙа фашистар барыбер ҡорал һала, еңелә. Шунан, Сталиндың улы Яковты, ул пленда була, әлеге Паулюсҡа алмашырға тигән тәкдим килә Гитлер ставкаһынан.Сталин:«Мин рядовойҙы маршалға алмаштырмайым»,– тип яуап

биргән.

– Ысын микән?! – Мансур ағай һөйләгәндәргә шик белдереүселәр ҙә табылды. – НКВД-ның бронепоезы ҡаршы торған дошманға, шуға Мәскәүҙе ҡолата алмағандар, тип ишеткәйнек фронтта, дөрөҫтөрмө?

– Дөрөҫ!– тип өҙөп кенә әйтте шунда участковый Сәмиғуллин, ул да халыҡ йыйылған урынға килеп етә һала шулай.

– Өфөлә Сталиндың шинель кейеп баҫып торған ҡиәфәттә һәйкәле бар ине, шуны алып ташлатҡан Хрущев.

– Кәүҙәһен мавзолейҙан сығарғас, һи, Өфөләге һәйкәлде ни...

— Әй, ярар, бик төпкә төшөп киттек, әйҙә, төндә уянып, шарҡылдап көлөп ятырлыҡ бер ләҡәп өйләп ҡайтарам үҙегеҙгә. — Бынығы Иҡсан ағай тауышы. Мин яртылаш ҡыҫыҡ ишеккә яҡыныраҡ барып баҫтым.

— Утыҙынсы йылдарҙа, ти, колхоз йыйылышы бара икән. Беҙҙең атайҙар, Бүре уҡкан ағайҙар заманы. Булдыңмы шул йыйылышта, ағай?

— Мин урман ҡарауыллап йөрөнөм...

— Әй, әтеү, белмәй ендер. Ул саҡтағы рәйес Шәйәхмәт Кейекбаев отчет докладды менән сығыш я ай, ти. Партия ҡуйған бурыстар хаҡында өйләп, Сталинға маҡтау әм рәхмәт яуҙырып алғас, колхозда йыллыҡ план үтәлешенә күскән: “Йәмәғәт, быйыл беҙ дәүләткә йөн тапшырыу планын арттырып үтәнек, ә бына күкәй йыйыу буйынса артта ҡалдыҡ. Шуның сәбәпле, йәмәғәт, йәғни күкәйҙе йөн баҫып китеү арҡа ында, юғарыла беҙҙең бөдзөттө ҡырҡып ташланылар”. “Бюджет” тигәнде Шәйәхмәт ағай гелән шулай боҙоп әйтер булған, шуны белеп тор алар ҙа, халыҡ дыу килеп көлә башлаған. Йыйылыш уртаһында йоҡлап ултырған бер ирекәй уянып киткән дә күрше енән ораған:

– Ни булған, ә?

– Бөдзөттө ҡырҡалар, ти, план үтәмәгәнгә.

Уяулы-йоҡоло, яңылышыраҡ аңлаған ирекәй икереп торған да өрән алған:

— Инде хәҙер беҙҙең бөзөктө генә ҡырҡып алырға ҡалдымы был хөкүмәткә!

Кәнсәләр соланы емереләме тип торам, әлеге ағайҙар а ылдарға тотондо: Мансур ағай ау ҡулы менән стенаны туҡмап-туҡмап көлә, Бүре уҡкан олатай таяғын таҡылдата, Хәйрулла ағай шап та шоп ботон саба.

— аман торалар, имеш, донъялары теүәл быларҙың, — тип төпкө бүлмәнән, рәйес кабинетынан, ҡартәсәйем килеп сыҡты. — Барығыҙ бар, ҡана, туп алағы боҙҙо көрәп таҙартып алам. — Ул мөйөшкә өйәп ҡуйылған тимер көрәккә тотондо. Ағайҙар таралышты. Тышта ҡараңғы, өйҙәрҙә ут алынған — ҡышҡа ҡарай көн бик ҡыҫҡа шул. Ә төн оҙон, таң атмай талсыҡтыра.

***

Ҡартәсәйем дә, беләм, күп төндәрен йоҡо оҙ үткәрә (мин аман унын менән йәнәш түшәктә әле). Ҡай төндә, түҙмәй, миңә белгертә уяу ятҡанын:

— Нурия, ҡолоҡасым, ин нимә тип йоҡондо осороп ыҙалана ың, тәмле була ла а йоҡо йәш саҡта?

— Мин йәш түгел, ҡартәсәй, ҡарт, — тим. Үҙем дә шуға ышанып ҡуям бәғзе ваҡыт. Ҡарт булма ам, атайым менән әсәйемә булған дәғүәләр минең күңелемде шулай айҡар инеме ни? Ана, Мәүлиҙәнең бер белгәне – "5"-легә уҡыу, аҙаҡ институтҡа инеү, ҡалаға барыу, морожный ашау. Тағы – кемдең күҙе кемгә төшөүен тикшереү. Ә мин сәбәп эҙләйем: ниңә сителеп олаҡты атаҡайым? Бүренең бүре е урманына ҡаса, эттең эте оя ына ҡайта... Әсәйем дә инде, иренә эйәреп китер ҙә аҙаҡ илап еңер, кире алып ҡайтыр ине ирен Толпарлыға. Ҡартәсәйем дә, шул аҡылы, шул ихтыяры була тороп, улын үҙенсә бөгә алманы. Улар ҙа ғәйепле! Ана

ла а, Рабиға апай Әмин абыйҙы балаға күмеп ҡуйған да бер ҡайҙа ла ебәрмәй. Ҡырҙан килгән ирҙәрен ошонда тамырландыра хатта йүнле ҡатындар: мәҫәлән, Гуля-Гөлсөм апай участковый булып Стәрле ҡала ынан килгән милиция Сәмиғуллинды ауыл ирекәйе иткән дә ҡуйған. Инде яловый итектәрен ялтыратып, фуражка ын ҡырын алып, ярты урыҫса, ярты татарса өйләшеп йөрөй ине баштараҡ, тиҙәр, хәҙер күр — ата башҡорт.

Гөлсөм апайға ғашиҡ булған ул, әйткән, ти, бит: "Чукын дисәң, чукынырмын, синең хакка, Гулякаем", — тип. Кеше ерле юкты өйләмәҫ инде. Шулайтып, суҡына яҙып, өйләнгән. Инде уның ҡатыны халыҡ ара ында ҡуш исем менән йөрөй: Гуля-Гөлсөм. Ике ҡыҙҙары бар, йәғни Сәмиғуллиндың (уны ауылда фамилия ы менән йөрөтәләр, милиция булғас ни) ҡойроғо ҡатҡан Толпарлыла. Әйткәндәй, Гуля-Гөлсөмө уға «әттәгенәһе» тип татарсалап өндәшә, шул бер һүҙ менән арбай. Килешкәндәр инде...

Бәс, минең атайым Баязит Ҡарамырҙиндың балалары юҡмы ни? Әсәйем, бахыр әсәкәйем, игеҙәктәр табып та ҡараны?!. Ярар! Был ағыш күленә күп сумғаным бар... Фекеремде көсләп икенсе юҫыҡҡа борам. "Чукын дисәң, чукынырмын" тигәне хикмәт әле анау Сәмиғуллиндың, милиция башы менән. Был хаҡта ла ҡартәсәйемдән тотоп орашма ам, исемем Нурия булмай ҙа а?

— Ҡыҙыҡ, иветә, ҡартәсәй, Сәмиғуллинды әйтәм, кем уны суҡындырырға тора инде башҡорт ауылында? — тип "әңгәмәгә шим алып" (Бүре уҡкан олатай үҙе) ебәрҙем.

— Аҡ батша заманында, Ҡазан ханлығын ҡолатҡас, татарҙарҙы көсләп суҡындырғандар, шунан ҡалған һүҙ...

— Аҡ батшаға беҙҙең олатайҙар баш алған. Суҡынмаҫ өсөнмө?

— Кем өйләй шуларҙы, ошо баланың башын ҡайнатып? Әхмәҙин ағайҙыр, күп бул а.

үҙе бөттө ҡартәсәйҙең. Ҡыҙыҡ тойолдо был тарих миңә. Бер тура килтереп, Әмин абыйҙан да төпсөндөм.

— Иван Грозный заманында булған ул, ун алтынсы быуатта. Шуға ла татарҙар уны Иван Яуыз тип йөрөтә.

— Аҡ батшанымы?

— Тарихсы булырға уйлаша ыңмы әллә, Нурия? Бул, шунан да мауыҡтырғыс фән юҡ, тиер инем – математика бар. Ә беҙҙең ырыу башлыҡтары суҡыныуҙан да, эйе, ҡотҡарған халыҡты. Рәсәйгә ҡушылғас, килешеү төҙөлгән, шуға ярашлы башҡорттарға үҙ динендә тороу, үҙ ҡағиҙәләрен тотоу әм ергә аҫабалыҡ хоҡуғы бирелгән. Ул хаҡта, уҡығың кил ә, минең андыҡта үҙебеҙҙең мәғрифәтсебеҙ Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың яҙмалары, Тәтегәс бейҙең шәжәрә е бар. 100 уҫар тире е менән я аҡ түләргә килешкән ул Аҡ батшаға.

— Ә кем ул Тәтегәс бей?

— Юрматылар ырыуы башлығы.

— Ә-ә, улай икән... Рәхмәт, абый...

ай түгел был күл, тарих күлен әйтәм, мин әле уға ярҙан ғына (сумыу ҡайҙа?!) ҡарайым: тәрән, сик еҙ! Ым ындырғыс тәрән...

7

Беҙҙең алтынсы синыф ҡыҙҙарына был ҡышты әллә нимә булды ул? Утын өйөлгән, ыулы биҙрә, таҡта өртөргә сепрәк-фәлән эленгән мейес ара ына өймәкләшәләр ҙә шыбырлашып, ҡыҭҡылдашып бер булалар. Айырыуса күрше Айыусы ҡыҙҙары шулай итә. Минән бигерәк тә үҙ йәшерәләр. Мәүлиҙә әйтә, улар беҙҙән өлкәнерәк, шуғалыр, ти. Айыусыла дүрт йыллыҡ ҡына мәктәп, артабан бе-

ҙгә алты-ете саҡрым йөрөп уҡырға, шуға ул ауылда балаларын һигеҙ-туғыҙ йәш тулмайынса уҡырға төшөрмәйҙәр икән. Әтеү теге ҡыҙыҡайҙарға ун дүртәр йәшме? Мин ун икемә генә киттем, Мәүлиҙә ун өсөнә – бер синыф алға ла һикерҙек бит. Айыусы ҡыҙҙарына ҡыҙығып ҡарай башланым хәҙер. Берәү е, Әсмә исемле е, бигерәк шуҡ, үткер телле. Уҡыуы насар, ә үҙе зирәк кенә күренә.

— Әсмә, мин ине рус теленән шефлыҡҡа алам, ә Мәүлиҙә математиканан отҡор, әгәр телә әң? – Шулай тинем, бер яйын табып. Сөнки Айыусы ҡыҙҙарына яҡынайғым килде. Былтыр улар, ят ыныпмы, шым ғына ине, күр, быйыл үҙҙәрен кластың хужа ы итеп тоялар. Беҙҙең ҡыҙҙар былар янында тауыҡ эргә ендәге сепей кеүек, ә малайҙар хаҡында әйтеп тә тормайым: көҙгө әтәстәр шикелле муйындарын урмайтып, тортошоп йөрөйҙәр шунда. Бер Кәбир генә араларында әҙерәк күҙгә эленә.

Шунда уҡ риза булды Әсмә. Ике е лә кәрәк: рус теле лә, математика ы ла — Өфөгә атыусылыҡҡа уҡырға кергем килә, етенсенән уң, ти. Бушҡа өйрәтмәç ең, атайым солоҡ балы бирер, ундай бал Айыусыла ғына, йөҙйәшәр ҡарағай ҡыуышында, бер солоҡтан утыҙ кило сыға, тип нығытып та ҡуйҙы. Әлүктән әҙер атыусы һымаҡ?

Дуçлашып алдыҡ. Мәүлиҙә, әллә мине көнләшеп, Әсмәне өйрәтешке е килмәне, өйҙә бушамайым, тип ылтауланы. Әй, яңы әхирәтемде генә өйрәрлек белем үҙемдә лә бар, «2»-ле тоҡсайы түгелмен. Ата-әсә енән рөхсәт алып, аҙна ына бер көн беҙҙә ҡуна ҡала башланы Әсмә. Өйҙәгеләр ҡаршы килмәне, өй ҙур ҙа-
а. Камил менән Камила ҡай ы ваҡыт ҡамасаулай, тап беҙ дәрес әҙерләп ултырғанда кәрәк булып китә уларға үрәт төшөрөргә, минән ҡалған Әлифбаны асып хәреф өйрәнергә. Юрамал ҡаты итеп "уҡыта" башлайбыҙ ҙа тегеләрҙе, тиҙ үк ялҡып, йоҡларға ыпырталар.

Икенсе сиректе Әсмә математиканан ныҡлы «3»-кә, рус теленән «4»-кә тамамланы. Ә Яңы йыл кисә ендә бер мәрәкә булды, ҡыçҡаһы, яңы әхирәтем үҙенең шаянлығын тағы бер ҡат раçланы. Мәктәптә карнавал ойоштторҙолар, беҙ өлкән синыфтар менән бергә киске ен килдек байрамға. Айыусыларҙы ат егеп, санаға тейәп килтергәндәр. Алдан күрмәнек карнавал костюмдарыбыҙҙы, төрлөбөҙ төрлө мөйөш- әйештә кейенеп, матур итеп биҙәлгән, йым-йым итеп торған шыршы тирә енә йыйылдыҡ. Төлкө лә бар, бесәй ҙә, Буратино, моряк — ниндәй генә костюм уйлап тапмағандар. Мин индианка булып кейендем. Зөлхизә өләсәйемдең хәйерлегенән 4-5 метрлыҡ тауарын инәлеп орап алдым да, шуны күлдәк тышынан урап, осон Шәрифә апайым бүләк иткән брошка менән ҡаҙап ҡуйҙым. И, әлдә шул апаҡайым бар, ауылға ҡайтҡылап тора, ҡайтҡан айын берәй матур әйбер алып килә. Сәсемде икенән үреп арҡама алдым, ике ҡаш ара ына буяу өрттөм дә, эш тә бөттө: мин — ҡойоп ҡуйған инд ҡыҙы. Шунда баштан-аяҡ телгән йүкәгә уранған берәү ауыртҡансы беләгемде семтеп ҡасты. Йүгереп барып тотҡайным, үҙен дә бороп семетәйем тип, теге "Сеү!" тип ым бирҙе. "Кем ин?" — тим. "Бисура", — ти. Ысын, әй, уйған да ҡаплаған бисура. Хәйер, уны, бисураны, кем күргән? Күҙенә ҡара ам, бәс, Әсмә бит! Уның ғына күҙҙәре шулай ут булып яна ала. Бармағымды иренемә тейҙереп алдым, йәнә е, — ләм-мим. Мәҙәк күреп, гел әлеге бисура тирә ендә өйөрөлдөм. Бына бер саҡ математика уҡытыусы ы Сәкинә апа килә ята, туп-тура бисураға табан.

— Ҡыҙыҡай, карнавалдан уң йүкәңде миңә бирер ең әле, берәй йыуғыслыҡ, — тине апа. Ишетеп торам. Шул мәлде теге ялбыр йүкәләр араһынан бисураның ҡулы килеп сыҡты.

— Шиш! — тине бисура әм күр әтте лә «шиш»ты. Сәкинә апай текәлеп ҡарап торҙо ла уçал итеп бармаҡ яныны:

— Бына мин иңә ҡуйырмын әле математиканан яҡшы отметка. Институт хәҙер иңә – "шиш!"

Ҡурҡыр, ти әм, бисура ла бирешмәне:

— Нимәгә миңә ул институт, бер йыуғыслыҡ йүкә оранып йөрөргәме? – тине юрамал ҡарлыҡҡан тауыш менән.

Әсмә әхирәтем генә шулай ҡыйыу була ала! Ғорурландым. Үҙем, ҡурҡыштан, тиҙ генә ҡулынан етәкләп, кеше ара ына алып барып индерә алдым бисураны. Апа ла ҡыуа төшмәне, аҙаҡ белерем әле кем икәнен, тигәндер.

— Танынымы икән? — Әсмә барыбер шөрләгән әҙерәк. — атыусылыҡҡа математиканан имтихан бар, тик апа «2»-ле сығар а?

— Танымаған ул ине, әтеү исемең менән әйтеп әрләр ине.

— "Ҡыҙыҡай" тине бит.

— Йүкә ара ынан сәсеңдең таҫма ы күренә лә ә...

Шунан Әсмә бер ҡараңғы класҡа кереп, бисуралығынан ҡотолоп сыҡты. Эстән йәйге күлдәк кейгәйне, аҡҡа зәңгәр сәскә төшкән. Аптырап торманы, таҫмаһын һүтеп сәсен тағатты ла, кеҫәһенән ҡыҙыл косынка сығарып, башына бәйләне:

– Ударница Наза! — тине лә, "Наза, Наза, Наза унған ҡыҙ бала..." тип көйләп, мине байрам шауы һарҡылған яҡҡа әйҙәне...

***

иҙәм, Мәүлиҙә әхирәтем мине Әсмәнән ысынлап көнләшә. Иҫәркәй, тыуа-тыуғаныбыҙ бирле бер урамда уйнап, Әмин абыйҙың "бәрейе ҡупҡанда" икәүләп ҡурҡып, күп нәмәләрҙе уртаҡ кисереп, уны ташлап ҡуямдыр шул? Атайым ҡырға сығып китеп, буҙлап ултырғанымда, башҡа берәү түгел, Мәүлиҙә әйтте бит әле миңә: "Илама, Нурия, мин иңә атайымды биреп торам", — тип. Уларға бар ам, ҡолағыма шыбырлай һала торғайны: "Атайым — иңә, уйнап туйғас, ҡалдырып китер ең". Әлбиттә, Әмин абый менән уйнамайым, ә Мәүлиҙә менән. Уларҙың өҫтәлдәре ҙур ине, шунда теҙелеп ултырып ашайҙар, дәрес әҙерләйҙәр. Күмәкләп. Күңелле. Ә беҙ Мәүлиҙә менән шул өҫтәл аҫтында йомаҡ әйтешәбеҙ, туҙға яҙмаған әкиәттәр уйлап сығарабыҙ: имеш, бер бабай төнгә ҡалып урмандан ҡайтып килһә, ҡаршыһына сәстәрен ялбырлатып албаҫты килеп сыҡҡан... Абау! Имеш, бер бисә эңерҙә йылғала кер сайҡап торһа, баҫмаға шүрәле килеп ултырған да оҙон йөнтәҫ бармаҡтарын йәлпелдәтеп саҡырған: «Кил әле, ҡыҙый, ҡытыҡлашайыҡ»,– тип... Абау! Ҡыҙыҡ та,ҡурҡыныс та – ныҡ шөрләй башлаһаҡ, иҙәнгә төшөрөп тиерлек өҫтәлгә ябылған клеенканың ситенән күҙ һалабыҙ: икебеҙгә берәү булһа ла атай бар, ана, йотлоғоп гәзит уҡып ултыра.

Ишбирҙеләре тыуғас, өҫтәл аҫтына, бөтә өйгә ул хужа булды...

Үҙенсә, Мәүлиҙә мине Айыусы ҡыҙҙарынан биҙҙерергә тырыша, тегеләрҙең алама ғәҙәттәренә күҙемде аса. Уларының тәнәфес айын мейес артында шыш-быш килешеп торғанын күрәм. Мәүлиҙә барып тыңлап та килгеләй. Бер шулай, аңдып торған еренән, күҙе дүрт булып килеп ултырҙы партаға: "Ҡыҙый, тегеләрҙең айлығы башланған!” — ти.

Минең дә күҙ дүрт булды. Беҙгә, ҡыҙҙарға, "Йорт эштәре" тигән дәрестә Рәлиә апабыҙ аңлатҡайны ул турала. "Менструация башланыу — ҡыҙҙарҙың өлгөрөп етеүе билге е, — тигәйне. – Ул айына бер тапҡыр була, шуға ябай телдә "айлыҡ" тип тә йөрөтәләр”.

"Өлгөрөп етеү" тура ында апанан ентекләберәк орағы килә ине, ояldыҡ...

— Бәс, әтеү улар кейәүгә бар а ла буламы? — Мәүлиҙәнән орайым — ул ҡайҙан бел ен инде? Ә юҡ, белә икән. Апайҙары бар ҙа а.

— Эйе, — ти, — хатта бала таба алалар.

— Кит!

— инең айлығың юҡмы әле?

— Юҡсы!

Шул өйләшеү икебеҙҙе оторо ныҡ яҡынайтты. Бер иш етеш еҙлегебеҙ барсы: ана, башҡалар "өлгөрөп еткән", ә беҙ аман — бала-саға, ары томшоҡ...

Теге «шиш» хаҡында ла шипкерттем Мәүлиҙәгә бер юлы. Әсмә хәҙер имтихандан ҡурҡа, тинем, математиканан «2»-ле ҡуйыр Сәкинә апа,тип.

– Ҡурҡмаһын, быйыл етенселәргә сығарылыш имтиханы булмай,– тип тағы күҙемде дүрт итте Мәүлиҙә, – һигеҙенсенән һуң бирәсәктәр таныҡлыҡты. Ә уңарсы Әсмәне кәмендә «4»легә тартырбыҙ, отҡор бит ул.Тик һин уға әүрәп, мине онотма...

И, әхирәтемде, киң күңелле ҡайһылай! Көнләй мине көнләүен, әммә Әсмәне ташлай алмайым. Ҡышҡы каникулдан уң тағы бер хәл булды, шунан бирле мин Әсмәнең дә ысын дуҫ икәненә тамам инандым. Айыусы ҡыҙҙары ла уны минән ҡыҙғанып йөрөгән әллә? Юҡ а, анау хаслыҡты ҡылырҙар инеме ни?

Бер көндө тәүге дәрес, ни сәбәптәндер, булманы. Малайҙар уйнарға сыҡты. Ә беҙ, ҡыҙҙар, класта ултырабыҙ. Дөрөҫөрәге, ауылдыҡыларҙан мин генә ҡалғанмын, бүтәндәре өйҙәренә таралышҡан, икенсе дәрескә килеп етә алалармы, юҡмы — уны уйламайҙар. Шунда Айыусы ҡыҙҙарының бере е мине мейес ара ына саҡырҙы. Барҙым, әлбиттә. әр кем дә аяҡ баҫа алмай ул серле мөйөшкә, эйе, улар унда саҡта.

— Нурия, нишләп үҙеңде ҡарамай ың, — тип башланы бере е.

— Ҡашың сабата кеүек бит, йәм еҙ, — тип өҫтәне икенсе е. — Әйҙә, ҡыйғаслатайыҡ шул ғибрәт ҡашыңды, йөрөмә ҡара морда булып.

Иҫемде йыйып өлгөрмәнем: үпкәләргәме быларға, рәхмәт әйтергәме — мине мөйөшкә ҡыҫырыҡлап, ҡулдарымдан тотоп, йылтыр бер тимер ҡыҫҡыс менән ҡашымды йолҡорға тотондолар, әллә икәүләшеп, әллә өсәүләшеп, күҙгә уттар күренде, әсе итеп ҡысҡырып ебәрҙем. Ярай, шул минутта Әсмә килеп керҙе, урамда булып ҡалған икән. Тауышты ишетеп, теге ҡыҙыҡайҙарҙы арма-торма төрткөләп, мине айырып алды.

— Ҡара морда, тинеләр...– Әхирәтемә ошаҡлайым тегеләрҙе.

— Фамилияң Ҡарамырҙина булғас, — тип йупайтлай был мине.

— Морданың нимә икәнен генә беләм! Ҡарасман булғанға үсекләйҙәр. Ә миңә хәҙер ныҡлап шул ҡушаматты таҡ алар?!

— Таҡтырырым мин уларға, үҙҙәренә унарҙы йәбештереп ҡуйырмын!

Ышанам Әсмәгә, шулай итер ҙә. Мәктәптән ҡайтышлай Мәүлиҙәгә лә өйләнем был ваҡиғаны. Ул өйөнә ҡайтмаған, Ишбирҙенең класы тирә ендә, ишекте ҡыҫып ҡараштырып йөрөгән, шаярмай микән дәрестә ул ен ботағы, тип. Быйыл беренселә уҡып йөрөгән була уныһы...

— Мин бул ам янында, айыусылар улай шаша алмаҫ ине, — тигән булды Мәүлиҙә ихлас итеп.

— Эйе шул. — Мин дә ихлас .

— Ә ин фамилияңды үҙгәрт! — Мәүлиҙә шулай йыш ғәжәпкә ҡалдыра, уның үҙҙәре көтөлмәгәнсә була, минең башҡа ла инмәгәнсә. Ата ы Әмин абый белеп әйтәлер, математиктар яһай донъялағы бөтә асышты, тип. Мәүлиҙә шул фәндән берәүҙе лә алдына сығармай бит.

— Өйөң тулы фамилия, — тип дауам итте әхирәтем, — тот та шуларҙың берәй енә алмаштыр.

— Өйөм тулы?.. Ҡарамырҙин — атайымдыҡы, ҡартәсәйемдеке лә шулай. Зөлхизә өләсәйем Нәҙерғолова. Тукта, ул – тәүге бабайынан ҡалған фамилия, ә ҡу-

райсы олатайым Аҡсурин булған. Эйе, әсәйемдең ҡыҙ фамилия ы ла а — матур, иветә?

Яйлап был өйләшеүҙе онотток, мәктәп бала ының ҡулынан килмәҫе билдәле лә фамилия алмаштырыуҙың. Айыусы ҡыҙҙары ла онотто "ҡара морда"ны.

Ә оҙаҡламай миңә Әсмәнең изгелеген ҡайтарырға мөмкинлек тыуҙы. Үҙенә үк түгел, бүтәнгә. Ҡартәсәйем әйтә, изгелекте уны шулайтып та ҡайтарып була, ти.

Икенсе синыф уҡытыусы ы мине, октябряттарының вожатыйы булғас, бер дәрескә балаларға күҙ-ҡолаҡ булырға ҡалдырып торҙо, үҙен агитпунктка саҡырғандар, "Молния" сығарырға — стена гәзите, унда колхоз ялҡауҙарын тәнҡитләп яҙалар.

Балалар, мине белгәс, аптыраманы, тауыш-тын ыҙ ғына парта ара ына ултырыштылар.

— Нимә бирелгәйне өйгә эш итеп?

— Әкиәт уҡырға. ороҡай тура ында.

— Йә, кем өйләй?

Зөлфәр исемле малай ҡул күтәрҙе. Таҡта янына саҡырҙым, үҙем, ысын уҡытыусы ымаҡ, өҫтәл артында ултырам.

Малай минең янға сығып баҫып, өйләй башланы. Урманда аҙашып, ҡырағай йәнлектәрҙең ҡотон алған бесәй хаҡындағы әкиәт. Зөлфәрҙең тасуири итеп, килештереп өйләүе таң ҡалдырҙы мине.

— ороҡай, эстән ҡалтыран а ла, урмандағы йыртҡыс хайуандарҙы ҡурҡытырлыҡ ҡалын тауыш менән мырауланы: "Мырр-рам, мырр-рам, бөтәгеҙҙе лә ҡырр-рам!" — Зөлфәр шулай тип көсәнеп әйтте лә шымып ҡалды.

Ҡолағыма нимәлер сөбөрләгәне ишетелде. Көсәнгән ыңғайға малай бес итеп ебәргән дә шуға ҡурҡып шымтайып тора икән. Класс белмәй ҙә ҡалды теге эште, мин яман тауыш менән ҡабатларға керештем: "Мырам-мырам..." Үҙем баланың салбарына ҡарайым — еүешләнмәгән, бот буйлап сәптергәндер.

— Дауам ит, Зөлфәр, маладис, — тигәс, малай ни, дәртләнеп, артабан өйләргә кереште. Йәғни мин дә берәүҙе ауыр хәлдән йолоп ҡалдым. Шул уйҙан бына әллә нисәмә көн күңелем ирәйеп йөрөй.

***

әүетемсә бара шулай тормош. Көндөҙ — мәктәп, кисен — кәнсәләр. Шул кәнсәләр туп а ында гәпләшкән ағай-бабайҙарҙы тыңларға уғата әүәҫләнеп алдым. Эшемде эшләп йөрөйөм, ҡолағыма хәбәрҙе элеп йөрөйөм. Өйҙә гелән ҡатын-ҡыҙ булғас, Камилды иҫәпләмәгәндә, миңә ифрат мауыҡтырғыс ир-аттың хәбәре. Бөтөнләй икенсе нәмәләр хаҡында үҙ йөрөтә улар, ҡатындар ымаҡ ыуалған ыйыр, йыуылмаған кер, өҫтө килмәгән икмәк, имсәк ташлаған бала әм башҡа йөҙ ишеткән үҙҙе тылҡымайҙар. уңғы арала ағайҙарҙың ҡорған әңгәмәләре гелән кукуруз, кәзә тирә ендә әйләнә.

— Тотош СССР-ҙы кукуруз менән күмә бит был Никита Сергеевич, ә? Ҡайҙа үҫә, ҡайҙа үҫмәй ҙә ә инде ул?

— Беҙҙең яҡты күмә алмаҫ, ана, шәкәр сөгөлдөрө киңәйә. Күршеләр, Ҡырмыҫҡалы районлары, данланды бит ысвиклалары менән. Банат Батыроваларын тотош ил белә.

— Мин уны күреп беләм, Үтәгәндән бит әсәйемдең нәҫеле. Шул ауылдың Сәйетғәле тигән кеше ендә ирҙә ул Банат. — Быны түбән ос Закир ағай әйтте, тауышы уныҡы. Шунда, әллә ҡайҙа, туғандары бар икән, ә?

— 1948-ҙә, шикелле, Ленин ордены бирҙеләр Банат Батыроваға, яңылышмаам? — Бүре уҡкан олатай ҙа, мөмкинлектән файҙаланып, үҙенең хәтерле икәнле-

генә баҫым я ап ҡала.

Шунан кәзәләргә төшөп китәләр. ыйыр малын ҡыҫҡартырға ҡушҡаны өсөн Хрущевтың тетмә ен тетеп алалар.

— Кәзә лә булдымы мал! — тип бахыр кәзәне, өтөн ауып эсеп, итен ашап, мамығын тарап алып изгелек күреүҙәрен онотоп, бөтөрөп ташлайҙар.

Нимә генә өйләмә ендәр, әр осрашыуҙа " уғыш" тигән үҙ ҡалҡып сыҡмай ҡалмай. Был ағайҙарҙың тормошо, гүйә, ике осорға бүленгән: уғышҡа тиклем әм уғыштан уң. Мин ул ике осорҙо ике яр, аръяҡ әм бирьяҡ итеп күҙаллайым, ә уртала, ҡайнап торған ут, ҡан, күҙ йәше урғылып аҡҡан тарафта, — уғыш үҙе. Моғайын, тамуҡ шундайыраҡ булалыр? Үҙем күрмәгән уғышты уйламай, пәйҙәләп ҡарамай булдыра алмайым, сөнки мин белгән кешеләрҙең күбе е уны көн дә иҫенә төшөрә. Зөлхизә өләсәйемдең уландарын, ҡурайсы олатайымды йотҡан ул тамуҡ. Әсәйемде яратҡан Барый ағайҙы әләк иткән, күрше Ғәҙилә инәйҙе хыялыйландырған. Мансур ағайҙың ҡулын өҙөп алып ҡалған... Клуб янындағы обелискыға уғышта башын алғандарҙың исемлеге яҙылған, уҡып осона сығып етмәҫлек. Бер Мәүлетҡоловтар ғына ундан ашыу, буғай. Нәҙерғоловтар — бишәү, икәү е минең бабайымдар: Рәхмәтулла менән Зәйнулла. Эйе, бөтә илдең, бар халыҡтың яҙмышын икегә айырып аға ул ҡанлы йылға. Китапты ас аң — фронт шиғырҙары, радионы ебәр әң — фронт йырҙары, ағайҙарҙы тыңла аң — фронт хәтирәләре. Беҙ — уғыштан уң тыуған балалар, ул дә шәтле осорҙо күргәндәй итеп кисерәбеҙ. Сөнки кесе йыһанда сағыбыҙҙа уҡ шул тиң еҙ юғалтыуҙар хаҡында ишетеп, йөрәк ҡаныбыҙҙы һуғарҙыҡ, шул мәңге баҫылмаҫ әрнеүҙәр күҙҙәренә, һүҙҙәренә һеңешкән кешеләр араһында үҫтек. Камил менән Камилаға, бәлки, был шауҡым ҡағылмаҫ?

***

Бөйөк Еңеүҙең 15 йыллығын байрам итәсәкбеҙ. Толпарлы ғына түгел, барлыҡ Советтар Союзы, совет алдаттары фашистарҙан азат иткән Европа илдәре тантанаға әҙерләнә. Етеп тә килә ул көн – 9 май.Тышта яҙ хөкөм һөрә, апрель елдәре өрә. Ҡояш бөтә йылыһын, яҡтыһын, сәмен ҡышты һындырыуға еккән,ҡайнар нурҙарын ергә көлтәләп ҡоя ғына. Ҡар бүҫкәрә, күҙгә күренеп йоҡара, емшей бара. Оҙаҡламай Күрәнленең боҙо ла ҡуҙғалыр.

Кисә башҡорт теле уҡытыусы ы уғыш тема ына инша яҙырға ҡушты. Конкурс була, тине, уйларға бер аҙна ваҡыт бирҙе. Нимә яҙырға икән, нисек? Әллә бабайымдарҙы яҙайыммы? Дәфтәр тултырып теҙер үҙем бар ымаҡ...

Кәңәшләшергә тип Бүре уҡҡан олатайға киттем. Мин уны ихластан ҡан олатайымдай күрәм. Гел ҡатындар йәшәгән беҙҙең өйҙөң иң тоғро ярҙамсы ы лаһа. "Олатай ниндәй була?" тигән темаға инша ҡуш алар, мин тик уның хаҡында яҙыр инем. Ә атай хаҡында ҡуш алар? Моғайын, Сәмиғуллин иҫемә төшөр ине иң беренсе. Уның ике ҡыҙына күҙем ҡыҙа минең... Атайҙары сыйырсыҡ оя ы эшләп бирә, буран сыҡ а, уҡыуҙан ҡаршы барып ала, мәктәп алыҫ беҙҙең, ауылдың арғы осонда. Бер тыҡрыҡ аша ғына йәшәгәс, мин дә Сәмиғуллиндың шинель салғыйына тағылып ҡайтам, ә ул бер ҡыҙын, минән ике синыф алда уҡығанын, етәкләй, бәләкәсерәген күтәреп ала. Мине атайым тик бер генә тапҡыр күтәрҙе, армиянан ҡайтҡас... Шуға күрә уның хаҡында иншаға яҙыр үҙем дә юҡ. Ә өрләк-атай менән өйләшеүемде, уны ағынып ығылып илауҙарымды яҙ ам, диуана булған, тиерҙәр...

Бүре уҡҡан олатай өйҙә күҙлек кейеп гәзит уҡып ултыра ине. Мәктәптә уҡыу эләкмәгән уға, үҙ алдына өйрәнгән.

— Дары еҫкәп ҡарамаған кеше яҙған быны! — тип гәзитте елкеп- елкеп алды

ул, мине күргәс. — Нурия, мә, ҡысҡырып уҡы әле, күҙем әллә яңылыш күрә?

Уҡып сыҡтым. Мәҡәләлә фронттағы бер хәл яҙылған. Күҙ асҡы ыҙ ҡышҡы буранда, бер төркөм совет алдаттары блиндажда бутҡа ашап ултырғанда, немец алдаты аҙашып килеп керә. Командир быны ашатырға әм штабҡа алып барып тапшырырға бойора. Беҙҙең бер алдат "тел"де штабҡа алып китә. Юлда, приказды боҙоп, теге немецты ата ла үлтерә. Блиндажға ҡайтҡас, немец ҡасып китергә итте, шуға аттым, тип аңлата. Командирына дөрөҫөн өйләй, улар ике е бер төбәктән, яҡын дуҫтар икән. Ә командир приказды боҙған өсөн дуҫын ҡулға ала әм штабҡа оҙаттыра, тик немецты үлтергән алдатҡа әллә ни ҡаты яза бирмәйҙәр. Яҡташтар уғыштан ике е лә иҫән ҡайта, әммә шул хәлде онотмайҙар, бер-бере е менән ҡатышмайҙар.

— Ниңә, олатай, шыма ғына яҙылған да а, — тигән булдым.

— Шыма, бик тә шыма! Әммә уныһы нисшут, любой дүрәк (олатайҙың, йәне көйһә, ике-өс урыҫ һүҙен туҡтауһыҙ ҡушып һөйләй торған ғәҙәте бар) яҙа хәҙер һуғыш тураһында. Уйҙырма яҙыуҙары нервыға тейә, башҡаһы нисшут, вәт тәк. ин йәш бала, уғыш төшөнә лә инмәгән, барыбер, аҡылың бул а, ышанмаҫ инең мынау гәзиттәгенә. Әллә ышандыңмы?

— Әллә...

— ин бына күҙ алдыңа килтер. алдат икән ең, ти. Ҡулыңда автомат. Илеңә баҫып кергән фашист, донъялағы иң хас дошманың, ҡапыл ҡаршыңа килеп баҫа. Нишләр инең? Тиҙ яуап бир!

— Атып йығыр инем!

— Ә ниңә уға бутҡа ашатмай ың?

— Ул бит ҡунаҡ түгел, дошман. Минең ике бабайымды үлтергән.

— Теге командир урынында нишләр инең?

— Ә, бәлки, ул "тел" ҡиммәтле булғандыр, олатай, берәй немец генералы?

— Генерал буранда бер үҙе йөрөмәй, ул йылыла, охран менән, сигәрит тартып, шнапс тигән араҡы йотоп ултыра. Был бахыр ябай нимес алдаты булған инде. Йәл, эйе, ул да әҙәм бала ы, әммә уғыштың үҙ ҡануны: йә ин дошманды үлтерә ең, йә ул — ине. Ысын дөрөҫөндә и ә блиндажға килеп ингән ул нимескә бер ыңғай ун алдат атып ебәрер ине. Ундай мәлдә тиҙлек хәл итә, беҙҙең старшина әйтә торғайны «реакция» тип. Аҙаҡ, атҡас, уйлап та ҡуйырҙар ине, быны "тел" итергә лә булған... Әммә тәүге реакция: дошманды юҡ итергә! Вәт.

— Бүре уҡҡан олатай, ин үҙең Мәскәүҙе аҡлап ҡалған ың немецтан, өйлә әле шул турала?

— Ҡайҙан белдең уны, Нурия?

— Кәнсәләр йыйыштырғанда ишеттем, үҙең әйттең дә...

— Мәскәүҙең үҙендә үк булманыҡ, ә уны аҡлауыбыҙ хаҡ. Калуга өлкә енең Чернышено тигән ауылы эргә ендә уғыштыҡ. Унан — туп-тура Мәскәүгә юл ята, дошманды үткәр əң, баш ҡала ҡоланы, тигән үҙ. Үткәрмәнек! Беҙҙең хәрби частың алдаттары тотошлай тиерлек әләк булды. Окопта, автомат тотҡан килеш, һуңғы минутынаса атышып, ҡан ҡатыш тупраҡҡа күмелеп ерләнде улар... Донъяның аҫты өҫкә әйләнде унда: ике яҡлап та туптар атыла, пулялар ыҙғыра — мәшхәр, балаҡай. Мәскәү оборона ы бит. Тәбиғәт үҙе лә ярҙам итте беҙгә,тыуған ер азатлығы өсөн һуғышыусыларға: декабрь һалҡындары əҙ немецты туңдырып үлтермәне... Ә беҙ ҡыштан ҡурҡмайбыҙ,сыныҡҡанбыҙ. Бер алдатыбыҙ ҙа бер аҙым да артҡа сигенмәне. Артта — Мәскәү, унда, Генштабта, — Сталин үҙе!

Олатайҙы ныҡ тулҡынланып тыңланым. Аҙаҡ автомат тотҡан көйө аяғүрә

үлгән, окопта ҡанлы тупраҡҡа күмелгән совет алаттары күҙ алдымдан китмәй йөҙәтте. "Мәскәүҙе аҡлаусылар" тип инша яҙғас ҡына, күңелемдәге тетрәнеүҙәр дәфтәр битенә төшкәс кенә тынысландым. Төп геройым, әлбиттә, Әхмәҙин Көҫәпҡолов олатай ине.

Иншама "5"-ле алдым. Дәрестә маҡталғас, Айыусы ҡыҙҙарының бере е: "Уйлап сығарырға Нурияны ҡуш", — тип үҙ осорҙо.

икереп торҙом да:

— уғыш ул иңә мейес ара ында ҡытыҡлашып тороу түгел! — тинем тегеңә. — Унда минең Абдрахман олатайым, бабайҙарым ятып ҡалған!

Теге ҡыҙыҡай шым булды, башын хатта парта аҫтына тыҡты, оялышынан.

***

Иншам тура ында өйөнсө алырға тип бар ам, Көләкәс Сәғүрә әбей бошоноп ултыра. "Бабайың лапаҫта, Ыласын менән хушлаша", — ти.

Атылып тышҡа сыҡтым. Ишеген иплә п кенә асып, лапаҫҡа индем. Олатай бер түмәргә ултырған, икенсе түмәрҙә Ыласын тора, ҡанаттарын ҡаушырып. Бер-бере енә ҡарашҡандар ҙа, гүйә, донъяларын оноҡҡандар. Миңә иғтибар итеүсе лә юҡ. Ыласындың ҡашы елкенгәндәй булдымы?

— иҙә ҡыйғыр ҡош, иҙә, — тине олатай. – Азатлыҡты кем көҫәмәй?! Ана, бүренең бүре е – әҙер тамаҡ, йылы оя ине — ташлап, урманына ҡасты. Иреккә! а-рыгүҙ бәйгә ултырҙы... Кем нимәгә өйрәнгән шул... Ә бөркөттөң көнө — ауала, бейектә! Барыбер ныҡ эйәләшкән, йәлләй мин ҡартты...

Ҡулымдан етәкләп тышҡа алып сыҡты ла олатай, ауыр көр өнөп, миңә сер систе:

— Ыласынды иреккә осорам.

— Ә Кәбир? — тип әйткәнемдә белмәй ҙә ҡалдым.

— Нурия, ин белә еңме дуҫыңдың рәсем төшөргәнен ( үҙҙе ситкә борҙо)? — ай, маһир ул. Рәссам булырға хыял итә икән. Булыр, тамсы ла шикләнмәйем.

— Беләм. Кластың стена гәзитен икәүләп сығарабыҙ: мин төртмә шиғырҙар яҙам, ул үрәт төшөрә. Байрам шиғыры ла яҙам, кәрәк ә.

— ы, стенгәзит... ин уның башҡа үрәттәрен күргәнең бармы? Әйҙә әле, бере - ен күр әтәм, миңә бүләк итте. андыҡҡа алып ҡуйҙым.

үрәтте күреп, тел еҙ ҡалдым. Йылға ярында ат өҫтөндә аҡ сәсле мө абәт ҡарт ултыра, яурынында — бөркөт. Я рабби! Был бит – Бүре уҡҡан олатай, ә яурынында — Ыласын. Тымыҡ ҡына ағып ятҡан йылғаның үҙәне күкшел-йәшел күрән менән ҡапланған — үҙебеҙҙең Күрәнле! Ана, Әнкәләр осо, Хәйрулла ағайҙар йорто шәйләнә беленер-беленмәҫ кенә. Арыраҡ — иген баҫыуы, йәй мәлелер, арыштар зәңгәр ыуыраҡ төҫтә, бик бейек тә үҫмәгәндәр, улар ара ында торған ҡыҙыҡайҙың тубығынан ғына әлегә. Ә кем ул ҡара сәсле, сандыр буйлы ҡыҙ? Ал ыу күлдәгенең итәген ел елберләткән... Әллә мин ул? Мин шул!

— Ал ыу күлдәгем юҡсы? — Ахырҙа телгә килдем. Бүре уҡҡан олатай кинәнеп йылмайып тора, баяғы ағышлы ҡиәфәте юҡҡа сыҡҡан.

— Тимәк, ул, иңә шул төҫ килешә, тип уйлай. Рәссам үҙе белә ниндәй буяу айларға. Иғтибар ит әле, мин башыма нимә кейгәнем?

— Салауат батырҙыҡы кеүек йәшел ҡамсат бүрек.

— Ә бармы минең ундай бүрегем? Юҡ. Сал сәстәремде оҙон итеп төшөргән, мин сәсте шул хәтлемгә еткерәмме, кәнишне, юҡ. Ыласындың торҡа ы, күр, алтын менән уҡаланған! Мин менгән атты күр — толпар бит, ҡанаты ғына юҡ. Мин дә, инең кеүек, аптырап орағайным: ниңә улай ҡупшылап я аған беҙҙе?

— Мин ине, олатай, Бөркөтсө ҡарт итеп төшөрҙөм, ә сал сәсенде оҙон иттем, аҡ аҡалға килешә — аҡ аҡыл, саф күңел әм оҙон ғүмер билдә е, ти. Ә инең образында — ысын башҡорт азаматы, ти. Бына бит егет нисек фекер йөрөтә, ауылда әрәм булып ятып ҡалырға тейеш түгел ул. Мин ҡартайҙым, ә Кәбир, Ыласынға алданып, Хоҙай биргән әләтенән йә баш тартыр, шуны ла уйланым әле. Осорам Ыласынды. Килер егеҙ Кәбир менән, өсәүләп осорорбоҙ. Ҡунаҡлар Аҡбейеккә, теләмә ә, йәм тапма а, Уҡтауға осор. Урал да а, ҡайҙа ҡарама — бөркөт оя ҡорор ҡаялар.

— Олатай, Кәбир, тимәк, үрәттәрен яртылаш уйлап сығарып төшөрә, үҙенсә күҙаллап? — Был ораүҙы биреүем осраҡлы түгел, уның "төбө" бар ине.— Ә ул, рәссам егет, хыялый түгелме?

— Хыялый түгел, ә хыяллы — шулай дөрөҫ булыр.

Уф, рәхәт булып китте. Эсемдән генә төрлө тасуир төйнәп, ерле юҡтан бәйән я ап йөрөүем дә, уйлағанымды кино кеүек күреүем дә диуана-хыялыйлыҡ түгел, улай а, ә хыял йөрөтөү икән. Фариза еңгәм әйтмешләй, хисле асылымдыр?

8

Бүре уҡҡан олатайҙан күңелем боларып ҡайттым. Ыласын осоп китер... Ә мин Кәбиргә Бөркөтсө исемен аҡлап тора инем. Рәссам икән дә ул. Хыяллы! Бына ышан ул малайҙарға, дуҫ булып йөрөй, исма ам, берәй үрәтен күр әт әсе? Йәшергән. Бүре уҡкан олатай уны "егет" тип ебәрҙе түгелме? өнәре булғас ни, егет инде. Мин генә йөрөйөм, имеш, бала хисабында, өнәр еҙ! Былай булғас, сығыр микән минән шәп ҡатын?

Башым тағы тубал булды. Әммә көҙгөнән барып ҡараманым. Уй күбәйгәндән генә баштың дәүмәле ҙураймағанын беләм дә ә. Мейенең йыйырсалары арта, ти. Ләкин мейе көҙгөнән күренмәй...

Иртәгә енә Кәбир яғына боролоп та ҡараманым. Әллә иҙҙе – мәктәптән миңә тағылып ҡайтты. Ауылдың тарихын өйләйем, тип юхалана.

— Үҙем беләм, өйҙә ике тарихсы ҡарсығым бар, — тип кенә ҡуйҙым.

— Ә элекке исеме ниндәй булған ауылдың?– Кәбир үҙҙәренең боролошонда шулай тип өрәнләп ҡалды.

— ин белгәнде мин киптереп элгән! — Я иллашып, тоҡойҙом үҙебеҙҙең яҡҡа.

Өйгә инеү менән ҡартәсәйемдән орай башланым:

— Беҙҙең ауылдың боронғо атама ы ниндәй булған? Яңы ын кем ҡушҡан? Ҡасан?

— Туҡта, тын ал тәүҙә, йүгерҙеңме әллә, йөрәгең дөп-дөп килә. – Ҡартәсәйем бер ҡулын түшемә ҡуйҙы, икенсе е менән башымдан ыйпаны.

— И, ҡартәсәй, әлдә ин бар мине иркәләргә, — тинем дә саҡ илап ебәрмәнем. — Өләсәйем бала хөкөмөндә, үҙен йыуатырға кәрәк, әсәйемдең ваҡыты юҡ, игеҙәктәр бәләкәс... Йә, ярай ҙа...Икәүме ни беҙҙең ауылдың исеме?

— Совет власына тиклемге атама ы Муллаҡай ине. Заманында ике мәсете, мәҙрәсә е, атаҡлы мулла ы булған ауылыбыҙҙың. Йәш кенә көйө ул мулланы бында Бохаранан ебәргәндәр, ислам динен нығытырға. Ошонда йәшәп, ҡартайып донъя ҡуйған. Ғаилә ҡормаған, нәҫеле ҡалмаған, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы. Иҫ киткес зыялы булған ул, төркисә лә,фарсыса ла уҡый-яҙа белгән, ти. Мулла абыз тип йөрөткәндәр башта, аҙаҡ — Муллаҡай тип. Ҡайным,Ҡарамырҙа имам, йыш телгә алыр ине...

— Ә ин күрҙеңме мулла абызды, ҡартәсәй?

— Юҡ, әүәлерәк булған ул хәл, әле күсмә тормош көткәндә. Хәйер, беҙҙең ха-

лыҡ йәйге хозурлыҡта ғына йәйләүҙән-йәйләүгә күсенеп йөрөгән, ере күп булғас ни. Ә ҡышын гел бер урында йәшәгән... Эйе ләһә, шул зыялы инсан хөрмәтенә атаған боронғолар ауылды Муллаҡай тип. Ҡырластау итәгендә иҫке зыярат бар, шундағы таш ҡоймалы ҡәбергә иғтибар иткәнең бармы? Муллаҡайҙың ҡәберкәшәнәһе.

— Әүлиә зыяратымы? Айыусыға барған юлда, иветә?

— Эйе. Әүлиә булған Муллаҡай.

— Нисә йыл икән уң беҙҙең ауылға?

— атыбал ҡартатайың силсәүиттә эшләгәндә, мәсет кенәгәләренәнме, әллә башҡа бер яҙыуҙанмы, ҡараған: Муллаҡайға кәмендә 700 йыл, ти торғайны. Тағы бер боронғо атама ы булған әле ауылдың — Балсыҡлы тигән.

— Күршелә генә Аҡмәте ауылы бар, беҙҙең яҡта мәте менән балсыҡтан башҡа нәмә юҡмы ни? Тапҡандар...

— Элек шулай булған бит, яҡында ерек үҫ ә – Ерекле, имән үҫ ә, Имәнле тигән дә ҡуйғандар ауылды. ирәкләп кеше исеме менән дә атағандар атауын.

– Мәҫәлән, Сәйетбаба, иветә? Беҙҙе унда экскурсияға алып барасаҡтар әле, Башҡортостанда иң ҙур башҡорт ауылы, ти. Әтеү ул Ер йөҙөндә, хатта ки бар Йыһанда иң ҙуры! Оһо... Кем булған икән ул Сәйетбаба тигән кеше?

– Сәйет – пәйғәмбәр улы тигәнде аңлата, ти торғайны ҡайным, сабыйҙарға исем ататыуға ҙур мәғәнә һалыр ине ул... Сәйетбаба беҙҙән апаруҡ алыҫ ята, миңә унда юл төшкәне булманы, ә һин бар, күр, ҡалма иптәштәреңдән, тим.

— Ә ҡасан беҙ Толпарлы булып киткәнбеҙ?

— Уны ын хәтерләйем. Мең туғыҙ йөҙ егерме һигеҙҙә,тәүге биш йыллыҡ иғлан ителгән йылды, районДан вәкил килеп, халыҡты сходҡа йыйып, ауылдың исемен үҙгәртеү мәсьәлә ен күтәрҙе: "Дин — иҫкелек ҡалдығы, бөттө хәҙер Муллаҡайҙар!" — тине.

Халыҡ геүләште генә. Әммә власҡа ҡаршы барып нишләй ең? Шунда берәү, әлеге Әхмәҙин ағай шикелле, атыбалдың дуҫы, әйтә ҡуйҙы:

— Йәмәғәт, беҙгә, йәштәргә лә, ҡолаҡ һалығыҙ әле! Әйҙәгеҙ, баш ҡатырмайыҡ, Толпарлы тип атайыҡ ауылыбыҙҙы. Ана, ҡарағайлыҡтаТолпарсыҡҡан тигән күлебеҙ ҙә бар.

Бөтә енең дә күңеленә хуш килде был тәҡдим, шулай хәл ителде. Бына шундай тарих, ҡолоҡасым...

Кәбиргә, моғайын, быларҙы Бүре уҡкан олатай өйләгән, үҙе ҡушҡан да а исемде. Матур ҙа а — Толпарлы. Ә Толпарсыҡҡан күлендә ыу ингәнебеҙ бар ҡыҙҙар менән. Зөлхизә сабынлығынан йыраҡ түгел ул, бесән мәлендә өләсәйем, әсәйем, ҡартәсәйем, мин — әлеге шул дүрт ҡатын – гелән төшөп сайынабыҙ. Үҙе тәрән, үҙе саф күл, бер ҡасан да тонсоҡмай, ыуы нисек алмашына икән, ағып сыҡҡан урыны ла юҡ ымаҡ үҙенең. Борон-борон заманда ошо күлдең төбөнән ҡанатлы ат — толпар сыҡҡан, ти...

***

икелә мендәргә янтайып, сиратылған арыҡ йөнөн урап ултырған Зөлхизә өләсәйемдең ҡулынан орсоғо тәгәрәне: беҙҙең өйләшеүгә мәлйерәп, йоҡлап киткән. Олоғая ул, күҙгә күренеп сүгә. Төҫө уңа барған күҙҙәренә, йоҡарған ҡулдарына ҡарап, өләсәйемдең тамырҙарындағы йәшәү утының әкренләп, шым ғына кәмеүен тоям. Ҡасан ғына әле ул Камила менән Камилды бәүетә ине, аяғына ҙур мендәр алып, шунда ике ен бергә яҭкыра ла... Ҡартәсәйем дә бирешә башланы. Уҙған ҡышҡы каникулда ике малайы менән ҡайтып, бер аҙна тороп киткән Шәрифә апайым да: "Әсәйем ныҡ сауыҡҡан, әбей булған да ҡуйған", — тип бала-

уыҙ һыҡты. Көн дә күргәс, иғтибар итмәгәнем, ысынлап та, былтыр ғына тап-таман камзулы үҙенеке түгел ымаҡ, килеш еҙ, киң күренә — төймә ен шылдырып баҫып бирәйем әле. Татар әбекәй биргән матур төймәм дә бар, «Казбек« ҡумтаһында ята, шуны баҫайым, өйөн өн ҡартәсәйем.

Йөрәгемде ҡапыл шом алды. Йөрәктең төбөнә боҙло ыу ҡойҙолармы ни... Йән өшөү шулай булалыр? Йәшәй генә күр ендәр инде өләсәйем менән ҡартәсәйем. Теге донъя улар ыҙ кителмәҫ, әлегә көтөп тор он, ҡасан да бер унда китмәй ҡалмаҫтар, тик ашыҡтырмаһын, оҙаҡ көт өн! Әхирәт, ысын донъя – уны шулай атай заманында имам килене булған ҡартәсәйем, ғәҙәттә. Әгәр шул теге донъяның адресын бел әм, хат яҙыр инем, әлеге үтенестәремде теҙеп...

Әй, апа түгел әллә, һапата мин, нимәгә аптырайым – теләк теләй беләм дә ә. Бик ихлас, зарығып телә әң, ул күккә аша ла ҡабул була, ти. Шуға ышанам. Ышанғым килә. Шунда уҡ ике ситенә ултырып, устарымды ҡаушырып, ҡысҡырып теләк теләнем. Эстән генә, шыбырлап, хатта уй менән генә лә еткереп була теләкте, ә тауышыңды сығар аң, моғайын, яҡшыраҡтыр: күктә теләктәрҙе ҡабул итеп ултырған Хоҙай Тәғәлә тиҙерәк иғтибар итер, әҙ тиме ни уға мөрәжәғәт итеүселәр, минең ишеләр?

— И, Раббым, Аллам! Зин ар, минең өләсәйем Зөлхизәгә, ҡартәсәйем Рәйханаға оҙон ғүмер бир! — тинем. Шунан өҫтәнем: — И, Хоҙайым, ғәзиз әсәйем Гәүәргә лә, Камил менән Камила туғандарыма ла оҙон итеп бир ғүмерҙе! Үҙемдең дә оҙаҡ йәшәгем килә, и, Раббым, — тигәс, ихластан әйтеп ҡуйҙым: — Беҙҙе ташлап кит ә лә, атайымдан да йәлләмә ғүмерҙе, зин ар, теләгемде ҡабул ит, Алла ы Тәғәләм!

— Рәхмәт төшкөрө, Нурия ҡолоҡасым, атайыңды ла онотманың. ай, оло бит ул атай хаҡы, изге бит ул! – Ҡартәсәйем яулыҡ осо менән күҙ йәштәрен өртөп алды (илап ҡына бара уңғы арала). — Балаҡай, әллә ошолай ихласлығың килеп торғанда, тағы берәй доға өйрәтәйемме, тиҙүк отоп алырһың?

— Отҡорлоғом бар ҙа ул, үҙҙәре аңлашылмай...

— Тәфсирен дә белерһең, аңлатырмын. Ҡоҙағыйҙың ҡоҙағыйы әллә нисә доға ятланы, “Аятыл көрси”ҙе уҡып ултыра гелән.

— инең шикелле уҡымышлы түгелем шул мин, Рәйхана ҡоҙағый. — Өләсәйем, йоҡо онан арынып, ҡолаҡ алып ултыра, имеш, беҙҙең үҙгә. — Нурия, миңә тиҙ ауырыу, ан ат үлем телә, балам, ошоса йәшәгәнем еткән, шөкөр.

— Ни тигән үҙең, ҡоҙағый? Оло кешенең хәтере туҙған була, тиеүем генә. Йәшәйек әле Хоҙай насип иткәнен. — Ҡартәсәйем шулай тип йомоп ҡуйырға иткәйне лә, өләсәйем туҡтаманы.

— Рәйхана ҡоҙағый, үҙҙең дөрөҫө кәрәк, ин үҙең хәлле кешеләрҙең бала ы, әлепте таяҡ тип белгән ең, атай йортонда уҡ. Ә инде ҡайны-ҡәйнәң, атыбал ҡоҙа хаҡында әйтә е түгел. Байлыҡтары ла, ғилемдәре лә баштан ашҡайны. Ҡайның – указлы имам, ҡәйнәң – абыстай, ятламай түгел ятлар ың Ҡөрьәнде. Зирәк тигән ҡушаматты ла халыҡ һиңә ерле бушҡа беркетмәгән инде, бәс.

— Ғилемле ине ҡайным, уны ы хаҡ. Ә байлыҡтары әллә ҡайҙа китмәгәйнесе.

— Балалары тормағас, бер үткенсе дәрүишкә саптар бейә биреп атып алғандар малайҙарын, шул ир етеп, иңә насип йәр булған. Ат хаҡы — алтын хаҡы йөрөй ул беҙҙең башҡортта, ул замандарҙа бигерәк тә.

— Олатайымды атып алғандармы ни?! Әйтәм, исеме сәйер — атыбал...

— Ҡоҙағый, баланың башын бутамайыҡ, ана, әллә нимә уйлап сығарып та ултыра.

Шунан ҡартәсәйем ысын дөрөҫөн өйләп бирҙе.

Олатайым имам ғаилә ендә бишенсе бала булып донъяға килгән, унан алдағылары тыуа торған, үлә торған. Тамам ғажиз була ата менән әсә. Улай ҙа иземен бирә Хоҙай. Элек ауылдар буйлап мосолман дәрүиштәр үтеп- әтеп йөрөгән, ти бит. Беҙҙең ауылға ла, ул саҡта Муллаҡайға, килеп сыҡҡан шуларҙың бере е. Ҡаҙаҡ дала ында сәфәр ҡылып йөрөгәнендә бер йолаға шаһит булған икән дәрүиш,шул хаҡта һөйләгән Ҡарамырҙа имамға. Яңы тыуған баланы берәй изге инсан ҡулына тотторалар ҙа, ул шул сабыйҙың ата-әсә енең йорто эргә енән: "Бала атам, кемгә бала кәрәк, бала атып алығыҙ!" — тип өрәнләп үтә, ти. Ата-әсә е баланы тәҙрә аша атып ала. Шул саҡта ул ғүмерле була, имеш, ти.

– Был бала минең уңғы өмөтөмдөр, моғайын. Аллаға тапшырып, шул йоланы атҡарайыҡ, мосафир, — тигән имам. — Хәҙерҙән мин иңә бер кейем күн итек инселәйем, ҡырҡ көндән уң, шуғаса иҫән ҡал а сабый, саптар бейәм — инеке!

— Туғыҙ башҡа әйбер биреү шарт, — тигән дәрүиш. Имам быға ла күнгән.

Теге йоланы шартына килтереп үтәгәндәр, бөтә ауылдың күҙ алдында. Тәҙрә аша дәрүиш имамға баланы тотторған, уға күн итек биргәндәр, шуға ҡушып тағы игеҙ төрлө бүләк, ти.

— Шунан? – Түҙмәй орайым, ҡыҙыҡ тарих ти әң, мине ҡуш, көнө-төнө тыңлап ултырыр инем.

– Сабыр ит. Шунан балаға исем ҡушыр көн килеп еткән. Оло мәсеттән мулла килгән, имамдан ораған: "Ир балаға ниндәй исем ҡушырға ниәтләнегеҙ?"

Атай кеше ауыҙын асырға ла өлгөрмәгән, дәрүиш әйтә алған:

— атыбал йәки Туғыҙаҡ.

— Туғыҙағы ҡош исеме бит?

— Ҡоштоң ҡыҫылышы юҡ, ә туғыҙ төрлө нәмә биреп атып алыу йола ына кинәйә, — тип аңлатҡан дәрүиш.

Аптыраушта ҡалған ата-әсәгә төшөндөргән, йоланың тоҙо ла шунда — исемдә. Ризалашҡандар. Ә ҡырҡ көндән уң имам ялан аяҡ ил гиҙгән мосафирға күн итек кейҙереп, саптар бейә енә атландырып оҙатып ебәргән.

— әм инең насибың атыбал олатайым ғүмерле булған! Әй...

— Әй, шул, балам. Ғүмере ҡыҫҡа булды атыбалымдың. Биҙгәк сиренән вафат булды, утыҙына ла етмәҫтән... Баязитымдың саҡ бише тулғайны.

— Мин дә шул йәшемдә атай ыҙ ҡалдым. — Аңланым да хаҡһыҙ әйткәнемде (атайым тере лә ә!), уң ине. Ошо телемде, ҡасан өйрәнәм инде шуны тыйырға? — атыбал ҡартатайыма теге йола ярҙам итмәгән икән? — тип ҡыҫтыра алдым, ҡартәсәйемде баяғы яңылыш үҙемдән яҙлыҡтырыр өсөн.

— Ул йылдарҙа биҙгәктән күп халыҡ ҡырылды, бер атыбал ғына түгел. Хинин тигән дарыуҙан башҡа дауаһы ла юҡ ине. Яҙмыш... — Ҡартәсәйемдең уйҙары аман алыҫта, йәш сағында икән, минең мәғәнә еҙ хәбәремә иғтибар итмәгән. Йә, шул йәшлегендә тағы әҙерәк йөрөп ал ын тағы бер килке, тип уйланым да өҫтәп ебәрҙем:

— Ҡартәсәй, еләк кеүек сағында тол ҡалған ың, барыр инең бабайға? Килеп төшмәнеме тау артылып берәй ҡурайсы, — тим, күҙ ҡыҫып, яңынан мырлап ҡына йоҡлап ултырған Зөлхизә өләсәйемә ымлап.

— Мөхәббәтебеҙ яҫалма түгел ине беҙҙең атыбал менән. (Яһап та алып буламы икән мөхәббәт тигәндәрен?) Ә ҡоҙағыйға, оло кешегә, теймә, ул да ҡурайсы олатайынды ныҡ ятраҡан. Яратма а, шул ҡыйыу ыҙлығын, шул апалығын, йәғни иплелеген ашатлап сыға алыр инеме? ( апа, тимәк, ипле?) Улар кеүектәрҙең ғишҡы хаҡында борон ҡисса яҙғандар. Ҡурайсы менән йырсының яратышыуы ғәжәпме ни?

— Ә кем йырсы?

— Зөлхизә ҡоҙағый, башҡа кем бул ын.

— Бына һиңә иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ... Әсәйемдең йырлағанын беләм, уңғы осор гелән йырлап йөрөй ул, ишетә еңдер ?

— Ишетәм. Баязитым аса алманы унаң асылын. Бүтән берәү асыр, бәлки...

Шулай тине лә, ҡартәсәйем ялт итеп минең күҙемә ҡарап алды. Аңламаным ҡарашының мәғәнә ен. Төпсөнөп торманым, дәрес әҙерләргә кәрәк... Ҡурайсы Абдрахман менән йырсы Зөлхизә ҡисса ы хәҙер минең башымда, икенсенән, әйтерһең, минең ҡәҙимге булмышымда хәҙер ике кеше йәшәй: береһе әүәлге үҙем инде, бүтәне – ҡолағына салынғанды ҡисса итергә маташыусы “бәйәнсе”.

9

...Муллаҡайҙы әллә ҡайҙа, күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән тарафтар менән тоташтырып ятҡан оло юл яғындағы ҡапҡа башында ултырған малайҙар: “Туй килә, туй!” – тип ҡысҡырыштылар ҙа балыҡсы Төхвәтуллалар өйөнә табан йүгерҙеләр. Кемуҙарҙан. “Килен төшә, өйөнсө!” Уларҙың бөтә енә лә – иң аҙаҡтан телен әлберәтеп килеп еткәненә лә – өйөнсөгә берәй бүләк тотторҙолар. Ауыл, геү килеп, әле күрмәгән киленде тикшерә.

— Ун өс кенә йәшлек ҡыҙ бала, ти ҙә ә, әстәғәфирулла, бынау Төхвәтулла, үҙе иллене ҡыуа...

— Бер бай-фәлән бул а, тиең әле, фәҡирлектән сыҡмаған башы менән.

— Эйе лә ә, ярай, шул өнәре бар – балыҡсы. Йөрөй бала-сағаны ҡотортоп.

— Игенгә,башҡа кәрәк-яраҡҡа алмаша шул балығын, бәй.

— Егеп сығыр аты юҡ...

— Әллә кәләште хәлле йорттан аламы икән?

— Тот ҡапсығыңды! Үгәй әсә ҡулында үҫкән йәтимәк, ти. Зөлхизә исемле.

— Ана нисек...

— Ярар, нимәгә ҡаныҡтығыҙ Төхвәтуллаға. Мәғүҙә е биҙәү булды, мыны ы, бәлки, бала табып бирер.

— Таптыра ал а?

— Төхвәтулламы? Тип ә тимер өҙөрлөк ир әле ул.

Йөҙ ауыҙҙан йөҙ хәбәр, ҡыҫҡа ы.

— Әй, собханалла! Бисараҡай...

Быны ын дәррәү, бер тауыштан әйтте килен төшөрөргә йыйылған туған-ырыу, күрше-тирә. Әлегә урам-ихатаға кем теләй, шул йыйылған, аҙаҡ туйға әйтелгәндәр генә ҡаласаҡ. әм әле, халыҡ күп саҡта, иң ҡыҙығы.

Килен тигәндәре бәләкәй кәүҙәле, ҡураныс бер ҡыҙыҡай икән. Ҡараҡай ғына, йомро битле, йәмшек танаулы. Халыҡ тағы гөжөлдәп алды:

— өймәлеге бар, былай.

— Ереклеләр бөтә е лә шундай, ҡуңыр йөҙлөләр.

— Уф, Аллаҡайым, был балаға Төхвәтулла нисек тотонор, ҡурҡмайынса, ә?

— Әкиәт өйләмә, кәбән аҫтында сысҡан үлмәй ул.

— Бирнә е лә юҡ әллә?

— Бер төйөнсөк тотҡан булған да а анау ҡатын, үгәй инә елер?

— Уф!..

Ирҙәр ҙә, ҡатындар ҙа берҙәм ҡатнаша һынамышта, үҙ бутҡа ына әр кем берәр бөртөк бул а ла ярма ырғытып ҡалырға ашыға.

Ә килен балаҡай берәүгә лә иғтибар итмәне. Килгән яҡҡа, Ерекле яғына, күҙҙәрен тултырып бер ҡараны ла буҫаға аша атланы. Унда уны аяҡ аҫтына ырғы-

тырға мендәр тотоп ҡәйнә түгел, ә буласаҡ иренең беренсе ҡатыны Мәғүҙә көтөп тора ине...

Башымда шыма ғына бер бәйән тыуҙы тигәндә, ошонда өҙөлдө лә ҡуйҙы.

Мәғлүмәт юҡ! Зөлхизә өләсәйемдең 13 йәштә бабайға барыуын ғына беләм. Өҙөк-йолҡоҡ хәбәр... Өләсәйем үҙе сутырлағандар урыҡ-һурыҡ ҡына ҡолаҡҡа яғылып ҡалған. Ә бит уның оҙон ғүмерендә ниндәй генә хәлдәр булмаған? Мин әле былай ғына, уй тәгәрәтеп, байҡап ҡына алайым тигәйнем, шундуҡ үҙ еҙ ҡалдым. Үҙемде оя ҡоророға йыйынған ҡош кеүек тойҙом ошо минутта: тағы ҡайҙан йүрмә табырға?

Эйе, бөртөкләп белешергә ине, ҡартәсәйем әйткәнсә, ҡисса яҙырлыҡ мөхәббәте булған Зөлхизә өләсәйемдең яҙмышын. Ә мин уны, колхозда ыйыр ауған да ыйыр һауған, шунан ҡартайып икегә менеп ултырған, тип кенә беләм... Бығаса, үҙе әүәҫ кенә һөйләй башлаһа ла, тыя ла ҡуя инем, йәнәһе, ҡыҙыҡ түгел. Их, күпме хәтирәне елгә осорғанмын шулай...

Тотондом теге ҡоштай эҙләнергә. Суҡышыма әле бер, әле икенсе сәхифә эләгә, шуларҙы йыя барам, йыя барам. Өләсәкәйҙең үҙенән дә тартҡылайым хәбәрҙе, ипләп кенә. Бүре уҡкан олатай, әлеге салт зи енле ҡартәсәйем, әсәйем, Татар әбекәй – бере ен дә ҡалдырманым, гел бер яҡҡа уҡтырып, башлап ҡуйған бәйәнемә мәғлүмәт төйнәйем. Бәйән, тим, ҡисса лаһа?! Шуға иғтибар иттем: Татар әбекәй ныҡ хәтерләй, берәмтекләп өйләй. Уға, ситтән төшкән киленгә, был ауыл кешеләренең яҙмышы айырыуса ҡыҙыҡлы булғандыр, күрә ең.

Ни айәт, баяғы ҡош оя ын ҡора алыр һымаҡ. Суҡышына эләктереп ташып тора , ташып тора төрлө йүрмәне, төкөрөгө менән йәбештерә, ҡанаты менән ыйпап матурлай...

*(Дауамы бар.)*



**Түләк
ҒИРФАНОВ**

# МИТИНГ

## хикәйә

Зәки Кәримович – оло йәштәге уҡытыусы. Тормоштан артта ҡалмаҫ өсөн ветеран көн айын телевизорҙан, радиоалғыстан яңылыҡтар тыңлай, гәзит-журнал ҡараштырып бара. Донъяла нимәләр генә юҡ, ни генә ҡыланмайҙар. Ҡайҙа ҡарама – ыҙғыш та талаш, ығы-зығы. Ярай әле, күбе е сит-ят яҡтарҙа. Зәки Кәримович уйлай-уйлай ҙа шундай ығымтаға килә: туйып икерәләр. Ҡай ы берҙә кеше ышанмаҫлыҡ нәмәләр эшләнә. Кәрәккән-кәрәкмәгән закондар ҡабул ителә. Ҡай ы берҙәрен аҙаҡ үҙгәрткән, төҙәткән булалар, әммә күп осраҡта улар үҙҙәренең кире өҙөмтәләре менән зыян килтереп өлгөрә. Бына әле республика баҫмаларында 309-сы анлы “Рәсәй Федерация ының айырым закон акттарына белем биреүҙең дәүләт стандарты төшөнсә ен әм структура ын үҙгәртеү буйынса үҙгәрештәр индереү тура ында” тип исемләнгән Федераль закон хаҡында материалдар донъя күрә башланы. Төбәк компонентын алып ташлап, был закон Рәсәй милли мәғарифын төптән үҙгәртмәксе икән. Милли мәктәптәрҙә республиканың тарихын, телен, мәҙәниәтен уҡытыу кәрәкмәй, тимәк. “Халыҡ быңдай законға ҡырҡа ҡаршы”,– тип яҙа гәзиттәр. Ошо мәсьәләгә арналған митингтар Өфөлә лә уҙғарыласаҡ икән. Зәки хәләл ефете Гөлгәйшә менән кәңәш-төңәш итеп, мотлаҡ митингыға барасағын белдереп, йоҡларға ятты. Тик йоҡо о йоҡо булманы. Төнө буйы аташып сыҡты.

Әллә ҡасан гүр эйә е булған әсә е моңло итеп “Зөлхизә”не йырлай, имеш. Йырлай ҙа ыҡтап илай. “Ниңә илай икән?”– тип уйлай Зәки. Ҡапыл, ҡай ы тарафтандыр – Зәки абайламай ҡалды – ялтыр ҡылыстарын елтәп, “буденовка” кейгән атлы әҙәмдәр килеп сыҡты ла урамдағы халыҡтың телен киҫә башланы. “Ниңә тел киҫәләр икән?” Аптырай Зәки. Шул мәл Мирғәсим пәйҙә була. “Ҡас, Мирғәсим, телеңде киҫәләр бит”,– тип ҡысҡыра уға Зәки. Мирғәсим көлөп тик тора. “Ниңә көлә ең, иларға кәрәк тә...”– ти Зәки. “Минең телде киҫә алмай улар,

*Йәмәғәт эшмәкәре, бер нисә проза китабы авторы Түләк Ғирфанов – Миәкә районының М. Аҡмулла исемендәге әҙәби премия ы лауреаты, РФ Журналистар союзы ағза ы. “Ағиҙел”дең күптәнге дуҫын күркәм йәше – емешле етмеше менән ихлас тәбрикләйбеҙ, ныҡлы аулыҡ, ижад ҡомарын киләсәктә лә үрелтмәүен теләйбеҙ.*

телем юҡ бит”,– тип яуаплай Мирғәсим. “Телең бар инең, бар, ин өйләшмәй - ең генә бит, Мирғәсим...”

Зәки йән тиргә батып уянып китте. Нимә булғанын да аңғармай ятты бер килке. Өн ти әң өн, төш ти әң төш түгел. Әсә е, мәрхүмә, ауыр тупрағы еңел бул ын, элек тә йыш ҡына төшөнә ингеләй ине. Йырға оҫта булды әсә е, әйтә е түгел. Тормош ауырлыҡтарын да уға ана шул йыр-моңо күтәреште. Район, ҡала сәхнәләрендә лә унық моңло тауышына күп оҡландылар. Әсә енең йырлап та, илап та төшөнә кереүе ғәжәп. Анауы ҡылыслы әҙәмдәрҙең тел сабып өҙөп йөрөүҙәрен әйт әле. Иҫ-аҡылың китер. Йәнә Мирғәсим...

Зәки Кәримович ҡырҡ йыл ҡала мәктәптәрендә башҡорт балаларына әсә теле дәрестәрен уҡытты. Ҡалала бала рус теле мөхитендә үҫә, шуға күпселек әсә телен анға уғып бармай, өйҙәрендә лә, “башҡорт теле менән ҡайҙа бара ың” тигәнерәк ҡараш йәшәй, мәктәп администрация ы өсөн дә ул – “арбаның бишенсе тәгәрмәсе”. Былдай шарттарҙа уҡытыусыға дәрес үткәреү шаҡтай ауырға төшә. Сөнки ул яңғыҙ, үҙ көсөнә генә таяна ала. Зәкигә лә еңел булманы. Балалар дәрестән ҡаса, килгәндәре лә уҡытыусы өйләгәнен йүнләп тыңламай.

“Балаларҙа нисек әсә теленә ҡыҙыҡ ыныу уятырға?”– тип йөрөгән сағы ине Зәкиҙең, синыфҡа яңы уҡыусы килде. “Мирғәсим” тип таныштырҙы ул. Үҙен тотоуы, килешле буй- ыны, тышҡы матурлығы менән синыфташтарын шундуҡ әсир итте ул. Тора-бара егеттең эске матурлығы ла асыла барҙы. Ул шиғыр ярата, уларҙы күп белә әм бик матур уҡый. Мирғәсим, урыҫ теле менән бер рәттән, ҡаҙаҡ, үзбәк, ҡырғыҙ телдәрен дә яҡшы белә. Ата-әсә е ҙур-ҙур төҙөлөштәрҙә ҡатнашып,бер урындан икенсе урынға, бер республиканан икенсе енә күсеп йөрөгән. Шунлыҡтан Мирғәсимгә төрлө мәктәптәрҙә уҡырға тура килгән икән. Башҡортса ла әйбәт белә ине. Бер биргәненә Хоҙай өйөп бирә, тиҙәрме әле? Мирғәсим дә бөтә яҡлап та әләтле ине. Хәтере иҫ киткес. Бер ҡат уҡып сыҡҡан әйберен – хикәйәме ул, шиғырмы – яттан өйләй ҙә ҡуя. Шуға ла бик күп яҙыусыларҙың шиғырҙарын, хатта оҙон-оҙон поэмаларҙы яңылышмай өйләй. Бер кисәлә ҡырғыҙ халыҡ эпосы “Манас”ты көйләп өйләп бөтә мәктәп уҡыусыларын таң ҡалдырҙы. Мирғәсимгә эйәреп, башҡа балалар ҙа әсә теленә, әҙәбиәткә тартыла барҙы. Мәктәптә әҙәби түңәрәк ойошторолдо. Балалар төрлө әҙәби әҫәрҙәр уҡый, шиғыр өйләүҙә ярыша. Кем күберәк шиғыр белә, кем шиғырҙы матурыраҡ уҡый. “Шиғыр ятлауҙың файҙалы яҡтары бик күп: ул хәтерҙе нығыта, тел байлығын арттыра, образлы фекерләргә өйрәтә”,– тиер ине Мирғәсим. Үҙе лә шиғырҙар яҙа. Бәлә көтмәгәндә килде.

Ғәҙәти әҙәби кисә ине. Яҙыусылар, журналистар ҙа саҡырылғайны. Түңәрәк ағзалары тыуған ил, туған тел, сафлыҡ, матурлыҡ хаҡында шиғырҙар өйләне. Мирғәсим “Урал батыр” эпосынан өҙөк ятланы. Ҡунаҡтар ҙа үҙҙәренең яңы әҫәрҙәрен уҡып ишеттерҙе. Аҙаҡ йәнле фекер алышыу булды. Халыҡ зал тулы. Башҡа синыф уҡыусылары ла, күп кенә синыф етәкселәре лә килгән. Бер нисә көндән өлкә гәзиттәренең бере ендә ошо кисә хаҡында ҙур ғына мәҡәлә донъя күрҙе. Зәки, мәҡәләне уҡып сыҡҡас, бер ни ҙә аңламай торҙо. Мәҡәлә түгел ине был, ә күрәләтә яла яғыу, кисәне алып барыусыларға ғына түгел, бөтә мәктәпкә, уҡытыусылар өҫтөнә бысраҡ ыу ҡойондороу. Автор матур әҙәби кисәне – милләтселәр митинги ы, шиғыр уҡыусыларҙы бунтовщиктар тип билдәләгән. Был йыйылышта (автор митинг тип атай) гел генә бер милләтте маҡтау өҫтөнлөк алған икән. “Башҡортостан – күп милләтле автономиялы республика, шулай булғас, бөтә милләттәр исеменән өйләргә кәрәк”, – тип аҡыл ата автор. Икенсе көнөн үк мәктәпкә абруйлы комиссия килеп төштө. Китте тикшереүҙәр, орашыуҙар. Шау-шыу аҙна-ун көнгә уҙылды. Мирғәсимде әм тағы дүрт уҡыусыны ҡайҙалыр алып киттеләр. Мәктәп директоры эшенән бушатылды. Синыф етәкселәренә, Зәкигә ҡаты шелтә бирҙеләр. Уҡыусылар, күҙ-баштары күгәреп,

ике-өс көндән мәктәпкә килде. Араларында Мирғәсим юҡ ине. Аҙаҡ билдәле булды: Мирғәсим ҡаты туҡмалып, дауаханаға эләккән. Сәбәбен берәү ҙә аныҡ ҡына белә алманы. орау алғанда КПЗ-ла туҡмағандар, имеш, тип тә, урамда хулигандар типкеләп киткән, тип тә үҙ йөрөттөләр. Асығын белеүсе булманы. Шул туҡмалыуҙан Мирғәсим теленән яҙҙы. Ата ы төрлө ерҙәргә йөрөтөп тә ҡараны. Ишетә, кеше өйләгәнде аңлай, телен әйләндереп яуап бирә алмай. Егет бик йәл: өмөтлө ине, уҡы а, ҙур кеше сығасаҡ ине унан. Зәки, ҡарашын алыҫҡа төбәп, уйланып ултыра бирҙе.

— Сәйең ыуынып бөттө. Ултыра ың инде уҙылып. Бара ы ерең дә бар ине түгелме уң? — Гөлғәйшә ирен еңелсә генә битәрләп алды. Зәки Кәримович башҡаса сәйенә үрелеп торманы, тиҙ-тиҙ кейенеп урамға сыҡты. Көн болотло, шулай ҙа матур ғына булмаҡсы. Көнбайыштан бер аҙ алҡынса еле бар. Урамда халыҡ ҡайнаша. Күпселек митинг буласаҡ майҙанға ағыла. Зәки Кәримович та шул ағымға ҡушылды. Халыҡ ағымынан ҡарт уҡытыусының аҡ фетр эшләпә е генә күренеп ҡала. Көслө ағым фетр эшләпәне лә бына-бына йотор ымаҡ. “Бер уйла аң, кеше тормош ағымына ҡушылып аҡҡан бер юнысҡы ише генә инде, — тип уйлай Зәки Кәримович. — Ағым уны, ҡаға- уға, үҙе менән ағыҙып ала ла китә. Үҙеңсә ағырға телә әң, берәй ҡырлы ташҡа сәпәргә лә күп орамай”.

Мирғәсимдең әләкәте лә ана шул көслөләр хасил иткән төп ағымға буй онорға теләмәгәндән булғандыр инде, күрә ең. Теге кисәгә ҡағылышлы ялыуҙы тикшергәндә, иптәштәре ҡабат ундай кисәләр ойоштормаҫҡа үҙ биргән, ә Мирғәсим: “Беҙ ундай кисәләрҙе бик күп үткәрәсәкбеҙ. Башҡорт батшаларға ла баш бирмәгән”, — тип яуаплаған. Туҡмалыуының сәбәбе лә ана шул яуабы менән бәйле. Дөрөҫ, уны бүлмәлә туҡмағандар, кисләтеп кенә сығарып, юлына ҡаршы төшкәндәр.

Ҡай ы йылда икәне хәҙер иҫеңдә лә ҡалмаған, мәгәр Зәки Кәримовичтың Мәскәү — Өфө поезында ялдан ҡайтып килеше ине. Купе ына утыҙ йәштәр тирә ендәге ҡыҙғылт- ары сәсле ҡатын менән ун дүрт-ун биш йәштәрҙәге үҫмер инде. Китап уҡып ултырған Зәки инеүселәргә артыҡ иғтибар ҙа итмәне. Урынлашып бөткәс, ҡатын ҡул сумка ынан алып егеткә алма тотторҙо ла ятып йоҡлап китте.

— Ағай, еҙ ҡайҙа бара ығыҙ?

Егеттең яңғыҙ ҡалыуына эсе бошҡандыр, ахыры. Зәки китабынан айырылып өндәшеүсегә ҡараны әм ғәжәпләнә төштө. Ҡаршы ында ултырған үҫмер кемделер хәтерләткән кеүек. Ҡап-ҡара сәс, яҫы маңлай, үткер ҡараш...

— Мин Өфөгә ҡайтып барам, ә ин ҡайҙа юл тоттоң?

Зәки ике күҙен тултырып үҙенә ҡарап барған егеткә ихлас яуапланы.

— Мин дә шунда барамдыр. Моғайын...

— Ә ниңә... моғайын?

Егет ҡулбашын ғына елкетеп ҡуйҙы.

— Әсәйең ҡайҙа барғанығыҙҙы әйтмәнеме ни?

Егет өндәшмәне.

Зәки, шуның менән үҙ бөткәндер, тип уйлап, йәнә китабына үрелмәксе ине, егет тағы телгә килде.

— еҙ кем?

— Мин уҡытыусы, — тине Зәки, бер ни тиклем аптырап.

— Милләтегеҙ кем?

— Башҡорт. Ишеткәнең бармы башҡорттар хаҡында?

— Ысынлап башҡортмо, әллә шаярта ығыҙмы?

— Ә ниңә шаяртайым? Ысынлап та башҡортмон. Ниңә орай ың? Башҡортто күргәнең юҡ инеме әллә?

— Күргәнем юҡ ине. Ә күрергә бик теләйем.

Зәки, ғәжәпләнеп, йәш егеткә төбәлде.

— Ғәжәпләнмәгеҙ, мин үҙем дә башҡорт, — үҫмер, ниңәлер, күңел еҙ генә әйтте, — тик башҡортса белмәйем.

— Атай-әсәйең өйрәтмәнеме ни?

— Әсәйем мәрйә минең. Атайым башҡорт ине.

— Ниңә ине, әле ҡайҙа уң атайың?

— Ул юҡ инде. Бер йыл була...

— Ғәфү ит. Ҡайҙа, кем булып эшләне атайың?

— Тел еҙҙәр мәктәбендә уҡытты. Ишет ә лә, атайым өйләшмәй ине. Әсәйем дә тел еҙ минең. Үҙем интернат-мәктәптә уҡыйым. Паспортыма “башҡорт” тип яҙылғас, бөтә е лә башҡорт тип ирештерәләр. Ә мин атайымдан башҡа башҡорт кеше ен күргәнем дә булманы. Атайымдан ҡала еҙ — мин күргән икенсе башҡорт.

Зәки, күңеле ниҙер иҙеп, орай алды.

— Исемең кем?

— Саша тип йөрөтәләр. Паспортта Мирсәлих тип яҙылған.

— Атайыңдың исеме Мирғәсим түгел инеме?

— Мирғәсим. Ә еҙ ҡайҙан белә егеҙ?

Зәки Кәримович үҫмерҙе ҡармап үҙенә тартты. Мирсәлих, ни әйтергә лә белмәй, билдә еҙ ағай ҡосағында мыш-мыш танауын тартты.

Мирғәсимдең ғаилә ен — Людмила менән Мирсәлихте Зәки үҙҙәренә алып ҡайтты. Ун көн ҡунаҡтар Өфө менән танышып йөрөнө. Мирсәлих ата ы уҡыған мәктәпте барып күрҙе. Байтаҡ яфа күреп, ил гиҙгәндән уң, Мирғәсим Мәскәүгә барып тел еҙҙәр мәктәбен тамамлаған, институт бөткән. Людмила менән икәүләп шул мәктәптә эшләгән. Тик, сәләмәтлеккә туя алмай, ҡырҡ биш йәшендә генә яҡты донъя менән хушлашҡан икән. Мирсәлих Өфөнө бик ныҡ оҡшатып, ата ының тыуған яғына йыш ҡайтырға үҙ бирҙе.

... Митинг була ы майҙанға еткәс кенә уйҙарынан арынды Зәки Кәримович. Халыҡ күп йыйылған. Күбе е йәштәр. Араларында унының ише ҡарттар ҙа күҙгә салына. Тағы шуға иғтибар итте ул: митингыға башҡорттар ғына түгел, башҡа милләт кешеләре лә күп килгән. “Хәйер, үҙ халҡының теленә, тарихына вайым ыҙ милләт юҡтыр ул. Төбәк компоненты тигән таяҡ башы бар милләткә лә ҡағыла бит”, — тип фекер йөрөттө ҡарт уҡытыусы. Автобустарға тейәлеп башҡа яҡтарҙан да килгәндәр. “Халыҡ арыу күтәрелгән. Шулай булмай, күрәләтә халыҡты бар иткән, бер ҡорға туплап, аралаштырып йәшәткән иң ҡәҙерле, мөҡәддәс телгә ынтыл ындар әле. Башҡорт илен, ерен, телен, азатлығын яҡлап быуаттар дауамында яуға күтәрелгән. Тарихты онотоу яҙыҡ”, — шундай уйҙарға сумып, Зәки халыҡты йырып эскәрәк үтте. Лозунгылар, плакаттар күтәреп рәткә теҙелгән йәштәр үҙен итәғәтле тота. өйләшә е мәсьәлә бик етди булғанғамы, халыҡ уйын-көлкөгә тартылмай, уйсан, әр кем дәрәжә аҡлай. Бер нисә урынға микрофон ҡуйылған. Микрофон эргә ендәрәк бер төркөм зыялылар тора. Унда Зәкиҙең элекке уҡыусылары ла бар. Ҡарт уҡытыусыны танып, эргәләренә әйҙәнеләр. Рәфит Закир, илгә билдәле ғалим, фән докторы, профессор, элекке уҡытыусы ын ҡосаҡлап уҡ алды ла эргә ендә торған урта буйлы, мыҡты кәүҙәле, күҙлекле ир менән таныштырҙы.

— Таныш булығыҙ, Зәки Кәримович, бына Мәскәү ҡунағы, төрки телдәре белгесе, йәш ғалим, фән докторы, профессор Мәғәсүмов Мирсәлих Мирғәсим улы. Сығышы менән Өфөнөкө. Ә был — беҙҙең хөрмәтле уҡытыусыбыҙ Зәки Кәрим улы Шакиров.

Зәки Кәримович менән Мирсәлих Мирғәсимович бер-бере енә ҡарашып байтаҡ торҙо. Ҡарт уҡытыусының да, йәш ғалимдың да күҙҙәре дым ыуланғайны.



Тимер
ЙОСОПОВ

# “МӘҢГЕЛЕКТЕҢ КЕРПЕК ҠАҠҠАНЫНДАЙ, ШУНДАЙ ҠЫҪҠА ИКӘН ҒҮМЕРҘӘР...”

## Хәтер

*Хәтер яңыра.*
*Хәтерем...*
*Сыңлап оса уктар.*
*Ҡасан ғына зә әр туптар*
*Үкереүҙән туктар.*
*Хәтер яңыра,*
*Хәтерем –*
*Күҙ аскан ҡуҙлыҡ.*
*Ябыҡ елдең тынын тойғас,*
*Киттеме ни ҡуҙғып...*
*Ялғау ауыр хәтерҙәрҙең*
*Осон остарына.*
*Ямғырмы, тим,*
*Әллә ҡармы уң*
*Тама устарыма.*
*Әйтелмәйсә ҡалды минең*
*Ярып әйтеүҙәрем.*
*Быуылдым мин*
*аҡлайым тип*
*Әҙәм хәтерҙәрен...*
*Уҡталдыммы әҙәмдәрҙең*
*Йыртмайым тип битен,*
*үҙҙәр атып,*
*Киттемме уң*

*Тимер Йосопов – Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты.*

*Түҙемлектең ситен?*
*Үҙ-үҙемә орауҙарым,*
*Телен йотҡан хәтер.*
*Иҫем аман өн өҙ икән,*
*Шартлайыммы хәҙер?..*

***

*Ҡалын-ҡалын ҡарҙар баҫлыҡҡан да,*
*Уйға ҡалған икән аҡ тауҙар ҙа.*
*Әсе үҙҙән,*
*Сөсө үҙҙән биҙҙем,*
*Ихлас түгел хурлау, маҡтауҙар ҙа…*
*өйөүемдән осоп китерҙәймен,*
*Йылмаямын яҡты тауҙарыма.*
*Ә эсеңдә инең асыу ташҡан,*
*Иҫең китмәй яҙҙың шауҙарына.*
*Мин үҙеңдән ыуындым да, буғай,*
*Яндарыңа инде елмәйем дә.*
*Күргем килә,*
*Тағы ни булды уң,*
*Күҙҙәремә ине элмәйем дә…*

***

*Илдә ҡалҡҡан хәтәр дауылдарҙан*
*Ялпылдаған икән алдарың.*
*Замандарҙың ип еҙ улышынан*
*Тыуған икән ялбыр ялдарың.*

*Киләсәк тип яндыҡ,*
*Йәшәй бирҙек*
*Хыял ҡосағында ялманып.*
*Аяғөҫтө,*
*Тик эш ара ында*
*Тамаҡтарҙы ғына ялғаныҡ.*
*Был донъялар бәүелеп тә китә,*
*Баш осонда болот – аҡ күбек.*
*Аяғөҫтө генә ял итәбеҙ,*
*Серем итәбеҙ шул, ат кеүек.*
*Бөтә илең эшкә ҡалҡынамы,*
*ыуҙары ла хәтәр алҡына.*
*Көстө түктек,*
*Үтеп киткән дә ә*
*Бар ғүмерҙәр тамаҡ хаҡына.*

***

*Йылы елдәр ҡалҡып наҙлап үтте,*
*Дауылдары йәнде игәне.*
*Мәңгелектең керпек ҡаҡҡанындай,*
*Шундай ҡыҫҡа ғүмер тигәне.*
*Алда үрҙәр*
*Йырып-йырып үтә*
*Болот ҡына тигән ҡуйҙарҙы.*
*Урал ырттарында йөрөгәнемдә,*

*Йәшен теләминең уйҙарҙы.*
*Ни арала көҙҙәр еткән икән,*
*Еркәйемде баҫа арылыҡ.*
*Әллә ниңә инде ары ағыш*
*Йәнгенәмә тейә арылып.*
*Башҡайымды утта көйҙөргәндәй,*
*Ҡар яндымы әллә сәсемдә.*
*Ҡарҙар янманы шул сал сәсемдә,*
*Ай ирене ҡайнар йәшемдә.*
*Ваҡыт елә,*
*Гүйә, арғымаҡ, тим,*
*Эҫе тынын бөркөп сапҡандай.*
*Ғүмер тигәндәре шундай ҡыҫҡа,*
*Ишегеңде асып япҡандай.*
*Көҙҙәр етте,*
*Ҡоштар китте,*
*Тынды сабынлыҡтарым.*
*Хыял ҡанаты елпенмәй,*
*ынды сабырлыҡтарым.*
*алҡын елдәр,*
*Сабынлыҡта*
*Тынды салғы сыңдары.*
*Хатта инде көҙ еленән*
*Килә яҙҙың тындары.*
*Ҡояштың да көсө юҡмы,*
*Бер аҙ йылы ы ҡайтыш.*
*Баш осонда торған айҙың*
*Ҡолағы ғына ҡарпыш…*

## *Ҡояшыма атылам*

*Эй, халҡымдың уйҙарына*
*ыйған бит бөтә ғаләм:*
*Юғарыраҡ булған айын,*
*Түбән бул бүтәгәнән.*
*Ғүмерҙәрем үт ә лә, тим,*
*Яланымда – кейекмен.*
*Тауҙарымдан түбәнмен дә*
*Түңгәгенән бейекмен.*
*Йондоҙҙары күҙен ҡыҫа*
*Күктең ете ҡатынан.*
*Сиңерткәләй сырланым да*
*Ҡояшыма атылам…*

***

*I*

*– Үҙгәргән ең, – тиҙәр миңә,*
*Үҙгәрҙем шул, үҙгәрҙем.*
*Күк ырттарға аша-аша*
*Холҡон алдым үрҙәрҙең.*
*Ҡулым менән ер тырнаным,*
*Ҡулым да ука кеүек.*
*Дәрәжәгә иҫем китмәй,*

*Уңала, уҡа кеүек.*
*Ара үттем,*
*Нужа тигән*
*Егелеп арбаларға.*
*Дауыл ҡуп а, дуҫтар сыҡты*
*Бәләнән араларға.*
*Тоғро дуҫтар –*
*Хәүефтәрҙе*
*Кирегә борғандары.*
*Ҡолағымдың төптәрендә*
*Сыңланы бурандары.*

*II*

*– Үҙгәргән ең, – тиҙәр миңә,*
*Уҙған йылдар – әләмдәр.*
*Кеше ҡарарлыҡмынмы  уң,*
*Ҡурҡмаҫлыҡмы әҙәмдәр?*
*Эй кешеләр,*
*Әле  аман*
*Дауыл яра ығыҙмы?*
*– Үҙгәргән ең, – тиҙәр миңә,*
*– Әҙәм ҡарағы ыҙмы?*

***

*Тупаҫлыҡтан баш тубалдай.*
*Инәмен көндәремә.*
*Илгә ип еҙ  үҙ ат алар,*
*ыймайым көлдәгемә.*
*Байрамда ла уйға ҡалам,*
*Йөрәгемде ут ала.*
*Юғалтыу менән табыштар*
*Бергә килеп бутала.*
*Ерән ҡашҡа аткайымдың*
*Ялбыр ялы ялпылдай.*
*Көлдәгем елдә елберләй, –*
*Туҙып киткән ялҡындай.*
*Тупаҫлыҡтан баш әйләнгән,*
*Инәмен көндәремә.*
*Илгә ип еҙ  үҙ ат алар,*
*ыймайым көлдәгемә.*

***

*ыу ағанда*
*Шишмәләргә ятып*
*ыуҙар эстем инде  емереп.*
*Бер тотондом и ә*
*Енем ҡубып,*
*Эшләй инем  әр саҡ емереп.*
*Балҡып шатлыҡ кил ә,*
*Ҡыуаныстың*
*Яҡты тауҙарына аштым мин.*
*Мөхәббәтем баҡ а,*
*Башҡайымды*
*Юғалтырҙай булып шаштым мин.*

*Хәүеф ҡая ына ҡалҡтың инде,*
*Йә бөтә ең,*
*Йә ин ҡала ың.*
*Әле аман инде атҡа менеп,*
*Ялан иңләр ин сал бала ың.*

***

*Остомо ни әллә был йөрәгем,*
*Киләсәккә ҡарай йән атып.*
*Хәтәр дауылдарҙа түҙемлектең*
*Саҡ ынманы инде ҡанаты.*
*Бар үткәнем тороп ҡалдымы ни*
*алҡын офоҡтарҙың артында?*
*Өмөт тула а ла күңелемдә,*
*ағыш төйөрө, тим, алҡымда.*
*Баш осомда*
*Ауыр болоттар ҙа*
*Ҡанаттарын хәтәр ҡағынды.*
*Тәүге тамсылар, тим,*
*Ташта сәсрәп,*
*Осҡон булып*
*Йәндә ҡабынды.*

***

*Ғүмер генә тигән арғымағың*
*Елдерә лә икән талпыныпп.*
*Әллә ниңә өмөт ҡояшының*
*үрелә лә бара ялкыны…*
*Ғүмерҙәр, тим, ниңә бик тиҙ үтә,*
*Яныпҡына бара эстәрем.*
*Бер йәнемә урын тапмайым ис,*
*Яҡынлаша тағы кистәрем.*
*Үсектерәме ни туҡтамайса,*
*Лаҫтыр елдәр саба, көсөктәй.*
*Әйтелмәйсә уңлай әйтер үҙҙәр,*
*Ғүмер кисе генә кисекмәй.*

***

*Атылып та тышҡа сыҡтым әле,*
*Күҙ асҡы ыҙ ҙа а яҡтылыҡ.*
*Бөтә е лә үҙ яйына бара,*
*Түр башына менгән яҡшылыҡ.*
*Ҡыптайып та кейенеп алған муллыҡ*
*Донъябыҙға ыймай ҡыуана.*
*– Әҙәм ара ына индем, – тиеп*
*Өмөтөм дә хәҙер йыуана.*

## *Ҡағылырға ҡурҡам*

*Күреп туя алмам, ахыры,*
*Был донъяның аҡлығын.*
*Түбәм менең күккә тейгән,*
*Эскә ыймай шатлығым.*
*Иҫең китеп тора ың шул*
*Бер баҫырға ҡыймайса.*

аҡланып үт,
Еркәйеңә
ағышыңды ҡоймайса.
Шат тауыштар китә икән
Таш йорттарға ҡаҡлығып.
Күҙ асҡы ыҙ
Ерем ап-аҡ,
Эскә ыймай шатлығым.
Күгем аяҙ.
Тик торғанда
Киң ғаләмгә ыймайым.
Донъяның был аҡлығына
Ҡағылырға ҡыймайым.

***

Үргә үрләнем,
Аяҡты
өйрәй- өйрәй көскә.
Ҡаяларым күккә ашҡан,
Ҡалҡындым мин өҫкә.
Минең менән ал ҡояштың
Бите тейҙе биткә.
– Кит! – тигәндәй,
Талпынды ла
Үҙе ҡасты ситкә.
Сал ҡаяның иң осона
алғас бауырымды,
Ҡалҡындым мин,
Тәпәш күккә
Терәп яурынымды.
Мин оломон,
Тик был тауҙан
Кесе генә икән.
Алда – ҡояш,
Үҙем бары
Кеше генә икән.

## Бесән сапҡанда

Бер аҙ ғына тын алайым,
Ямғыры тамсыланы.
Йәлләмәне йөрәгемде,
Дауылы ҡамсыланы.
Төйәгенән сыға йөрәк,
Юрта ла юрта инде.
Ашҡынды бит,
Саба ғына
Күкрәкте йырта инде.
Эй, кирелеп бесән сабам,
Ялан баҫа яр ымаҡ,
ыуҙай алдырған салғыма
Киң яландар тар ымаҡ.

*Бесән сабам.*
*– Енләнгән, – тип*
*Ҡаштарын төймәҫ әле,*
*Әйҙә, мине күҙәт ендәр,*
*Күҙҙәре теймәҫ әле.*
*Гүйә, кейек*
*Ысҡынды бит*
*Түҙемлек сылбырынан.*
*Самаларҙан ашты, буғай,*
*Сыҡты бит сығырынан.*
*Тулай йөрәк арғымаҡтай,*
*Ялҡындарға ҡапты бит.*
*Яр ыны ла баҫылды шул,*
*Үҙ төйәген тапты бит,*
*Үҙ төйәген тапты бит...*

***

*Эй, әҙәмдәр ниңә үҙгәрә уң,*
*Яҙырлыҡ, тим, хатта уштарҙан.*
*Әллә ниңә күңел ҡайтып тора*
*Текә генә холҡло дуҫтарҙан.*
*Туғарылған дуҫтар миңә килеп,*
*Өмөт атынмы ни екмәне?*
*Күпме инде вәғәҙәләр биреп,*
*Үҙ-үҙҙәрен аҙмы тетмәне.*
*Тирә-яҡка баҡтым,*
*Ерем күркәм,*
*Йотам әле донъя шауҙарын.*
*Текә холҡло дуҫтар ипкә килер,*
*Буйын бирә миңә тауҙарым.*

***

*Бер генә ҡолас ташлағас,*
*Мәңгелек даръя ына,*
*Яҙҙарҙан барып сыҡҡанмын*
*Йәйҙәрҙең аръяғына.*
*Баш ҡалҡыт ам,*
*Аттар утлай*
*Әй буйының күрәнен.*
*Тәпәш күктән ибә ҡояш*
*Нурҙарының үрәнен.*
*Яҙҙарына уғылғанмын,*
*Айырмай аҡ-ҡараны.*
*Әллә бер тында үткәнмен*
*Хәт еҙ генә араны.*
*Иҫем китеп*
*Туктап ҡалдым*
*Бейек тауҙар ыртында.*
*Әллә инде ғүмеремде*
*Үттем микән бер тында?*



**Марис**
**НӘЗИРОВ**

# “БАЛА САҠТАН БИРЛЕ ҮРӘТ КҮРӘМ, ИЛ АМ ҒАЗАПТАРЫ КИСЕРӘМ...”

## *Әсәй хаттар яҙа*

*Әсәй хаттар яҙа. Бик йыш яҙа.*
*Никтер ирәк яуап бирәмен.*
*Үҙем ҡышҡы тәҙрә өлгө өндә,*
*Биҙәктә лә йөҙөн күрәмен.*
*Хаттарына ҡуша йән ауазын,*
*үҙ ҡояшын манған наҙына.*
*Түбәң күккә тейә, шул ҡояшта*
*Йылын аң да ҡасан аҙ ғына.*

*Сырхау бөтә, ошо хаттар менән*
*Бала саҡтан йәнгә нур ин ә.*
*Бәхет еҙҙер кеше, бик бәхет еҙ,*
*Был нурҙарҙы әгәр үндер ә.*
*Телә әк тә, тамам китә алмайбыҙ*
*Бер гона ыҙ сабый мәленән,*
*...Ысык ҡушып сәскә еҫе ипкән*
*Туғай йәме, шишмә тәменән.*

*Әсәй хаттар яҙа. Бик йыш яҙа.*
*Тыуған яктың өрөп улышын.*
*өйөүенә мансып яҙа, ахыры,*
*өйөү хисе тора тулышып.*

---

*Марис Нәзиров Саҡмағош районының Үрнәк ауылында 1949 йылдың 4 авгусында тыуған. “Саҡмағош мәғлүмәт үҙәге” редакция-нәшриәт комплексы дәүләт унитар предприятие ы директоры булып эшләй. Бер үк ваҡытта “Игенче” әм “Саҡмағош сатҡылары” гәзиттәренең баш мөхәррире лә. Тиҫтәнән ашыу шиғыр китаптары авторы. Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат әм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе юбилейы менән ҡотлайбыҙ!*

*Хаттарында юлдар йүгерешә,*
*Хәрефтәргә урын тар ымаҡ:*
*“ алҡынайтты, балам…*
*Мейес яҡтыҡ…*
*Ут алдында ин дә бар ымаҡ…”*

## *Ауылым кисе*

*Еңгәйҙәрҙең йөҙөн балҡытып,*
*Яңы ауған өт еҫтәрен аңҡытып,*
*Көтөү ҡайтты;*
*Үләнгә ятты*
*Юлдан күтәрелгән туҙан болото*
*әм ирене уның йәшел ҡосағында.*

*үнде шәфәҡ;*
*Гөлт итеп тоҡанды шул сағында*
*Алыҫ болон сәскәләре – йондоҙ уты;*
*Өн өҙ генә уртаҡлыҡта сыҡты ай өңөнән…*

*Ҡояштан да иртә торған йы ан еле лә,*
*Нур артынан сабып йөрөнө-йөрөнө лә,*
*Телен тешләп, инеп ятты ҡыуаҡ төбөнә…*

*Талғын ғына йоҡоға талды тыуған ауылым,*
*Башын алып тынлыҡ күкрәгенә…*
*…Иҙерәткес тулҡын килеп бәрелде*
*Минең дә керпегемә.*

***

*Был донъяла барҙар әле, аман барҙар:*
*Итәк менән ай-ҡояшты ҡаплағандар;*
*Ҡабарғандар ҡыҙыл күргән күркә кеүек,*
*Кенә тотоп, талпан булып ҡаҙалғандар.*

*Был донъяла барҙар әле, аман барҙар:*
*Ҡомағайлыҡ ҡосағына атылғандар;*
*Ҡайырғандар ата ының алтын тешен,*
*Халҡы, иле дошманына атылғандар.*

*Арабыҙҙа төрлө заттар әле барҙар…*
*Бил быуылған. Кем кемлеген бәйге барлар!*

***

*Килгән инең ер өҫтөнә,*
*Энем, ин исем еҙ генә.*
*Тыңларға тип аҡ моңдарҙы,*
*Йоторға тип шат нурҙарҙы,*
*Эсергә тип ер ауа ын,*
*Бәйләргә тип гөл яра ын.*

*Хыялыңдың бөрөләре*
*Япраҡ ярып өлгөрмәне.*
*Әйлән әң дә исемлегә,*
*Ҡалды инең төҫөң генә.*
*Кескәй генә ҡыҙың ҡалды,*
*Исемеңде улым алды.*

*Тынғы тапмай күңелемә*
*Ҡәбереңә килдем йәнә.*
*Ятҡан ерең йомшаҡ икән,*
*Баш осоңа гөлдәр үҫкән.*
*Ап-аҡ тирәк аяғүрә –*
*…Тамырына йылың йүгерә…*

## Силәгендә таң

*Тыуған ауыл туп а ында –*
*Йы андың мин урта ында.*
*Ниндәй еңел ауа,*
*еңлем ыйыр ауа.*

*Ҡай арала, минән уҙып,*
*Йоҡо онан уянған –*
*Ап-аҡ өт тамсы ы булып*
*Силәгендә сыңлай таң.*

## Күнегелә

*Ҡорой шәфҡәтлелек ағасы*
*Ир-егет күңелендә.*
*Тайғанды төртөп үтеүгә,*
*Тапауға күнегелә.*
*Сапсанды атып алғанды*
*Маҡтауға күнегелә…*

*Ишелә шәфҡәтлек тауы*
*Ҡатын-ҡыҙ күңелендә.*
*өйөүгә атылған ғәйбәт –*
*Таштарға күнегелә.*
*Ҡоҙоҡҡа күкрәк бала ын*
*Ташлауға күнегелә…*

*“Аҡ ҡарға” булып төркөмгә,*
*Кәтөүгә күрен генә –*
*Йолкола тән, күмелә йән*
*Ҡә әрләү күбегенә.*
*Күкрәгеңә сәпәлә боҙ*
*Төркөмдөң көбәгенән…*

*үнә шәфҡәтлектең уты:*
*Залимлыҡ күрегенән*
*ибеүгә күңел шәменә*

*Көл генә, күмер генә*
*Бөгөн дә күнегелә…*
*А , аман күнегелә*
*Вайым ыҙлыҡ аҙына*
*Күңелдәр күмелеүгә…*

## Наҙ тулҡыны

*ине юҡ ынғанға*
*күҙҙәремә*
*Мөлдөрәмә булып моң тулған.*
*Бар микән ул башҡа,*
*Башҡа минең кеүек*
*ине уйлап былай уйылған?*

*ине юғалтканға*
*йөҙҙәремә*
*ары ағыш булып зар йоҡкан.*
*Бармы уң ул башҡа,*
*Башҡа минең кеүек*
*ине көтөп былай зарыҡкан?!*

*ине осратканға*
*йөрәгемә*
*Наҙ тулҡыны үрләй ҡабаттан.*
*Булыр микән башҡа,*
*Башҡа минең кеүек*
*инең өсөн былай йән аткан?!*

## Яҙҙарыңда ҡалдыр мине

*Көҙ ары ы булып килмәй сағылғым*
*ағышлы ҡарашыңда.*
*Яҙҙарыңда ҡалдыр мине,*
*Сәскәләр ара ында.*

*Беренсе ҡар булып килмәй салынғым*
*Толомоң ҡара ында.*
*Яҙҙарыңда ҡалдыр мине,*
*Йәшлегем ҡала ында.*

*Үкенестәр булып килмәй улҡылдағым*
*Йөрәгең яра ында.*
*Яҙҙарыңда ҡалдыр мине,*
*Мөхәббәт дала ында.*

## үрәт күрәм

*Бала саҡтан бирле үрәт күрәм,*
*Аҡ ҡағыҙға шуны күсерәм.*
*Тыуған яктың йәшел сиҙәменән,*
*Табандарға күсеп, көс биргән.*

*Йәйгә ингәс ишеп ҡар яуғанды*
*Ваҡытлыса ғына тип беләм.*
*Ҡыш кил ә лә, иркәм күңеленә*
*Ләйсән ямғыр булып ибеләм.*

*Асыҡ тәҙрәләрҙән күк итәген*
*Ел күтәреп керә өйөмә.*
*Яҙ көлгәндә ап-аҡ сәскәләрҙең*
*Ҡар тишкәнен күреп өйөнәм.*

*Тыуған яҡтың гүзәл тәбиғәте*
*Күңелемә шиғри хис өргән.*
*Бала саҡтан бирле үрәт күрәм,*
*Ил ам ғазаптары кисерәм!*

## *Йәй урта ы*

Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре, ауыл хужалығы фәндәре докторы Риф Сәғәҙәтулла улы Йосоповҡа

*еҙҙең әле йәй урта ы,*
*Ә мин атлайым көҙгә.*
*Тыуған көндәр бер үк икән,*
*Арыҫлан – икебеҙ ҙә.*

*Арыҫландай холоҡ-фиғел*
*Беҙҙең дә ҡанда барҙыр.*
*Гел “Алға”* тип яр ып яныу*
*Беҙҙең дә йәндә барҙыр.*

*Сәскә ат ын тип янабыҙ*
*Тыуған ил, тыуған ерҙәр.*
*Арыҫланды, януар тулы*
*Донъя батша ы, тиҙәр.*

*Ә беҙ ис тә ҡыҙыҡмайбыҙ*
*Батшалар тәхетенә.*
*Саҡмағоштоң улы булыу*
*Өлгәштек бәхетенә.*

*Мин гәзиткә көсөм алам,*
*Ә еҙ – район хакимы.*
*Солтандай уҡ булма аҡ та,*
*Олтан да түгел инде.*

*Олтан бул аң да үпкә юҡ*
*Ил-халҡың табанында.*

**Риф Йосоповтың район башлығы итеп ҡуйылғанға тиклем ошо хужалыҡ рәйесе булыуына ишара.*

*…Ҡалма ын беҙҙән өйәк тә*
*Яуыздар тамағына.*

*Йәй урта ы. Әле йылдар*
*Ағышы таман ғына.*
*Атла ын көнгә ғүмерҙәр,*
*Ҡояшлы көнгә ғүмерҙәр*
*Ҡояшлы таңдан ғына.*

*Нурлы йәйҙәр күкрәп уҙ ын,*
*Балҡып керегеҙ көҙгә.*
*Тыуған көнөбөҙ бер икән,*
*Арыҫлан – икебеҙ ҙә.*

## Алтмышынсы көҙөм

*Алтын көҙөм.*
*Алтмышынсы көҙөм.*
*Күңел ҡырҙарының*
*Ашлыҡтарын йыйып уғыр саҡ.*
*Гәрәбәләй*
*Эре бөртөктәрҙе,*
*Кәбәктәрҙән әрсеп,*
*Келәттәргә алып ҡуйыр саҡ.*

*Алтмыш ҡышлы ғүмер,*
*Сәстем шиғыр,*
*Алтмыш яҙға орлоҡ күндерҙем.*
*Дауылдары булды,*
*Ямғыр яуҙы,*
*Йәйҙәр йәшеллеген*
*Ҡар-боҙ күмгәнде лә күп күрҙем.*

*Ил ам эҙләп*
*Йәнә керәм көҙгә,*
*Башҡа төрлө бүтән*
*Кис ултырып анар малым юҡ.*
*Тирмән тарт аҡ,*
*Он сығырмы икән*
*Урған- уҡҡанымдан*
*Мейес тултырып икмәк алырлыҡ?*

*Алтмышынсы көҙөм.*
*Алтын көҙөм.*
*Ғүмер баҫыуының*
*Ашлыҡтарын йыйып уғыр саҡ.*
*ынауҙарҙа түҙеп,*
*Эштә йөҙөп*
*Кискән йылдарымдың*
*өҙөмтә ен барлап ҡуйыр саҡ.*



**Кәүсәриә**
**ШАФИҠОВА**

# “ҠУЛЫМДА – АҠҠОШ ҠАУРЫЙЫ...”

***

*Ауырыуҙың хәле шундай:*
*Гел  ыҙланып үтә көнө.*
*Күп саҡтарҙа керпек ҡаҡмай,*
*Бигерәк оҙон була төнө.*

*Хәл эсендә тороп ҡала,*
*Юҡ, ул донъя ҡуя алмай.*
*Сир-сырхауҙан туйған инде,*
*Ә йәшәүҙән – туя алмай.*

*Ауырыуҙың хәле шундай:*
*Өмөтләнеп йәшәй белә.*
*Ул ҡанат ыҙ ҡалмаясаҡ,*
*Көҙөн киткән ҡоштар менән*
*Ергә яңы яҙҙар килә!*

## *Ҡулымда – ҡаурый ҡәләм*

*Ҡулымда – аҡҡош ҡаурыйы,*
*Хистәрем шундай ҡайнар.*
*алҡын көҙ буламы, юҡ, был,*
*Әйтер ең, умырзаялар –*
*Йылмайған яҙғы айҙар!*

*Кәүсәриә Шафиҡова Яңауыл районының Иҫәнбай ауылында тыуған. Уның шиғырҙарына композиторҙар бик күп популяр йырҙар яҙған. 1999 йылдан Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағза ы.*

*Хыялым күге ҡояшлы,*
*Яна ым, көйә ем бар.*
*Иң матур йыр яҙылғансы*
*Мең ғазабын ҡабат-ҡабат*
*Кисереп өйә ем бар.*

*Ҡулымда – аҡҡош ҡаурыйы,*
*Елдәргә бирәмме уң!*
*Алтынға түгел, ялҡынға*
*Манасаҡмын ҡаурыйымды,*
*Күңелем тулы йыр-моң!*

## Аҡлыҡ

*Ап-аҡ ҡағыҙ битеме ни,*
*Ер өҫтөндә ап-аҡ ҡар.*
*Шиғыр итеп яҙам әле,*
*Күңелемдә шатлыҡ бар.*

*Ҡар-ҡағыҙға шиғыр яҙам,*
*Шатлығым – ошо аҡлыҡ.*
*Яуған ҡарҙың аҡлығында*
*Күрәм мин сафлыҡ, хаҡлыҡ.*

*Үҙемә күп, әммәгеҙгә*
*Өләшәм шатлыҡ хисен.*
*Тормоштағы ҡараларҙы*
*Кемдең күрге е кил ен?!*

## Китермен

*Алтмыш йәшем менән ҡотлап*
*Әйттегеҙ йылы үҙҙәр.*
*Шатлыҡ-ҡыуаныстарымдан*
*Йәшләнде минең күҙҙәр.*

*Тукта-туҡта, ҡартаяммы,*
*Алтмышҡа еткәнемме?*
*Ярға килеп туҡтар өсөн*
*Борҙоммо елкәнемде?*

*Юҡ әле, юҡ, алға барам,*
*Тормош тулҡынын ярып.*
*Мин бит әле бер ҡасан да*
*Туҡтап ҡалманым арып.*

*Әле алтмыш ҡына, бәлки,*
*Туҡ анға ла етермен.*
*Әле тағын матур-матур*
*Йырҙар ижад итермен,*
*Ысын күңелдән бары ын да*
*еҙгә бүләк итермен,*
*Ә шунан уң – китермен!*

## Шулайҙыр

*“Бирешмәй ең, әле аман*
*Матур ың!” – тигәндәр бар.*
*“Батыр ың!” – тиеп алдымда*
*Баштарын эйгәндәр бар.*

*Йәшәгем килеп йәшәүем –*
*Минең батырлығымдыр,*
*Минең матурлығымдыр!*

## ыу буйында

*Ҡыштырлатып ары япраҡтарҙы,*
*Көҙгө моң ул йөрөй уҡмаҡ буйлап.*
*Шәрә ҡалған барлыҡ ағастар ҙа*
*Тын торалар, ана, ниҙер уйлап.*

*Эйе, ғүмер шулай яратылған,*
*Япраҡ яр ҙа, имеш, япрағың ҡой.*
*Талды ҡосаҡлаған үрән ҡояш:*
*“Көҙҙәрҙә лә яҙғы наҙымды той!”*

*Мин шул талдай, мин дә япраҡ ҡоям,*
*Алтын япраҡ минең тирә-яғым.*
*Аҡҡан ыуға ҡарап уйға талдым:*
*Шатланған да, моңланған да сағым.*

## Етәккә алдым

*Уйҙарым – тәрән диңгеҙҙәй,*
*Ярай, булғанмын сыҙам.*
*Тәрәнлеккә сумғаным юҡ,*
*Тулҡын өҫтөнә сығам.*

*Тирбәлә-тирбәлә йөҙәм,*
*Хәлдән дә тайып ҡалам.*
*Йәм-йәшел хәтфә үләнле*
*Ярында тынып ҡалам.*

*Ҡайғым да ҙур, тауҙар тиклем,*
*ис ҡурҡытмай улар ҙа.*
*Тауҙар ҙа бит тетрәп тора*
*Көс барҙа, дауылдарҙа.*

*Янымда дауыл көсө бар,*
*Бөгөрмөн имәндәрҙе.*
*Шуға ла етәккә алдым*
*Ауырлыҡтар килгән айын*
*Башҡайын эйгәндәрҙе.*

## Донъя бөтмәй

/Донъя бөтә тигән үҙҙәр йөрөй./

*Юҡ әле, донъя бөтмәй,*
*Сабыйҙарҙың үҫә е бар.*
*Бер кемде лә рәнйетмәйсә*
*Гел наҙҙар кисә е бар.*

*Күрәсәкте күрә-күрә,*
*Өлкән йәшкә етә е бар.*
*Шунан ғына, был ҡояшлы*
*Донъя менән бәхилләшеп,*
*Мәңгелеккә китә е бар.*

*Ергә яҙҙар килгән айын*
*Йылы ләйсән яуа ы бар.*
*Донъяны бар итер өсөн*
*Йәш ҡыҙҙарҙың, егеттәрҙең*
*Ғашиҡ булып яна ы бар.*

*өйөү бар бит, мөхәббәт ул –*
*Татлы емеш бирер сәсәк.*
*Кеше тыуа, был матурлыҡ*
*Төҫөн юя торған түгел,*
*Тимәк, донъя бөтмәйәсәк!*

## Юлдамын

*Киләсәккә түгел, үткәндәргә*
*Йәшел үлән аша юлдар ярам.*
*Шатлыҡтарым менән йәнәш атлап,*
*Ҡояш менән тулы бала саҡка*
*Ҡурсағымды эҙләп ҡайтып барам.*

*Киләсәккә түгел, үткәндәргә*
*Бер яна ым килеп китеп барам.*
*Йәшлек ҡолас йәйә, шунда бит мин,*
*Мөхәббәтем ҡошо айрағанда,*
*Тал-тирәктәр булып япраҡ ярам.*

*Юҡ икән дә, юлым – киләсәккә,*
*Үткәндәргә кем уң ҡайта алған?!*
*Алданма ин, күңелем, йырың көйлә,*
*Ғүмеремдең аллы-гөллө сағы,*
*ағыныуҙарым, моңом булып ҡалған.*

“Күңелемдә – донъя сере”

2009



Гөлнара ЯҠШЫБАЕВА

## Ленараны йоҡлатҡанда

*Әүен баҙарынан*
*Ҡурсаҡ атып алам.*
*Матур ғына тәтәй*
*Уйнар минең балам!*
*Әүен баҙарынан*
*Ҡалас атып алам.*
*Татлы әпәкәйҙе*
*Ашар минең балам!*
*Әүен баҙарынан*
*Күлдәк атып алам.*
*Ал ыу ғына күлдәк*
*Кейер минең балам!*
*Әүен баҙарынан*
*Таҫма атып алам.*
*Ал таҫма, ал ыу таҫманы*
*Тағыр минең балам!*
*Әүен баҙарында*
*Йөрөр минең балам!*
*Әүәй... әүәй... әүәй...*
*Сәңгелдәккә алам.*

*Гөлнара Яҡшыбаева Баймаҡ районының Хәсән ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтын тамамлай. Сибайҙа йәшәй.*

## Ностальгия

*Хыялдарым ашмаç булды,*
*Бәхеттәрем ташмаç булды,*
*Йәшлек – болан. Тояғынан*
*Хәтирәләр сәсрәп ҡалды.*

*Моң урамай йырҙарымды,*
*Нур яҡтыртмай юлдарымды.*
*Моңға алған,*
*Йырҙан торған*
*Ҡайтарығыҙ яҙҙарымды!*

*Яҙҙарым йәшлек ине,*
*Йәшлегем – ҡояш ине.*
*Ҡояшҡайым яулыҡ болғай,*
*ағышҡа сорнап ерҙе.*
*Боланҡайым, туҡтап торсо!..*
*Кемдәр йыуатыр мине?!.*

## Дегәнәк

*Үҙгәргән ең, ти ең, йылдар үткәс,*
*Өҙгөләнгән дегәнәкмен, ин киткәс,*
*Өн өҙ генә терелгәнмен, яҙҙар еткәс,*
*Яр ып илағым кил ә лә, күңел көләс.*

*Сит ҡулдарға таяндым да, көсөм бөткәс,*
*Ят хистәргә алдандым шул, өмөт иткәс.*
*Нисек инде үҙгәрмәçкә, өйрәт, йәнем,*
*Ләкин иңә үкенергә үҙгәргәнмен.*



## Мөнир ИҠСАНОВ

### *Сәйерлек*

*Күрәләр ҙә миңә ят булыуын*
*Хәмер-шарап кеүек эсемлек,*
*Текәләләр ынап күҙҙәремә,*
*Эҙләгәндәй сәйер кәмселек.*
*Йә сәйерме инде?*
*Ҡай заманда*
*Иҫерек йөрөгән ул мосолман?*
*Зи енемә шайтан ыуын ҡойоп,*
*Гона диңгеҙенә мин суммам!*

*Икенсенән,*
*Мин башҡорт та ба а,*
*Ризыҡ түгел – шарап- ыралар.*
*Буйыбыҙға еңмәй бындай ағыу,*
*Милләтемде шулар ҡыралар.*

*Мин – башҡамын*
*еҙҙең арағыҙҙа!*
*әм был минең иң ҙур “кәмселек”!*
*Күҙегеҙгә төртөлөп тора, беләм,*
*Йәнегеҙгә тора сәнселеп.*

*Мөнир Иҡсанов 1984 йылда Учалы районының Орловка ауылында тыуған. Уҡытыусы.*

## Яйыҡ

*Яйыҡ та ғына тигән яй йылғамдың*
*Эй, йәмле лә инде буйҙары.*
*Яйығыма ҡарап уйҙар ҡорам,*
*Яйығымдай аға уйҙарым.*

*Яйыҡҡайым ҡайҙа китә икән,*
*Уралҡайҙың ярып күкрәген?*
*Уйҙарымдан йөрәк уйылғанда,*
*Ярылып ҡына яр ый йөрәгем.*

*Яйыҡ та ғына тигән, ай, атама*
*Батша ҡулы менән юйылған.*
*Халыҡ хәтеренән юғалмаҫлыҡ*
*Башҡорт ҡаны менән уйылған.*

*Яйыҡ атама ы менән бергә*
*Юймаҡ инеләр бит халыҡты.*
*Шунан бирле күпме йылдар үтте,*
*Яйығымда күпме ыу аҡты!..*

*Ағиҙелгә тотондолар бөгөн –*
*“Белая” тип әйтә, яҙалар.*
*Юҡ. Яҙмайҙар.*
*Ҡәләм менән шулай*
*Милләтемә ҡәбер ҡаҙалар.*
*Тан ыҡтарым ҡаныр микән, Яйыҡ,*
*Ниндәй татлы инең ыуҙарың!*
*Устарыма алып битем сай ам,*
*Баҫылғандай була а -зарым.*

## Асфальт

*Оҙаҡ ҡарап торҙом балаларҙың*
*Аҡбур менән ҡара асфальтҡа*
*үрәт төшөрөүен.*
*Ҡапыл йөрәк*
*Әллә нишләп китте шул саҡта.*

*Биләп алды йәнде хис-тойғолар:*
*Еңел,*
*Рәхәт,*
*Яҡты,*
*Күңелле.*
*Талып әм таралып бөткән асфальт*
*Минең йөрәк ине түгелме?!*

# “СЫБАР ШОҢҠАР”

## романында милли идея сағылышы

Уҡыусыларҙа Тыуған илгә, телгә, халыҡҡа мөхәббәт, хеҙмәткә ыңғай мөнәсәбәт, үҙ көсөңә ышаныс, башҡорт йолаларына ихтирам формалаштырыуҙа, дуҫлыҡ, берҙәмлек, тарихҡа ғорурлыҡ тәрбиәләүҙә Роберт Байымовтың XX быуат башы милли хәрәкәт осорон үрәтләгән “Сыбар шоңҡар” романы ҙур ә әмиәткә эйә. Әлбиттә, был осорға арналған әм “тарихи-революцион роман” тип йөрөтөлгән әҫәрҙәр башҡорт әҙәбиәтендә үткән быуаттың 30-сы йылдар башында уҡ А.Та иров, Д.Юлтый, И.Насыри романдары йөҙөндә донъя күргәйне. уңыраҡҡы осорҙарҙа уларға З.Биишева, Ф.Иҫәнғолов, Я.Хамматов трилогиялары ла өҫтәлде.

Әммә барса был әҫәрҙәр Башҡортостанда барған инҡилап ваҡиғаларын большевистик рухтағы дөйөм Рәсәй ҡуҙғалышы контексында ғына үрәтләй килде. Инҡилаптың милли үҙенсәлектәре иҫәпкә алынманы, хатта “буржуаз-милләтселек” мө өрө аҫтында милли хәрәкәт әм уның етәкселәре ҡара буяуҙар менән карикатур планда ғына тасуирланды.

Роберт Байымовтың “Сыбар шоңҡар” романы и ә инҡилаптың нәҡ былна ошо кире ҡағылып, тәнҡитләнеп киленгән милли үҙенсәлегенә – Рәсәйҙә Февраль, Октябрь революциялары, Граждандар уғышы осоронда Зәки Вәлиди етәкселегендәге башҡорт хәрәкәтен, уның тыуыу сәбәптәрен, барышы әм яҙмышын эҙмә-эҙлекле күр әтеүгә нигеҙләнгән. Был үҙе үк әҫәргә даими әм етди иғтибар йәлеп итә. Роман донъя күреү менән төрлө телле матбуғат биттәрендә күп анлы ба аламалар, рецензиялар, мәҡәләләр баҫылып сығыуы, әҫәрҙең Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ына лайыҡ булыуы ла ошо хаҡта өйләй.

Шул уҡ ваҡытта, халыҡ тарихының ҡатмарлы әм көсөргәнешле, киҫкен боролош мәлен үрәтләгән был бик үк ябай булмаған әҫәр хаҡында бары ы ла әйтелгән, тип тә булмай. Ил әм донъя кимәлендәге бөгөн өр-яңы милли ҡуҙғалыштар күтәрелеп торған бер ваҡытта әҫәрҙең бәҫе арта ғына. Бындай материалдарға ошо йылдар башҡорт тарихын әм Зәки Вәлидиҙең ғилми әм ижади

*эшмәкәрлеген монографик өйрәнеүсе мәғариф система ы ла бик мохтаждыр, тип уйлайым.*

*Урта мәктәптең Х синыфында Ә.Вәлиди Туған эшмәкәрлеген монографик өйрәнеүгә биш сәғәт бүленеүенә ҡарамаҫтан, бөйөк шәхестең тормошон, ғилми-сәйәси эшмәкәрлеген әр яҡлап дәлилле үрәтләгән "Сыбар шоңҡар" әҫәре, ни сәбәптәндер, программаға индерелмәгән. Был хаҡта төрлө кимәлдәге уҡытыусылар конференцияларында ла әйтелә килендә. Оҙаҡ йылдар мәктәптә әҙәбиәт уҡытыу тәжрибә енә таянып фекер уртаҡлашыу сифатында яҙылған был мәҡәлә шуға ла, "Ә.Вәлиди Туған" тема ын үткәндә, ниндәйҙер кимәлдә, уҡыусы әм уҡытыусыға ла файҙалы булыр, тигән өмөттәмен.*

*Яҙыусы был әҫәрендә "халыҡ" тигән төшөнсәгә ҙур мәғәнә алған, милли айырмалыҡ, милли рух үҙенсәлектәрен сағылдырыуға айырыуса иғтибар иткән, уҡыусыларыбыҙға идеал булыр образдар тыуҙырған. Халыҡ ижады, уның традициялары, башҡорт тарихы, ырыуҙарҙың арҙаҡлы шәхестәре, төп символдары (ораны, тамға ы, ҡошо, ағасы),ер- ыу атамаларының тарихы әм легендалары, нәҫел шәжәрә е, халҡыбыҙҙың йәшәү рәүеше, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре – былар бөтә е лә романда урын алған. Яҙыусы баланың рухын, милли үҙаңын уятыу, милли ғорурлыҡ тойғо он, күңелен үҫтереү, рухи яҡтан сәләмәт, көслө шәхес тәрбиәләү өсөн бөтә тасуири сараларҙы ҡуллана, үҙенең милли асылына эйә булған яңы быуын үҫтереүгә йоғонтоло мөмкинлектәр бирә.*

# 1. Әҫәрҙең уйланмышы

1988 йылда Р.Байымовҡа Венгрияға барыу бәхете тейә, шунда уйламағанда Зәки Вәлидиҙең Төркиәлә донъя күргән "Хәтирәләр"е менән таныша. Башҡорттарҙы ҡәрҙәш тип таныған арҙаҡлы венгр ғалимы Йожеф Торма хатта китаптың бер дана ын уға бүләк итә.

Материалдар эҙләү башлана. Бына, әйтәйек, 1959 йылда уҡ Б.Х. Юлдашбаев редакция ында донъя күргән "Образование Башкирской Автономной Советской Социалистической Республики" тигән документтар әм материалдар йыйынтығы. Унда ла заманында иғтибар ителмәгән инҡилап әм Граждандар уғышы ваҡиғалары ла, милли хәрәкәт әм уның етәкселәре эшмәкәрлеген дә баштан аҙағына тиклем күҙ алдына баҫтырырлыҡ документтар тупланған икән дә ба а!

Ваҡиғаларҙың йылы эҙенән яҙылған документтар ҙа байтаҡ. Ш.Типеевтың "Башҡортостан тарихы", Ғәзим Ҡасимовтың башҡорт милли ҡуҙғалышына арналған "Революция көндәре" исемле 20-се йылдарҙа уҡ Өфөлә әм Ҡазанда нәшер ителгән китаптары үҙебеҙҙең республика китапхана ынан табыла. Шунда уҡ Федор Самойловтың "Малая Башкирия" атамалы мемуарҙары, йәнә "1917 – 1920 йылдар башҡорт милли хәрәкәтенә характеристика", "Обком тезистары" кеүек ҡиммәтле материалдар ҙа тикшеренеүселәрен көтөп ятҡан икән.

Рәсәй составында тарихта беренсе булып үҙаллы төрки дәүләте иғлан иткән, автономия өсөн аяҡ терәп көрәш юлына баҫҡан Башҡортостан, әлбиттә, дуҫтарҙа

ла, дошмандарҙа ла, ил эсендә генә түгел, донъя кимәлендә лә иғтибар ыҙ ҡалмаған. Петербург, Ҡазан, Кавказ мосолмандары сығыштары, Төркөстан бәйләнештәре, шулай уҡ Төркиә лидеры Ататөрөктөң ҡотлау хаты, эмиграциялағы индостан хөкүмәте премьер-министры Мәүләүи Бәрәкәтулланың Башҡортостанға килеүе, Төркиә, Афғанстан кеүек шәреҡ илдәре вәкилдәренең Мәскәүҙә Зәки Вәлиди әм унын фекерҙәштәре менән рәсми өйләшеүҙәр алып барыуы ла ошо хаҡта өйләй. Хәрби планда "башҡорт мәсьәлә е" менән шулай уҡ Фрунзе, Колчак, Дутов, Гай, Деникин, Юденич, Гришин, Алмазов ымаҡ баррикаданың ике яғында булған полководецтар шөғөлләнә, әм, тәбиғи, бындай типтағы мәғлүмәттәр ҙә шул заман матбуғатында, рәсми ҡағыҙҙарҙа, китаптарҙа сағылмай ҡалмаған. Башҡортостандағы ваҡиғалар — ғәмәлдә ул йылдарҙа илдә әм донъяла барған ҡатмарлы, ҙур үҙгәрештәрҙең бер төйөнө. Екатеринбургтағы батша ғаилә е фажиғә е лә ниндәйҙер кимәлдә ошо ваҡиғалар үҫешенә мөнәсәбәтле. Башҡорт Республика ы хәрби комиссары Әүхәҙи Ишмырҙиндың Төркөстанда, баҫмасылар хәрәкәтендә әләк булыу эпизоды ла, ана бит, сит илдә сыҡҡан "Красный террор" китабына инеп ҡалған.

Әлбиттә, ошондай киң даирәле материалдар менән танышыу "Сыбар шоңҡар" авторына Башҡортостанда барған Октябрь революция ы, Граждандар уғышы әм башҡорт милли хәрәкәте ваҡиғаларын яңыса ба аларға ярҙам итә. Был йә әттән "Хәтирәләр" китабы айырым урын биләй. "Хәтирәләр" менән ентекле танышыу инҡилап әм Граждандар уғышы осоро ваҡиғаларын яңыса аңларға ярҙам итте, тип раҫлау, моғайын, аҙ булыр, ул нисектер зи енде яңыртып ебәрҙе", — тип яҙа был хаҡта Р. Байымов үҙе "Шоңҡар" журналында.

Ҡарамаҡҡа, роман урыны-урыны менән Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Хәтирәләр"е туҡыма ынан туҡылғандай тойола. Асылда и ә автор ваҡиғалар барған арауыҡты, ваҡыт әм киңлек йә әтенән дә, ныҡ ҡына киңәйтә, осор сәйәсәтен төбө-тамырынаса асырға тырыша. Бының өсөн "Хәтирәләр"ҙән тыш ошо осорға ҡараған бик күп башҡа документ, факттарҙы, фольклор мотивтарын файҙалана, ижади фантазия ы тыуҙырған ваҡиғаларҙы ла өҫтәй, кәрәк урында шәхестәрҙең исемдәрен алмаштырып, уларҙы әҫәрҙең уйланылышы талап иткәнсә үҙгәртә, уйҙырма персонаждар ҙа индерә.

Бөгөн Зәки Вәлиди тема ына мөрәжәғәт итеүселәр күп. Был аңлашыла: ҡатмарлы ғүмер юлы үткән, Рәсәй составында халҡына тәүге милли автономия алып биргән был шәхес сит-ят ерҙәргә киткәс тә үҙенең уй-фекерҙәренән баш тартмаған. Шуға күрә киләсәктә лә уға мөрәжәғәт иткән әҙиптәр булыр, яңы әҫәрҙәр ҙә тыуыр...

Роберт Байымов үҙенең документаль романында халҡыбыҙҙың ошо ҡа арманы образын беренселәрҙән булып типиклаштырҙы. Зәки Вәлиди сәйәси көрәш ҡаршылыҡтары аша интеллектуаль әм героик шәхес кимәленә күтәрелде. Беҙ романда Әхмәтзәкиҙең башҡорт әм башҡа шәреҡ халыҡтарының меңәр йыллыҡ бай рухи тәжрибә ен ныҡышмалы үҙләштереүен күрәбеҙ. Әхмәтзәкиҙең әсә е лә, ата ы ла уҡымышлы, үҙ халҡының рухи тәжрибә ен туплаған ғаилә. "Әсәйемдең өйләшеүе бик кинәйәле әм зауыҡлы булды, әр саҡ шиғыр ҡушып, әр йөмлә ен боронғолар үҙе менән нығытып, тапҡыр мәҡәлдәр әйтеп өйләшә торғайны", — тип яҙа Әхмәтзәки Вәлидов үҙенең "Хәтирәләр"ендә.

Был быуындан-быуынға күсә килгән традиция Әхмәтзәки Вәлидовтың да шәхесе формалашыуына нигеҙ булып тора. Фәнгә хеҙмәт итеү ләззәтен ул ата ынан, Хәбибназар олата ынан, улар аралашып йәшәгән башҡа ғилемле шәхестәрҙән үҙләштерә.

Әхмәтзәкиҙең граждандлыҡ рухы нигеҙендә, әлбиттә, тыуған ер, уның матурлығын танып белеү ята. Үҫмер сағынан уҡ ул белем донъя ының төпкөлдәренә сум а ла, көндәлек тормоштан бер ваҡытта ла айырылмай, башҡорт ауылдары, йәйләүҙәре тормошо менән бәйләнешен өҙмәй. Йәнгә яҡын, йәннәттәй Урал тәбиғәте урта ында, саф йылғаларҙың ыуын эсеп, яҡшы аттарҙа бәйгеләрҙә ҡатнашып, ҡымыҙ мәжлестәрендә йыр-көйҙәребеҙҙе, сәсәндәрҙең хикмәтле үҙҙәрен тыңлап, халҡыбыҙға ысынлап та Тәңренән бирелгән изге тупраҡтан көс әм ҡеүәт алып үткәргән бала сағы, йәшлек йылдары хаҡындағы иҫтәлектәр ғүмере буйына Зәкиҙең күңелен яҡтыртып, хатта иң ауыр мәлдәрендә лә ҡайғы- ағыштарын таратып, йәненә рухи көс, таяныс булып торған. Шуға романда Әхмәтзәки Вәлидов көрәшсе булараҡ ҡына түгел, кешелеклелек йә өтенән дә тулы ҡанлы, йәнле килеп баҫа. Быны беҙ бигерәк тә уның туғандарына, Нәфисәгә, яҡын дуҫтарына булған ҡарашы аша асыҡ күрәбеҙ. Зәкиҙең ата-әсә енә булған йылы мөнәсәбәте романда бер нисә сюжет ыҙығы аша бирелгән.

“...Ай- ай-й, тыуған ерҙең шифа ы! Ошолай Көҙән тауы башындағы ымаҡ тәмле итеп, тәрән итеп тын алып буламы ни сит яҡтарҙа?! Ана, ҡояш сыҡҡан тарафта уларҙың Аҡбейек йәйләүҙәре. Бала сағында шунда ҡыр кейегеләй ирәүән үҫте, яр ыу аттарҙы сәмләндереп, башҡа малайҙар менән иркен далала ыбай баҫтырышып сәғәттәр буйы онотолоп уйнарҙар ине. Эйе, киңлек, сафлыҡ бында, йәйрәп ятҡан йәйләү — башҡорт иле!

... Ә күк уң, күк көмбәҙе! Көмбәҙ түгел, төп өҙ зәңгәр гүзәллек!.. Ниндәй аҡ елкән елпенә унда?.. Шоңҡар был, ирәк осрай торған аҡ шоңҡар! Башҡорттар уны “Тойғон” ти... Тышҡы күркәмлектәре, ғорур ҡиәфәттәре менән генә түгел, ҡылыҡтары менән дә айырыла был ҡоштар: бейектә оса, үҙ оя ына тоғро... Тик ҡанаттарын йомоп, ҡая башында әйкәлгә оҡшап ултырғанда ғына аҡ күренә ул, ә былай сыбар... хәйер, кешеләр, илдәр, милләттәр менән дә шулай: уларҙың да ағы, ҡара ы тик эш- ҡылыҡтарында ғына күренә. Ана ниндәй юғарылыҡтарҙы иңләй!”

## 2. Инҡилап әм рухи терәк

Кешенең тыуып-үҫкән ере, изге хәтирә булып, уның ғүмеренең әм рухи донъя ының мәңге бүленмәҫ өлөшөнә әүерелә. Тыуған яғы ниндәй — кеше, ғәҙәттә, бар булмышы менән шундай. Тыуған төбәк, тыуған ауыл, тыуған тәбиғәт, тыуған өй — күңелгә иң яҡын төшөнсәләр.

Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың Көҙәне сағыштырмаса йәш ауылдарҙан. Тыуған ауылының кескәй тарихы ла, үҙ ырыу тарихы әм риүәйәттәре лә ата-бабалары өйләгәндәре буйынса хәтеренә еңеп ҡалған, тарихи рухын нығытышҡан.

“...Тыуған яҡ тәбиғәтенең мө абәт тә, ләззәтле лә моңо, ҡайҙа ғына булма ын, Әхмәтзәкиҙең күңеленән бер ҡасан да китмәне... Әммә ошоларҙың бары ын бергә туплаған изге, гүзәл ер — ул барыбер башҡорт ере, уның Бөрйән, Түңгәүер, Юрматы ырыуҙары туплаған ошо төбәк...”

Ата ы Әхмәтша хәҙрәт тура ында Зәки Вәлиди “Хәтирәләр” китабында байтаҡ ҡына өйләй. Ул өйләүенсә, ата ының мәҙрәсә е — нигеҙҙә иҫке тәртиптәге ҡәҙимге мәҙрәсә, унда дин төп урынды биләй. Асылда Әхмәтша бөтә ғүмерен исламға бағышлаған дин ә еле генә булып ҡалмай. Белеме менән динле, шөғөлө менән дин ә еле икән, бар булмышы, тормош ҡорошо менән ул — донъя кеше е, төплө крәҫтиән. Әхмәтзәки өсөн ата ы дин әм донъя белемдәрен, ғәрәп телен үҙләштереүҙә, тормош тәртип-низамдарын, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәрен тота белеүҙә ғәйәт ҙур роль уйнай. Ата ы менән бергә улы Әхмәтзәки бала сағынан уҡ ил ара ы-

на сәйәхәттә йөрөргә, ололар ара ында буталырға ярата. “Атайым менән әр сәйәхәт фекер хаятыма йоғонто я аны”. – тип яҙыр ул “Хәтирәләр”ендә.

Кешене тәбиғәт тә тәрбиәләй, сынықтыра. Тәбиғәттең күрке кеше күңелдәренә күсә. Таулы-яланлы Көҙән ауылы, Егән буйҙары, Хан йәйләүе тыуған төйәгенә, Башҡортостанына мәңгелек өйөү, оло ғорурлыҡ әм фиҙакәрлек тойғоларын еңдерә.

Әсә е Өммөлхаят та – мулла ғаилә ендә тыуып-үҫкән, мәҙрәсә абаҡтары алған динле, мәғлүмәтле зат. Ҡыҙҙар уҡытыр оҫтабикә булғаны өсөн генә түгел, тәрән белеме, ғилемлеге өсөн уны ауылда ололап мөғәллимә тип йөрөтәләр. Өммөлхаят үҙенең ата ынан фарсы телен, ғәрәп, фарсы әҙәбиәтен тәрәнтен өйрәнә.

Бына ошондай дин, тел ғилеменә эйә абруйлы мулла ғаилә ендә Әхмәтзәки Әхмәтша улы Вәлидов 1890 йылдың 10 декабрендә Өфө губерна ы Стәрлетамаҡ өйәҙенә ҡараған Көҙән ауылында донъяға килә.

Мәҙрәсә абаҡтарын башта Әхмәтзәки үҙ ата ынан ала. Уға мәғлүмәтле әсә е әр йә әттән ярҙамлаша. Был уҡымышлы ғаиләнең рухи донъя ы тәбиғәт матурлығына, уның серле үҙгәрешенә, яҡшылыҡҡа, изгелеккә дан йырлауҙан, балаларын да шул рухта тәрбиәләүҙән торған. Донъяның күркәмлеген күрә белергә, уны үҙ көсөң менән тағы ла матурыраҡ итергә тырышыу мөмкинлеген аҫкан, халыҡ рухлы шәхес тәрбиәләгән.

“...– Ҡәҙерле атам, әсәм, – тип теҙләнде алдарына Әхмәтзәки, – икегеҙҙең дә күңелегеҙ үҙ иткән... Нәфисәне үҙемә ғүмерлеккә йәмәғәтем итеүгә еҙҙән фатиха орайым!

уңғы йылдарҙа даны әллә ҡайҙарға ишетелгән улдарының шулай кеселекле теҙләнеп ултырыуынан ирей алдылармы, ҡарттар риза булды...

– Ата-баба йола ын хөрмәтләп, йәрәшелгән, ҡолаҡтарығыҙ тешләтелгән ҡыҙҙы айлауың өсөн үҙеңә рәхмәт!..

...Был кис улар байтаҡ шулай күҙмә-күҙ өйләшеп ултырҙы. Ҡырыҫыраҡ холоҡло, ғәрсел ҡайны ы менән тәүге ҡат асыҡтан-асыҡ, етди өйләшеү булманымы икән ул?.. Шатландырҙы ла, моңландырҙы ла был өйләшеү: “Ҡартлас үҙ итә, Нәфисә менән минең яҙмышҡа ла төптән ҡарай”. Ошоно аңлау барыбер рәхәт ине уға...

... – инең атаң – хазина андығы! – Әхмәтзәки юрған аҫтына сумды ла ырылып килгән ҡатынын ҡосағына алды...”

Ил яҙмышын хәл итеүсе шәхестәр төрлө-төрлө. Хажимөхәммәт мулла сәйәси томандар эсендә кемдең-кем икәнлеген төҫмөрләргә тырыша. Был да – ғәҙәти әм ығы-зығылы тормоштоң бер талабы.

“...Инҡилабы кәрәк тә булғандыр уның, бигерәк серегәйне бит ҡәҙимге донъя... Тик урыҫтың был ҡуҙғалышы хәллеләргә генә түгел, аҡыллыларға, белемлеләргә лә ҡаршы бара түгелме уң, кейәү? Зыялыларын, ғалимдарын, хатта әфисәрҙәрен ҡырып бөт әләр, баш ыҙ көйө кем менән төҙөрҙәр ул “яңы донъяны”? Мал табылыр, ә аҡылды ҡайҙан алыр ың? Кешене белемгә өйрәтеү бит – үҙе бер ғүмер?.. Таң ҡалырлыҡ көскә, ажда аға ҡаршы тора ығыҙ бит! Күпмегә барыр был тартыш...”

Нәфисәнең ата-әсә енең тышҡы әм эске күркәмлеге, тыйнаҡлығы, Хажимөхәммәттең киң мәғлүмәтле, инсафлы, яҡты күңелле кеше булыуы ла геройҙың бөтөнлөгөнә илтә.

Әҫәрҙә төп геройҙың шәхси тормошо фронт шарттарында кәүҙәләндерелә. Автор геройҙың бай кисерештәр донъя ын уның мөхәббәте, уңынан хәләл ефете, Әбйәлил ҡыҙы Нәфисә образы аша уңышлы тасуирлай. Нәфисәнең тышҡы әм

эске күркәмлеге, ата ы Хажимөхәммәттең киң мәғлүмәтле, инсафлы, яҡты күңелле кеше булыуы ла уҡыусыға көслө тәьҫир итә.

“...Күҙ алдында – ҡабарынҡы арғылт сәсле, моң оуыраҡ күҙле, аҡ йөҙлө, ирендәренән тыйнаҡ йылмайыу китмәгән Нәфисә е. Әхмәтзәки, әмәлен табып, унығ хәлен әр саҡ белешеп торҙо, үҙ кешеләре аша хат та алышты... Аҡ күлдәктән ине Нәфисә, бигерәк тә килешә икән уға аҡ кейем. Былай ҙа ылыу, өттәй аҡ тәненә ылашып, нәзәкәтле сафлыҡ, еңеллек өҫтәп торғандай...

...Ҡыҙ ошо мәлдә Әхмәтзәкигә шул тиклем яҡын, шул тиклем ғәзиз күренде – тулҡынланыуҙан үҙенең дә күҙҙәре йәшкәҙәп китте... Оҙаҡ йылдар күңел түрендә йөрөткән тойғолары алдамаған Әхмәтзәкиҙе, Әбйәлилдә ул Нәфисәгә тағы мөкиббән ғашиҡ булып ҡайтып киткәйне.”

Өҙлөк өҙ был ике мөхәббәтле йөрәк ара ындағы өйөү, алыҫ ҡояш йылыраҡ булған кеүек, көсәйгәндән-көсәйә. Тик Әхмәтзәкиҙең ситтә, йәмәғәт эштәренә сумып йөрөүе, аҙағыраҡ башҡорт милли хәрәкәтенә, хөкүмәт вазифаларына бирелеп китеүе арҡа ында, никахтары бик күпкә уңлай. Улар өйләнешкәндә Нәфисә ултырған ҡыҙға әйләнеп, Әхмәтзәки үҙе утыҙға етеп барған була.

Туйҙары Әхмәтзәки Вәлиди Саранскиҙан Башҡортостанға хөкүмәт әм ғәскәр менән әйләнеп ҡайтҡан 1919 йылдың сентябрь башында була. Никах туйы ҡыҙҙың тыуған йортонда, Әбйәлилдә, үтә.

Роберт Байымов айырым бер иҙгерлек менән оло кешенең нескә тойғоларын үрәтләй, туй йолаларын шартына килтереп тасуирлай.

“– Йоланы йола итә белә әбйәлилдәр. Әхмәтзәки ҙә уға буй ондо. Ижап-никах уҡыған мулланың эше бөттө. Йәш кейәү күңелсәк еңгәләр хөкөмөндә ҡалды. Никахтан уң кәләш тә ҡайҙалыр йәшерелгән булып сыҡты... Шыплап тултырылған муҡса ы, кеҫәләре бушап ҡалғас ҡына, ишек янында торған ике йәш, сибәр еңгәй Әхмәтзәкиҙе индәренән матҡып тотоп алдылар ҙа, ишекте ҡапыл шар асып, көлә-көлә уны эскә табан этәреп ебәрҙеләр...”

Ләкин иркенләп ятырға мөмкинлек булмай. уғыш заманы. Төн урта ында биш ыбайлы килеп, Әхмәтзәки ҡулына телеграмма тоттора. Туй ваҡыты, төн тип тормай, йә әт кенә кейенеп, ул йәнә Магнитогорскиға саба.

Автомобиле менән Бәләбәйгә барып, бер нисә полкты Петроградҡа оҙатып, Стәрлетамаҡҡа кире әйләнеп ҡайтҡас ҡына Әхмәтзәкигә туйҙы үҙҙәре яғынан тамамлап ҡуйырға форсат тейә. Туйға ата-әсә ен, олата ы Хәбибназарҙы, бөтә туған-тыумасаларын, дуҫ-иштәрен, хеҙмәттәштәрен саҡыра. Бөтә ыҙа-яфаларын, үҙ хөкүмәттәре тип көн-төн сабып йөрөүҙәрен бер көнгә генә бул а ла онотторып, күңел юшҡындарын йыуҙырып төшөрөр күпме көтөлгән никах туйы була был.

Был оло туйҙан уң Әхмәтзәки йәш кәләше менән башҡорт ғәскәре артынан Петроградҡа йүнәлә. Ғәскәр башлығы фронт шарттарында ла Нәфисәне үҙе менән йөрөтә, ваҡыт тапҡан араларҙа элекке пайтәхеттең зиннәтле арайҙарын күр әтә, алдат аштары менән ыйлай. Хөкүмәт эштәре, яу ҡыры менән аралашҡан туй сәфәре була улар өсөн.

Фронт ыҙығынан йөрөп ҡайтҡас, ғаилә е менән Стәрлетамаҡта, Нуғаевтарҙың дәүләт ҡарамағына алынған иркен йорттарына, урынлаша. Шулай үҙҙәренсә донъя көтөп алып китәләр. Көндөҙ Әхмәтзәкиҙең бар ваҡыты хөкүмәт эштәре менән мәж килеп үт ә, кисен уларҙың фатиры йыш ҡына хеҙмәттәштәр, ҡунаҡ кешеләр өйләшеп ултырыр мәжлес кисәләренә лә әйләнгеләй. Уларҙың йорто шулай ҡунаҡханаға, Мәскәүҙәге сит ил вәкилдәре, күренекле шәхестәр менән осрашыу урынына ла әүерелә. “...Нәфисә гүзәл өҫтәл әҙерләп ҡуйғайны. Унды ҡатындан Әхмәтзәки, аш- ыуға оҫта, йыйнаҡ, ҡулы тәмле. Холҡо ла ипле, түҙем, юҡҡабарға сәпсеп бармай. Ҡатыраҡ әйт әң, моң оу итеп күҙеңә ҡарай ҙа ҡуя...” Лирик

сигенеүҙәр әҫәрҙә геройҙың эске донъя ын, психология ын асыуҙа ҙур роль уйнай. Зәки Вәлидиҙең бигерәк тә Нәфисәгә булған мөнәсәбәте трагизм менән уғарылған. Эйе, төрлө мәғлүмәттәр аша белеүебеҙсә, Нәфисә үҙенең Зәки менән ҡауышыуына бер ҡасан да үкенмәй, тик уларға оҙаҡ бергә булырға ғына яҙмай. Ҡатыны күпме генә үтенеп ора а ла, Әхмәтзәки уны Төркиәгә алып китә алмай. Ошонан башлап Нәфисәнең тормошо ҡара йомғаҡҡа әйләнә. Улын юғалтҡан, иренән айырылған, туғандары менән күрешә алмаған, тыуған яҡтарын өҙөлөп ағынған меҫкен ҡатындың а -зарын, ыҙланыуҙарын Хоҙай үҙе генә белә. Нәфисә Өфөгә ҡайтҡан сағында Яҡшымбәтов Ғәбделбарый туғанына: “Ирем сит илгә сығып китте. Ул дәүләтебеҙҙән мине лә үҙе йәшәгән ергә ебәреүҙәрен юллай. Мин дә юллап йөрөйөм,” – тип өйләп китә.

Роман аҙағында автор ниндәйҙер өмөт сатҡы ы ҡалдырғандай: “Әхмәтзәки Царицынға ашыҡты. Унда Волга буйлап пароходта килгән ҡа арман йөрәкле өйөклө ҡатынын, Нәфисә ен, ҡаршылар. Шул уҡ пароходта улар икәүләп Әстерәханға төшөрҙәр,”– ти.

Роберт Байымов романында төрлө сыбар шоңҡарҙар даирә ендә Зәки Вәлиди, шәхес булараҡ, юғары сөйөлә. Бай фактлы материалдар ҡулланыу, геройҙың күңел халәте менән оҫта идара итеү, тарихи дөрөҫлөккә интеллектуаль зи ен менән яҡын килеү – герой концепция ын үҫтереүҙә новаторлыҡ алымдары ул. Ошо арҡала XX быуат башҡорт хәрәкәте етәксе е Зәки Вәлидиҙең шәхси әм ижтимағи ынтылыштары бер-бере енән айырылмай, бер бөтөндө тәшкил итә.

“Ер... уға аҫаба хоҡуҡ... Ер еҙ мөхтәриәт юҡ, еренән айырылған кеше, милләт – бәпембә, тарала, оса. Сал тарихта, ана, ниндәй генә ҡөҙрәтле халыҡтар булмаған – скифтар, ундар, ҡыпсаҡтар... Улар ҙа илдәренән, киң далаларынан айырылыу менән юҡҡа сыҡҡандар. Борондан килгән ошо мөҡәддәс хоҡуҡ бәрәбәренә башҡорт ниндәй генә ҡорбандар бирмәгән!.. Көслөк менән баҫып алынған ерҙәрҙе кире ҡайтарыу, урыҫ күскенселәрен кире үҙ тарафтарына күсереп ултыртыу хаҡында Дума исеменә план-проекттар яҙыу!

Тимәк ошо маҡсатта халыҡ тағы күтәрелә. Зәки Вәлиди күҙ алдынан тыуған ауылы Көҙән, ҡарағайлы Алатау ырттары, уның итәгендәге Маҡар, арыраҡ – Бөрйән яҡтары, үҙенә яҡын дуҫтары, ҡан-ҡәрҙәштәре йүгереп үткәндәй тойолдо... Гүзәл төйәк. Тик ике яҡ та шулай атҡа атлана башла а, ни килеп сығар?”

Әҫәр халыҡсан үҙҙәр менән башланып китә. Әҙәби телдә онотолоп барған үҙҙәрҙең романға килеп инеүе бер яңылыҡ ҡына түгел, ә халыҡ йолаларының да тергеҙелеүе – хәҙерге йәштәр өсөн фә емле күренеш.

“Атаҡ, атаҡ! Оло ҡунаҡтар ҙа а!” Был юлдар аша атлы ҡунаҡты башҡорт халҡы оло ҡунаҡ тип атағанлығын беләбеҙ. Шул уҡ ваҡытта Хажимөхәммәт мулланы тасуирлағанда, уның йөҙө күптәнге таныштар менән осрашыуҙан: “Еҙ батмустай балҡый”, – ти автор. “Сей ҡоротто яңы сабылған йәшел бесән күбә е эсенә ҡуйып ҡалдыра”. Ҡыш көндәре алып ҡайт аң... өй эсе, ысынлап та, сәскә, болон еҫенә күмелә.

“Ергә ал а, ҡолағына ҡорт-маҙар кереп ҡуйыр”... Бала үҫтергәндә күп башҡорттар сабыйҙы ергә алып йоҡлата торған булғандар. Бер яҡтан, егет кеше ерҙән көс ала, тип тә фараз иткәндәр. Ләкин был ҡай ы ваҡытта кире йоғонто ла я аған. Ер ыуығы тейеп, сирләшкә лә булып ҡалған йә булма а ҡолаҡтарына ҡорт, бөжәк инеп, аңғыраулаңыу осраҡтары ла булған.

“...Балаларыбыҙҙың ҡолаҡтарын тешләтергә килештек...” Был күркәм йола бик яҡшы булған, сөнки йола күрмәгән-белмәгән ҡыҙ йәки егеттең берләшеүен тыйған; ата-әсә енең дә кем булыуын, алдағы тормоштары өсөн бының да бик ә әмиәтле икәнен иҫтән сығармағандар.

# 3. Тарихи тамырҙар эҙенән

Романдың тәүге биттәренән үк Әхмәтзәкиҙең үтә бер ҡыҙыҡ ыныу менән тарихи китап уҡып ултырыуын күрәбеҙ. Ул китабына шул хәтлем бирелгән – аҙаҡ үҙен ошо тарихи ваҡиғалар ара ында тойоп, уҡығандарынан арына алмайынса, яр ыған йөрәген баҫырға тырышып, йөрәк еп йөрөй.

"Хакимлыҡ билге е итеп оҙон ҡолғаға ат ҡойроғо аҫылған... Бошман бей. Ораны – туҡ аба. Бүрегә табыныусылар".

Был юлдар быуаттар төпкөлөнә алып керә. 1237 йылғы татар-монгол яуҙарының башҡорт ерҙәрен баҫып алыу сәйәсәтен тоябыҙ, Әхмәтзәкиҙең быны бик бирелеп алдағы ҡанлы көрәшкә аңлы рәүештә үҙен әҙерләүен иҙенәбеҙ.

Ҡыпсаҡ далаларын ҡанға батырған монголдарҙың аяу ыҙлығын тулы итеп, әр персонажды ысын исеме менән биреү – тарихты байҡау ғына түгел, был ваҡиғаларға яҙыусы әм бөгөнгө көн күҙлегенән ба а биреү, үҙ фекерҙәрен ҡыйыу аңлатыу ҙа ул.

"Бөркөт ҡоҙғонға әйләнмәҫ,ҡоҙғон алдында дөйә теҙ сүкмәҫ!" – Бошман бейҙең Мәнгү хан йөҙөнә бәреп әйткән үҙендә ниндәй хаҡлыҡ әм батырлыҡ өлгө ө! Зәки Вәлиди, әйтер ең, тыумыштан тарихсы булған. Юрматы, Бөрйән, Гәрәй-Ҡыпсаҡ шәжәрәләре тәьҫирендә ул йәшләй үк тарихҡа, шәжәрәләргә, фольклорға ҙур ә әмиәт бирә. Унын тарих өйөүендә ата-әсә енең дә йоғонто о көслө. Ғаилә енең бер яҡтан – кавказдар, икенсе яҡтан Урта Азия менән яҡын мәҙәни бәйләнештәре була. Зәки Вәлидиҙә иң беренсе сиратта, әлбиттә, ауылындағы, тирә-яҡ мөхитендәге төрки ғөрөф-ғәҙәттәре, башҡа төрлө әйткәндә, төрки мәҙәниәте тәрән эҙ ҡалдырған. Төркиҙәрҙең йөҙҙәрсә, бәлки, меңдәрсә йылдар буйы дауам иткән тарихи-сәйәси тормошон белеү әм өйрәнеү Зәки Вәлидиҙең иҡтисади ҡараштарының формалашыуына ла булышлыҡ иткәндер.

Бөтә кешеләр өсөн дә бер хәҡиҡәт бар: кеше өсөн тәүҙә үҙ ғаилә ен, үҙе тыуып үҫкән ерҙәрҙе, ә унан килә милләтен өйөүҙән дә тәбиғийерәк бер ни ҙә юҡ. Зәки Вәлидигә лә хас сифат был. Ул, башҡорттарҙы алға ҡуйып, бөтә төрки донъя ын өйрәнә. Әммә был башҡаларға ла хөрмәт менән ҡарарға ис ҡамасауламай. Шул уҡ ваҡытта башҡаларҙан да үҙ милләтенә әм милли хисенә хөрмәт талап итә.

Ғалим, иҫ белә башлаған сағынан алып, мал аҫырап көн күргән, уҡый-яҙа белмәгән ауыл кешеләре, ырыуҙаш туғандары ара ында йәшәй. Әммә был кешеләр боронғо риүәйәттәрҙе, айырыуса бөгөн бик аҙ кеше иҫләгән Иҙеүкәй, Йәнебәк хан, Ерәнсә әм башҡа иҫке "Нуғай" дастандарын яҡшы аҡлаған, өҫтәүенә, улар ара ында әр саҡ фарсы-ғәрәп телдәрен белгән шәхестәр булған. Әхмәтзәки үҙе лә ғәрәпсәне – ата ынан, фарсы телен әсә енән өйрәнгән.

Ата ы Әхмәтша хажи, үҙ мөхитенә күрә, донъя хәлдәренән хәбәрҙар, "Тәржеман" гәзитенең даими уҡыусы ы, Исмаил Гаспралының ихлас тарафтары, "Хиджаз сәйәхәтнамә е" әм " атлыҡ улының тормошо" исемле ике әҫәрҙең авторы. Оло ағаы Вәли мулла шәжәрә әм дастандарҙы яҡшы белгән бер зат булараҡ мәш үр. Әсә енең аға ы Хәбибназар атлыҡ улы Ҡазан тарихсы ы Ши абетдин Мәржәниҙең иң әләтле шәкерттәренең бере е булып, тарих әм ғәрәп теле буйынса әҫәрҙәр нәшер итә. Бына ниндәй тамырҙар алып килә Әхмәтзәки Вәлидовты тарихҡа.

Ул тарихсы ғына түгел, киң даирәле ғилми эшмәкәр әм уҡытыусы ла.

... Йәшәү сығымдарын ҡаплау Ҡазандың "Касимия" мәҙрәсә ендә ғәрәп теле менән төрки тарихын уҡытыу иҫәбенә барҙы... Зәки Вәлиди үҙен ошо юлға, ғилми тикшеренеүҙәр эшенә йүнәлткәндәрҙе тәрән рәхмәт тойғо о менән иҫкә төшөрә. "Миндә халыҡ дастандарына, милли уйындарға, ат сабыштарына өйөү

уятҡандар оло ағайым Вәли мулла менән Ҡасҡынбайҙар булды", — тип яҙа ул "Хәтирәләр"ендә (34-се бит). Фанатизмды, донъя эштәренән баш тартып, күңелде суфыйҙарса Алла өйөүенә генә бағышлауҙы яратып бөтмәгән Зәки Вәлиди ғилем, китап әм йәштәрҙе дәртләндерергә ә әмиәт биргән шәйехтәрҙе ағына. Мәҫәлән, Зәйнулла ишан, "бәлки, берәй нәмә алыр ың" тип, уға аҡса бирә. Ишандың маҡсаты – Зәкиҙе ынап ҡарау булғандыр. Зәки Вәлиди атып алған китаптарҙы күргәс, ишан уға йылы үҙҙәр әйтә, маҡтай. Зәки Вәлиди: "Мөхитебеҙҙә шул тиклем хөрмәтле заттың хуплау үҙҙәре минең өсөн дәрт биреүсе көскә эйә. Былдай дәртләндереү үҙҙәре булма а, бәлки, минең тормошом башҡа йүнәлештә киткән булыр ине", – тип яҙа ("Хәтирәләр", 37-се бит). Унын тарих фәнен айлауының сәбәбен "Хәтирәләр"ҙең төрлө урындарында уҡып та иҙемләп була.

Үҙенең тарих эшмәкәрлеген Зәки Вәлиди беренсе сиратта ныҡлы этнографик белемгә таянып башлай. Тарихта иҫкә алынмаған көндәлек тормоштоң айырым күренештәрен үҙе йәшәгән ысынбарлыҡ ваҡиғалары менән сағыштыра. Был ижтимағи мөхит Зәки Вәлидигә тарихтың, китаптарҙың әм документтарҙың ҡоро рәсми үҙҙәренән юғарыраҡ күтәрелеп, ул саҡтағы тар сәйәси сиктәрҙән сығып, үткән замандарҙың тере кешеләренең образдарын ярай ы сағыу төҫмөрләргә мөмкинлек бирә. Ошондай күп яҡлы әм ныҡлы ерлекле тикшеренеүҙәр өҙөмтә ендә Зәки Вәлиди тарих фәнен үҫтереүҙә бер нисә йүнәлештә уңыш ҡаҙана.

Ҡазанда үҙ аллы уҡыған әм уҡытҡан йылдарында ул төрки тарихын тикшереүгә ныҡлап тотона. Көнсығыштың бөйөк фекер эйәләренең әҫәрҙәрен уҡый, телдәрҙе өйрәнә. Ошо башҡарған эштәрҙең өҙөмтә е булараҡ "Төрк тарихы" исемле китабының бер өлөшө баҫылып сыға. "Зәки Вәлиди бөтә төрки тарихын тотош килеш кәүҙәләндереү йә әтенән ирәк осрай торған ғалимдарҙың бере е булды", – тип яҙа Тунжер Байҡара. Хеҙмәте, ныҡышмалы эҙләнеүҙәре менән Ә.Вәлиди Рәсәй Фәндәр академия ының Бартольд, Радлов, Самойлович кеүек арҙаҡлы академиктары ышанысына инә.

1916 йылдың башынан Әхмәтзәкигә ҡайнап торған сәйәси тормош эсенә сумып, 1923 йылға тиклем уттар, ыуҙар кисеп, ал ыҙ-ял ыҙ милли азатлыҡ хәрәкәттәренең алғы сафында барырға насип була. Романда был ваҡиғалар ҙа тере картиналар әм образдарҙа сағыу үрәтләнә.

Башҡортостан хөкүмәтенең нисек төҙәлөүен быға тиклем, Зәки Вәлидигә бәйләп, аңлы рәүештә тик ҡара яҡтан ғына күр әтеү өҙөмтә ендә, халыҡ күп нәмәне белмәне, белергә тырышыусыларҙы ла замана хакимиәте ныҡ эҙәрлекләне. Ә был эҙәрлекләүҙәр, үҙ йә әтенән, уҡыусыға тик кире йоғонто я ай килде.

## 4. Талпыныу

Башҡортостан милли хәрәкәтенең уяныу сәбәптәре әм унын мираҫы, Зәки Вәлиди эшмәкәрлеге "Сыбар шоңҡар" романында эҙмә-эҙлекле үрәтләнә. Башҡорт милли хәрәкәтенең асылын, 1917 йылғы февраль ваҡиғалары менән бер ҡатар, Зәки Вәлидиҙең Думалағы мосолмандар ултырышынан уң уйланыуҙары ла асыҡ күр әтә. Быларға өҫтәп, үҙ алдына ныҡышмалы әм талапсан эшләүе, йәш кенә көйө донъя тарихсылары ара ында танылыу табыуы оҡландыра. Шундай эпизодтарҙың бере е – Зәки Вәлидиҙең Максим Горький менән осрашыуы.

Заманында Горький тәҡдиме менән "Русия мосолмандары тарихы" ҡулъяҙмаы барлыҡҡа килә. Был бурысты М.Горький Зәки Вәлидигә тапшыра.

"...Әкрен өйлә ә лә, Горький фекерен еткереп өйләй, – тиелә был хаҡта романда. – Ошо осрашыуҙан уң Әхмәтзәки үҙенә генә хас егәрлелек менән эшкә тотондо. Ҡыш буйы китапханаларҙан сыҡманы, мосолман халыҡтары тура ында

Русияла, Төркөстанда, сит илдәрҙә донъя күргән бихисап китаптарҙы, ҡулъяҙмаларҙы өйрәнде, Петербург архивтарын йәнә бер ҡат аҡтарып сыҡты. Нисек итә итте, әммә 1916 йылдың көҙөнә "Русия мосолмандары тарихы" тип аталған ҡалын ғына урыҫса ҡулъяҙманы ул Горький ҡулына илтеп тапшыра алды."

Зәки Вәлидиҙең ниндәй генә эшен уҡыусыға еткергәндә лә Р.Байымов теге йәки был шәхес яҙмышына кинәйәле байҡау я ай, әр кемде ҡыҙыҡтыра алырлыҡ сюжет ыҙыҡтары аша композицион бер бөтөнлөккә өлгәшә. Зәки Вәлидиҙең тарихты бик яҡшы белгәнлеген, халыҡ яҙмышы өсөн янғанлығын берәмтекләп аңлата.

"...Тарих абаҡтары, ҡанға батырылған ихтилалдарыбыҙ шуны өйрәтә..."

"...Тарта уны был аҡыл донъя ы – быуаттар серен аҡлаған китапханалар, ғилем олпатлығы еңгән фән йорттары тарта, уш китерлек тәрән тарих төпкөлдәре әйҙәй. Зәки Вәлиди әле лә әр форсатты файҙаланырға тырыша, хәүефкә ҡарамай, ана, Ырымбур төрмә ендә лә байтаҡ нәмә яҙырға өлгөрҙө. Тик уңғы ваҡыттарҙа унын төштәренә, нишләптер, тояҡтары менән дала иңрәтеп сапҡан күп меңләгән аттар кешнәүе, туҙан эсендә серле ҡара шәүлә булып шоңҡарҙай осоп үтеүсе ҡырыҫ йөҙлө, ҡарсыға күҙле яугирҙар күберәк инә түгелме? Тулҡын-тулҡын булып саба улар: скифтар, ундар, ҡыпсаҡтар... Төркөстанға, Кавказға, Ҡырымға, Балканға, Европаға ағылыусы ҡәүемдәр... Йөҙҙәр, йылдар, кейемдәр. Тапалған баҫыуҙар, емерек арбалар, янған ауылдар, мыҫҡылланған намыҫтар...

... Бөйөк Туран ханы Күл-Тәғин үҙенән уң кешелеккә ҡиммәтле таш баҫмалар ҡалдырған. Сыңғыҙхан вариҫтары донъяла тәүге ҡат төрки телендә сағатай әҙәбиәтен тыуҙырған...

... Ни сәбәпле йырлы Салауаттар, ила и хәҙрәт Батыршалар кеше үлтереүҙе өнәр иткән баҫҡынсы йәллә дтәрҙән еңелеп ҡалған?!..."

Ошо уйланыуҙар уға тынғылыҡ бирмәй. Халыҡтың тарихын яҡшы белеү, киләсәге өсөн яныу уны азатлыҡ өсөн көрәш даръя ына алып килә.

Февраль революция ы башланыу менән, Әхмәтзәки Вәлиди көрәш майҙанына атлыға. Был унын өсөн көтөлмәгән хәл түгел, әлбиттә. Азатлыҡ, халыҡтың дәүләтселек өсөн көрәш осҡоно унын бала сағынан уҡ башҡорт яуҙары, уның батырҙары, ил азаматтары хаҡындағы тарихтар, легендалар, йырҙар аша зи ененә әм күңеленә алынған.

Унын Төркөстанға ике тапҡыр сәйәхәте лә фәҡәт ғилем көҫәү менән генә сикләнмәгәйне. Зәки Вәлиди унда урындағы милли эшмәкәрҙәр менән бәйләнеш булдыра, урыҫса әм төркисә "Төркөстан тауышы" исемле гәзит сығарыу хаҡында өйләшә. Ниәттәре – ошо тирәгә революцион рухлы мосолман уҡымышлыларын берләштереү. Шулай итеп, Әхмәтзәки, үҙе лә абайламаҫтан, сәйәси эштәргә тартыла.

1917 йылдың февралендә Рәсәйҙә башланған инҡилап Әхмәтзәки Вәлидиҙе шаулы көрәш тулҡындары эсенә, сәйәси алыш майҙандарына өйөрөлтөп алып инә. Урамдарға ҡорал, байраҡтар күтәреп сыҡҡан эшселәр, алдаттар ташҡынын үҙ күҙҙәре менән күрә. Үҙе лә ашҡынып шул ағымға ҡушыла. "Йә, раббым, ошоноң менән минең милләтемә лә ҡотолоу юлы ас", – тип доға кеүек үҙҙәрҙе ҡабатлай.

Ошонан уң Рәсәй мосолман, төрки халыҡтары азатлығы өсөн Февраль революция ы биргән мөмкинлектәрҙән файҙаланып, Әхмәтзәки Вәлиди көн-төн тынғы ыҙ сәйәси көрәш диңгеҙендә, трибуналарҙа ялҡынлы оратор сифатында, фекерҙәр, идеялар алышы майҙандарында ал ыҙ-ял ыҙ ҡайнай башлай.

## 5. Ҡоластар киңәйгәндә

Мәскәү. 1917 йылдың 7 майы. Мәш үр ҡаланың зиннәтле  арайында Бөтә Рәсәй мосолмандарының беренсе ҡоролтайы (конгресы) асыла. Рәсәй мосолмандары өсөн ҙур тарихи ваҡиға был. Төрлө тарафтарҙан  айланмыш биш йөҙләп делегат килгән. Башҡортостан делегаттары үҙҙәре генә лә иллегә яҡын. Әхмәтзәки Вәлиди үҙе Мәскәү ҡоролтайында 12 кешенән торған Төркөстан делегация ы составында ҡатнаша. Ҙур форумда ул “Рәсәй мосолмандарының этник сығыштары  әм уларҙың сәйәси тормошта ә әмиәте” тигән төп темаға телмәр тота. “Был телмәр, асылда, минең бөгөнгә ҡәҙәр алып барған көрәшем программа ының нигеҙен тәшкил итә ине”, – тиер ул аҙаҡтан.

Бер нисә көнгә  уҙылған оло йыйында татар делегаттары алға  өргән унитар нигеҙҙәге милли-мәҙәни мөхтәриәт идея ы кире ҡағылып, төрки халыҡтарының ерле мөхтәриәт федерализмының программа ы еңеп сыға. Был программаны тормошҡа ашырыр өсөн Рәсәй мосолмандарының Үҙәк шура ы  айлана. Уның составына Әхмәтзәки Вәлиди ҙә үтә.

Башҡорт делегаттары ошо ҡоролтайҙа ер мәсьәләләрен дә ҡуя. Ләкин йыйындағылар ҡәтғи ҡарарға килә алмағас, мәсьәлә асыҡ ҡала. Шунлыҡтан башҡорт делегаттары, үҙҙәре айырым йыйылып, Сәғит Мираҫов, Аллабирҙе Йәғәфәров, Әхмәтзәки Вәлидиҙән торған өс кешелек комитет  айлап ҡуялар. Ошо  комитет Бөтә Башҡорт ҡоролтайы уҙғарыуҙы әҙерләргә тейеш була.

Тарих тәгәрмәсе ҡыҙыу тәгәрәмәксе: делегация менән Ә.Вәлиди Ырымбурға килә. Унда Башҡорт Өлкә шура ын төҙөйҙәр. 20 июндә Ырымбурҙа Башҡорт ҡоролтайын йыйыу тура ында иғлан  әм халыҡҡа мөрәжәғәт баҫып тараталар. “Башҡорт” исемендәге гәзит ойошторалар. Уның тәүге  анының имза ыҙ баш мәҡәлә ендә Ә.Вәлиди буласаҡ Башҡорт ҡоролтайының төп программа ын, алда торған сәйәси  әм ойоштороу эштәрен аңлатып бирә.

Әммә Әхмәтзәки Вәлидиҙең төп шөғөлө әлегә – Төркөстанда. Үҙе Төркөстан делегаты  әм шура ы ағза ы булғас, тағы Ташкентҡа китә. Уның төп маҡсаты – мөхтәриәт хәрәкәтен Төркөстанда йәйеп ебәреү. Ул шуға әле, беренсе сиратта, Төркөстан Мәркәс шура ында ойоштороу эштәре менән мәшғүл. Рәсәй Ҡороусылар мәжлесенә берҙәм милли программа төҙөү эше лә уға йөкмәтелгән. Ташкентта сыға башлаған “Кәңәш” гәзитенең баш мөхәррирлеге лә уның өҫтөндә.

Зәки Вәлиди  әм уның был яҡтағы арҡадаштары ла үҙаллы Төркөстан социалистик партия ын төҙөү фекерендәләр. Уның программа ын  әм уставын яҙыу эшен Ә.Вәлидигә тапшыралар.

Асылда Әхмәтзәки Вәлиди инҡилаптан  уң Рәсәйҙә төрки халыҡтары ара ында ерле мөхтәриәт өсөн көрәштә  сәйәси  әм теоретик әҙерлекле иң алдынғы лидерҙарҙың бере енә әйләнә. Шуға уның Рәсәй Мосолман Шура ының Башҡарма комитетына, Төркөстан Мәркәз шура ына, тағы Башҡорт үҙәк шура ына ағза итеп  айланыуы  әм уларҙа мө им вазифалар башҡарыуы, программа характерындағы документтарҙы әҙерләшеүе бик тәбиғи.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең шундай ҡөҙрәте күптәргә мәғлүм: ул көслө логикаға ҡоролған яҡшы оратор булыуы менән ҡоролтайҙарҙа, ҙур йыйылыштарҙа күпселекте үҙ фекерҙәренә, программаларына инандыра алған; бәхәстәрҙә хатта үҙенә ҡапма-ҡаршы оппоненттарын да үҙ яғына ауҙарған. Был – бөйөк шәхестәргә генә тейер ҡәбилиәт, Хоҙай   биргән оло ҡөҙрәттер.

“Сыбар шоңҡар” романы авторы Зәки Вәлидиҙең Төркөстан Мәркәз шура ын төҙөүгә  алған тырышлыҡтарын да эҙмә-эҙлекле  үрәтләй.

“...Ташкентта уҙғарылған мосолмандар съезында Төркөстан Мәркәз шура ы ағза ы, ә  уңыраҡ уның яуаплы сәркәтибе  әм ойоштороу бүлеге мөдире булып  айланыуы арҡа ында, Зәки Вәлиди Башҡорт иленә тиҙ генә ҡайтып китә алманы. Ерле мөнәввәрҙәр етешмәгәнлектән, Мәркәз шура ы бүлексәләрен ойоштороу,

“Кәңәш” тип исемләнгән рәсми баҫма матбаға итеү кеүек эштәрҙең бары ы тиерлек унының елкә енә төштө...

...Төркөстан эштәре Зәки Вәлидиҙең бөтә булмышын алыуына ҡарамаҫтан, ул Башҡорт милли хәрәкәте менән бәйләнеште өҙмәне...”

... Тыуған яҡтарында көсәйә барған милли хәрәкәткә, был хәрәкәттең Башҡортостан мөхтәриәтен алға өрәсәгенә ҙур өмөт менән ҡарай Зәки Вәлиди. Ә унының артында тағы ла ҙурыраҡ маҡсат: Төркөстан әм төркиҙәр мөхтәриәте.

Бына Ырымбурҙа 1917 йылдың 20 июлендә асылған Беренсе башҡорт ҡоролтайының түрендә лә нәҡ уға урын бирелгән. Ерле милли мөхтәриәт әм башҡорт ерҙәре мәсьәлә е хаҡындағы докладты ла ул я ай. Ҡоролтай бик берҙәм әм юғары кимәлдә үтә. Мөхтәриәт, ер, башҡорт ғәскәрен төҙөү, мәҙәниәт, мәғрифәт хаҡында мө им ҡарарҙар ҡабул ителә.

Ер мәсьәлә е Беренсе башҡорт съезында уҡ бик ғәҙел әм ҡаты күтәрелә.

“...Башҡорт халҡының сәйәси үҙаллылыҡҡа ынтылыуы төрлө төҫтәге оят ыҙ сәйәси-иҡтисади авантюраларға уйынсыҡ булып хеҙмәт итеү түгел, — тип билдәләй съезд, — кире енсә, борон-борондан үҙенең ата-бабаларын туйҙырып әм эсереп килгән ер- ыуҙарына үҙе хужа булыу, мәҙәни әм сәйәси яҡтан ирекле рәүештә үҫеү, ситтән ҡыҫылмау шарттарында үҙенең рухи ҡиммәттәрен үҙе аҡлау, үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алыу әм Башҡортостандың йәшәүенә ҡурҡынислы булған элементтарҙың көсеп килеп ултырыуҙарын туҡтатыуҙан ғибәрәт...” Р.Байымов үҙ әҫәрендә мөхтәриәт мәсьәлә енең ысын асылын нәҡ ошо юлдарҙа билдәләп үтә.

Инҡилаптан уң Әхмәтзәки Вәлиди хәҙер Рәсәй мосолмандары ара ында барған тарихи, сәйәси ваҡиғаларҙың тап урта ында ҡайнай. Үҙенә йөкмәтелгән вазифаларын үтәп, ул ике ай эсендә Төркөстанда, Ырымбурҙа, үҙ башҡорттары ара ында эш йәйелдереп ебәрә. Унының артынса юлы Петроградҡа, Мәскәүгә йүнәлә, бөйөк ил кимәлендәге кәңәшмәләрҙә, осрашыуҙарҙа ҡатнаша.

...Башҡорттар үҙҙәренең икенсе съезына ҙур ҡаршылыҡтар йырып килде. Ырымбурҙа үткән беренсе съезд ҡарарҙарына — тартып алынған ерҙәрҙе, мөлкәтте кире ҡайтарыу кеүек законлы талапҡа — яуап итеп күп кенә урыҫ күскенселәре күҫәккә йәбеште. Улай ғына түгел, улыҫтарҙа килмешәк ҡатламдар буш ятҡан ерҙәрҙе баҫып ала башланы...

Романда ошо драматик ваҡиғалар ҙа объектив үрәтләнә. Зәки Вәлидиҙең уйҙары аша автор халыҡтың тарихын тасуирлай.

“...Икенсе башҡорт съезы ғәжәп ҡыйыу аҙым я ай: Мәркәз шура айлап, уға Башҡортостан автономия ын ойоштороу бурысын йөкмәтә. Алда тағы яңы форумдар, яңы алыштар: Ырымбурҙа ҡаҙаҡтарҙың икенсе ҡоролтайы, сентябрҙә Төркөстан мосолмандарының икенсе конгресы...”

Шуны ла билдәләп үтәйек: “Сыбар шоңҡар” романында Зәки Вәлиди образы тик социаль ыҙаттар — инҡилапсы, милли хәрәкәт етәксе е рәүешендә генә түгел, ә унының көндәлек тормошо аша ла ярай ы тулы асыла. Был йә әттән автор Зәки Вәлидиҙең, вазифа ына ярашлы, төрлө мөхиттә булырға тейешлеген дә оҫта файҙалана. Был унының ябай халыҡ менән осрашыуҙарында ла күренә. Башҡорт шура ы эштәре менән шөғөлләнгәндән уң, тыуған ауылына ҡайтып, ата-әсә ен, туғандарын күреп әйләнергә була Әхмәтзәки. Ул юлда ла халҡы тура ындағы уйҙарынан айырыла алмай. Бер ыңғайҙан бүтән эрерәк башҡорт ауылдарына ла уғыла. Ҡоролтай ҡарарҙарын ғәмәлгә ашырыу буйынса ла эштәр башҡарырға төп ниәте.

Туғандары, дуҫтары менән күрешеп, ҡунаҡ ҡәҙере, ый-хөрмәт күреп, был ҙур башҡорт ауылында ни бары бер көн ята. Күрә, ишетә: башҡорт ҡоролтайҙарының тәьҫире, ҡыуаныстары әр ауылға, әр кеше күңеленә килеп еткән. Әхмәтзәкигә

рәхмәттәр уҡыйҙар, изге эшендә уңыштар теләйҙәр. Үҙ ата ының был хәрәкәтте йәннәткә индерерлек бер хеҙмәт, ила и мәрхәмәт тип ба алауы уның өсөн бигерәк тә өйөнөслө була.

Зәки Вәлидиҙе иң оло башлыҡ, халыҡтың хөрмәтле улы урынына күреп, әр ауылда халыҡ йыйылып китә. Вәлидигә изге теләктәр, наказдар яуҙыралар, ул тотҡан юл ирек юлы икәнен әйтәләр, ер, үҙ хөкүмәте өсөн көрәшкә ҡушылырға, кәрәк икән, йәндәрен фиҙа ҡылырға әҙер икәнлектәренә ант итәләр.

Роберт Байымов был күренештәрҙе үрәтләгәндә лә халҡыбыҙҙың тарихи хәтеренә таяна, рухи ҡомартҡыларға ҡайта, нәҫел шәжәрәләрен барлай.

...Табындарҙың боронғо хандары – Төмән бей. Унан тыумыш – Майҡы бей Сыңғыҙ хандан табындарға шундай тамғалар ҡалған: ағасы – ҡарағас, ҡошо – ҡарағош, ораны – Салауат, тамға ы – ҡабырға, ауыты – сәйгәр...

Былар бөтә е лә Ә.Вәлидиҙең күңелендә үҙе көтмәгәнсә иҫ киткес көрәш ялҡынын дөрләтеп ебәрә. Әле Февраль революция ы булған айҙарҙа, уның күңелендә әм эш ғәмәлдәрендә революцион осҡон ҡабын а ла, “ул ваҡытта , башҡорттарҙың үҙаллы бер сәйәсәте булыр, тип уйламай инем әле, – тиер уңыраҡ З.Вәлиди үҙе. – Башҡорттарҙың сәйәси ҡуҙғалышы ла, ғөмүмән, Төркөстан менән бер булырға тейеш, тигән фекерҙә булдым”. Башҡортостандың үҙаллы мөхтәриәте мәсьәлә е башҡорт ҡоролтайҙарында күтәрелә әм Әхмәтзәки Вәлидиҙең бөтә күңелен ялмап ала.

## 6. Инҡилап әм рухи терәк. Ш.Бабич

Бөтә Рәсәй буйынса октябрь аҙаҡтарында илдә сәйәси хәлдәр бик ҡырҡыулашҡан осорҙа Ырымбурҙа Башҡорт үҙәк шура ы ағзалары ярым рәсми, ярым йәшерен кәңәшмәгә йыйыла. Бында улар үҙ позицияларын билдәләй. Йыйылыш Әхмәтзәки Вәлидиҙең үҙе өсөн сәйәси эшмәкәрлегендә икенсе яңы осорон – Башҡортостан менән айырылғы ыҙ эшләү йылдарын асып ебәреүе менән дә ә әмиәтле.

Әхмәтзәки ни тиклем белемле, сәйәси әҙерлекле әм эшлекле булма ын, әлбиттә, бер үҙе генә әллә ни эштәр ҡыра алмаҫ ине.

Башҡорт үҙәк шура ы әм уның урындағы төбәк бүлексәләре ярҙамында бик йә әт әм әүҙем рәүештә Бөтә Башҡортостан ойоштороу ҡоролтайын үткәреүгә әҙерлек эштәре ҡыҙып китә. Ай ҙа үтмәй, 8 декабрҙә Ырымбур ҡала ында, Каруан арай бина ында, Өсөнсө Бөтә Башҡортостан ҡоролтайы тантаналы шарттарҙа асыла. Барлыҡ башҡорттарҙың ойоштороу ҡоролтайы “Башҡортостан мөхтәриәте”н раҫларға тейеш. Көн тәртибенә милли, ер, аҙыҡ-түлек, финанс, Башҡортостан идара ы, ғәскәр ойоштороу, мәғариф эштәре кеүек ундан артыҡ мө им мәсьәлә индерелә.

Ҡоролтайҙы Зәки Вәлиди түргә эленгән ярым ай үрәтле йәшел әләмгә яҙылған “Динебеҙ – ислам, милләтебеҙ – төрки” үҙҙәре менән асып ебәрә. Изге ҡөрьән уҡыла. Доға ҡылына. Көслө алҡыштар эсендә Шәйехзада Бабичтың шиғыры яңғырай:

*... Тилмерә еҙгә ҡарап Башҡортостан,*
*Әжәлдән аҡлау уны еҙгә төшкән.*
*Теләйем: өлкән мәжлес үт ен күркәм,*
*өйөнөп Башҡортостан – йәшел бостан!*

Башҡорттарҙың борон-борондан яулы ихтилалдарҙа үҙ етәксе е, халыҡ рухын сағылдырыусы йырсы сәсәне булған. абрау сәсән, Ҡарас сәсән, Салауат... Романда Ш.Бабич ысын мәғәнә ендә милли инҡилап йырсы ы рәүешендә күр әтелә.

Башҡорт автономия ын иғлан итеп, тарихи Ҡоролтайҙың рухани әм шағир үҙҙәре менән асылып китеүе лә оло мәғәнәгә эйә: үҙ ҡомары аша Р.Байымов Зәки Вәлиди, Шәйехзада Бабич әм дә Ҡоролтайҙа ҡатнашыусыларҙың рухи берҙәмлеген нигеҙләй, милли хәрәкәттең ба а ын күпкә арттырып ебәрә.

Ниндәй тантаналы әм ҡеүәтле күренмә ен, был форум ҡаршылыҡ ыҙ әм шыма ғына үткән, тип булмай. Тәүге съездарҙағы кеүек, декабрь ҡоролтайында ла төркөмдәр көрәше дауам итә. Мөхтәриәт идея ы ҙур өҫтөнлөк алыуға ҡарамаҫтан, татар унитаристары, шовинистик рухлы ҡараштар ҙа ишетелә оло трибунанан, бәхәстәр ҙә була. Башҡорттарҙың үҙ араларында ла берҙәмлек етеңкерәмәй. Ошо юҫыҡта ҡыҙыҡ ҡына бер тамаша булып ала Ҡоролтайҙа. Ҡорбанғәлиев, халыҡҡа күр әтеп, етәксе урынға күр әтелер Манатовҡа матур биҙәкле затлы тун бүләк итә. Шул уҡ ваҡытта Туҡсоран кантонынан килгән Ырымбур башҡорттары Әхмәтзәки Вәлидигә, Ҡоролтай исеменән оло хөрмәт күр әтеп, боронғо көмөш эйәрле бәйге атын килтерәләр. Быға өҫтәп, алтын ялатылған көмөш сәй ауыты, ҡаймалап исеме яҙылған ҡул янсығы тапшыралар. Сәй ауыты батмусына маҡтаумәҙхиә шиғырҙары ла яҙылған була.

Ике тараф бүләктәрендә эске бәхәс – үҙенсәлекле ярыш ярылып ята. Ил яҙмышын хәл итеүселәрҙең ысын йөҙөн асыуҙа яҙыусы башҡорттоң ололау йола ын – бүләкләү сара ын оҫта ҡуллана. Был эпизод – кемдең кем икәнлегенә аҡыллы ишара. Зәки Вәлидигә ата-бабаларҙан ҡалған йола буйынса батырҙар бүләге – эйәрле саптар бүләк итеүендә ҙур фәлсәфәүи әм сәйәси мәғәнә алынған. Халыҡ етәксе ен аяу ыҙ көрәш юлы көтә. Был хөрмәт билдәләре хаҡында Әхмәтзәки Вәлиди аҙаҡ шулай яҙыр: “Улар минең ғүмерем эсендә милләтем исеменән бирелгән иң ҡәҙерле бүләктәр булды”.

Инҡилапсы халыҡ рухының ныҡлығы, ҡа арман тарихҡа таяныуы, ата-бабалар васыятына тоғролоғо “Сыбар шоңҡар” романында бигерәк тә Башҡорт автономия ын иғлан итер, милли ғәскәрҙәр төҙөү хаҡындағы ҡарар сығарыр Ҡоролтай барышын тасуирлауҙа сағыу күренә.

Данлыҡлы Каруан арайҙа кәтәренке кәйеф хөкөм өрә, төрлө тарафтарҙан килгән илселәрҙең көр тауыштары, ҡурай моңо ишетелә. Төп герой ваҡиғалар урта ында ҡайнай. Башҡорт Мәркәз шура ағза ы Муллайән Халиҡов, ялан кантоны Тәңрекүлдән Ғәлимйән Тағановтарҙың бейеү тамаша ы, Шәйехзада Бабич өйләгән күн ҡата мәрәкә е уҡыусыны ваҡиғалар ҡосағына алып инеп китә. Үтәсәк ҡоролтай, мөхтәриәт яҙмышы өсөн борсолған Әхмәтзәки Вәлиди әр кемгә иғтибарлы. Бына әле Ш.Бабичтың бесем ҡата ы ла күңелендә ҡалды. Ул Шәйехзаданы сәхнәлә күп күрҙе.

“Зәки Вәлиди бүлмәгә инеп торманы, йылмайып ары китте: кемгә – ҡоролтай, мөхтәриәт яҙмышы, ә кемгә – “бесем ҡата”... Хәйер, тәү ҡарауға бер ҡатлы ымаҡ тойол а ла, ис тә ябай түгел ул Шәйехзада. Әхмәтзәки уның сәхнәлә мандолина уйнап, шиғыр уҡыуын күргәне бар. Бына исма ам талант! Ниндәй генә үрәткә инмәй: көлдөрә лә, илата ла, уйландыра ла. Шиғырҙарын да ул өҫтәл артында ултырып яҙмайҙыр, бына шулай сыға ла өйләйҙер кеүек тойола. Ә мандолина уның ҡулында иркәләүҙәрҙән ихтыярын юғалтҡан өйәркә еме ни, ниҙер генә ҡыланмай: әле генә ирәйеп Шәйехзаданың күкрәгенә ята, унан ҡолаҡ осона, ҡултыҡ аҫтына, арҡа ына күсә, бер андуғас булып сутылдай, йә әтәс, бесәй тауыштары сығара, йә кәзә булып мөкөрҙәй... Халыҡ сайҡала-сайҡала йығылып көлә. Кәмит инде, кәмит... Тик әсе телле бул а ла, хәйлә еҙ, утҡа ынтылған күбәләктәй, гона - тарын кешеләрҙең йөҙҙәренә бәреп әйтә, әләк итә күрмә ендәр инде үҙен, тапҡыр теле өсөн янап йөрөүселәр ҙә бар бит...”

Шәйехзада Бабич халыҡты үҙенә тиҙ ылыҡтыра, әр кем менән уртаҡ тел таба. Ул кешенең күҙенә ҡарап әйтә алыусы әсе телле, ләкин хәйлә еҙ... Былар тура телмәр рәүешендә бирел ә лә, асылда – автор фекерҙәре лә. Персонаждарҙың телмәре уларҙың бер-бере енең характерын асырға ярҙам итә. Иң киҫкен мәлдә Шәйехзада Бабичтың тапҡыр үҙҙәр менән алдаттар ара ына килеп инеүе, телмәренең Ҡоролтай етәкселәренең бере енә арналыуы быуаттар төпкөлөндәге абрау, Ерәнсә сәсәндәр рухының дауам ителеүе кеүек ҡабул ителә.

*Ышан, ашынғандай бер Аллаңа,*
*Зәки инең садыйҡ,*
*Утҡа бешер Зәки, ыуға төшөр,*
*Әммә атмаҫ намыҫ, күңелен...*

Әленән-әле хәрби темаға ҡайтып, башҡорт ғәскәрен данлауҙы, уның етәкселәренән, шул иҫәптән Ә.Вәлидовты ла, төрлө нахаҡтарҙан аҡлауҙы Бабич, шағир булараҡ, үҙенең иң изге бурысы итеп ҡараған ымаҡ.

Ғәскәр башлығы Әмир Ҡарамышты ерләгән ваҡытта ла уның ҡәбере янында Ш.Бабичтың ба алы инрәү үҙҙәре яңғырай:

*... Иле өсөн көйөнгән...*
*Ҡа арманлыҡ аңҡытҡан,*
*Ғәйрәтенән дан тотҡан,*
*Үрҙән ҡырға икереп,*
*Оса сыҡҡан дөлдөлдәй,*
*ин бер аҫыл ир инең...*

Шағир тауышы берсә ыҡтау, берсә ҡобайыр булып яңғырай... изге уғыштарҙа баш алған ҡа армандар әруахы пәйҙә була.

*Алдыбыҙҙа ир тәне,*
*Күңелебеҙҙә ил ғәме.*
*Алды тәҡдир аранан*
*Тағын да бер ир ҡаны...*

## 7. Ил яҙмышы – ир яҙмышы. Инҡилап абаҡтары

Шау-шыулы оло Ҡоролтай теләгенә ирешә. “Милли берҙәмлек программа ы, ер мәсьәлә е күпселек тауыштан ыңғай хәл ителде әм абруйлы кешеләрҙән торған хөкүмәт төҙөлдө. Мәркәз шура иғлан иткән Башҡортостан мөхтәриәтен раҫлау мәсьәлә е лә еңеп сыҡты. “Йәшә ен ирекле Башҡортостан!” – ашҡыныулы ауаздар Каруан арайҙы тетрәтте. Беренсе башҡорт дәүләте тыуыуы тура ында хәбәр Ырымбур яландары аша Башҡортостан буйлап таралды, Мәскәү матбуғатына ла барып етте. Талмаҫ йөрәкле, шиғри күңелле Шәйехзада Бабич талпына-талпына мөхтәриәткә дан йырлай:

*Башҡортостан! Булдың азат!*
*Сыҡтың йәмле, гөллө бостанға.*
*Азат булды Каруан арай,*
*Азат булды барлыҡ ерҙәрең.*

Азатлыҡ өсөн көрәштең ни тиклем ауыр буласағын, күпме ҡан көҫәлгәнен әле берәү ҙә тоҫмалламай. Милли ғәскәр төҙөү ҙә ыңғай хәл ителде. Зәки Вәлиди “Башҡорт ғәскәри идара ы” етәкселегенең бере е итеп ротмистр Әмир Ҡарамышевты тәғәйенләй. Роберт Байымов, әҫәрҙәрендә образдар үҫәгилешлеген ҡеүәтләп, Әмир Ҡарамышевтың шәхес портретын уңышлы хәл итә. Әмир –

хәрбиҙәр затынан, ҡурҡыу белмәҫ ир-уҙаман, ышаныслы, тоғро ярҙамсы.

"...Әмир Ҡарамышев менән Зәки Вәлиди бәләкәйҙән бергә үҫте. Ҡарамышевтарҙың быны ы ирҙәрсә өйкөмлө, өҙҙөрөп ҡурай уйнай, йырға әүәҫ.

...Үҙен тотошо менән батшаларға торорлоҡ, өйләшкәндә шәреҡсә олпат, түҙем, башҡаларға иғтибарлы, ирҙәрсә матур йөҙ, омғол ын..."

1918 йылдың 5 ғинуарында Зәки Вәлиди Әмир Ҡарамышев етәкселегендәге бер төркөм офицерҙарҙы Беренсе башҡорт полкын төҙөй башлау маҡсатында Баймаҡ яғына оҙата.

Зәки Вәлиди төрмәгә ябылғас, ҡотҡарыусы ы ошо бөркөт ҡанатлы Ҡарамышев була.

"... – ине тапмағас, – ти ул аҙаҡ Зәки Вәлидигә, – беҙҙең егеттәр төрмә начальнигының боғаҙынан алып: "Сара ын тап, әгәр уны ҡотҡарырға ярҙам итмә әң, ҡабат килеп үҙеңдең йәнеңде ҡыясаҡбыҙ". – тигәндәр...

...Белорет яҡтарында бер төркөм офицерҙары менән Әмир Ҡарамыш беренсе йәйәүле әм икенсе атлы полктарҙы төҙөй".

Тыуған ере, тыуған иле, ҡан ҡәрҙәштәренең яҙмышы нық борсой был ҡа арманды, күңелендә йөрәген ыҡратып торған уйҙар йөрөтә.

"...Ҡотороналар бит вәхшиҙәр уларҙың тәпәй баҫҡан Маҡар, Көҙән тупрағында... Үҙ өйөндә мәҙрәсә асып, ауыл ҡыҙҙарын йәҙитсә уҡытырға тырышып ятҡан сыуаҡтай яҡты Ғәзизә абыстайҙы ла, моғайын, тик "Ҡарамышева" булғаны өсөн генә тыуған туп а ында үлтереп киткәндәрҙер... Ғәжәп, үҙ балаларын үҙе ашаған ажда а ымаҡ та ба а был большевиктар!.."

уғыш күренештәрен үрәтләгәндә лә роман авторы бында үҙе ҡатнашҡан кеүек ентекле тасуирлай. Башҡорт хөкүмәте ғәскәрҙәре менән ҡыҙылдарҙың аяу ыҙ алышын күр әтә алыуы ла әҫәрҙең бәҫен арттыра.

"...Бына нисәмә көн инде Әмир Ҡарамыш атлылары, ажда аға өжүм иткән сая шоңҡар ымаҡ, Блюхер – Каширин партизан армия ын төрлө яҡлап йолҡҡолай... Башҡорт аттары кәүҙәгә бәләкәй бул а ла, йылдам, талым ыҙ, тау-таш ара ында йөрөр өсөн генә яратылған тиер ең... Баш өҫтөндә ҡылыстар ялтлай, ҡыл ҡороҡтар шыйлай, гөп тә гөп килеп мылтыҡ, нагандар ата..."

Был тәңгәлдә инҡилаптың милли рухын, уның барса халыҡ хәрәкәте икәнен асыуҙа романдағы уңышлы эпизодтарҙың бере е, әлбиттә, – Зәки Вәлиди, баш сардар Әмир Ҡарамыштың тау араларында төҙөлөп, яуға йүнәлгән башҡорт полктарына парад-инспекция үткәреү мәле. Быndай сара тарихта теркәлмәгән. Шуға уны Р.Байымовтың тағы бер оҫта ижади алымы тип ҡарарға кәрәктер.

Зәки Вәлиди менән башҡорт ғәскәренең баш сардары оло оҡланыу, ғорурланыу менән күҙәтә полктарҙы, парад-инспекцияны. Полктарҙа башҡорт рухы ҡайнап торғанлығын Р.Байымов халыҡтың ҡа арман үткәне, теге йәки был ырыу үҙенсәлектәре менән дә аңлата... Кейемдәренә ҡарап та теге йәки был отрядтың ҡай ы төбәктә төҙөлөүен самалап була икән дә ба а! Башҡорт ғүмер баҡый ҡәрҙәшлекте хөрмәт иткән, ырыу булып йәшәгән, яуға ла бергә тупланған, кейемдәре лә әр ырыуҙыҡы үҙенеке булған. Хатта уғыш аттарын да ҡолон саҡтарынан уҡ бергә үҫтергәндәр, шуға улар бер-бере ен иң хәтәр саҡта ла ташлап китмәгән...

"...Бына хәрби кейемлеләр менән аралаш үҙҙәре уҡҡан туҡыманан тегелгән киндер күлдәк, киндер кафтан йә тула сәкмән кейгән буйсан ирҙәр килә. Үҫәргәндәр бит былар!.. Сал боронғо халыҡ...

...Ә ә, бына былары, атта ултырыуҙары, ғәскәри ыҡсымлыҡтары, башлыҡтарына аҡ буҫтауҙан арҡыс-торҡос ҡыҙыл таҫмалар менән биҙәп тегелгән боронғо скиф торҡаларына оҡшаш, осло түбәле йәйге ҡолаҡсын-көләпәләре менән айырылып

торғандары, әлбиттә – түңгәүерҙәр!.. “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маян ылыу”, “Аҡбуҙат”, “Ете ырыу” кеүек үлем еҙ эпостар ҙа данлай түңгәүерҙәрҙе... Тамғалары – ярым ай, ҡоштары – айыҫҡан, ағастары – ерек, орандары – ҡуңғырат...

... Күптәр улар урыҫ тарихына инеп ҡалған башҡорт азаматтары.

Русияға ҡушылғаны бирле башҡорттар уларҙың барлыҡ хәрби походтарын уртаҡлашҡан: XVI быуатта Ливон әм Ҡырым уғыштары... Франция уғыштары...

Башҡорт хөкүмәте әм ғәскәрҙәре башлыҡтары баҫып торған түбә эргә енән ҡарағусҡыл йөҙлө, ҡаҙаҡтарҙыҡына оҡшаш тире кәпәстәр кейгән буйсан яугирҙарҙың тығыҙ сафтары үтә башлаған: бөрйәндәр!.. Мәргән унарсылар тоҡомо!..

...Ҡояшлы көндә лә күҙҙең яуын алырҙай ал елән, урта быуат яугирҙары хәрби торҡаларына оҡшаш ослоҡай ҡама бүрек, уҡ- аҙаҡ, ҡылыс, өңгө, уның осонда ҡыл ҡороҡ! Ҡыпсаҡтар бит былар, данлы ҡыпсаҡтар!..

... Рәхмәт егеттәргә, уғышҡа инер алдынан да ошондай күңелсәк рух йөрөткән, ата-баба хәтеренә ихтирамлы булған яугирҙар яу ҡырында ла ынатмаҫ!..

Зәки Вәлиди бөтә ғәскәрҙе тарихи яугир кейемдәрендә күргәндәй булды. Эйе, нисек шәп булыр ине милли рух күтәреүҙә ҡыпсаҡтарҙы – ҡыпсаҡса, бөрйәндәрҙе – бөрйәнсә, әр ҡәүемде боронғо ғәскәри кейемдәренә кейендергәндә! Биҙәк өсөн түгел, тарихи ғорурлыҡ өсөн...Тик ҡасып йөрөүсе Башҡорт хөкүмәте өсөн әлегә былар тура ында уйлау – буш хыял.”

”...Тау эсенән отрядтар ағыла. Муса Мортазин полкы... табындар... Ҡобағыш әм Ҡарас сәсән рухтарын йөрөтөүселәр...

... Эйе, бөйөк ул башҡорт иле...”

Роберт Байымов берәмтекләп башҡорттоң бөйөклөгөн, көсөн, да илығын күр әтеп, боронғоға таянырға, ата-бабаларыбыҙ рухын аңларға, ба аларға, таянырға өйрәтә.

Башҡорт яугирҙарының әр ерҙә лә ҡурҡыу белмәй, ажғыр уғышыуҙарын ҡыҙылдар ғына түгел, аҡтар ҙа, хатта сит илдәр ҙә таный.

“Әмир Ҡарамыш атлылар төркөмө менән ошо хәтәр алышҡа күтәрелә.

...Шул арала ҡанлы-туҙанлы дала буйлап йән өшөткөс хәбәр йүгерҙе:

– Полк командиры әләк булды!

– Әмир Ҡарамыш...

Йәштән бергә үҫкәс, Әхмәтзәки менән Әмир бер-бере ен ярты үҙҙән аңлап, килешеп эшләне. Әмир Ҡарамыш йөҙөндә Зәки Вәлиди яҡын дуҫын ғына түгел, ғәскәрҙәге оло таянысын да юғалтты. Оло юғалтыу ҡайғы ы Зәки Вәлидиҙең дуҫы әм көрәштәше менән бәхилләшеү сығышында ла сағыла:

– Әмир Ҡарамыш ата йортона баҫып ингән баҫҡынсыларҙы ҡыуып ебәреү өсөн ҡулына ҡорал алды, ә уға саҡлы Әрметтә тыныс ҡына мөғәллимлек итә ине. Мыҫҡыл ителгән еңеләребеҙ намыҫын, хурланған әсәләребеҙ, ата-бабаларыбыҙ ғорурлығын яҡлау өсөн күтәрелде. Был борон-борондан – әр намыҫлы ир бурысы. Ата йортон, илебеҙ йортон ҡурсалап, үҙ ерендә ҡан сәсәп әләк булды беҙҙең Әмиребеҙ...”

Р.Байымов, образдар үҫәгилешлеген ҡеүәтләп, Әмир Ҡарамышевтың портреты менән йәнәш икенсе мәш үр башҡорт сардары Муса Мортазин образын да дөрөҫлөктә үрәтләй. Әмир Ҡарамыш, Муса Мортазин кеүек шәхестәр йөҙөндә халҡыбыҙға ғына хас тормошсан тәбиғилекте күрәбеҙ.

“... Ҡоролтай барышында Зәки Вәлиди уларҙы ынап ҡарап ултырҙы. алдаттар күберәк унтер-офицер Муса Мортазин тирә ендә өйөрөл ә, ротмистр Әмир Ҡарамыш эргә енә башлыса Ҡоролтайҙағы офицер чиндары йыйылды. Әгәр ошо икәү килешеп эшләй ал а, – тип хыяллана ул. – был үҙе үк төҙөләсәк милли ғәскәрҙең нигеҙ таштары була алмаҫ инеме ни?..”

Большевиктарҙың Башҡорт автономия ы менән көрәш башлауын аңлағас, Мортазин Шура составынан сығып, ротмистр Әмир Ҡарамышев ҡарамағына китә – ул Урал тауҙарында доброволецтар отряды йыйыу менән шөғөлләнгән була. Отряд атаман Дутов менән берлектә 1918 йылдың 4 апрелендә Ырымбурға өжүм итә әм Башҡорт хөкүмәтен азат итә. Тиҙҙән Әмир Ҡарамышев I Башҡорт кавалерия полкын төҙөй, аҙаҡ инде 10 мең яугирҙан торған Бөтә Башҡорт корпусы ла формалаша.

I Армия командиры Гайк Дмитриевич Бжешкянц аҙаҡ шулай тип яҙа: "Башҡорт хөкүмәтенең ҡулға алынмаған ағзалары Баймаҡ округына ҡасты әм унда башҡорт партизан частарын ойошторҙо... Был осорҙа Советтарға ҡаршы айырым ҡыйыулыҡ менән ротмистр Ҡарамышев етәкселегендәге аҡ башҡорт атлылары айырылып торҙо".

Романда, Әмир Ҡарамыш, Муса Мортазин ымаҡ уҡ, уңынан хөкүмәт рәйесе булып үҫәсәк Харис Йомағолов образы ла айырым урын алып тора. "Фронт юлдарын үтеп килгән шинелле алдаттар, ҡыптыр тун, бишмәтле вәкилдәр арыраҡ урын алған." Күп үҙ сурытылмайынса ғына, социаль ҡатламдар ара ындағы эске көсөргәнешлелек, алдағы көрәш тоҫмаллана. Зәки Вәлиди, залдағы вәкилдәрҙе күҙ уңында тотоп, төрлө уйҙар йомғағын сисә. Мәркәз шурала эске әм хәрби эштәргә яуаплы булараҡ, унең ышанысы – уҡымышлы йәштәр әм ошо, шинелле алдаттар. Улар ара ында Харис Йомағоловтың булыуы әйбәт. Уҡымышлы, башҡорт рухлы, тарихты яҡшы белә. Харис Йомағоловты хөкүмәт ағза ы итеү ҙә кәрәк.

"... әлмәк кенә өйләүсе, сабыр холоҡло Йомағоловты Зәки Вәлиди хөрмәт итә. "Айт" тигәнгә "тайт" тип тормай, әр саҡ үҙ фекерен асыҡ әйтә килеүе лә оҡшай...

Большевик рухлы, әммә фекере айыҡ, башҡорт тарихын яҡшы белә, мөхтәриәт, милли тел, милли мәҙәниәт тип тырыша.

...Совет власына ышанған Йомағоловтың үҙҙәре тыныслыҡҡа өндәүҙе аңлата, тип уйлайым.

... үҙ колонизатор сәйәсәтле батша заманы закондары нигеҙендә көслөк менән тартып алынған байлыҡтарҙы хужа ына кире ҡайтарыу, ис юғы баҫып алыу сәйәсәтен туҡтатыу хаҡында бара...

Йомағолов халыҡты аҡлау уйҙары менән йәшәй.

...– Халыҡты әленән-әле тиң еҙ алыштарға күтәреп дөрөҫ эшләйбеҙме? Аҫыл ирҙәрҙе башта яуҙарҙа юғалтабыҙ, унан йәллэдтәр, эҙәрлекләп килеп, ҡалғандарын да дарға аҫа, ҡылыстан үткәрә... Милләтебеҙҙең алтын тамырҙары шулай ҡырылып юҡҡа сыҡмаҫмы тора-бара?"

13 ғинуарҙа ашығыс рәүештә РКП(б)-ның Өлкә комитеты йыйыла.

Башревком рәйесе бында хаҡлыҡ табыуҙан өмөтөн өҙгәйне инде. Ул үҙе өсөн аяныс асыш я аны... "Былар берәүҙе лә, хатта үҙҙәренең ҡәрҙәштәрен дә аямай, кеше түгел, таш күңел фанатиктар"...

Йомағолов Башревкомға ла ниндәйҙер ҡырҡа саралар күрергә кәрәклеген уйлап, ҡара янып тик ултырҙы әм... йәшерен кәңәшмә йыйҙы...

Харис Йомағолов та Үҙәк ебәргән вәкилдәрҙең Башҡортостан өсөн файҙа ыҙ булыуына төшөнә әм ҡай ы берҙәрен ҡулға алырға бойора. Ләкин үҙәктекеләр ҙә йоҡламай: былдай ҡыйыу аҙымға ташҡын кеүек ағым ҡаршы ҡуйыла. Ҡарға күҙен ҡарға суҡымай шул.

... "Ашығыс. Хәрби" грифлы телеграмма килеп төшөүе уңғы өмөттәрҙе юҡҡа сығарҙы. Унда Йомағоловтың үҙенә ҡылған ҡылыҡтарына аңлатма биреү өсөн Мәскәүгә килергә тейешлеге тағы бер ҡат ҡәтғи иҫкәртелгән...

Йомағоловты, сәйәсәттән бөтөнләй ситләштереп, Мәскәүҙә ниндәйҙер ваҡ-

төйәк хужалыҡ эштәренә егеп алалар. Тормошҡа ашырылмаған матур уйҙар, хыялдар, идеялар ғына ҡала...

Ваҡиғалар үҫтерелешенең тағы ла документаль яҡтан камиллашыуы, художестволы бөтөнлөккә ынтылыуы эпизодтарҙы ығылмалы динамикаға солғай, үҙәк образдарҙың тарихи майҙандағы үҙ ба а ын белеп, ҡылыҡтары аша замана үҙенсәлеген, уның нескәлектәрен тойоп ынландырылыуы әҫәрҙә идея-эстетик ҡанундарҙың өҫтөнлөк итеүенә булышлыҡ итә. Әҫәр әм уның геройҙары хаҡында иң инандырғаны – милләт яҙмышы өсөн ғүмерен упҡын ситенә ҡуйған, көслө ихтыярлы Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың быҒаса художестволы әҙәбиәттә күрелмәгән юғары үҙ ма ирлығында шәхес – образ кимәленә күтәрелеүе. Романда бөгөн дә иң мө им булған проблемаларҙың бере е – Башҡортостан Республика ы халыҡтарының үҙаллылығы өсөн көрәш, республика мөхтәриәтенең актуаллеге. Оло шәхес, дәүләт эшмәкәре, арҙаҡлы ғалим Зәки Вәлиди көрәше Ырымбур, Башҡортостан, Мәскәү менән генә сикләнмәй, бәлки, ҡәрҙәш аналған Урта Азия, Төркиә тарафтарына барып тоташа. Яҙыусының был тәңгәлдә, ғалим булараҡ, тарихты яҡшы белеүе, әр ваҡиғаны тарихи-документаль яҡтан барлауы, ҡоро факттар аша түгел, ә художество йә этенән уҡымлы итеп тасуирлауы романды юғары баҫҡысҡа күтәрә. Р.Байымов Зәки Вәлиди образын тулы, милли ерлектә асыуҙа әҫәрҙең төп ваҡиғалар үҫешендә ҡайнаусы Әмир Ҡарамыш, Муса Мортазин, Хөкүмәт рәйесе Юныс Бикбов, Абдулла Мираҫов, Абдулла Иҙелбаев, Ғимран Мағазов, Мөхтәр Ҡарамышев, Шә шәриф Мәтинов эшмәкәрлектәре менән бәйле үрәтләй; Мәскәү большевиктары Владимир Ленин, Иосиф Сталин, Мулланур Вахитов, Лев Троцкий, Михаил Фрунзе образдары аша башҡорт мәсьәлә енең донъя кимәленә сығыуын күр әтә. Ул бөгөн заман ҡапҡа ын, рух донъя ын асыуҙа етди алым менән эш итә.

Зәки Вәлидиҙең эске донъя ын Роберт Байымов халыҡтың рухи байлығы аша ла аса. Ауылдашы Аҫылбайҙың моңло йырын ишетеү – Зәкиҙе балалыҡ йылдарына, Көҙән ауылына алып китә. ығылып сыҡҡан ҡурай моңо уға халыҡтың ҡа арман тарихын хәтерләтә. Аҫылбай йыры йөрәктәргә үтеп инә, мейеләрҙе еңкетә.

*Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы –*
*Ата-олатайҙарҙың да төйәге.*
*Ерен- ыуын аҡлап ҡорбан булған*
*Шунда ята батырҙар өйәге.*

...Ҡысҡырмай Аҫылбай, күкрәк менән йырлай, моңо, әйтер ең, йөрәгенән ығылып сыға. Тауышы ла ҡурайға шул саҡлы тап килә,уларҙы айырып та булмай, даръя ташҡынылай ҡуйы бер мө абәт моң булып сыға... Ҡайҙалыр йыраҡҡа, сал тарихҡа, аҡбуҙаттар, Урал батырҙар тормошона алып киткәндәй, онотолған тойғоларҙы, йоҡом ораған тамырҙарҙы терелтеп ебәргәндәй була ҡурай моңо...

“...Ошондай бөйөк моң тыуҙырған халыҡ ни тип меҫкен булып ҡал ын!... – Халыҡтың бөйөклөгө уның йәшәйеш рәүешендә, рухи нигеҙҙәрендә икәнен аңлай Зәки Вәлиди. – Бына Ут... Башҡорттар өсөн уны ы ла борон-борондан изге булған... Усаҡ аҡсылары – ошо Аҫылбай кеүек егеттәр – ҡурайсылар, йырсылар, уны быуындан-быуынға, быуаттан-быуатҡа тапшыра килгән, үндермәгән... Бөгөн дә ул күңелдәрҙе балҡыта, рухтарҙы нығыта... Ут үн ә, йыр ҙа, тел-лөғәт тә, ошо егеттәр ҙә, улар эшләгән милләт эштәре лә юҡҡа сығыр...”

Ләкин романдағы образ-характерҙар логика ы улай тура ыҙыҡлы ғына түгел.

Аҫылбай башҡорт ғәскәрҙәрендә алдат булып йөрөй, әммә уға ҡайҙа дөрөҫлөк, ҡайҙа ялғанлыҡ икәнен аңлауы ауыр. Шуға икеле-микеле хистәр кисерә.

“...Уйланып йөрөнө-йөрөнө лә Аҫылбай, үҙен уғышып йөрөүсе берәй полкка ебәреүҙе үтенеп рапорт бирҙе. Яр ыу ат, үткер ҡамсы, йәшендәй ҡылыс, биткә

бәргән дала еле – бына нимә кәрәк уның ирек өйөүсе яр ыу йөрәгенә! Уның өсөн аттан да гүзәл, ыбайлынан да аҫыл йән эйәләре юҡ...”

Аҫылбайға Әхмәтзәки Вәлидиҙең мөнәсәбәте бер төрлө генә түгел, ауылдашының хатта ат ҡараҡтары тоҡомонан булыуын да белә ул. Шуғалырмы, уны ауылдашы Аҫылбайҙың әләк булып ҡалыу хәбәре тетрәтә. Ҡулына бомба тотоп, фронттарҙа әле яңы ғына күренә башлаған инглиз танкы ына ҡаршы үрмәләгәндә пулемет уты киҫеп алған уны. “Бынан ике йыл сама ы элек кенә ул ошо аҙлыҡлы фин ҡултығында батша армия ында тоғро хеҙмәт итә ине, – тип уйлана Зәки Вәлиди. – Әле килеп, шул армияға ҡаршы уғышып, ете йыл ғүмер кисергән ерҙә баш алды. Тәҡдирме был, хаталыҡмы?” Үҙ-ара әллә ни яҡын булма алар ҙа, яҙмыш бөгөлдәрендә йә ярҙамы, йә йыры менән осрап, ул Әхмәтзәки хәтерендә лә уйылып ҡалды. Ә Зәки Вәлиди уға бер нисек тә ярҙам итә алманы.

“...Ни уйланы икән уңғы минуттарында, хаҡлыҡҡа ышаныпмы, әллә рәнйеп, асыу менән киттеме донъянан тормошонда ис рәхәт күрмәгән моң- ағышлы был изге йән?!..”

Эйе, был буталыштар бөтә ҡатлам кешеләрен дә ут- ыу аша үткәрҙе, мейеләрен елкетеп, баштарын шаңҡытты, күптәре, икеләнеүҙәр ара ында ҡайҙа барырға белмәй, тәндәрен ергә алды...

Инҡилап ваҡиғаларын үрәтләгәндә автор был ваҡиға-хәлдәрҙән үҙ мәнфәғәте өсөн ниндәй файҙа аласағын төҫмөрләп эш итеүселәрҙе лә ситтә ҡалдырмай: бына Мокрушин заводында араҡы атып, аҡса эшләү күренешен алайыҡ. Хөкүмәт, араҡы атып, кеше аңын ағыулау менән бер рәттән, халыҡтан аҡсаны ошо рәүешле йыйнап алыуҙы ла күҙ уңында тотоп эш итә. Был йә әттән әле генә төҙөлөп килеүсе Башҡорт хөкүмәте лә ситтә ҡалмай.

Үҙенә милли азатлыҡ яулауға күтәрелгән башҡорт халҡының иркен сикләү өсөн ниндәй генә көстәр күтәрелмәй. Үҙаллы йәшәүен быуырға тырышып, реакцион генералдар, атамандар, шовинист рухлы сәйәси эшмәкәрҙәр ҡаты көрәш ойоштора. Совет хөкүмәте менән бер ҡатарҙан башында татарҙар торған Мосолман хәрби шура ы ла асыҡтан-асыҡ хөсөтлөк эше алып бара. Ошо ваҡиғалар аша алдан төҫмөрләп эш итеүсе Зәкиҙең зирәклеген аса әҫәрҙә автор.

...Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән Үҫәргәндәге Мокрушин араҡы заводында нисәмә йылдар туплана килгән араҡыны атырға булғас, бының файҙалы эш булыуына күптәр шикләнеп тә ҡарағайны: тинләп килгән аҡсаға ғәскәр төҙөп буламы ни, ҡасан атылып бөтә әле ул?!

Ә, баҡти әң, ирек ҡуй аң, дуңғыҙ хәленә етеп эсеп ятыусыларға ис тә ҡытлыҡ юҡ. Ошо мәхшәрҙе үрәтләп, автор бына ниндәй кинәйәле ығымта я ай: “... – Ата – улды, инә ҡыҙҙы белмәгән иҫерек ғәрәсәт ошо мәлдә тыуып килә ине инде. Мокрушин араҡы заводындағы күренеш киләсәк афәттең башымы, аҙағымы, был турала әлегә берәү ҙә уйламай. Әммә бер нисә көн эсендә генә араҡы атыуҙан ярты миллион ум килем төштө... Урыҫ араҡы ы уғыш мәнфәғәтенә, ҡорал хәстәрләүгә китте... Халыҡтан тейешле алымдар ҙа йыйылды...”

Тарих абаҡтары Зәкиҙе аҡ булырға өйрәткән. Ҡайҙа ғына булма ын, ул – ошо тарихтан өйрәнеп эш итергә күнеккән ғәскәри башлыҡ та, шул уҡ ваҡытта тарихсы-ғалим да, иҙелгән халҡына азатлыҡ яулау өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер сәйәсмән дә.

...Башҡорттар – ғәскәри халыҡ. Русияға ҡушылғас та әле XIX быуатҡа саҡлы тулы ынса үҙ аллы ғәскәр төҙөгән, командирҙары ла башҡорттарҙан булған... Ат өҫтөндә оҫта йөрөүҙәре, ҡылыс, өңгө менән таҫыллы эш итеүҙәре, мәргәнлектәре менән айырылып торған...

Зәки Вәлиди башҡорттарға ғына хас ҙур тырышлыҡтар менән, яуҙаш дуҫтары ярҙамында, башҡорт ғәскәре төҙөй. Ябырылып килгән ҡыҙыл яу быға ҡамасаулай. Ошондай ауыр шарттарҙа ойоштороу эштәрен алып барыу, ай- ай, еңелдән булмағандыр.

Ләкин көс әм фекер берҙәмлегенең булмауы яугирҙарҙы ауыр яҙмышҡа дусар итә. Халыҡты ҡырылыуҙан йолоп ҡалыу өсөн, Советтар менән килешеүгә килергә, тигән фекерҙе Зәки Вәлиди, бик ауырлыҡ менән бул а ла, ҡабул итергә мәжбүр. Был маҡсаттан Муллайән Халиҡовты Мәскәүгә ебәргәндә биргән ике хатына ла иғтибар итәйек. Бере е Максим Горькийға бул а, икенсе е — Федор Шаляпинға. Тарихсы, оҫта хәрби эшмәкәрҙең, халҡын аҡлап ҡалыу өсөн әр мөмкинселекте файҙаланырға тырышып, Советтар менән килешеү төҙөргә өлгәшеүе үҙе ни тора!

Бәғзе берәүҙәрҙең дошман ҡыҫымы аҫтында ғәскәрҙәрҙең тыуған ерҙе ҡалдырып китеү тәҡдименә:

— Башҡортостандан башҡа беҙҙең барыр еребеҙ юҡ. Үҙ ере өсөн башҡорт быуаттар буйы алышҡан. Мөхтәриәтте беҙ ошонда аҡлаясаҡбыҙ... — тип ҡырҡа ҡаршы килеүе лә — ошо уҡ ил өйәрлек өҙөмтә е. уңыраҡ ғәскәрҙәрен ҡырға ебәрергә теләмәүен дә шулай аңлата башҡорт ғәскәрҙәре баш сардары Зәки Вәлиди.

Романда үрәтләнеүенсә, ошондай ҡатмарлы шарттарҙа эш итергә тура килә милли хәрәкәт етәкселәренә.

...Зәки Вәлиди ҡыҙылдарҙың 1-се армия ына ҡараған Пенза дивизия ына киткән арала Темәстә Беренсе бөтә башҡорт хәрби съезы асыла... Мәсьәләләре: Советтар менән килешеү, Башҡорт совет хөкүмәтен — яңы ревком айлау, ғәскәрҙәрҙе үҙгәртеп ҡороу... Ләкин был башҡорт халҡын ҙур ҡорбандарға килтер ә лә, башҡа сара булмауын иҫтән сығарырға ярамай.

...Советтар менән юғары кимәлдәге өйләшеү ауыр барҙы... “...Совет власы яғынан башҡорттарҙың үҙаллылығына тулы гарантия бирелә... Башҡорт ғәскәрҙәре Совет армия ына ҡаршы уғыш хәрәкәттәрен кисекмәҫтән туҡтата, ҡоралдарын Колчак, Дутов әм Совет Русия ының башҡа дошмандарына йүнәлтә... Улар элекке эшмәкәрлектәре өсөн эҙәрлекләнмәйҙәр...” Большевиктарҙың ике йөҙлө булыуына Зәки бер бөгөн генә инанмаған бит. Шулай булғас, башҡорт ғәскәрҙәрен ҡаршы алғандағы мәхшәргә лә аптырай ы юҡ.

“... аҡ аҫтында ҡулдан-ҡулға күсеп, полк, дивизия, армия штабтарында йөрөгәндә Зәки Вәлиди ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан уң ғәскәр әм халыҡ дусар булған фажиғә күләмен башына ла килтермәгән икән... Талауҙар, ҡулға алыуҙар, бер ғәйеп еҙгә туҡмап үлтереп китеүҙәр ғәскәри частарҙа ғына түгел, бөтә тирә-яҡта, тыныс ҡына йәшәп ятҡан ауылдарҙа ла бара икән...”

Башҡорт халҡының күргән яфаларын ниндәй үҙ менән дә аңлатып булмаҫлыҡ: кисергән вәхшилектәрҙе “оло ағай”ҙың күр әтмәләре менән ете йоҙаҡ артына бикләп, йәшерергә тырышыу өҙөмтә ендә, илдә үҙ тарихын белмәүсе быуындар тәрбиәләнде, ошо йә әттән дә был китап уҡыусыны үҙенә ылыҡтыра, ә әмиәте үҫә бара.

Романдың беренсе киҫәгенең “Өмөт таңы” тип аталыуы ла үҙен аҡлай. Башҡорт халҡы өмөт иткән таң атҡан кеүек бул а ла, күп тә үтмәй, ауырлыҡтар аша яуланып алынған иректе Советтар үҙ мәнфәғәтендә оҫта файҙаланып, халыҡты тағы ла алдай. Бының миҫалын әлеге көндә лә күрергә мөмкин. Башҡортостандың хәҙерге үҙаллылығын быуып ташлау өсөн үҙ мәлен генә көтөп торғандар Рәсәйҙә лә әле бар.

...Тәүҙә, Советтар менән килешеүгә килеп, башҡорт яугирҙары, ышаныс бағлап, ҡыҙылдарға ҡушыл алар ҙа, уларҙы йәберләү әм мыҫҡыл итеүҙәргә түҙә алмай, баш бирмәҫ Муса Мортазин, Ғәлимйән Таған яугирҙары менән ҡайтанан аҡ-

тар яғына сығырға мәжбүрҙәр. Был аптырағандан эшләнгән кеүек бул а ла, улар үҙ яугирҙарын аҡлап ҡалыуға өлгәшә.

Йыл буйына айҡаша торғас, ил тамам ҡан ыраны, ир-егеттәре лә хәлдән тайҙы. Бына-бына алға килеп баҫыр ымаҡ тойолған ғәҙеллектең, хәҡиҡәттең еңеүенә лә әллә ни ҙур өмөт ҡалманы. Ҡышҡы әсе ел-дауылдар менән буталып, тиер ең, ҡайғы-хәсрәттәр әҙәм башы өҫтөндә уранғыланы ла уранғыланы, йөрәктәрҙе ҡыҫты. Ахыр сиктә, азатлыҡ, мөстәҡиллек әләме тирә ендә тупланып алған башҡорт ғәскәре, Колчак, Дутов кеүек уғыш суҡмарҙарынан саҡ ҡотолоп, шул әлеге лә баяғы, бер үк хыялды бойомға ашырып булмаҫмы тип, ҡыҙылдар яғына сыҡты. Меңдәрсә халыҡ теләгенә таянып, ил ағалары менән дә, ҡаршы яҡ менән дә өйләшеп, килешеү юлы менән эшләнде был эш. Күп ир-егеттәр кинәнес кисерә ошо аҙымды я ауға. Әммә көҙгө кеүек саф, ялтыр ауа йөҙөн дә ҡапыл ҡара өрөм ҡаплап ала икән ҡайсаҡ. 1918 йылдың яҙында ла шулай булғайны: Башҡорт хөкүмәте тарафынан Баймаҡҡа эш менән ебәрелгән ике сардарҙы – Ғабдулла Иҙелбаев менән Ғимран Мағазовты әм уларҙы оҙатып барған байтаҡ башҡорт алдатын йоҡлап ятҡан урындарынан торғоҙоп, бинахаҡ ғәйептәр ташлап, ғәзиз йәндәрен ҡыялар. 1919 йылдың март айында йәнә шул уҡ хәл ҡабатлана: оят ыҙ биттәрен "ҡыҙылдар" тигән йөҙлөк йәшергән әм башҡортто үҙаллылыҡҡа ынтылған өсөн генә күрә алмаған хаиндар тағы ике күренекле кешебеҙҙе – шағир әм журналист Шәйехзада Бабич менән Ғәбелхай Иркәбаевты – Кананикольск урамында рәхим еҙ рәүештә язалап үлтерәләр.

Эйе, бер көтөү ғазраилдар, Кананикольск урамдарында салғыларын ҡайрап, башҡорт әҙиптәрен көтөп торған... Яҙыусы Роберт Байымов әсенеү менән билдәләй был тарихи факттарҙы.

Нисәмә йылдар халыҡты алдап, "Зәки Вәлиди "Башҡортостан – башҡорттар өсөн" тигән лозунг күтәргән" тип Советтар оран алып килде. Ә унын фармандарының асылы халыҡҡа еткерелмәне, хатта тарихсылар өсөн дә улар бикле булды. Ысын дөрөҫлөктө халыҡҡа еткермәүҙең сәбәбе бер генә: үҙ ҡулы аҫтындағы халыҡ тик "оло ағайҙың" күр әтмә ен генә үтә ен, ә Вәлидиҙең тәүге фармандарында уҡ: "Хөкүмәттең бөтә тармаҡтарында ла төрлө милләт халҡы берҙәм ҡатнаш - ын, идара итеүҙә уларҙың тиң хоҡуҡлылығы бул ын", – тиелә. Ошо маҡсатта эшләү өсөн күп көс түгелеүенә ҡарамаҫтан, "оло ағай"ҙар менән бер рәттән күп кенә татар милли ә елдәре лә Башҡортостан үҙаллылығына ҡаршы сыға. Был ғына түгел, хөкүмәт ағзалары ара ына шымсылар, атлыҡ йәндәрҙе лә индереп, бөтә яҡлап эш йәйелдерелеүе ихтималын да иҫтән сығарырға ярамай.

Башҡортостан Конституция ын ғына алайыҡ. 1919 йыл. 1938 йыл. Тәүге Конституцияла уҡ Рәсәй менән килешеү нигеҙендә йәшәү тура ында әйтел ә лә, Рәсәй үҙ Конституция ына яраҡлаштырыуға тырышыуҙы тәүге көндән үк башлай. Бындай күренеш Федератив үҙәктең автономияны тыштан ғына танып, эстән уны юҡҡа сығарыу сәйәсәтен алып барыуын күр әтә. Бына ошоларҙы күҙ уңында тотҡандыр ҙа инде Зәки Вәлиди республиканың үҙаллы ил булып йәшәүенә, унын эске эштәренә тығылыуҙарына ҡаршы төшкәндә.

Эйе, Башҡорт автономия ы хоҡуҡтарын сикләргә ынтылыу Советтарҙың тәүге көндәренән үк башлана.

Был йә әттән башҡорттарҙы Петроград фронтына оҙатыу... Хөкүмәт етәкселәрен бөтә эштән дә ситләтеү... Идара итеүҙе Үҙәктең тик үҙенә ярақлы кешеләре аша ғына башҡара башлауы... Был йәш үҫентенең тамырына балта сабыу менән бер икәнлегенә Зәки тәүҙән үк төшөнә, шуға күрә лә халҡы өсөн файҙалы булған бөтә мөмкинселекте файҙаланырға тырыша. Ләкин көстәр нисбәте Советтар яғына ауыша.

Ә Ленин менән осрашҡанда килешелгән вәғәҙәләрҙең "Калинин комиссия ы"

тарафынан юҡҡа сығарылыуы — үҙаллылыҡтың булмаясағына тағы ла бер дәлил. Төрки халыҡтарының берләшеүенә ҡаршы эште Сталин да яҡшы ойоштора.

Тарихты тасуирлағанда әр бер ҡаршылыҡҡа автор үҙ күҙлегенән ба а ла бирә бара. Быны Зәки Вәлидиҙең Артем менән бәхәсендә лә күрәбеҙ. Был — ябай ғына бәхәс түгел, ә ҡапма-ҡаршы ике яҡ, ике идеология бәрелеше.

"... Артем — Сергеев характеры ла романда күп яҡлы асыла. Күпте күргән, мажаралы тормош үткән был кеше тура ында нимә генә өйләмәйҙәр: йәштән үк Уралда әм Украинала батшаға ҡаршы йәшерен сәйәси эш алып барған, күп тапҡырҙар ҡулға алынған, Себергә өрөлгән... Кореяға, унан Ҡытайға ҡасҡан... Австралияға хәтлем барып еткән... Парижда, Швейцарияла булған, унда Ленин менән танышҡан... Ә хәҙер килеп Сталин менән дә бик әшнә" тип өйләйҙәр...

Билдәле булыуынса, бынан 60 йылдар элек донъя күргән художестволы әҙәбиәттә Зәки Вәлиди образы милләтсе, системаға ҡаршы тороусы ҡара көс булараҡ комик ҡиәфәттә төҫмөрләнә килде. "Сыбар шоңҡар" әҫәре, әлегә тиклем ҡоролған ҡара пәрҙәләрҙе асып, легендар шәхесебеҙ йөҙөнә, уның рухи донъя ына яҡтылыҡ ирпә. Мәскәү ә елдәренең милли хәрәкәтте, үҙаллылыҡты юҡ итеү йә этенән Зәки Вәлидиҙе Үҙәккә эшкә алыуҙары республика өсөн ысын фажиғәгә әйләнә: Башҡортостан лидер ыҙ ҡала. Башҡортостанға ҡара көндәр килә, башревкомсыларҙы эҙәрлекләү башлана. Зәки Вәлидиҙең яуҙашы Мәжит Алкин да, Советтарҙың хыянатсыл эшмәкәрлегенә түҙә алмай, Каруан арай мәсетендә аҫылына.

Сират Әхмәтзәки Вәлидигә лә яҡынлай.

...."Килешеү"ҙең ваҡытлыса ғына булған бер "ҡағыҙ киҫәге" икәнен Лениндан ишетеү уға бик ауыр тәьҫир итә. Күпме көс бер минутта юҡҡа сыға! Уны ғына түгел, ә бөтә башҡорт халҡын мәкерле рәүештә алданылар. Бындай шарттарҙа килешеп эшләү мөмкин түгеллегенә инанған Зәки Вәлиди Башревком вәкилдәренә йәшерен күр әтмәләр бирергә мәжбүр...

Ваҡиғалар үҙенең кульминацион нөктә енә яҡынлаша. Ленинға яҙасаҡ хат та әҙер. "...Бынан ун дүрт кенә ай элек РСФСР менән Башҡортостан ара ындағы ике яҡлы килешеү шарттарын үҙегеҙ аяҡ аҫтына алып тапанығыҙ... Хәҙер беҙгә бер генә юл ҡала: еҙҙең сәйәсәтте фашлап, азатлыҡ өсөн көрәште халыҡ-ара кимәлгә күтәреү...

аҡ булығыҙ, Владимир Ильич, киләсәк әләкәт-ҡыйралыштың шишмә башында еҙ үҙегеҙ тора ығыҙ..." Бындай үҙҙәрҙе Кремль хужа ының йөҙөнә туранан-тура бәреп әйтергә шәхси ҡа арманлыҡ, сәйәси өлгөргәнлек менән бергә алдан күрә белеү, аҡыл көсө кәрәк, әлбиттә. ХХ быуат аҙағында СССР тигән бөйөк илдең тарҡалыуы, күп кенә милләттәрҙең үҙаллы дәүләттәргә тарҡалыуы ла — ошоға дәлил. Башҡорттар өсөн дә үлсәмдәргә ыймаған көс, зи ен сарыф ителәуҙаллылыҡ көрәшендә. Халыҡ юлбашсы ын үҙ иленән, милләтенә хеҙмәт итеүҙән, тыуған тупрағынан айыралар. "Үҙәк"кә яраҡлаша алмаған Әхмәтзәки Вәлиди, "был ситлектә минән файҙа булмаясаҡ" тип, халҡы азатлығы өсөн көрәште дауам иттерер яңы саралар ҙы юллап, үҙ иленән айырылырға мәжбүр була, тағы ла илле йыл ғүмерен сит яҡтарҙа үткәрә.

Эйе, фажиғәле яҙмыш. Ләкин ул башҡорт халҡының йөрәгендә мәңгелеккә тамырланыуы менән бәхетле.

"Милләт эшенә тоғро булығыҙ. Яҙған бул а, осрашырбыҙ әле тағы ла" тигән хушлашыу үҙҙәрен уҡығас, күҙгә йәштәр тығыла. "Русия, Башҡортостан артта ҡалды, хуш, бәхил бул, илгенәм!" Ошо ерҙә яҙыусы бик көслө эпизодик үрәтләмә бирә. Уны уҡығас, Әхмәтзәки Вәлиди яҙмышына, алда ҡоролған ҡара пәрҙәләрҙе йыртып, яҡтылыҡ нурҙары төшкәндәй:" ...Нисек кенә ауыр булма ын, Зәки Вәли-

ди артына боролоп ҡараманы. Белә ул: барыбер ҡайтасаҡ. Халыҡ йәшә ә, милләттең азатлыҡ рухы үлмә ә – мотлаҡ, ниндәй генә рәүештә бул а ла ҡайтасаҡ... Аҡ шоңҡарҙар иреклеген татыған ир-уҙамандар, ҡурҡаҡ аҙ тәлмәрйене ымаҡ, тынсыу ерҙә боҫоп ятмаҫ. Ҡара аҡалдар, Батыршалар, Салауаттар эҙенән, ирек даулап, ғорур шоңҡар булып тағы юғарыға кәйелер. Бына шул саҡ халыҡҡа Әхмәтзәки үҙе лә ҡайтып төшөр...”

Романдың уңында автор Хажимөхәммәттең ҡатыны менән өйләшеүе аша Зәки Вәлидиҙең тыуған ерҙәренән китеүен хуплағандай. Ләкин сит ерҙәргә кит ә лә, төрки халыҡтарын берләштерергә азатлыҡ ойотҡо он ала алыуын да күрәбеҙ. Ошо ойотҡо нисәмә йылдар Рәсәй тарафынан эҙәрлекләнеп, баҫылып килде. Ә хәҙерге көндә ул тағы ла көслөрәк итеп халыҡтар тарафынан күтәреп алынды. Үҙаллылыҡты күрә алмаусылар нисек кенә өркөтмә ен, боҙ урынынан ҡуҙғалды әм шәреҡ халҡы үҙ ирке өсөн тағы дәррәү күтәрелә. Бынан сығып, Зәки Вәлидиҙәр башлаған эш юҡҡа булмаған, уңлап бул а ла халыҡтың аңы үҫә, тип әйтә алабыҙ.

Романда сағылдырылған осор, хәл-ваҡиғалар, тарихи дөрөҫлөк хәҙерге дәүер өсөн дә ә әмиәтле.

Эйе, бихисап йылдарҙан уң, ҡанлы уғыш, сәйәси дауыл-өйөрмәләре аша алыҫ-алыҫ яҡтарҙан Сыбар шоңҡарға ла үҙ иленең тупрағына әйләнеп ҡайтырға насип булды. Үҙе ҡайта алманы, уның күкрәп сәскә атҡан дан-шөрәте, моң даръя ына күмелгән изге күңеле, төрлө ҡитғаларҙы аша сыҡҡан ғилем донъя ы үҙе бөйөк аманат булып Башҡортостанына ҡайтты. Миңә ҡал а, Башҡорт иле суверенитет яулаған әлеге көндә лә бындай ғорур рухлы образға мохтаж. Туған тел күрке, мәҙәниәт, республика халыҡтары дуҫлығы өсөн көрәш осоронда Сыбар шоңҡарҙың рухи бөйөклөгө – беҙгә өлгө, уның әҫәрҙәре, исеме – оло өйөнөс.

“Сыбар шоңҡар” романы аҙағында ошондай юлдар бар... “Зәки Вәлиди был мәлдә төркмән атына атланып, төркмән кейеме кейеп, сүллек аша баҫмасылар хәрәкәте етәкселәре менән хәрби кәңәшмәлә осрашыуға китеп бара ине инде...”

... әм бына 1921 йылдың ғинуарын Әхмәтзәки Вәлиди Бохарала йәмәғәт эше менән ҡаршылай.

Әхмәтзәки Вәлиди, Башҡортостандағы милли-азатлыҡ хәрәкәте, башҡорт хөкүмәте төҙөү, ғәскәрен булдырыу тәжрибә ен Төркөстанда ла файҙаланып, көрәште киңерәк йәйеп ебәрергә теләй. Төркөстанда баштан-аяҡ эшкә сумыуына ҡарамаҫтан, Әхмәтзәки Вәлиди Башҡортостан менән дә тығыҙ бәйләнеш тота.

Бына шул саҡта Р.Байымовтың “Сыбар шоңҡар” романындағы өмөтлө үҙҙәр күҙ алдына баҫа: “... Халыҡ йәшә ә, ниндәй генә рәүештә бул а ла тыуған иленә әйләнеп ҡайтасаҡ...”

Вафатына егерме йылдан уң бөйөк шәхесебеҙҙең рухы әм яҡты исеме аҡланып тыуған иленә, Башҡортостанына, туған халҡына мәңгелеккә китмәҫ өсөн әйләнеп ҡайтты. Тағы бер оло тарихи хәҡиҡәт аяҡҡа баҫтырылды.

**Флүрә ХӘМИҘУЛЛИНА.**

# Үс төбөндәге Йы ан

*(Булат Рафиҡовтың тыуыуына 75 йыл тулыу айҡанлы)*

Халыҡтарҙың, илдәрҙең, ҡитғаларҙың теге йәки был дәүерҙәге йәшәйеше, рухи үҙгәреше, заманына хас проблемаларының хәл ителеше тура ында әҫәрҙәр ижад ителә. Йәшәү үҙ ағышында барған кеүек, әҙәби процесс та өҙлөк өҙ дауам итә, әм унда үҙәк урынды әр ваҡыт кеше алып тора. Ләкин ижадсы күптән инде ер өҫтөндәгеләр менән генә мөрхәт енмәй, ул йы андарҙы айҡай, башҡа цивилизациялар менән “бәйләнеш”кә инә. Шулай ҙа фантастик жанрҙа эшләүсе әҙип ҡай ы ғына алыҫлыҡҡа йәки яҫылыҡҡа “осма ын”, ер йөҙөндә йәшәүселәрҙең, йәғни кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен, ябайыраҡ итеп әйткәндә, дуҫлыҡ-дошманлыҡ идея ын урап үтә алмай, күңелдең аҡ әм ҡара яҡтарын асыуҙы маҡсат итеп ҡуя. Боронғо дәүерҙә көн итеүселәрҙең яҡшылыҡ менән яманлыҡҡа ҡарашы әкиәттәрҙә, мифтарҙа киң сағылдырыл а, ул артабан, айырыуса үткән быуатта, өр-яңы жанрҙарҙа үҫеш алды. Фәнни фантастика и ә әҙәбиәттә айырым бер жанр булараҡ XIX быуатта ныҡ ғына башланы, бының асыҡ миҫалы – Жюль Верн әҫәрҙәре. XX быуатта фән, ғилем өлкә ендәге оло асыш-ҡаҙаныштар, технология үҫеше фәнни уйҙырма өсөн тағы ла киңерәк мөмкинлектәр тыуҙырҙы. Фәнни фантастика донъя мәҙәниәтендә sci-fi тигән атама менән дә йөрөй. Хатта шундай телевизион канал да бар.

Фәнни телдә физика закондары менән аңлатылмаған күренештәр “метафизика” тип йөрөтөлә. Станислав Лем “Фантастика и футурология” тигән китабында фантастиканың метафизик мәсьәләләрҙе космос киңлегендә лә, шулай уҡ цивилизация киңлегендә лә сағылдыра алыуын билдәләй. Йы ани киңлектең бурысы ғаләмде айҡау, сит планета вәкилдәре менән бәйләнешкә инеү әм улар менән оҡшашлығына инаныу йә, кире енсә, ер тормошонон ғына юғары идеалдарға тап килеүен аңлатыуға, күр әтеүгә ҡайтып ҡала. “Цивилизация киңлеге” тигән төшөнсә и ә технологияның ҡот осҡос үҫеше, “машина йәне” барлыҡҡа килеүе, уның кешене ҡыҫырыҡлауы, хатта уны үҙенә буй ондороуы ымаҡ мәсьәләләрҙе күтәрә. Сит ил фантастары машина “рух”ын йәки машина эсендәге “ила ”ты шаҡтай тәрәндән күр әтеүгә өлгәште. Был йә əттән тәнҡитселәр СССР йәки Рәсәй фантастарының уларҙан ныҡ ҡалышыуын билдәләй. Шулай ҙа бик матур өлгөләр бар.

Башҡорт әҙәбиәтендә иң беренсе булып бына ошондай “йән” эйә ен танылған яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты Булат Рафиҡов балалар өсөн яҙған “Лоулла” повесында үрәтләне. Яҙыусының фантастик әҫәрҙәре компьютер революция ынан күпкә алда ижад ител ә лә, тап машина “рух”ын, шулай уҡ уның аҡыл эйә е булған кеше затына үҙенсәлекле, хатта ки сетерекле мөнәсәбәтен сағылдырыуы менән отошло булды.

Хәҙер инде йылдар бейеклегенән ҡарап әйтә алабыҙ: талант эйә енең был жанрҙағы әҫәрҙәре бигерәк тә фән, техника ҡаҙаныштарына иғтибар бүлеүе менән

әҙәбиәтебеҙ донъя ында айырым урын биләп тора, әм улар үҙ ә әмиәтен юғалтмаясаҡ. СССР-ҙа, Рәсәйҙә балалар өсөн яҙылған фантастика башлыса уйынсыҡ донъя ы фантазия ын тәшкил итте. Быға миҫал итеп совет әҙәбиәтенән А. Толстойҙың "Алтын асҡыс", Н. Носов, К. Чуковскийҙың әкиәттәрен .б. атай алабыҙ. Тәржемәләрҙән Л. Кэрролл, К Коллоди, А. Милн ижад иткән әҫәрҙәр әле лә балаларҙың яратҡан китаптары булып ҡала. уңғы йылдарҙа фэнтези жанрына иғтибар артты. Мәҫәлән, Дж. Р. Р. Толкиндың "Балдаҡтар хакимы" әҫәре – быға асыҡ миҫал. Бер нәмә асыҡ: фантастик әҫәрҙәр балалар, үҫмерҙәр донъя ында ҙур урын биләй, әм был жанр яҡын йылдарҙа үҙ позиция ын бирмәйәсәк.

Быға са бер кем дә күрмәгән, бер кем дә үҙләштермәгән ниндәйҙер бер арауыҡты күреү фантаст яҙыусының өҫтөнлөгө булып тора. Билдәле бер яҙыусы әйтмешләй, беҙҙең донъя – күп ҡырлы йәү әр, икенсе яғына әйләндер әң, ул бөтөнләй башҡаса ялтырай башлай... әм, ысынлап та, шул йәү әрҙәге донъяларҙы иҫәп еҙ- ан ыҙ асырға мөмкин. Хыял итеү, уйлап сығарыу сәнғәтенең (фантастиканың) ығылмалылығына хайран ҡалырлыҡ. Булат ағайҙың повестары Ер әм Йы андың айырылғы ыҙ бер бөтөн булыуын күр әтә. Ҡаршылыҡтар, кәртәләр аша бул а ла тормош көсөн раҫлауы менән уҡыусы күңелендә оптимистик рух уята. Ҡайҙан был оптимизм? Моғайын, ҡәләм оҫта ының тамырҙарына, тәү инештәренә барып тоташалыр. Сөнки әр әҙип үҙенең күңел донъя ын сағылдыра бит.

Булат Рафиҡов – уғыш осоро бала ы. уғыш урлаған бала саҡта ниндәйҙер йылылыҡ, яҡтылыҡ эҙләү урын ыҙ ҙа кеүек. Баҡти әң, улай түгел икән. Тыуыр көн ҡояш менән билдәләнер бул а, бала саҡ таңы ла яҡшы, изге күңелле кешеләрҙең исемдәре менән бәйләнгән булыр. Бәлки, улар әллә ни күп тә түгелдер, ләкин әр бере е ғәҙел еҙлектән ҡурсалар ҡалҡан, ыжғыр елдәрҙән ышыҡлар ҡорма ымаҡ. Бына шуға ла күңелдә бала саҡ тура ында ниндәйҙер матур хәтирәләр аҡлана икән, ис шик еҙ, тыуған йорт әм әсәй менән бәйле булыр. Булат Рафиҡовтың хикәйә-повестарында беҙ әсәгә ҡарата ана шундай ихтирамлы мөнәсәбәтте күрербеҙ. Был, уғыш йылдары балалары әсәгә ыйынып, унан яҡлау өмөт итеп кенә ултырған, тигәнде аңлатмай. Булат Рафиҡов үҙе лә бик иртә яуаплылыҡ тойоп үҫә. Хатта балалар өсөн яҙған әҫәрҙәрендә төп геройҙың үҙ аллы хәрәкәт итеүендә, етдилегендә, үҙен ир-егеттәрсә тоторға тырышыуында ла яҙыусының ҡылыҡ-фиғелен күрәбеҙ. Был – бер бул а, икенсенән, ошо уҡ геройҙың хыял әм фантазия бейеклеге уҡыусыны арбай. Бала күңеле шулай булырға тейеш тә. Уларҙың үҙҙәрен ҙурҙарса тоторға тырышыуҙары, ҡыйыу аҙым-эҙләнеүҙәре киләсәктә я аясаҡ асыштары өсөн бәрәкәтле орлоҡтар икәнен дә тоймау мөмкин түгел. Ә быңдай күңелде бысратмай аҡлау – ололар иңендә ятҡан бурыс. Булат ағайҙың ошоно тәрән аңлап эш итеүе хайран ҡалдыра. Хәйер, өлкән әм йәш быуын ара ындағы бәйләнешкә уңғараҡ әйләнеп ҡайтырбыҙ.

Урланған бала саҡ алдында ололар бурыслы. Донъя бүлешеү сәйәсәтендә иң элек сабый ғына күрергә әләтле әкиәти, тылсымлы донъя емерелә. Булат Рафиҡовтың тетрәнеүле, юғалтыулы-әрнеүле, аслы-туҡлы бала сағы быңдай серле кисерештәрҙән мәхрүм, шул йылдарҙа тылдағыларға иң ауыр йөктө күтәрешкән егеттәрҙең бере енә әйләнергә өлгөрә ул... Ләкин әҙип ис ҡасан да ҡоромаҫ сығанаҡҡа, йәғни ғөмүмән йәш быуынға ошо матурлыҡты, тылсымды ҡайтарыуҙы үҙенең бурысы итеп ҡуя. Булат Рафиҡовтың балалар өсөн яҙған фантастик әҫәрҙәрен мәңгелек бала саҡҡа бүләк тип ҡабул итергә кәрәк. Ләкин былай тип әйтеү генә әле бөтә ен дә аңлатмаҫ инде. Был – йәш быуынға фатиха. Был – йәш быуынды иҫкәртеү. "Йы ан азаматтары" китабы Ер шарының, бөтөн кешелектең именлеге мәсьәлә ен күтәреп кенә ҡалмай – Галактикалағы тормоштоң ни ҡәҙәр бер-бере енә бәйләнгән икәнен асыҡ күр әтә. Беҙ – Ғаләмдә берҙән-бер түгел. Фәнни-техник прогресс үҫешендә рухи ҡиммәттәр төшөнсә е лә үҙгәреш кисерә. Кешелек Ер шарынан күпкә юғары күтәрелгәндә, башҡа планеталар, галактикалар

менән бәйләнешкә ингәндә уның эске донъя ы, халәте ниндәй үҙгәрешкә дусар ителә? Яҙыусы әм психолог Булат Рафиҡовтың повестарында күңел хәрәкәте динамикала үрәтләнә.

Фантастика тура ында үҙ йөрөткәндә, әҙиптең арауыҡты тойоу йәки уны күреү үҙенсәлеген күҙ уңынан ысҡындырырға хаҡыбыҙ юҡ, сөнки сик еҙ арауыҡ менән бәйләнешкә инеү, йәғни хыялда уның моделдәрен тыуҙырыу әр яҙыусының әләтенән килә торған эш түгел. Шуны ы ла бәхәс еҙ: был арауыҡ (ғаләм, йы ан) фәнни ҡараштан айырыла әм автор фантазия ы менән байытыла. Булат Рафиҡовтың "Йы ан азаматары"на ингән "Лоулла", "Йы ан азаматтары", шулай уҡ " уҡайлының уңғы байрамы" төрлө планета кешеләренең үҙ-ара бәйләнешен тасуирлай. " уңғы ахмаҡлыҡ” повесынан күпкә элек яҙылған был әҫәрҙәрендә ер кеше - енең берҙәм маҡсатҡа ынтылышы, ошо маҡсаттың йы ан мөнәсәбәттәрен үҙгәртеү көсөнә эйә икәнлеге асыҡ күр әтелә, әҙәм бала ының мөмкинлектәренә, тимәк, киләсәгенә ышаныс төп лейтмотивты тәшкил итә. Был ышаныс быуындар бәйләнеше булғанда ғына тәү асылын юғалтмаясаҡ.

Беҙ "Йы ан азаматтары”нда өс быуын вәкиле менән осрашабыҙ. Нур Азамат – олатай, Таң Азамат – атай, Икар астероидында мәктәптә уҡып йөрөүсе бала Көн Азамат – тәүге енең ейәне бул а, икенсе енең – улы. Автор исемдәргә лә символик мәғәнә алған. Нур – ҡараңғылыҡты ҡапшап- әрмәп алға барыусы тәүге яҡтылыҡ шәлкеме. Ул киңерәк арауыҡҡа йәйелә барған айын, Таң атыуын тойорбоҙ. Артабан инде бөтә тирә-йүнде яҡтыртҡан Көн тыуасаҡ. Кешелектең эволюцион үҫеше лә ана шулай. Ысынлап та, Көн Азаматҡа, уҡыусы бала ғына булыуына ҡарамаҫтан, Ҡояш система ы аша үтеп сығыу бәхете тейә. "Лоулла", "Йыан азаматтары", " уҡайлының уңғы байрамы" повестарын ҡулына алып уҡыясаҡ бала ла ана шул мәктәптең тәрбиәләнеүсе енә әйләнәсәк, әллә күпме мажараларҙың ша иты буласаҡ. Тимәк, әр быуын бала ы бынан ары Көндөң тиңдәше әм йы анда уның юлдашы булыу хоҡуғына эйә.

Ҡояш система ының иң ситенә – боҙ ҡулса башланырға тейешле киңлектәргә яҡынлашҡан астероид-станция Икар тип атала. Ул ҡояшҡа яҡынлашып, ошо сик еҙ яҡтылыҡтың ҡайнап торған тажына инергә тейеш була, ләкин билдә еҙ сәбәптәр арҡа ында был программа үтәлмәй. Ошо тәү маҡсаты үҙгәргәндән уң, астероид сәйәхәтсе мәктәп вазифа ын башҡара башлай. Көн Азамат менән беҙ тәү тапҡыр ошо мәктәптә осрашабыҙ. Йылдар үтеү менән, астероидтың маҡсаты йәнә лә үҙгәртеләсәк–ул ҡояш система ын аша сығыусы тәүге станцияға әйләнәсәк.

Сакато исемле астроном ун яҡтылыҡ йылы алыҫлығында өр-яңы йондоҙ шартлау ихтималлығын, уның юғары энергиялы киҫәксәләренең ҡоторонҡо дауылы Ер атмосфера ындағы озон ҡатламын юҡ итәсәген әйтә. Ерҙең әләк булыу ихтималлығы Икар команда ын махсус рейсҡа сығара. Бурыс үтә лә яуаплы: шартлау ҡалдыҡтары Ҡояш система ына үтеп инмә ен өсөн, уға боҙ ҡулсаны киҫәксәләргә ҡаршы торорлоҡ экранға әйләндерергә кәрәк. Әлбиттә, мажаралы, әләкәтле юл үтергә тура килә Икар команда ына. Ло йондоҙо кешеләре менән осрашҡандан уң йондоҙҙоң шартламаясағы, ә әкрен генә үнәсәге беленә. Ләкин Лоулла планета ы кешеләренә яңы ҡояш кәрәк. Планета үҙ аллы хәрәкәт итә, уға ары (ҡояш) системаға үтеп инеү маҡсаты ҡуйылған.

Лоулла планета ындағы бушлыҡ башта аптырата. Бында йәшәүселәрҙең, төп пульт менән идара итеүселәрҙең юҡҡа сығыуы – серле йомаҡ. Ярҙамға килеүселәр оло кеҫәрткеләрҙең аяу ыҙ өжүменә дусар ителә, орау артынан орау тыуа, ә яуап биреүсе юҡ. Ләкин Ер кешеләре яңылыша: планета ла, улар күргәнсә, ис кенә лә бушлыҡ түгел икән, көтмәгәндә Хужа үҙенең барлығын белдерә. Ул – бөтә планетаны үҙенең ҡушымта ы итергә ынтылған осошҡа идара итеүсе электрон-автоматик система. Аҡылы, мөмкинлектәре менән Ер кешеләрен уҙған, лоулдарҙы тулы ынса үҙенә буй ондорған машина, Лоулла планета ын нуль арау-

ыҡ аша үткәреп, уны Юпитер йәнәшә енә урынлаштыра. Юпитер йәнәшә ендә, тамашасыны тертләтеп, ҙур ғына шар барлыҡҡа килә. Көтмәгәндә. Буп-буш урында. Марс астрономдары Лоулланың нуль арауыҡтан сығыуын ана шулай теркәгәндәр, тип яҙа автор.

"Беҙ космоста килеп тыуған төрлө шарттарҙа намыҫ ҡушҡандың, ҡулыбыҙҙан килгәндең бөтә ен дә эшләнек, ике цивилизация осрашыуында кешелеккә тап төшөрмәҫкә тырыштыҡ..." Булат Рафиҡов әҫәрендәге был юлдар кешенең төп маҡсаты тура ында өйләй. Ул әр саҡ намыҫ төшөнсә енә барып тоташасаҡ. Кешелектең үҙен әләк итеүе-итмәүе, хатта төрлө планетала йәшәүсе аңлы заттар осрашҡанда ла уларҙың бер-бере ен аңлай алыуы-алмауы ошо төшөнсәгә бәйле. Намыҫ тере заттарҙы берләштереүсе уртаҡ сифат булып ҡаласаҡ. Шуға ла был фекер әҫәрҙә артабан дауам ителә, үҫтерелә генә барасаҡ. Көн Азамат өсөн ата ының, олата ының эш-ғәмәлдәре үрнәк. Икенсе яҡтан, ул үҙенең айырым донъя, индивид икәнен әм үҙе генә атҡарырға тейешле бурыстары барлығын онотмай. Яҙыҡ эш эшләүҙән үҙен тыя алыуы ла шуға бәйлелер. "Туҡта, тинем мин үҙүҙемә, ошо мәлдә олатайҙы килтереп ҡатнаштырыу, асылда, шул уҡ маҡтаныу түгелме ни? Төптән уйлап ҡарағанда, олатайымдың әм атайымдың даны мине яман аҙымдарҙан аҡлаусы көс кенә түгелме ни?.."

Йы анда характер тәрбиәләнә, ләкин уның башланғысы барыбер — Ерҙә. Бына шулай ти автор китабында: "Элек-электән кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәре, эштәре намыҫҡа әм ихласлыҡҡа нигеҙләнергә тейеш, тип уйланылған, шуға өлгәшеү өсөн төрлө-төрлө закондар уйлап табылған. Ләкин кешелек иҙеүселәргә әм иҙелеүселәргә бүленгән замандарҙа әлеге закондар камиллыҡтан бик алыҫта торған, сөнки улар намыҫ менән ихласлыҡты хакимлыҡ итеүсе синыф өсөн власть нигеҙе, байлыҡ сығанағы итеп кенә ҡараған әм аңлатҡан". Йәш быуын был төшөнсәне үҙ асылына кире ҡайтарырға тейеш. Мәктәп уҡыусылары ара ында ла беҙ төрлө характерҙар менән осрашасаҡбыҙ. Кемдер ынауҙы лайыҡлы үтәсәк, кемдер намыҫына тап төшөрәсәк. Был да — уҡыусы балаларҙың киләсәктә үҙҙәренә ниндәй яҙмыш айлаясағына ишара.

"Әле генә арағыҙҙан кемдер, ниңә ул Намыҫ әм Ихласлыҡ институты тип атала, бүтән матурыраҡ исем табылманымы икән ни, тип ораны. Матурлыҡ йә әтенән нисектер, әммә мәғәнә яғынан был атама бик аныҡ әм дөрөҫ. Кешеләрҙең тормошо намыҫҡа, ихласлыҡҡа нигеҙлән ә генә, камиллыҡҡа ынтылыш туҡталмаҫ," — тип өндәшә иң оло быуын вәкиле Нур Азамат.

Бына яҙыусының төп кредо ы. Кеше тап ошо сифаттары менән башҡа тереклектән айырыла. Бер үк ваҡытта беҙ әҫәр геройҙарының төрлө мажараларға тарығанын күрербеҙ. Кәртә, тоҙаҡ-ҡапҡандар Ер өҫтөндә генә түгел, улар йы ан киңлектәрендә лә етерлек. Ләкин кеше яуаплылыҡтан ҡурҡмаҫҡа тейеш. Намыҫ әм Ихласлыҡ институты Ерҙәге бөтөн ойошмаларҙан өҫтөнөрәк, сөнки улар атҡарған әр эштең маҡсатҡа ярашлы булыу-булмауын, мө им яңылыҡтарҙың бөтә халыҡҡа ваҡытында барып еткерелеүен, иң ә әмиәтле мәсьәләләрҙең бөтә кешелек донъя ы тикшергәндән уң ғына хәл ителеүен күҙәтеп бара.

Икар капитанының үҙҙәренә лә ҡолаҡ алайыҡ:

" аман Ерҙәге кеүек фекер йөрөтәбеҙ. Унда әлеге тикшереүҙәге мәсьәләләр өҫтөнән йүгереп үтеүгә юл ҡуйырға, ҡолаҡҡа кемдеңдер нимәлер бышылдарына иҫәп тоторға мөмкин. Космос быны яратмай. Ул хәл-ваҡиғаларҙың айышына төпкә тиклем төшөүҙе, шуны бик тә йә әт атҡарыуҙы орай. Яуаплылыҡтың рәүеше түгел, үҙе кәрәк бында".

Был үҙҙәр әр дәүер өсөн дә актуаль яңғырай түгелме? Бөгөнгө көн өсөн бигерәк тә! Ә бит яҙыусы Булат Рафиҡов халҡы, кешелек өсөн мө им мәңгелек булған төшөнсәләр менән эш итә. Үткән дәүерҙәр кеше е өсөн дә, киләсәк быуын өсөн дә аңлайышлы саҡырыу әм өндәү. Бына ниндәй булырға тейеш ысын яҙыу-

сы фекере.

Ейәне, тип өндәшеүселәр икәү буласаҡ. Бере е — Таң Азамат, икенсе е — Лоуллалағы Согвандың олата ы. Быуындар бәйләнешен бына шулай күр әтә.

Материяның тыныс торған сағы юҡ. Галактикалар айырылыша, йондоҙҙар тыуып-үлеп тора, ҡыҙыл гиганттар әм аҡ кәрләләр барлыҡҡа килә. Шул ваҡиғалар рәтендә өр-яңы йондоҙҙар тоҡана. Былар тура ында Көн Азамат уйлана, үҙ күҙәтеүҙәрен алып бара, ығымталар я ай. Беҙ ваҡиғаларға мәктәп уҡыусы ы күҙлегенән бағасаҡбыҙ. Ҡәләм оҫта ы Йы анда булған мажараларҙы, күренештәрҙе бик мауыҡтырғыс итеп үрәтләй. Бер-ике абзацҡа иғтибар итәйек. "Астероидта офоҡ бик тар, шуға ла унын күк көмбәҙендәге йондоҙҙар Ерҙәгегә ҡарағанда бер нисә тапҡыр күберәк. Улар менән үҙеңдең берлегеңде лә, ик еҙ-сик еҙ бушлыҡта йәшәүеңде лә бында асығыраҡ тоя ың..." "Ғөмүмән, космоста түңәрәк форма хакимлыҡ итә, был — бөтә төр материяның ниндәй ҙә бул а бер үҙәккә йыйыусы гравитация көстәренең тырышлығы. Беҙҙең алда космос-скульптор ижадсының камил бер өлгө ө..." Космосты данлаған йыр ымаҡ яңғырай ҙа ба а был юлдар! Йы андың а әңлеген ысын рәссам ғына бына шундай бай буяуҙарҙа еткерә әм үҙ уҡыусы ын сик еҙ киңлеккә сәйәхәткә алып китә ала.

Китапта йы ан сәйәхәтселәре кисерештәре менән бер рәттән "Автор яҙмалары" ла бирелә. "Был көндәрҙә ерҙә. Авторҙан үҙ" тигән бүлексәләр менән бер нисә тапҡыр осрашырбыҙ. Был өлөштәр аша Ер планета ының, йәғни кешелектең ниндәй хәстәр менән йәшәгәнен тәрәнерәк аңлайбыҙ. Йәнә лә ошо үҙенсәлекле алым китап уҡыусыға йы ани киңлекте бөтөн тәрәнлегендә әм берҙәмлегендә күреү мөмкинлеге бирә.

"Ер улы йәки ер ҡыҙы барыбер йәшел япраҡтың леп-леп өйләшеүен ишетеүгә мохтаж. Бүтән бер тауыш та беҙгә бар тәбиғәт менән бер туғанлыҡ, бер бөтөнлөк тойғо он ошолай тулы ынса биреп еткерә алмайҙыр, иңә тормоштоң мәңгелек тантана йырын ишеттергән ағастың ят тупраҡта тамырланғанын да, япраҡтарын ҡыштырлатҡан елдең я алма икәнен дә онота ың." Был я алма баҡса — ваҡытлыса үҙеңдең асылыңды онотоу сара ы. Икенсе яҡтан, тап ул тыуған ерҙең тартыу көсөн ныҒыраҡ аңларға ярҙамлаша.

Тәбиғәт менән ҡалғанда ғына кеше үҙ асылына хыянат итә алмай, бәлки, тәбиғәт, тыуған ер ҡосағында булғанда оло о ла, кесе е лә бөйөк ғаләм менән берлеген ныҒыраҡ тоялыр.

Беҙ Көн Азаматтың Икар астероидындағы баҡсала ял иткән сағында тыуған уйҙары менән танышырбыҙ. Икенсе тапҡыр үҙ бурыстарын намыҫ менән үтәп, тыуған Ергә ҡайтҡас, ата-бабаларының ғәзиз тәүтөйәгендә, Ағиҙел янында, Шүлгәнташ мәмерйә е янында шундай ләззәт, ысын рәхәтлек, күңел ялы кисергәнен күрербеҙ. Сағыштырырлыҡ ерлек бар. "Хәтерләүҙәремә олатайымдың Азаматтар тоҡомо тура ында өйләгәне килеп ялғанды, әм мин үҙ тоҡомомдоң шәжәрә е аша тотош кешелек донъя ының берлеген күҙаллағандай булдым. Беҙҙең дәреслектәр дошманлыҡ осоро тип атаған быуаттарҙа ҡай ы бер халыҡтар күршеләрен йоторға, юҡ итергә ынтылып торған бит. Йотҡандар, юҡ та иткәндәр. Тик күпселек осраҡтарҙа баҫҡынсы халыҡты кемдер туҡтата килгән: йә күршеләре көс өҙҙө яҡларға күтәрелгән, йә тегеләр үҙҙәре үҙҙәрен тыйып ҡалған. Сәбәбе нимәлә? Минең уйлауымса, берлек тойғо онда, ниндәйҙер халыҡтың ер йөҙөнән юғалыуы ҡалғандарҙы кәм етәсәген, кесерәйтәсәген аңлауҙа".

Намыҫ әм Ихласлыҡ институтының ә әмиәте, ундағы ғалимдарҙың эшмәкәрлеге тура ында фекер йөрөтөргә, был ойошмаға оло өмөт бағларға мөмкин, ләкин тәүтөйәк менән осрашҡан ошондай мәлдән дә ихласыраҡ нимә бар икән, тигән орау ҙа тыумай ҡалмай күңелдә. Кеше, асылда, инеш башының, бишегенең әм йы андың бер бөтөн икәнлеген аңлай. Быны кисерер, тойор өсөн бер ниндәй инсти-

туттар ҙа кәрәкмәй. Кешегә үҙ ғүмерендә ниндәй генә лозунгылар менән осрашырға тура килмәй. Тыштан ҡысҡырған был саҡырыуҙарҙың эске йөкмәткеһе, йәғни йәне юҡ. Беҙ – лозунг алдында йөҙ өҙ масса, улар барыбыҙға ла, алдатшикелле, бер фарманға буй оноуҙы, бер төрлө фекер йөрөтөүҙе генә талап итә. Ижади күңел үлә. Тыуған ер ана шул йәшәү улышын – ми ырбанлыҡ, өйөү тойғо о, ихласлыҡты – бүләк итеүсе төп сығанаҡтарҙың береһе.

Фантастик әҫәр 1988 йылда, йәғни торғонлоҡ тип аталған осорҙа, милләттәрҙе бөтөрөп, бер иш совет берлеге "я аған" саҡтарға тура килә. Ә бит иҫкермәй торған ҡиммәттәрҙе Булат Рафиҡов шул замандарҙа уҡ әйтә алған. Уҡыусы бала исеменән бул а ла.

Минбеләм исемле ғалим да әр заман геройы була ала. Наҙан әм әр еҙ был әфәнденең бөтә фән тармаҡтары буйынса үҙ әйтеүе, бүтәндәр менән бәхәскә инеүе, әр яңылыҡты тиерлек шик аҫтына алырға тырышыуы, кешеләр ара ын аҫтыртын боҙоуы бер заман өсөн дә ят күренеш түгел. Алдынғы ҡарашлы кешеләрҙе эштән алдырыу йәки ситләтеү фәнни үҫеште тотҡарлауға бәрәбәр. Минбеләм ошондай емергес ғәмәлдәр менән мауығып, хатта үҙе өйрәнгән ғилми юлдан да тайпылған. Улай ғына түгел әле, бындай әр еҙ, ялған ғалимдарға бүтәндәрҙе хөкөм итеү хоҡуғы бирелгән... Яҡшылыҡ әм яманлыҡ көрәше кешенең эске донъя ында бара, әм ул тышҡы донъяны ҡаҡшатырға әләтле.

Фәнни фантастика жанры цивилизацияла технологик үҫештең өҙөмтәләре тура ында уйланыуға нигеҙләнә. Кеше аҡылына нигеҙләнгән фән әм технология йәмғиәтте нисек үҙгәртеп ҡора? Ыңғай йоғонто о күберәкме унын, әллә кире еме? Киләсәктә ниндәй өҙөмтәләргә килтерер? Әгәр ҙә бөтөн бурыс машиналарға ғына тапшырыл а, кеше яуаплылығын онот а, ис шик еҙ, йәшәйеш ҡотолғо оҙ әләкәткә дусар ителәсәк. Юҡҡамы ни машина – Лоулла планета ының төп хужа ына, ә лоулдар унын ҡушымта ына әүерелә? "Юғалтыуҙар әр саҡ үкенесле, ләкин йыуаныстар ҙа аҙ булманы. Машинаны Аллалар мәртәбә енә күтәреү арҡа ында хата артынса хата я ауыбыҙҙы таныу, аҡылға эйә булған тере материянан да ҡеүәтлерәк көс юҡлығын аңлау..."

Кешелектең бөйөк бурысы – Ер шарын йәки Ҡояш система ын ғына әләкәттән ҡотҡарыу түгел, галактика именлеге, икенсе системаға ҡараған планета кешеләренә лә ярҙам итеү, сөнки изгелек, яҡшылыҡ сиктәрҙе белмәй, ул – Йы ан кеүек мәңгелек төшөнсә е. Бына ошо бурысты атҡарып сыға Йы ан азаматтары.

" уҡайлының уңғы байрамы" повесында Көн Азаматты карап командиры сифатында күрәбеҙ. Йәшел йондоҙҙоң бишенсе планета ында күргән мажаралар тасуирлана. Тәүге ике повеста технологик үҫешкә бәйле проблемалар алға сыҡ а (машина – планетаның төп хужа ы), " уҡайлыға сәйәхәт"тә кеше психология ы, йәғни эске донъя ына киң урын бирелә.

Төрлө өлкәне өйрәнеүсе ғалимдарҙы алыҫ планетаға алып осоусы командирҙың фәнгә үҙ ҡарашы бар. Тәүге биттәрҙә үк унын ошондай фекере менән танышабыҙ: "Ошо нигеҙҙә мин фән вәкилдәрен ике төркөмгә бүлер инем. Тәбиғәт серҙәре менән шөғөлләнеүселәр асылда кешелектең киләсәген билдәләйҙәр, уға юл яралар, был эш кешегә ғәйәт ҙур яуаплылыҡ йөкмәтә. Гуманитар фәндәр, ябайыраҡ итеп әйт әк, кешелек йәмғиәте үҙе тыуҙырған серҙәрҙе өйрәнеүселәр, башлыса үткән заман менән эш итә. Уҙғандарҙы үҙгәртеү мөмкин булмағанлыҡтан, яуаплылыҡ кимәле лә түбәнерәк".

уҡайлы планета ы кешеләре үҫеш кимәле буйынса ырыу-ҡәбилә осорон хәтерләтә. Этнограф Диндиндең "Биш йәшлек Тәнре" тип исемләнгән затты күреү теләге бик көслө. Команда, төрлө мажараға тарып, ахырҙа ҡара ҡумта эсендәге серле зат менән осраша. Ул бер ниндәй ҙә Тәнре түгел, әҙәми зат, ҡасандыр Ерҙә, көнсығыш илдәрҙең береһендә идара иткән диктатор Хи-хи булып сыға. Ҡанлы ҡулдың икенсе планетала "алла" булып йәшәп ятыуы уҡыусыны ла уйландырмай

ҡалмаҫ. Яманатлы зат тышҡы ҡиәфәте менән генә яҡшы атлы булып күренә ала. Яҙмыш кешене ҡай ы ғына планетаға илтмә ен, барыбер төп асылы үҙгәреш еҙ ҡаласаҡ, уҡайлы планета ының табыныу объектын Ергә кире ҡайтарыу бурысы тора команда алдында. Быны хәл итеүе ан ат түгел. Бер яҡтан, был — уҡайлыларҙың эске эштәренә ҡыҫылыу, сөнки ҡан эскес генерал "Алла" тип нарыҡланып, уларҙың яҙмышын, йәшәү-йәшәмәү мәсьәлә ен хәл итер дәрәжәгә күтәрелгән. "Ошо мәлдә көс-ҡеүәтебеҙҙе күр әтеп, уҡайлыларҙы ҡурҡытыу юлы менән өҫтөнлөккә өлгәшеү уйы башыбыҙға ла инеп сыҡманы. Юҡ, беҙ үҙебеҙҙе тиңдәр ара - ында тиң тойоп, ғәҙеллек өсөн көрәшергә тейешле кешеләр итеп кенә иҫәпләнек". "Тәңре юҡҡа сығыу менән, ҡасандыр Ер тормошонда булған ымаҡ, Йәшел планетала "бөйөк күсенеү" осоро башланасаҡ, ул ҙур ижтимағи-сәйәси үҙгәрештәр килтерәсәк. Тик эҙемтәләре ниндәй булыр?

Йәшел планетала йәшәүселәрҙең "Ҡояш байып, ҡояш сығыуы!" тип әйтеүҙәре йәшәйештең мәңгелек әйләнешен аңлатҡандай. Был инде уҡайлы планета ының киләсәге яҡтыраҡ, мәҙәниәтлерәк була барыр, уҡ тип аталған ырыу ерендә йәшәп ятҡан генерал өсөн был уңғы байрам булғандыр, ә уҡайлыларҙы берлек, берҙәмлек байрамдары алда көтәлер, тигән өмөт уята.

Яуызлыҡ әм яҡшылыҡ — бына ошо ике көстөң мәңгелек көрәше тасуирлана " уҡайлының уңғы байрамы "нда. Ҡасандыр Ерҙә хакимлыҡ ҡылған генералдың ике йөҙ йыл эсендә тамсы ла үҙгәрмәүе, ысынлап та, ағайтырлыҡ. "Был ваҡиға яуызлыҡтың йәшәүгә үтә әләтлелеге, үҙен аҡлау өсөн төрлө ысулдар таба алыуы тура ында фәлсәфәүи ығымталар я арға этәрә", — ти Көн Азамат.

" уңғы ахмаҡлыҡ" повесы — фантастика жанрының уңышлы хәл ителеше генә түгел, ә уның сағыу бер өлгө ө. Образдар, повеста барған күренештәр аша Булат Рафиҡовтың фантазия ы әм аҡыл даирә енең ик еҙ-сик еҙлегенә йәнә лә бер мәртәбә хайран ҡала ың. Булат Рафиҡов — философ әм сәйәсмән, идеолог әм рухани, ғалим әм үҙ сәнғәте ма иры. Власть, идара итеү, социаль институттарға, йәмғиәт үҫешендә барған ҡатмарлы процестарға мөнәсәбәтен белдереп кенә ҡалмай яҙыусы, ә төп герой исеменән үҙ ҡараштар система ын да асып ала. Ысынбарлыҡта “ уңғы ахмаҡлыҡ" тип аталған китаптың авторы Тимер әр заманға хас проблемалар өҫтөндә баш вата. Ә ни өсөн ошо китабы арҡа ында кеше йәшәмәгән утрауға ҡыуыла уң ул? Тәртип хужалары үҙҙәренең элекке коллега ында ниндәй ҡурҡыныс күрә? Биш йыл ғүмерен өргөндә үткәргән Тимер үҙенең китабы тура ында ҡыҫҡа ғына шулай ти: "Баштағы бүлектәрҙә кешелек тарихында аҡыл ыҙ батшаларҙың, президенттарҙың, генеральный секретарҙарҙың башбаштаҡлығы арҡа - ында илдәр, халыҡтар өҫтөнә төшкән бәлә-ҡазалар тасуир ителә, шунан уң ғына беҙҙең көндәр хаҡында үҙ китә. Ошонан уң, Ерҙә башҡаса ахмаҡлыҡ булмаҫ, тип кем әйтә ала?" Беҙҙең замандан бер нисә быуат алдараҡ, йәғни киләсәктә йәшәүсе герой Тимер, башлыса, тарихты бәйән итә. Тимәк, үҙ заманы тура ындағы фекерҙәре, иҫкәртеүе — уны кеше йәшәмәгән утрауға илтеүсе төп сәбәп. Булат Рафиҡов уҡыусы ын Айҙа, Марста яңы ҡалалар алынған, Ҡояш система ында әм унан ситтә йондоҙ караптары осҡан киләсәккә, шунда барған ваҡиғалар эсенә алып инә. Тәбиғи, унда идара итеү система ы ла, йәмғиәт ҡоролошо ла беҙҙекенән ҡырҡа айырыла. Тик, ни ғәжәп, үҙгәрмәй торған нәмәләр була. Арыҫландың кәүҙә енә ингән ары планета затының телмәрендә ишетер егеҙ был фекерҙе.

“Ер кешеләре! еҙ маҡтаулы цивилизацияғыҙҙы, тырыша торғас, ахырғы сиккә килтереп еткерҙегеҙ. Меңәр йылдар дауамында ҡәҙерләп үҫтерелгән әм камиллаштырылған кәпәренеү тойғо о аяҡтарығыҙға тышау, күҙҙәрегеҙгә ҡара япма булып әүерелде. Шул арҡала еҙ әлдә лә ары планетаның ҡушымта ы, тәьминәт сығанағы хәлендә тороп ҡалғанығыҙҙы тоя алмай ығыҙ, ә Йы андың тулы хужалары кеүек ҡылана ығыҙ...”

Ә бит бөтә е лә әр ваҡыттағыса иң изге маҡсаттан башлана.

Әйҙәгеҙ, шул ваҡиғалар сылбырын барлайыҡ. Бөгөн әм Иртәгә институты хужаларын яҡты киләсәк, кешелеккә булған яҡшы ниәт, уй-ынтылыш берләштерә, тотош йәмғиәт мәнфәғәттәренә тура килгән яңы үрҙәргә әйҙәрлек программа төҙөргә кәрәк. Бәхәс еҙ, кешелектең именлеге, уның хәүеф еҙлеге — бөтә енән дә юғары. Алып барылған күҙәтеүҙәр шундай ығымтаға килтерә: Ерҙә йәшәүселәрҙең берәүҙәре ни сәбәптәндер үлпәнәйә, ихтыяр көсөн юғалта, икенселәр, кире енсә, ғәҙәттән тыш активлаша, бүтәндәргә ҡаршы уҫаллаша бара. Бына шулай кеше психика ында үҙгәрештәр барлығы асыҡлағандан уң, Тәртип хужалары иңдәренә яңы бурыс ала. Донъя тарихында, йәмәғәтселектә түңкәрелеш я аясаҡ идея менән сығыш я аусыларҙың бере е Психолог тип атала. Психолог фекеренсә, кеше психика ында ваҡыт йөк өҫтәй тора — уны спортсы күтәрәсәк штангыға яңы дискылар кейҙереү рәүешендә күҙ алдына килтерергә мөмкин. Шәхси кисерештәр генә түгел, элекке быуындарҙың тетрәнеүҙәре лә ауыр йөк булып ята, йәнә е. Кешеләрҙең күпселеге йоҡлағанда аташыуына, алама төштәр күреүенә зарлана. Тимәк, уларҙан ҡотолоу сара ын табырға кәрәк. Төштәрҙе әрсеү психиканың йоҡа ғына ҡатламын йышыуға бәрәбәр. Психик портреттың күсермә е икенсе планетаға оҙатыла бара. Повеста яңы асыш я аусы Психолог Тимер менән бер мәртәбә генә осраша. Башҡаса күҙгә-күҙ ҡарашып гәпләшергә яҙмай, ләкин Тимер өргөндән ҡайтыуға тормоштоң үҙгәреүе бары тик Психологтың әр даим ҡотолғооҙ йоғонто я ауын дәлилләй. Психолог күптән инде гигант машинаны эшкә еккән, төштәрҙән әрсеүсе сеанста ҡатнашмағандар эҙәрлекләнә, ҡыҫырыҡлана. Сеанстар хәҙер — үҙенсәлекле наркотик, күптәр уға мохтаж, ун ыҙ йәшәй алмайҙар. Бына шул рәүешле "тарихи үҫештең, донъяны танып белеүҙең бейек үрҙәренә күтәрелгән планета ғәйәт ҙур төрмәгә әүерелә ине...”

Ерҙәге үҙгәрештәрҙе күреп, бөтә йөрәге менән әрнегән Тимер ҙә шул хаҡта өҙлөк өҙ уйлана. "Кешелек цивилизация ының мәнфәғәттәре, әхлаҡ ҡанундары — уның төп хужа ы. Туҡта, элек яңылыҡтар хеҙмәте Шатлыҡ әм Ихласлыҡ институты ҡарамағында ине бит, хәҙер ҙә шул тәртиптә терелтергә мөмкиндер...

Ҡапыл мине хәл еҙләнеү баҫты, ваҡиғалар ағышына ҡаршы тора алмау, бөтә урында уңлау, бер нисә кешенең тыпырсынып ҡарауынан ис ни үҙгәрмәү тура ында ҡайҙалыр йәшенеп ятҡан уй икереп килеп сыҡты ла бар булмышты әсир итте. Тарихтың ҡапыл текә боролош я ап, артҡа, түбәнгә — мәмерйәләрҙә йәшәп, йәнлек тире е ябынып йөрөгән боронғо ата-баба янына хәрәкәт итә башлағанын күргәндәй булдым..."

Артабанғы хәл-ваҡиғалар көтөлмәгән юл менән китә, сөнки Ер кешеләренә хәҙер икенсе ҡурҡыныс янай: ары планетаға оҙатылған төштәр үҙҙәренә ауыт, йәғни кәүҙә урлай башлай. Бына шул рәүешле барлыҡҡа килә игеҙәктәр. Улар кешеләргә хас булмаған сифаттарға ла эйә, шулай булма а, Ерҙә уларға ҡаршы торорлоҡ көс табылыр ине бит. Фантастик әҫәргә мөрәжәғәт итмәгән сүрәттә лә, Ер тарихында яңы кеше я ау юлында ниндәй генә тәжрибәләр я алманы! " уңғы ахмаҡлыҡ"та и ә кешелек психика ы менән тәжрибә я ау йы анда яңы заттарҙы бар итә. Системаға, хакимдарға оҡшамаған кешелек сифаттарын юҡ итеү, төп сәбәптең нимәгә бәйләнгәнлеген асыҡларға теләмәү көтөлмәгән өҙөмтәләргә килтерә. Проблемаларҙан ҡотолоу урынына, үҙҙәренең яңы хужаларын яралталар — я алма ауыттарҙа йәшәүсе хужаларҙы. Эргәндә торған зат ысын кешеме, әллә уның игеҙәгеме? Кешелек үҙ-үҙен танымау хәленә төшә бара.

өргөндән ҡайтып төшөүсе Тимер Сәйер хәлдәр комиссия ы рәйесе итеп тәғәйенләнә. Бында уны игеҙәге Иптәш көтөп тора. Иптәш — арылар ара ындағы берҙән-бер ыңғай зат. Ул Тимергә хәленән килгәнсә ярҙам итергә тырыша. Ни өсөн берҙән-бер? Минеңсә, төп герой — үҙ-үҙенә, булмышына хыянат итмәгән герой.

Уның күңеле үлмәгән, эҙләнә, яңылыша, ләкин бар булмышы менән хәҡиҡәткә ынтыла, унда намыҫ әм ихласлыҡ үнмәгән. Бына шуға ла Тимерҙе икегә бүл әләр ҙә, төп асылы менән барыбер бер бөтөн булып ҡала. Ирек еҙҙән кешелек яҙмышы өсөн яуаплылыҡты үҙ иңенә алырға мәжбүр булыуы, нигеҙҙә, шуға бәйләнгән.

Ҡояш ҡасандыр Ерҙе әләкәттән ҡурсып ҡалған була, ләкин бөтә йыа ан масштабына сыҡҡан катаклизмды ул туҡтата аламы?

"Ҡояш асыулана". Был үҙҙәр Тимерҙең теләктәше Спартак ауыҙынан өс мәртәбә ҡабатлана. Уға аңлатма ла бирә.

“– Уртаҡ ритм боҙола! Ҡояш плазма ы ла, беҙҙең йөрәктәр ҙә бер ритмда тибә бит! Техносфера бары ын да йөҙ мәртәбә көсәйтә, Библия, Ҡөрьән яҙылған замандарҙа уҡ кеше донъяла яуызлыҡ артыуының әм тәбиғәттәге катаклизмдарҙың бер-бер артлы йөрөгәнен белгән. Ул күҙлектән ҡара аҡ, бөгөнгө хәл – ахырзамандың иң ысыны!”

Оҙаҡ та үтмәй, былар бары ы ла раҫлана: Ергә төшә барыусы Ай. Донъя ҡубарып болғанышҡан халыҡ хәҙер бер йүнәлешкә баға – уның күҙе бары тик Йыа анға төбәлгән. Ер шарында йәшәүселәрҙең уңғы тапҡыр бер бөтөн әм бер күҙ булып берләшеүе. Улар Йыа анға түгел, ә, бәлки, ахырзаманға бер күҙ булып төбәлгән. Сәйер берләшеү. Кешелектең уңлаған берләшеүе. Ә тарихта күп мәртәбәләр булған бындай уңлаған берләшеүҙәр. Быны ы инде – ысынлап тороп уңғы берләшеү. Шул сик еҙлектә әм билдә еҙлектә кешелектең урыны асыҡлана ғына бара...

"Ахырзамандың нәҡ ошо рәүешле килерен берәй е күҙ алдына килтерҙеме икән, тип үҙ-үҙемә орау бирҙем дә, көлөм өрәп, баш сайҡаным, юҡтыр, ундай дөрөҫ күрәҙәлек тәрән фекер йөрөтөү өҙөмтә ендә тыуа, ә беҙ әр йә эттән елбәҙәк булдыҡ, төймәләй эшебеҙҙе дөйәләй итеп күр эттек әм шуға үҙебеҙ ҙә ышандыҡ. Ана, ата-баба ҡорал ыҙ, уғыш ыҙ йәшәү эра ын тантаналы иғлан иткән, ә иң хәтәр дошмандың кеше күңелендәге яуызлыҡ икәнен аңламаған....

Туҡта, тип өҙҙөм мин ғәйепләүҙәр сылбырын, Психолог кешелектең күсенеү ихтималы, шул маҡсатта планеталар айлап ҡуйылыуы хаҡында өйләй ине. Яҙайоҙа бул а ла шуны үҙеңдең элек тә ишетеп ҡалғаның бар. Тимәк, киләсәкте күрә белгән ин әрләгән ата-баба, ин хурлаған замандаштарың, ин үҙең ҡайҙа инең? Әгәр килеп еткән әләкәт сәбәптәре кешелек эшмәкәрлегенә бәйле икән, шул бәйҙе өҙөү өсөн, ваҡиғалар ағышын бороу өсөн үҙең, йә, нимәләр эшләнең?"

Ни өсөн повесть геройы бер нисә йөҙ йыл аша артҡа икерә? Ни өсөн егерменсе быуаттың иң ахырына барып эләгә? Тимерҙең "И-их, ваҡыт... куберәк... эләкмәне!.."– тигән уңғы үкенесле үҙҙәрен иҫкә алғанда, ҡай ы бер нәмә аңлашыла кеүек. Ләкин орауҙарға тулы яуап биреүҙе маҡсат итеп ҡуймай автор, кире енсә, быны уҡыусы ына ҡалдыра. Егерменсе быуатты айлау осраҡлы күренеш түгелдер бит? Ахырзаманды тыуҙырыусы төп сәбәптәр шунан башланамы, юғи ә? Бәлки, ахырзаманды булдырмау мөмкинлеге тик шул быуат аҙағына бәйләнгәндер? Эйе, геройға ваҡыт бирелә. Нимәнелер үҙгәртергә уның хәленән килерме, ваҡытты файҙалана алырмы? Әллә уйлағандары килеп сыҡмағанда әҙәм бала ы аҡланыр бер сәбәп кенәме ул "ваҡыт" тигәнебеҙ? Кем ул ваҡыт эсендә әҙәми зат? Әллә Тимер үҙе ваҡыт эсендәге ваҡытмы? Быларға тулы яуап юҡ, уҡыусы ораясаҡ әм үҙе яуап бирәсәк. Яуап бирергә кәрәктер, беҙ бит шул заман эсендә йәшәйбеҙ.

Был үткән заманда Тимер, хәҙер инде ул яҙыусы, башкөллө эшкә сумырға ниәтләнә. Ләкин эскесе күрше е көн айын, сәғәт айын тиерлек маҙа ыҙлай. Уны ваҡлыҡ эсенә сумдырыр, меҫкен кеше хәленә төшөрөр өсөн бик "тырышлыҡ" ала. Сөнки ул үҙе – йәшәү мәғәнә ен юғалтҡан әҙәм. Ул яҙыусының күләгә е ымаҡ. Ни ҡәҙәр ҡамасаулыҡ итер, ни ҡәҙәр яра ына тоҙ алыр, маҡсатынан тайпылдыра

алырмы – был орауҙар ҙа асыҡ ҡала. Ә бит оло маҡсатлы ижадсыларҙы тотҡарлаған, уларға яла яғып, эшлектән сығарырға маташҡан кешеләр әр саҡ булып торған. Үҙебеҙҙең ҡай ы бер әҙиптәребеҙ яҙмышы ла – шуға асыҡ миҫал. Ижадсы фажиғә е – заман фажиғә е кәүҙәләнеше лә ул.

Фантастик повестың авторы Булат Рафиҡов геройын үҙ заманына юҡҡа ғына алып ҡайтмай. Бының менән ул әр кеше, әр әҙәм бала ы үҙ заманы өсөн яуаплы икәнен аңғарта. Заман — иңә бирелгән ваҡыт.

Үҙенең фантастика ында Булат Рафиҡовтың икенсе ғүмере бар, тип әйтә алам. Сөнки тап ошо жанрҙа донъяға, кешелеккә, йәмғиәт ҡоролошона, халҡына булған ҡараштар система ы тәрәндән асып күр әтелә. Рәсәйҙәге бер тәнҡитсе баҙар үҫешенә баҫым я алған Көнбайышта киләсәкте үрәтләгән сценарийҙарға конкуренция ы барлығын раҫлай. Беҙҙең үҙебеҙҙә лә киләсәк тура ында уйланған әм уны иҫкәрткән яҙыусылар юҡ түгел, ләкин ара ында Булат ағайҙың исеме тәүге урындарҙың бере ендә торасаҡ. Бөгөнгө проблемаларҙы иртәгә ҡалдырмаҫ өсөн, хаталарҙы төҙәтеп йәшәр өсөн " уңғы ахмаҡлыҡ" повесын ҡайта-ҡайта уҡырға кәрәк.

***

Беҙ Булат Рафиҡовтың тәүге фантастик әҫәрҙәрендә Йы ан цивилизация ы менән аралашыу, кешелектең яңы баҫҡысҡа үрләүен әм икенсе планеталарҙы катастрофанан аҡлап ҡалыуын, фәнни-техник үҫештең ниндәй ҡаҙаныштарға килтереүен күрҙек. Прогресс – донъя цивилизация ының иң көслө ҡоралы. Автор үҙ уҡыусы ын быға ышандыра. Үҙе лә Намыҫ әм Ихласлыҡ институтына ышана. Йылдар үтә. Утты- ыуҙы кискән әҙип донъяға тәрәнерәк ҡараш ташлай. Ул инде кешенең рухына, күңеленә, мейе енә үтеп инә. Катастрофаның икенсе планетала түгел, үҙебеҙҙең күңелдә яралғанын күреп иҫкәнә. " уңғы ахмаҡлыҡ"та беҙ Ер кешеләренең рухының нисек зәғифләнгәнен, яҡшылыҡ менән яманлыҡты айыра алмаҫ хәлгә еткәнен әм ялғандың, игеҙаяҡ ымаҡ, әҙәм бала ы күңелен ялмап алғанын күрәбеҙ. Бындағы Шатлыҡ әм Ихласлыҡ институты төп асылын юғалтҡан. Бөтөн фән ҡаҙанышы кешелекте тамырынан ҡоротоуға табан алып бара. Тарковскийҙың фантастик фильмдарының төп тема ы – рухи ҡиммәттәрҙең әләкәтен күр әтеү. Булат Рафиҡовтың был повесында ла кешелек ошондай әләкәт алдында тора. Төп геройҙың эске әм тышҡы бәрелеше бөтә тәрәнлегендә асыла. Әйткәндәй, төп геройҙың исеме лә Тимер – шул уҡ Булат тигән мәғәнәне лә үҙ эсенә ала бит әле. Уйланырға, ығымта я арға нигеҙ бар ымаҡ: тимер утта сынығып ҡына ҡороҫҡа, ысын булатҡа әүерелә лә ба а. Катастрофа, әләкәт аша үткән геройҙың рухын да бер ниндәй ҡара көс ҡаҡшата, юҡҡа сығара алмаҫ.

Авторҙың геройҙары менән беҙ иге-сиге булмаған Йы анда булдыҡ, үҙебеҙҙең хыял барып етмәҫ планеталар менән таныштыҡ. Ик еҙ-сик еҙлек беҙҙең күңелдәргә ғәйәт аңлайышлы төшөнсә булып килеп инде. Уларҙағы тормош шул тиклем асыҡ күҙ алдына килде. Автор, гүйә, Йы анды ус төбөнә алып күр әтте. Беҙ бер бөтөн. Беҙ яңғыҙ түгел. Беҙ ҙә Йы ан өсөн яуаплы. Ул да беҙҙе белә, таный. Бына шулай башлана яҙыусының фантастикалағы икенсе ғүмере.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**



**Шакир СӘЛИМ**

## Уҡыусыма

*Был китап ижадымдың уңымы, урта ымы,*
*Бәлки, шәрбәтелер, бәлки, турта ы.*
*Бәлки, ҡайнатманың тәм еҙ урпа ы,*
*Уҡыусым, уны ын үҙең ба ала.*
*Ул юлдарҙан берәүҙәр таныр үҙҙәрен,*
*Берәүҙәр, таң ҡалып, шар асыр күҙҙәрен.*
*Форсатым булғанда яҙҙым сын үҙемде, –*
*Тәҡдир кәфенен ин үҙең бесер ең.*
*Кистәрен яңғыҙым, тик үҙем ҡалғанда,*
*Ил амым усағы бер үнеп-янғанда,*
*әр ваҡыт ҡәләмем ҡулыма алғанда,*
*Самими уҡыусым, тик ине уйланым.*
*Мең төрлө шөб әләр йәнемде саҡҡанда,*
*Өмөт өҙ тәнемдең ҡан-тире аҡҡанда,*
*Ғазраил алдыма ап-асыҡ баҫҡанда,*
*Уҡыусым, тик ине, тик ине уйланым.*

---

*Шакир Сәлим 1942 йылда Ҡырымда, Бөйөк-Ас ауылында, тыуған. 1944 йылда, 2 йәшлек кенә сағында, ата-әсә е менән тыуған еренән Үзбәкстанға депортациялана. 6 йәшендә әсә енән ҡала. Малайҙы өлкән апайҙары тәрбиәләп үҫтерә.*

*1972 йылда Сәмәрҡәнд дәүләт университетының рус филология ы бүлеген тамамлай. Күп йылдар Сәмәрҡәнд радиокомитетында радиотапшырыуҙар редакция ында эшләй. Ташкентта ҡырым татар теләндә сыҡҡан «Ленин байрағы» гәзитендә хәбәрсе була. Ҡырым татар телендә баҫылған бик күп шиғри китаптар авторы. Рус, төрөк, үзбәк, башҡорт, татар, поляк, украин классиктарын ҡырым татар теленә тәржемә иткән.*

*1997–2008 йылдарҙа ҡырым татар телендә Украинала сыҡҡан "Йылдыз" әҙәби журналының баш мөхәррире йөгөн тарта.*

*Күп йылдар ҡырым татарҙары (Симферополь– Ҡырым) Яҙыусылар союзының рәйесе вазифа ын башҡара.*

*Шағир иҫән саҡта донъя күргән "Къырымнаме" китабы Симферополдә 2005 йылда баҫыла.*

*Шакир Сәлим әҫәрҙәре бик күп телдәргә тәржемә ителгән. Ул үҙе лә төрки телдәрҙә ижад иткән бик күп яҙыусылар менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итеп йәшәне.*

*Шакир Сәлим, бик оҙаҡ ауырығандан уң, 2008 йылда донъя менән хушлашты.*

*Беләмен, көндән-көн аҙая хаҡтарың,*
*Тел белмәй, тамырҙан киҫелә сафтарың.*
*Теле юҡ милләтме халҡыбыҙ хәҙерҙән?*
*Аталар рухы бит юйыла хәтерҙән.*
*Чобан-заде*быҙҙы уҡый алма аң,*
*Номан-заде*быҙҙы уҡый алма аң,*
*Үҙ тыуған йортоңда кем ең ин, ни ең ин?*
*Әжәл түшәгендә ятҡан милләт ең...*

## *Сәс ағарҙы*

*Тағы бер йыл күсте, ғүмерҙәр ҡыҫҡарҙы,*
*Күңелемде яҡты бер ағыш алды.*
*Сәбәбен еҙгә лә өйләйем, дуҫтарым,*
*Башымда бер нисә сәсем ағарҙы.*

*Хәҙер аҡ сәстәр модала икән дә,*
*А , замандан арттараҡ барамын.*
*Ҡап-ҡара мыйыҡлы, ҡап-ҡара сәсле*
*Йәп-йәш егеттән көнләшеп ҡаламын...*

*Күпме йыл йәшәнек йыраҡта төп йорттан,*
*Хәсрәтлек ғүмере — ямандан-яман.*
*Сит елдәр өшөттө беҙҙең дә күңелде,*
*Башыбыҙ эйелде ҡайғынан тамам.*

*Золомға яу булдыҡ, яманға тау булдыҡ,*
*Теленде бәғер, ағышы арғайтты .*
*Ә минең ағарған бер сәсем ни инде?*
*Был хәлдәр милләттең сәстәрен ағартты.*

*Ә бөгөн ни күрәм, милләтем алдында —*
*Яҡтырҙы өмөт, яҡтырҙы ҡараштар!*
*Сәстәрҙең саллығы йөҙҙәргә нур өҫтәй,*
*Йәшә ен ватанда салланған баштар!*

## *Туған йөҙ*

Сигара тартып ултырған ҡарт рәсеменә ҡарап

*Ниндәй уй талдырған йәнкәйен был ҡарттың,*
*Ниндәй уй тулғана уның сал башында?*
*Бер урым төтөндөң ләззәте ни сама?*
*Ниндәй ғәм менән ул был ғаләм ҡашында?*
*Шул хәтлем килешә ҡаракүл ҡалпағы!*
*А , уның балҡыуы — әҙәмгә дан бер ын,*
*Ҡартайыу ҙур бәхет үҙеңдең Ватанда,*
*Тик инең күргәндәр әйләнеп ҡайтма ын.*
*Тик миңә, тик миңә таныштыр хисегеҙ,*
*Ят белмәҫ ул серҙе, аңлауы ҡыйындыр.*
*Балалар дауамы — был ҡайнар ҡанығыҙ.*
*Бар улыш, бөтөн уй — еҙ тыуған Ҡырымдыр!*

** Чобан-заде, Номан-заде — ҡырым татарҙарының бөйөк шағирҙары.*

# *Мине хәтерләмә*

**Романс**

*Мине хәтерләмә артыҡ, ялбарам,*
*Хәтер нимә? Бер буш саралыр.*
*Эх, ин, ғүмер буйы төҙәлмәҫ ярам,*
*Онот, юҡ а йәнең ҡаралыр.*

*Ваз кискәнмен инде үткәндәрҙән,*
*Ғүмер итәм осор ҡош ымаҡ.*
*Сәстәремә яҙмыш ипкән ҡарҙар*
*ис иремәй торған ҡыш ымаҡ.*

*Иҫтәлектәр дошман беҙҙең өсөн,*
*әммә е лә үтә, иншалла.*
*Хәтер төптәрендә үкенестәр,*
*Ғәфү итер беҙҙе тик Алла.*

*Иҫтәреңә бик йыш алма мине,*
*Хәтер ни ул... Бер буш саралыр.*
*Яраларым минең төҙәлге еҙ,*
*Ҡағылыр ың — йәнең ҡаралыр.*

# *Сәпсек*

*Бөгөн ҡара таңдан уяндым,*
*Уяндым да мин хайран ҡалдым.*
*Йән йыуатыр бер кем юҡ янда,*
*Тар донъяла бер яңғыҙ ҡалдым.*

*Бәғер ыҙлай, ауыр уланым,*
*Ә бер сәпсек моңон өләште.*
*Тәҙрәнән килгән ошо моң*
*Эйә енән сик еҙ көнләштем.*

*Ауырыу әм ғүмер боролма ы*
*Ни икәнен белмәй сүл ҡошо.*
*ағыныу йә айырылыуҙан сикмәй,*
*Ҡаулан сүлдә кисә яҙ, ҡышын.*

*Ҡош саҡыра гүзәл илемә,*
*Моң арҡылы йәшел күлемә.*
*Мин өндәшәм хәл еҙ шыбырлап:*
*Юҡ, ҡайтмайса булмаҫ сүлемә.*

# *Инсанға*

*ин Ҡояшҡа оҡшама —*
*Ул төндәрен нур бирмәй.*
*ин Айға ла оҡшама —*
*Ҡояш ҡалҡ а, күренмәй.*
*Оҡшама ин йондоҙға,*
*Нурҙары иллә үнер.*
*Янар тау булма ҡыҙған —*

*Унан да ҡалыр күмер.*
*ин даръяға оҡшама –*
*Уның юлы киҫелер.*
*Аҡҡан ыуҙай йәшәмә –*
*Ҡәҙер күрмәй эселер.*
*Оҡшама ин, оҡшама ин:*
*Ипкен иҫкән елдәргә.*
*Ул түгелме хафаларҙан*
*Ғәм килтергән илдәргә?*
*Оҡшама ин сәскә-гөлгә,*
*Гөл ғүмере ҡыҫҡалыр.*
*Күҙең ҡыҙма ын былбылға –*
*Ҡош бәхете башҡалыр.*
*Диңгеҙҙәргә оҡшама ин –*
*Йә тулҡыныр, йә шашыр.*
*Ҡар-буранға ла оҡшама –*
*Бәхет-өмөт ҡарышыр.*
*әр мөғжизә ерҙә-күктә,*
*әр ҡай ы ы йәшә ен.*
*ин уларға оҡшама тик,*
*Улар иңә оҡша ын!*

## *Дала ҡыҙы*

*Арыуҙың ул ни икәнен аңламаҫ,*
*Эстән генә яныр-көйөр – иламаҫ.*
*Ҡырҡ көн буйы матәм төҫөн кейенмәҫ, –*
*Дала ҡыҙы йөрәгемде тетрәтте!*
*Билен быуған, ә маңлайы киң икән,*
*Сулпан менән уяна ул әр иртән.*
*Ғаиләлә үнмәй янған бер мейес, –*
*Дала ҡыҙы йөрәгемде тетрәтте!*
*Аяғында резинанан итеге,*
*Буяу күрмәҫ ҡаштары әм керпеге.*
*Былай ҙа бит «ҡыпсаҡ» нуры төҫ бирә, –*
*Дала ҡыҙы йөрәгемде тетрәтте!*
*Сүлдең еҫен күкрәгенә еңдерер,*
*Халыҡтарҙы тоғро юлға күндерер.*
*«Ҡатын түгел, ирмен!» – тиеп көлдөрөр, –*
*Дала ҡыҙы йөрәгемде тетрәтте!*
*Тәне тығыҙ, бите – бешкән икмәктәй.*
*әнәк тотоп яҙын бесән өймәкләй.*
*Ә ҡыштарын йөн тетә лә йөн иләй, –*
*Дала ҡыҙы йөрәгемде тетрәтте!*
*Әрем кеүек, даланың бер нағышы,*
*Татлы була яраштырған әр ашы.*
*Уның ире бәхетлелер – көнләшәм,–*
*Сүл ҡатыны йөрәгемде тетрәтте!*
*Тик хеҙмәттә белә ғүмер зиннәтен,*
*Үҙ-үҙенең белмәҫ ҡәҙер-ҡиммәтен.*
*Раббым, аҡла! Уға яман теймә ен.*
*Дала ҡыҙы йөрәгемде тетрәтте!*
*Ҡай ы ваҡыт уға хайран ҡаламын,*

*Ғаиләләге игеҙенсе баламын.*
*Далаларҙа күңелгә йәм аламын,*
*Дала ҡыҙы йөрәгемде тетрәтте!*
*Мин бәхетле, ғүмерем дә бәхетле,*
*Мине лә бит шундай ҡатын тыуҙырған,*
*Әүәләгән мине дала ононан,*
*Дала еле сыныҡтырған уңынан...*
*Дала ҡыҙы йөрәгемде тетрәтте!*

## *Шағир бул аң*

*Шағир бул аң – йәш бул ин,*
*Шағирҙарға баш бул ин;*
*Ауыр көндә халҡыңа*
*Рух биргән юлдаш бул ин.*
*Шағир бул аң, ҡәләмең*
*Ҡылыстан киҫкен бул ын,*
*Шиғриәтең – әләмең,*
*Бурандай азат бул ын.*
*Шағир бул аң – үҙ менән*
*Ғашиҡ Ғүмәрҙәй бул ин,*
*Яҙмышыңа яҙғандан*
*Артыҡ өнәрле бул ин.*
*Шағир бул аң, остаздарың*
*Эмре, Заделар* бул ын,*
*Яратҡан шағирҙарың*
*Халыҡсан, ябай бул ын.*
*Шағир бул аң, Туҡайҙай*
*Гөрөлдәп ян да бер үн;*
*Ант иткәндең анты өсөн*
*Герайбай* кеүеккә күн!*
*Шағир бул аң – тауышың*
*Былбылға ҡуй ын ҡанат;*
*Бөтөн нәфсе-хисеңде*
*Тый ин халыҡҡа ҡарап.*
*Каруандың да лаф орған*
*Эттәренә ҡушылма;*
*Тере йәндәр йәнеңде*
*Ҡыйнағанға ҡуш булма.*
*Шағир бул аң, йортоңда*
*ине аңлаусың бул ын;*
*ин киткәндә артыңдан*
*Янып, илаусы бул ын.*
*Эй, ин, ҡәләм оҫта ы,*
*Ғазаптарҙан аян аң;*
*Тыуған Ҡырымың кеүек*
*Сал Сатырға таян аң, –*
*Шағир бул аң – ул бул ин,*
*Тик халҡыңа ҡол бул ин;*
*Үҙ йортоңдоң күгендә*
*Балҡыған йондоҙ бул ин!*

---

**Ю.Эмре, Чобан-заде, Лятиф-заде, Шемьи-заде – XIII быуатта йәшәгән шағирҙар.*
**Герайбай – билдәле ҡырым татар шағиры.*

# *Йөклө ҡатын*

*I*

*Төн ҡара ын,*
*Төн аҫылын*
*Иҫләтәлер*
*Йөҙөңдәге йомшаҡ*
*Ҡуңыр таптар.*
*Көн яҡты ын*
*Хәтерләтә*
*Күҙҙәрендәге наҙлы*
*Нурҙар –*
*Ғорурҙар.*
*Ила и йөҙ,*
*Яҡты ҡараш –*
*Йомшаҡ ҡына*
*Атлап килә*
*Йөклө ҡатын,*
*Аңлай ул йәшәү ләззәтен,*
*Уның татын.*
*Атлап килә*
*Йомшаҡ баҫып*
*Йөклө ҡатын.*
*Бәғерендә – ярала,*
*Йәненә йәм ала –*
*Әле донъяға*
*Килмәгән инсан.*
*Уны уйлай*
*Йөклө ҡатын.*
*Уны ҡайғыртып*
*улыш ала тын.*

*II*

*Күптән әҙер*
*Аҡ биләү,*
*Таҫтамал,*
*Суҡлы башлығы,*
*Нағышлы юрған...*
*Бәғерҙә – ярала,*
*Йәненә йәм ала –*
*Әле донъяға*
*Килмәгән инсан.*
*Уны уйлай,*
*Уны ҡайғырта*
*Алған айын тын –*
*Йөклө ҡатын:*
*«Кем буласаҡ?*
*Ҡыҙмы?*
*Улмы?*
*Ләйләме,*
*Гөлнарамы?*
*Йә Рөстәм, Хәсән?*
*Эх, кем бул а ла тыу ын!*
*Тик башы өҫтөндә*
*Ҡояш үнмәгән*
*Бер инсан бул ын!»*
*Татлы хыял,*
*Татлы теләк.*
*Татлы ниәт,*
*Татлы тойғолар*
*Йөклө ҡатынға*
*Ни ҡәҙәр килешә!*

*III*

*Үҙен уйламай*
*Ул ҡатын.*
*Уйламай – күҙҙәре*
*Ниҙәр күрәсәген...*
*Уйлай ул бәғерендәге*
*Яралған киләсәген.*
*Был донъя ниндәй ба а,*
*Нимәләр бирәсәген.*
*Күтәрәсәкме*
*Баланың ҡулдары?*
*Күҙҙәрендә*
*Уянасаҡмы*
*Ҡояштың шәфәғе?*
*Тыныслыҡ табасаҡмы?*
*Йөрәгенә инәсәкме*
*Аяттың ауазы?*
*Бәғерендәге ауыр*
*Йөктө генә түгел,*
*Шул орауҙарҙы ла*
*Йөкләгән ҡатын*
*Килә юлдан!*
*Килә юлыбыҙҙан!*
*Уның был йөгөн*
*Еңеләйтер сара,*
*Инсандар,*
*Инсандар,*
*Беҙҙең ҡулыбыҙҙа!*

**Гөлназ ҠОТОЕВА тәржемәләре.**

**Ғәли**
**ИБРА ИМОВ**

# КИЧЙӘ

**ТАРИХИ РОМАН**

**III китап**

## БҮГӘСӘҮ БАТША АНАТЫ

**Дүртенсе бүлек**

### "Салауат та тигән ир..."

1

Салауат ҡайтып бара. Янында — ҡошсо Ба ау, Рәхмәт Сурағол улы, быуайы Сағыр, унының улы Истыбай. Юлда тағы кешеләр ҡушылды. Тауҙан таш артмай.

Юлда Архангель заводынан арттан ҡыуалар. Салауаттың көсө аҙ. Аттары шәберәк. уғышырға кешеләре бик аҙ. Салауаттың яралары ла уңалмаған.

Буран епертә. Юл сата ында — маяҡтар. Шуларҙы алып, насар яҡҡа күсертә.

— Төлкөнө ҡойроғо аҡлай. Бүре етә яҙ а, ҡапыл борола, ҡойроҡ икенсе яҡҡа елтәнә.

Ҡыуғы алдаттар артта ҡала.

...Йырлап ҡайтып төшәләр.

*Салауат менгән кир аттың*
*Күкрәк-түшкәйҙәре киң икән.*
*Яуҙарға әйҙәп сапҡан осҡор —*
*Салауат та тигән ир икән.*

Ҡайтып етәләр. Әсә е, ҡатындары шатлана. Ә яралары — ҡолаҡсынды алғас та, ул ҡолағы аҫтында, битендә. Уң ҡулы йәрәхәтле, арҡа ында ла беленә.

Ата ы борсолған. Улы ниңә ҡайтты? Яу юлы ерекмәнеме? Бөтә ен өйләшергә, әллә батша тигәне... күңеле ятманы. Бик күптәр бағына, тиҙәр. Ҡәлғәләрҙәгеләр итәғәт итә. өйлә ен әле. Салауат үҙҙе икенсегә борҙо:

— Атай... Ә хәҙер ин... полковник Юлай Аҙналин! Бына иңә батша хаты! — Шунын менән бөтә е аңлашылды.

---

*Башы 3—6-сы андарҙа.*

Ул Бүгәсме, батшамы, тип орарға йыйынғайны.

Эйе, “полковник Юлай әфәндегә” тип башланған. Хатта әйтелгән нимә эшләргә кәрәк. Тик улы ҙурын әйтер. Хәҙер үк.

— Ҡонҡас сәсән әйткәнсә, оран алырға кәрәк!

— Оранды алдығыҙ. Унық тауышы килеп етте.

Әлбиттә, Юлай тик ятмаған. Башҡа иләүҙәрҙә лә көс туплағандар. Эҫем заводының эшкә килтерелгән крәҫтиәндәре заводты алғандар. Усть-Ҡатау, Ҡатау-Иван, Йүрүҙән заводтарын да ярлы-ялпы алған. атҡы, Златоуст заводтары тирәендә яугир башҡорттар тупланған.

Ана шуларҙы бергә тупларға кәрәк буласаҡ унық улына.

— Яраларың бер көйсә уңал ын.

— әй, батыр яра ыҙ буламы?!

Төн тынғы ыҙ. Талпына. Балалары ағынған, бисәләре ағынған. Бергә аш- ыу әҙерләнеләр. Ә кис йоҡлар алдынан икегә ултырыуы булды, балалары ырылды. Алдына ултыртты. Бисәләре ике е лә ҡаршыға баҫты.

— Әминә, айран бир.

Килтерҙе. Салауат уң яҡтан урын күр әтте.

— Гөлбәзир, ҡана, ҡурайымды әпир.

Алып бирҙе. ул яғынан урын күр әтте. Ике е лә унық ботона тер әктәре менән таянды. Салауат ҡурай тартып ебәрҙе. Бер туҡталғанда Әминә әкрен генә йырлай:

*Салауат менән туры аттың...*

Ул әкрен генә йырлай, ҡәйнә е менән ҡайны ына ишетелмә ен. Гөлбәзир нығыраҡ:

*Маңлайында булыр урайы.*
*Салауат та батыр йырлағанда*
*Уң ҡулында булыр ҡурайы.*

Салауат ҡулдарын уларға ала. "Үҙҙәре ағынған. иҙелә. Бергә йырлайҙар".

Бөтә е онотолдо. Улар бергә. Бер икелә, бергәләшеп. Ҡыҫҡа бәхет.

Икенсе көн иртә үк:

— Юҡ, көтөп булмай. Хәҙер беҙҙе килеп баҫалар, — тине батыр.

Әлбиттә, Салауаттың теге яҡта икәнен беләләр. Әле Ҡолой Балтас үҙенең туғаны Сәғит менән килде.

— Улың атлыҡ, — ти. — Беҙ батшаға хеҙмәт иттек. Ә улың. Кеше ебәр. Ҡайт ын, — тигәйне.

Ниңә уны ебәрҙең, тип ҡыҫмаҡсы. Улар килер. Килеүҙәренә көс бул ын.

Дөрөҫ иҙенделәр. Егеттәр йыйыла. орашалар.

— Батшамы?

— Петр Федрич. Батша ы ағзам хәҙрәттәре.

— Нимә ти?

— Беҙгә ирек бирә. Ерҙәрҙе ҡайтара... Дин дә, йола ла үҙебеҙҙеке. Бөркөт булып осабыҙ, тарпан булып еләбеҙ.

Кешеләр килә. Ул батша манифесын уҡый. Ата ы кешеләр йыя. Әсә е аҙыҡ-түлек әҙерләтә...

Үҙ ауылында уҡ уны ҡамарға килделәр. Тотоп бирергә иткәндәр. Алыш. Улар көс йыйып өлгөргәйне.

Салауат еңә. Тегеләре өйгә бикләнә. Сыҡмайҙар. Яндыра.

Кис. Төн тынғы ыҙ. Ҡатындары.

Былар ғына аҙ.

— Үҙҙәре киләләр бит.

— Улай тиҙ булмаҫ. Күп килмәҫтәр. Йыйырға. Бүре килгәндә лә өрән алып,

бөтә тирмәләрҙән йыялар.

Эйе, Юлай ҙа белә. Батшалар, королдәр ҙә ғәскәрҙе фарман, указ ебәреп йыя. Тыңлама алар... тыңлатырлыҡ көс ҡулланыла. Ана, кисә улы кеүек... Әйҙә, ҡулы ныҡ бул ын.

Сотниктарға ҡуша Юлай, Салауаттың дуҫтары китә. Губернатор, воевода офицерҙар ебәрә ине. Хәҙер үҙҙәре ебәрә. Петр батша ҡушҡан. Берәү – Урман-Көҙәйгә, икенсе е – Төркмән-Көҙәйгә, Бүләкәй-Көҙәй, Әйле яғы иләүҙәре. Ләмәҙгә, Ҡарағай, Мәләкәҫ, Йыланыш, Тәүрә яҡтарына барғаны бар... Яуға, яуға! әр йорттан – бер атлы яугир, яуға яраҡлы ис кем ҡалма ын!

— Батша фарман биргән, Салауат полковник шуға бойора.

Йыйын йыйырға (яҡын ауылдан).

— Мин, Юлай полковник, бойорам: бағынырға, итәғәт итергә...

Шунда уҡ Юлай – икенсе ауылға. Бөтә е бер-бер булып берегә.

— Бүреләр тупланым, алай булмаҫ.

Ҡушар ат. Бары тимер күлдәк, булмағаны йөндән ҡалын итеп бәйләнгән күлдәк, башта — торҡа.[1]

Аҙыҡ. Тиҙ-тиләмән ҡайтыу юҡ. Юлай йортта туплана. Салауат йөрөй.

Әбдрәшит Чекеев яҫауыл унң янында, Әбдрәшит ҡайтып килә йырлап, көс йыйып.

*Салауатҡай менгән атына,*
*Сығып китте башҡорт иленә.*
*Салауатҡай ҡырҙы дошман яуын,*
*Булат ҡылысы унң билендә.*

Салауатҡа ҡаршыға килә Әбдрәшит.

— Зөләйха йыйып ебәрҙе. Үҙе лә килә. Еҙнә е килә (Ҡолой).

Зөләйха әйтә:

— Үҙең генә бар. Ул да үҙе генә.

Салауат — Ҡолой осрашыуы. Ҡолой тәүҙә уҫал ҡылана. Зөләйханы бирәм, ти.

Ҡылыстары саҡ ҡына кәкре. Еҙ аплы. Тотҡа ында арыҫлан башы, ҡыны ваҡ таштар менән биҙәкле.

Салауат әйткәндә, ҡылысына тотона. Салауат та...

Зөләйха килеп сыға (күҙәтеп торған):

— Ҡылысҡа ышанып килдеңме?

Ҡолой:

— Йә, күрҙеңме дәғиҙе?

— Шулай ти еңме? Күрҙе...

*Урмандағы алпанлап*
*Умарта ватып йөрөгән*
*Айыу тип беҙ анаған*
*Айыу түгел икән дә.*
*Урмандағы мәсе күҙ*
*арыҡ быуып йөрөгән*
*Тупаҡ ҡойроҡ, күк ыртлы*
*Бүре түгел икән дә.*

Ҡолой:

— Ҡайҙа уға айыу, ҡайҙа бүре булыу. айыҫҡан бит ул. айыҫҡан дау күтәрер. Уға турғайҙар эйәрер.

Ҡолой китә.

*[1] Торҡа – уғышта кейә торған ҡорос баш кейеме.*

Зөләйха ҡала. Аҙыҡтар килтерә, мал.

Юлай хаттар яҙҙырта. Баҙарғол Юнаев, Юламан Ҡушаев, үҙҙәре Юлайға яҙған.

Был яҡта 19 старшина. Ете е Салауатҡа килә, өсәү е ярҙамсыларын ебәрә.

Салауат тәүҙә Эҫемдәге Көрөк заводына бармай йәне түҙмәне.

Салауат Рәхмәткә әйтте:

— Әйҙә, Көрөк заводына. Унда инең теге мәрйә...

Баралар. Ҡаршыға отряд.

— Ана, киләләр, әйҙә.

Салауат иҫкәртә:

— Ышыҡҡа инәйек.

Дошманды күреү менән бойға ташланмайҙар (ҡарау, алдау, урын, ваҡыт — бөтә е лә мө им). Былар — рустар. Ҡушылалар. Заводта осрашыу. Дуҫлашыу.

Рустар уҡрана.

— Бай беҙҙе тыуған ерҙән айырҙы.

— еҙ – ирекле хәҙер. Бергә йәшәрбеҙ.

Завод ҡапҡа ы асыҡ. Яугирҙар инә. Салауат уларҙы киҫәтә:

— Өйҙәргә, малға йоғонмағыҙ. Сиркәүгә яҡын булмағыҙ.

Ә рустарға:

— Сиркәүгә аҡ ҡуйығыҙ. Ситтәр инмә ен.

Халыҡ ҡурҡа-ҡурҡа сыға. Сход. Манифест уҡый.

— Беҙ, крепостнойҙар, нишләйбеҙ?

Салауат:

— еҙ хәҙер ирекле казактар! Башҡорттар ҙа казачийҙар.

Лавка, кабак. Ҡаҙна. Контора.

Салауат:

— Асығыҙ! Ҡаҙнамы? Батшаға кәрәк. Батша үҙе йыраҡ. Чесноковкаға. Уның фельдмаршалы Иван Зарубинға.

Ҡурҡалар. Юл да алыҫ.

— Салауат, ин үҙең ал да... Ебәр конвой менән.

— Конвой — үҙегеҙ... Минең ваҡыт юҡ!

— Аҡса ы шулай... Ә купчийҙары, бурыс ҡағыҙҙары?

— Яндырығыҙ! Шайтаныңамы хәҙер? Завод еҙҙеке бөгөндән. аҡлағыҙ. Приказчиктар яндыртма ын. Батшаға ҡорал я ағыҙ, — тип бойорҙо Салауат.

Салауат бынан ике туп, дары алып китә.

— Бына аҡыллы әйтте. Беҙҙең батыр, — тиҙәр әммә е лә.

Ата ы саҡыртты улын. Улы ҡайтҡас, күңеле булды. Ҡасандан бирле килгән теләк, хыял. Ерҙә — үҙең хужа... Рустарға ла ер етә. Бына шулай ғына ла бит...

Ата ы әйтә:

— Бына Батырҡайҙан хат. Йыйылғандар ҡошсолар. Старшина Илсеғол Этҡолов[1], старшина Иҫекәй Садыров.[2] инең ҡайтыуҙы ишеткәндәр. Уларға батша манифесы кәрәк. Көнгөргә ябырылырға самалайҙар. ине саҡыралар.

Саҡыралар! Хәбәр ишетелгән. Ул ғынамы... Ҡайтыуына уның хаҡында хикәйәттәр тыуған, йырҙар сыҡҡан...

Ләкин уны ы түгел, Көнгөр яғы ҡыҙыҡ ындыра әм ым ындыра. Эйе. Шул яҡты нығытып алыу фарыз. Сарапул, Красноуфимск, Көнгөр... Ә унан инде...

— иңә шунда барыу кәрәк, — тине ата ы.

— Ә бында?

---

[1] *Илсеғол Этҡолов — Себер даруға ы Ҡошсо олоҫо старшина ы, б. к. полковнигы.*

[2] *Иҫекәй Садыров — Себер даруға ы Ҡошсо олоҫо старшина ы, б. к .*

— Бында мин ҡарармын. Тегеләй Баҙарғол, Юламан да бар. Кәҫле, Ҡыштым тирә ендә мишәрҙәр күп, Силәбегә уҡталалар. ары Абдуллин[1] старшина ла шунда. Грязнов бар а, алалар Силәбене лә. Беҙгә унан ҡурҡыныс юҡ. Унда — Грязнов, Туманов килгеләй.

— Ҡарарбыҙ...

2

Салауат күрәнендә байтаҡ көс йыйғайны. Улар өйҙәрҙә, ауыл айын таратып ҡуйылған.

Бер ауылдағыларын йыйып алалар, унан икенсе ауылға барып төштө. Унан йыйырға кешеләр ебәрҙе.

Барып әйтеү менән сотниктар алып килә.

Салауат үҙе сыҡты урамға. Бер урында (ҡайҙандыр) алыҫыраҡ иләү кешеләре. Таныш түгелдәр. Уны ла танымаӊылар. Бере е өйләй, янындағылар мауығып тыңлайҙар.

— Салауат батыр ул... Белә егеҙме, ниндәй батыр. Ырымбур янында уны бер юлы ете казак ураҡкан. Уңға елтәй, улға елтәй. Шул арала бере ен — ҡых... Уның ҡылысын бит күргәнегеҙ бармы? Ғәли батыр ҡылысы. Зөлфәҡәр бит... Берәмберәм ете ен дә оҙатҡан тамуҡҡа... Ул көн айын Ырымбурҙы урап сыға, ти, белә егеҙме?

Салауат: "...шайтандар"ы, уйлап табалар бит",– тип эстән көлөп килеп сыға, теге кешегә ҡарай.

— Әкиәт, — тип үтеп китә.

Шунан, әлбиттә, уны таныйҙар...

Йыйылып, ҡуҙғалып киттеләр. Ҡыш. алҡын. Бирешмәйҙәр. Тиҙҙән бер төркөмдә йырлап та ебәрҙеләр:

*Салауат ҡылысын ҡулға алды.*
*Халайыҡтар яуға ҡуҙғалды...*

Салауаттың үҙенә лә ишетелде йыр. Әйҙә, йырла ындар. Күңелдәр көр. Осоп китерҙәй булып, яҫҡып-яр ып баралар. Уларға сасҡауы ла, тәрән ҡары ла бер ни түгел.

25/XII Салауат Сарапулды ала (Уса юлы).

Ғәйнә олоҫо. Старшина ы ҡаршы алды. Сура Рәсүлев[2] — ата ының дуҫы. 1772 йылда бергә Смоленск походында генерал Бибиков ҡарамағында булалар. Шунда ул да, Юлай кеүек үк, походный старшина ине. 35 йәштәрҙә.

Салауат уны өгөтләй. Батша манифесын күр әтә. Ата ының полковник икәнен әйтә: "Батша миңә ундай хоҡуҡ бирҙе, иңә полковник чины бирә".

Төнө буйы ултырырға тура килде. Иртән бергә киттеләр Красноуфимға. алйоғот ауылында туҡтайҙар. Өс көн торалар. Халыҡ бишбармаҡ менән ыйлай ғәскәрҙе.

Ауыл яны. Туғайҙа. 800 кеше ял итәләр. Салауат тимер күк атта.

Красноуфимға етәрәк — өпәйҙәр ырыуы. Өпәле тиҙәр үҙҙәрен.

Шуларҙың ауылы ерен алдылар. Исеме ҡалды. Ана, тегеләйерәк, Өпәленән Уфалей я алды.

Йәл түгел исем. Ул исем борон-борондан, бик борондан шулай күсә килә ине. Өпә исемен йылғанан алдылар, йылғаға бер тотем балыҡтың исеме бирелгән, шунан ул исем ыу менән ағып таралған шикелле. Өфө йылға ы булды Ҡариҙел,

[1] *ары Абдуллин – Исәт провинция ы Бала-Ҡатай олоҫо старшина ы, б. к.отряд командиры.*
*Сура Рәсүлев — Ғәйнә олоҫо поход старшина ы, б. к.*

унан — Өпө тауы, Өпө ултырағы булды. Әле генә уны йә Өпө, йә Упа тиҙәр. Уны берәүҙәр Өфө, берәүҙәр Уфа ти.

Ерле ерендә, екән күлендә. Ҡайҙағы кешенең теле нисек әйләнә, ауыҙынан Өпө нисек сыға.

Красноуфим тирә ендә тупланыу. Был тирәлә октябрь-ноябрь айҙарынан уҡ Бәхтиәр Ҡанҡаев ҡуҙғала. Мишәр ул.

Башҡорт Собханғол Килтәков[1]. Әбделкәрим Күсәкәйев[2]. Абдулла Мостаев[3].

Красноуфимда ла булғандар, ябырылып кергәндәр, киткәндәр. (Усаев) Ҡәнзәфәр, тиҙәр, башлығы.

Красноуфим алдында Буғалыш ауылында алыш.

Капитан Гарин — Красноуфимскиға (1740 й.) Ҡара аҡал бола ында йөрөгән. Әле шулмы? Тәжрибә е бар, был ерҙәр менән таныш, ти әң дә ярай.

Красноуфим янында элек Ҡыҙыл Яр тигән ауыл булған. Шуның башҡорто Тимер Ирмәк орауы буйынса ауыл унның ерендә алынған.

Ключики ауылы янында рус крәҫтиәндәре Салауатҡа бәләкәй туптар, бер мискә дары бирәләр.

Батыр шуны ҡарай. Бер яугир килә.

Салауат:

— Өйрәнә еңме?

— Беҙҙә юҡ бит.

— Булыр. Бына заводтыҡылар бирә, алдаттарҙан тартып алабыҙ ҙа үҙҙәренә атабыҙ. Бына былай. Ҡара әле.

Үҙенең дә белеүе самалы. Ырымбурҙа бер генә атып ҡараны. Бына хәҙер... Ҡуҙғалмаҫ борон атты. Әммә яй ыҙ. Атты-атты ла, теге яугирға:

— Бына аҡла. Бел шуны: был беҙгә кеше башынан ҡиммәт. Башың юғалма ын!

Шунан үҙе атына атланды. Салауаттың ғәскәре 800 кешегә яҡынлай. Туҡталыш. Алда отряд бар. Шуны асыҡта ҡыйратмайса, ары үтеп булмаҫ!

Салауатҡа әйтәләр: арала шымсы йөрөй, тип.

— Нимә ҡарап?

— Көстө самалай!

— Тоторғамы?

— Юҡ, йөрө өн, — ти батыр. — Күҙәтегеҙ.

— Китте, — тиҙәр (бер аҙҙан).

Ҡараңғы төшкәс, Салауат отрядын өскә бүлә. Уртала ут яна. Караттар килә утҡа. Салауат өс яҡтан ҡамап ала (12/I-74 й.).

Салауат алда. Көҙәйҙәр «Салауат, Салауат» тип оран алды. Әллә оран, әллә батырҙың исеме — барыбер алға әйҙәне күмәк ауаз.

Бөтөнләй башҡа ырыуҙар ҙа "Салауат" тип өрәнләй. Полковник артынан, башлыҡ артынан. Бер килке — "Салауат", бер килке — "ура".

Бәреп керәләр.

Красноуфим казактарының атаманы итеп Макар Иванович Поповты билдәләй. Яҫауыл — Матвей Чигвинцев.

Берләшкән корпус төҙөлә (башҡорт полкы, казактар айырым, заводтыҡылар полкы, татар полкы), байтаҡ ҡына сей мариҙар ҙа бар (суҡынмаған). Уларға күр әтмә бирҙе Салауат.

— Бында канонир бармы?

— Пушкар... юҡ, фузер ҙа юҡ.

---

*[1]Собханғол Килтәков — Себер даруға ы Төбәләҫ олоҫо старшина ы, б. к. полковнигы.*
*[2]Әбделкәрим Күсәкәйев – мишәр, б. к. полковнигы.*
*[3]Абдулла Мостаев — башҡорт, б. к. полковнигы.*

Таба алмай. Ләкин завод кеше е тиҙ төшөнә, әҙерәк өйрәткәс, тиҙ төшөндө.

— Власты ныҡ тотоғоҙ, үҙегеҙ ҙә тыңлағыҙ батша ебәргән әмерҙе. Халыҡты йәберләмәгеҙ. алым йыймаҫҡа, ришүәт[1] алмаҫҡа!

Дружина, команда ойошторола.

— Оборона тотоғоҙ, — тип ҡуша полковник Салауат.

Ҡорал әҙерләргә лә ҡушты. Былай ҙа башҡорттар уны ын белә. Туҡтаныңмы — туҡ-туҡ, сың-сың... Уҡ башы, уҡ абы, өңгө уғыла. Ҡылыслылар ҡылысын ҡайрай, булма а, билдәге балта ын үткерләй.

Ә бында, завод ерендә, уңайлы. Тимерлектәре бар. Бындағылар үҙҙәре лә тик ятмаған, тегене-быны я ап ҡуйғандар. Тимер-томорон йыйған интекмәй, тиҙәр.

Салауат бындағы ҡаҙнаны алғас, команда төҙөтә.

— Батша алыҫ, граф Чернышевҡа илтеп тапшырығыҙ. Ҡарағыҙ уны, юғалтмағыҙ, аҡлағыҙ. Башығыҙ менән яуап бирә егеҙ.

— Воеводанан, вахмистрҙан күҙ яҙҙырмағыҙ! Бер-бер хәл бул а, миңә рапорт биреп тороғоҙ.

...Чигвинцев бер полк төҙөп, бергә юлға сыҡты. Өс көн уҙҙы.

Салауат Красноуфимда оҙаҡ ятырға теләмәне.

— Ярамай.

Берәү:

— Көтәйек.

— Юҡ, бер урында тапаныу ярамай. Бөгөн дә ябырылабыҙ, иртәгә лә ябырылабыҙ. өжүм, өжүм! Шунда ғына яңы көстәр ҡушыла, шунда күңел яр ый.

Көнгөр янынан хат. Батырҡай Иткининдан: Көнгөрҙө алып булмай. Бөтә көстө тупла, баш бул, тигән.

15/I. Салауат китә Көнгөргә. Халыҡ яратып ҡала. Йырлайҙар:

*Три кольчуги надевал,*
*Сорок пушек заряжал.*

...Йыр арты еңел булды. Тағы 4 туп бирҙеләр Салауатҡа, Йоҡ заводын алғас, Сотников тигән крәҫтиән ике туп, 40 йәҙрә, 11 картечь бирҙе.

Туҡтаған айын туптан атырға өйрәнде Салауат, яуҙаштарын да өйрәтте.

3

Ҡәнзәфәр бара. Янында бер нисә генә кеше. Себер даруғаларына. Ауылдан ауылға, заводтан заводҡа.

Унда булғандар яугир отряды ойоштора. Староста, старшиналар айлата. Юлда, ауылда тәртип бул ын. Халыҡ ҡушыла, уларҙан көс йыя.

Ҡәнзәфәр батша указдарын уҡый. Үҙенең отряды ла ҙурайҙы. Ярты меңләп кеше.

3/I. Сарсынбаш ауылы.

Бында — Ҡунаҡбай Жомаев[2]. Ул ярҙам итә. Ҡәнзәфәр Исмәғил Смаил уғлын (мулла) писарь итеп тәғәйенләне.

5/I. Осокиндың Иргин заводын ала. Бөтә алып булған мөлкәт, аҡса ын. 25 эшсе отрядҡа ҡушыла.

Ошонда торған саҡта Ачит крепосынан 13 кешене тотоп килтерәләр.

6 туп. Биш бот дары. Улары — ярай, ә бына был әсирҙәрҙе?..

Усаев — капитан Борисовты, бер капрал, коллежский асессор, майорҙы тикшерә. Тиминды, кенәз Овсянкинды ғәйепле тиҙәр. Усаев ораша, тикшерә. Импе-

[1] *Ришүәт — взятка.*
[2] *Ҡунаҡбай Жомаев — Себер даруға ы Көнгөр өйәҙенең башҡорто, б. к. полковнигы.*

ратор Петр Федоровичҡа хеҙмәт итегеҙ, ти. Юҡ, тиҙәр тегеләр.

Бигерәк тә Борисов ҡаршы. Кәңәш: аҫырға! 8/I аҫалар.

Бер команда Екатеринбургтан Көнгөргә аҡса алып ҡайтып бара. 2000 ум. Бөтә ен Зарубинға оҙата.

Алда — Богородский ауылы. Ҡыҙыҡ, ти, Ҡәнзәфәр. Өфө янында ла шундай бер ауыл бар. Кадомцевтар ҡорған ауыл. Әлеге е атаман Губанов урҙуға ы, унын төйәге.

— Бында ла шундай бер атаман кәрәк.

Ҡәнзәфәр, шуға барып етмәҫтән, бер ауылда туҡталды. Баҙар. Халыҡ күп. Манифест уҡый. Тирә-яҡҡа ла кешеләр китә. Ундайҙар әҙер. Әйтеү менән елдерәләр.

Богородский ауылына килеп етте. Халыҡ йыйылған. Манифест уҡый.

Шикле әҙәм шәйләнә.

— Кем ебәрҙе? — ти берәү иҫке шинель кейгән, аяғында ҙур итектәр, артыҡ таушалмаған бүрек.

— Атаман. Ул бында, ғәскәр янында ғына, биш саҡрым. Әйҙәгеҙ!

— Бар, Иван Наумович, – тиҙәр.

— А что... Барып белергә кәрәк... — Аҡ аңҡырап китте. Отставкаға сыҡҡан алдат икән. Атын алып сыҡты.

Ҡәнзәфәр менән осраштылар. Белобородов[1] ҡарай: мө абәт кәүҙәле, йәшел тышлы төлкө тун кейгән. Яңаҡтары бүлтәйеп тора.

Ҡәнзәфәр уға етди, уҫал ҡараны ла ораны:

— Батшаға хеҙмәткә килдеңме?

— Уйларға кәрәк.

— Уйлай ы юҡ. Батша бит! — көслө, буй ондороусан тауыш.

Белобородов Ҡәнзәфәргә ҡараны. Тауышы батыр... Буйға ла... Үҙе буйсан бул а ла. Ә был йыуантаҡ, тыныс хәрәкәт.

"Тимәк, ышана"... Ул ышанғас, халыҡ ышанғас...

— Батша булғас... Беҙ риза... өйләшербеҙ. уғыш хикмәт.

— ин кем?

— алдат инем.

"Ә ә — уғыш рәтен белә", — тип уйлап ҡуйҙы Ҡәнзәфәр.

— Әйҙә, өйгә инәйек. Кис булған. Ҡунырға урын бар, полковник. Аттарға бесән, кәртә-ҡура бар.

Киттеләр.

Оҙаҡ өйләштеләр.

Иртән Ҡәнзәфәр тә әрәт алып, мисүәк[2] менән теш таҙартты.

— Миңә бағып тора ың. Яу алдынан намаҙ уҡырға...

Уҡыймы, юҡмы, теш өсөн шул мисүәге, ашағанда ҡулында — дәстәржә е[3] булырға тейеш, ти.

Отставкалағы алдат Белобородов шунда йәшәй икән. Ҡәнзәфәрҙе үҙенә алып ҡайта.

Ике көн торалар бында. өйләшәләр. Кешеләр йыйыла.

— Сергинский заводына барайыҡ, — тине Белобородов.

— Кемдеке?

— Иван Демидовтыҡы. Беҙ Алтын ауылында туҡтарбыҙ.

Отряд тағы ҙурайҙы. Ике көндән бергә китәләр.

---

*[1] Белобородов Иван Наумович — Көнгөр өйәҙе Богородское ауылының отставкалағы канониры, б. к. полковнигы, баш атаман.*

*[2] Мисүәк — теш щетка ы.*

*[3] Дәстәржә — ҡул яулығы (авторҙың үҙлегенән).*

— Хәҙер донъя хәлен белеп булмай, — Белобородов ҡатынын, бала ын алды.

Бынан Иван Демидовтың Сергинский заводына ыңғайланылар. Алтын ауылы заводын барып алдылар.

Ауыл халҡы яҡшы ҡаршылай. Икмәк, тоҙ... Рус крәҫтиәндәре государь Петр Федоровичҡа ант итә. Ҡәнзәфәр атына атлана.

Белобородов менән кәңәшләшеп, күҙгә-күҙ ҡарашып алды.

— ин бында старшина булыр ың, — шулай тип ҡушты Ҡәнзәфәр.

Ә ошонда уҡ Иван Васевҡа[1] өндәште:

— Ә ин — сотник! 50 кеше.

Белобородов бөтә ен ойоштора. Завод ҡаҙна ы, ҡоралдар — бөтә е алына. Ул Чикаға оҙатыла.

Шунан — Осокиндың Шуртан заводы, Ҡәнзәфәр бер тапҡыр булған Ачит заводы.

Отряд ҙур. Был заводтар төбәге лә ҙур. Бер ерҙә йөрөп кенә булмай Белобородовҡа.

— Хәҙер ин үҙең баш атаман. Батша шундай фатиха бирә. Шулай хәрәкәт ит. 100 кеше етәме сотникка?

— Етә!

— Шунан... Үҙең йыйыр ың. Батшаға рапорт ебәр. Полковник итер. Бына батша манифесы. Кешеләр йый, заводтарҙы ал. Кем ҡаршы, ҡарап торма, ҡыр, әйҙә.

Белобородов айырылып китә.

Ҡәнзәфәр Көнгөргә китте. Өйәҙ үҙәген ҡамайҙар. Унда Салауат, Батырҡай. Көс кәрәк булыр. Шулай ҙа Ҡәнзәфәр Белобородовты иҫтән сығарманы; күҙҙән яҙҙырмай, хәбәрҙәр килеп тора.

Баш атаман Иван Наумович Ачит крепосында бер нисә көн булып, көс тупланы. Екатеринбургҡа йүнәлгән. Кешеләре бер йөҙҙән ике йөҙ булған, ике йөҙҙән дүрт йөҙ, биш, алты йөҙ... Мылтыҡтары бар. Туптары ла бар. Үҙе — элекке канонир.

Ул ҡуҙғалды. Ауыл. Кис туҡтайҙар. Шомло. Набат ҡаҡтыра. Халыҡ йыйыла. Пугачев манифесы — Пугачев биргәне уҡыла.

Иртән — юлға. Алдан — уның агитаторҙары. Отряд ары китә. Алда — Екатеринбург.

...Унда карателдәр, ҙур-ҙур командалар.

***

Ҡәнзәфәр Көнгөргә яҡынлашты. Яугирҙары яҫҡып килә. Эргә ендә — завод кешеләре. Уларҙың сотнигы Иван Васевҡа был яҡтар, был ҡала таныш.

Көнгөр — өйәҙ ҡала ы. Яҡшы нығытылған. Туптары күп. Хөкүмәт ғәскәрҙәре бихисап.

Ҙур алыш алда шул әле.

4

15/I. Салауат Көнгөр янына 1 меңдән ашыу яугир – яр ып-яҫҡып торған ир-азаматтары алып килә.

Уның 10 туп, ҙурҙары, бәләкәйҙәре бар.

Нисек етте шулай 40 канонир тупланы.

— 41-се е үҙем! — тине Салауат.

Әкиәттәрҙә шул анды әйтергә яраталар. Ҡарурманда йәнә е 40 бағый килә, ал-

[1] *Васев Иван Герасимович — сотник, Көнгөр өйәҙе Алтын ауылының кеше е, переписчик, б. к. полковнигы.*

да барған 41-се е атаман була.

Бында ла бар Батыркай, Эткол яугирҙары, тирә-як рус крәҫтиәндәре, мишәрҙәр, мариҙар. Көнгөрҙөң үҙенекеләр.

Кәнзәфәр полковник менән Васев сотник та килеп кушылды. ыуға ыу кушыла-кушыла, ҙур йылғаға әүерелә. Тәрән дә, көслө лә була ағымы.

Салауат Кәнзәфәр менән Берда янында Ырымбурҙы камап торғанда ук якшы дуҫлашып алғайны. Был яктарға килеүен, власть нығытып йөрөүен белә. Ана ни саклы көс туплаған яуҙашы.

***

Көнгөр кала ы бик күптән алынған. Көнгөр йылға ының Ирән ыуына койған тамағынан ике сакрым үрҙәрәк. Бер яуҙан уң, кала емерелгәс, Ирәндең уң яғына — унын Сылва йылға ына койған урынына күсерелә. Быға ла йөҙ йылдан байтак күп. Бында — башкорттар, Сылва, Ирән татарҙары.

Йәшерен боҫтормалар. Бер урында эскәндәр, ут яккандар. Көнгөргә хат кереткәндә күрәләр.

— Их, еҙ, сылвалар! Сабата туғы ығыҙ. Курыс осон йәшерә белмәй егеҙ. Күрмә ендәр, имеш.

19/I. Салауат бында килеп, бөтә эште үҙ кулына ала. Көнгөргә батша манифесы ебәрә. Был батша үҙе яҙғанса, тиҙәр. Алдан күн ендәр. Тыңлап, капка ас ындар, ти.

Кан койош булма ын. Корал ташлағыҙ. Төрмә ишектәрен асығыҙ, тоткондар азат ител ен.

Ләкин Көнгөр башлыктары яуап бирмәйҙәр. Тыңларҙар, капка асырҙар, ти.

Шул көндө Осокиндың Йок заводынан Гаврила Ситников[1] тағы ике туп, кырк йөҙрә, картечтар алып килде.

Башларғамы? Бәлки, иртәгә тағы бер тапкыр өйләшергә.

Шул көндө Салауат оло юлдан хәбәр алды.

— Кемдәрҙер килә.

Салауат — сапкын, имеш. Юлда ук хәбәрләшеп, кире кайткан. Кузнецов килә ята икән. Иван Степанович Кузнецов.[2] Табын казагы. Салауат танымай. Кәнзәфәр уны Зарубин янында күргән. Шул ебәргән икән. Рәсәй әм Азия ғәскәрҙәренең баш етәксе е.

Кәнзәфәр:

— Килештергән. Граф тиә е калған.

— Бик якшы, — тине Салауат.

— Туптар атып каршылайыкмы ни? Ай-ай...

— Ун ыҙ ҙа...

Бик теремек, купыр ғына әҙәм. Ләкин кара йөҙлө, ас яңаклы, оҙон мыйыклы Табын казагы кистәрен килде.

Кәнзәфәргә окшаманы был.

— Харап... юл ыңғай Катау-Иван, Йүрүҙән заводтарында булған, туптарын алған.

— Ана бит, йөрөгән. Көс алып килгән.

Сәс өлтөгө сығып тора. Камсы ы кулда. Бөйөрөнә таянып, калаға карап торҙо.

— Ала алманығыҙмы?

— Бер штурм булды. Айыштык. Артиллерия күп унда. Беҙҙә йәҙрә аҙ.

— е...

Кузнецов воеводаға русса хат яҙырға ултырҙы. Үҙе яҙҙы. Иҙеүе асык.

— Йә, берәй чарка...

---

[1] *Гаврила Трофимович Ситников — сотник, Йок заводы б. к. крәҫтиәндәренең атаманы.*

[2] *Кузнецов Иван Степанович – Табын казагы, б. к. бригадиры.*

Тас Зарубин. Унынҫа ҡылана. Эсте. Туҡтау ыҙ өйләнә.
— Ҡайтарып ебәрергә ине, — ти Ҡәнзәфәр.
— Юҡ, йөрө өн әле, — тине Салауат. — Ниңә ин уға ҡаршы ың?
— Уны беләм. Табын минең күршелә бит.
— Шулайҙыр... Ә белә еңме, башҡорттар менән дуҫ йәшәгән бит ул.
— Әллә.
— Ә ин белә еңме, Хлопушаның дуҫы яуға саҡлы уға килгән. Теге изге Митрофанды боҙға ҡатырған саҡта башҡорттар менән алып китәләр, ерләйҙәр, — тип өйләне Салауат.
— Уны ы әллә ҡасан. Хәҙер ул түрә булды. Сабата ын түргә элде.
Кузнецов заводтар хаҡында ораша.
— Турчанинов заводы ҡуҙғаламы?
— Юҡ.
— Титулярный советник аҫтына ут төртөргә кәрәк.
өйләшеүенә ҡарағанда, был яҡтарҙа булған. Тегене-быны белә.
Красноуфим. Ғинуар — 1774 йыл.
өйләшеп ултырғанда Салауат, Кузнецов, Усаев тағы Красноуфимдағы хәлде әйтәләр. Ана, теге заводтар ҡуҙғалмай...
— Турчанинов тота.
Ҡай ы бер заводсылар (Турчанинов Алексей Федорович — титулярный советник) заводтарын аҡланы. Полевский, Северский заводтары ла.
Сысерт заводы. 1774 йылдың ғинуарында — заводын туҡтата, эшләүселәр менән өйләшә, уларҙың күңелен таба, аҡса түләй. Алдап-йолдап, юхалап, юмалап, башҡорттар, ҡасаҡтар талауы менән ҡурҡытып. Командалары оборона тота. өжүмдәрҙе кире ҡағалар.
4/II. өжүмде кире ҡаға.
Князь Шаховской Б. Г., князь Голицындар ҙа шулай, граф Роман Воронцов. Барон Строганов А. С. заводтары — Екатеринбург, Соликамск тирәләренә саҡлы — бөтә е берҙәм.
Штурмды бергәләп әҙерләйҙәр. Рустарҙы Кузнецов алып бара. Башҡортон, татарын — Салауат.
Бында Михаил Мальцев[1] бар. Көстө ике яҡҡа күсерҙе.
Салауат:
— Шулай яраймы ни...
— Көлсәне уртаға ындырҙы, — берәү.
— Көлсәнеме? Уралды урталай ярып төшөрҙө.
Ләкин Салауат күнә. Низағ сығарырға ярамай. Әмерен үтәй. Нисек булма ын, был төбәк яуҙың яңы үҙәгенә әүерелде. Ырымбур, Өфө бар. Бына Көнгөр яғы ғына сәмләндерә.
23/I Штурм. Салауат. Эргә ендә Шайтан-Көҙәй азаматтары. Түбәләк, арт, Тырнаҡлы иләүҙәренән. Ҡошсолар, дыуандар, урман-көҙәйҙәр.
23/I штурм ваҡытында Салауатҡа өңгө менән сәнсәләр. Ауыр яра. Унын урынына старшина Сура Рәсүлев ҡала.
Зарубиндан заводтағы атаман Семен Волковҡа[2] әм яҫаулы Завьяловҡа[3] указ: Илешевтан — үҙендәге 600 умға яҡын аҡсаны бир ен, хеҙмәт хаҡы итеп түләргә, тигеҙ, ғәҙел итеп. Илешев заводтан алынған ҡоралдарҙы, аттарҙы ҡайтар ын, аҙыҡ мөгәзәйҙәренең, амбарҙарҙың асҡыстарын бир ен.
Былары эшләнер. Ләкин аҙ, тиҙәр вәкилдәр. Зарубин Уса атаманы С. Кузнецовҡа[1] указ ебәрә:

---

*[1] Мальцев Михаил Еремеевич — Красноуфим казактар ғәскәренең писары, б. к. атаманы.*
*[2] Волков Семен Иванович — б. к. полковнигы, Рождественский завод эшселәренең атаманы.*
*[3] Завьялов В. М.— яҫауыл, Рождественский завод б. к. командиры.*

— Волковҡа тоҙ казна ынан 1500 умды бир. Эшселәргә таратыр.

"Батша" мәрхәмәтен күреп алдылар. Бында, Зарубинға хат яҙып, депутация ебәрәләр.

Эш өҫтөнә эш, мәшәҡәт.

— Нишләмәк? Эшләргә, үтәргә кәрәк, — ти Кузнецов.

27/I саҡлы Кузнецов эсте. Кузнецов Усаға барып ҡайтты бер ялыуҙы ҡарап. Шунда ишетеп ҡайта. Рустар уға өйләгәндәр.

— Ачитта аҫтыҡ, — тип.

Ҡайта ла Ҡәнзәфәргә бәйләнә Кузнецов.

— Эйе, капитан Борисовты аҫтыҡ.

Ҡәнзәфәрҙе ябып ҡуя. 28/I. Салауат яралы. Ята. Күрмәй. Сура Рәсүлев ярҙам иткән.

Кузнецов Салауаттан:

— Усаев ҡайҙа?

— Киткән. Үҙенекеләр алып киткән. Мин яралы. Тауыш, ыҙғыш булма ын, юғи ә, графҡа кеше ебәрәм!

Кузнецов:

— Булыр, үҙе ҡушҡандыр азат итергә.

Барыбер эш бармай.

28/I Кузнецов Чесноковкаға китә. Яугирҙар сигенә.

Карателдәр килә.

Салауаттың аяғы ел енә, яра ы шешеп китә. Михаил Мальцев, Сура Рәсүлев та, Батырҡай ҙа:

— ин ҡайт, — тинеләр уға. — Беҙ ҙә сигенәбеҙ...

5

Яу булғас, еңеү ҙә, еңелеү ҙә була. Улар хаҡында Пугачев ставка ына рапорттар килеп тора. Шатлыҡлы хәбәрҙәр ҙә, күңел еҙҙәр ҙә бар.

Пугачев төрлө өн көтә. Килгәнен бергә тикшерәләр. Ниндәй сара күреү, иртәгә е көндө ни ҡылырға кәрәге хаҡында уйлашалар, ҡыҙып-ҡыҙып гәпләшәләр.

Әлегә бөтә уйҙар Бөгөлмә, Минзәлә яғына төбәлде. Унда ла кешеләр бар. Көрәшәләр. Вәлит Торновтың хәле ауыр. Ярҙам орай. Ярай, уға Ҡаранай Моратов та китте. Гавриил Давыдов килде... туптар орай. Ә улар бында ла бик кәрәк. Зарубинға — сапҡын. Көнбайыш яҡҡа иғтибар ит ен, ярҙам күр әт ен. Хәйер, үҙе лә баш ыҙ түгел, ҡурҡыныстың шунда икәнен, туптар, дары ебәреүен хәбәр иткән.

— Аншеф Бибиков килер. Беләм. Ҡом оҙ ул. Бер ҡулын Өфөгә, икенсе ен беҙгә табан уҙыр. Тиҙерәк алырға Өфөнө лә, Ырымбурҙы ла...

Емельян үҙен йөпләп ҡуйҙылар.

— Беҙҙең Яйыҡты ла, — тип өҫтәне Чумаков.

— Алабыҙ!

***

уғыштың йәйелеүе Сенатты борсоно. Бигерәк тә Екатеринаның үҙен. Ырымбур бола ы яңы ғына ине. Әле — төрлө урында. Көн айын яңы янғын. Өфө янында... Ә тегендә, Твердышев биләмә ендә...

Екатерина шулай тип кенә атай ине башҡорт ерҙәрен. Әллә ниндәй батыр пәйҙә булған, Салауат исемле, тиҙәр.

Екатерина генерал-аншеф Бибиковҡа указдар ебәрә. Ул ҡаты. Сенат указы (10/I) — Пугачев манифесын яндырырға.

Бибиков указды яндырыу ғына түгел, бөтә ерҙәрҙе үртәй.

29/1—74 — Екатерина хаты Ҡазанға килә.

Ике яҡтан ҡыҫырға. Ике ҡул. Ырымбурға — кенәз Голицын корпусы. Өфө

---

[1] *Кузнецов Степан Яковлевич — Уса ҡала ы б.к.атаманы.*

корпусына баш командующий итеп Бибиков үҙенең ҡәрҙәше генерал-майор Ларионовты ҡуйҙы. Уға Сергей Левашев булыша, Ғәбделмәннән Мөслимов тигән йомошло татар ҡулында күп өмөтө.

Сенатта баш командалаусы итеп генерал-аншеф Александр Ильич Бибиковты ебәрергә ҡарар иттеләр.

Герой... Польша походы ҡа арманы. Польшала конфедераттар күтәрелешен баҫтырыусы ғәскәрҙәрҙең баш командалаусы. Унда поляк шляхталарын да, белорус, малорус крәҫтиәндәрен дә ҡырҙы.

Шуны — хәҙер бында ебәрәләр.

Генерал-аншеф Бибиков 13/XII Петербургтан Мәскәүгә килеп етте.

Мәскәү ҡурҡыуға төшкән. Берҙән, яңыраҡ үткән ваба киҙеүе,[1] унан — бола ы. Ул саҡ Мәскәүҙең хәле ҡыл өҫтөндә ине; Кремлгә бәреп инеү, ундағы ҡыйратыуҙан...

Генералдың ҡыйралып ҡайтыуы. Хәбәр таралған. Ялсылар, фабрикаларҙа эшләүселәр, бөтә ярлы-ялпы урамда туҙына, асыҡтан-асыҡ фетнә яҡлы, ирек даулап маташа.

— Яңы бола, яңы бәлә булыр бында, — тип уртын сәйнәне Бибиков.

Мәскәүҙә ғәскәр аҙ ине. Былай, яҡшылыҡ менән генә, ҡаршы үҙ өйләмәҫкә, тип указ тараҡтандар. Файҙа бирмәгән. Яңынан элеккесә ҡурҡыта башла аң, яуыз Пугачев файҙа ына ғына булыр, тиҙәр. Былай яуыздарын берәм-берәм тоторға шымсылар күбәйҙе, ҡолаҡ алып, тем енеп йөрөйҙәр. Бибиковҡа ярҙамға генерал Мансуров, кенәз Петр Голицын бирелде. Үҙенең аға ының улы полковник Юрий Бибиковты[2] ла алды әшнәлеккә.

Александр Ильич Бибиков үҙе был яҡтар менән таныш. Ун йыл элек Ҡазан, Ырымбур губерналарында заводтарҙағы болаларҙы баҫтырып йөрөнө. Шуға уны свитаға кереттеләр 1767 йылда. Екатерина Икенсенең яңы закондар төҙөүсе депутаттары йыйылғанда дәү кеше — рәйес ине. Унан аҙаҡ императрица Волгала сәйәхәткә сыҡҡас, свита ынан уны ла ҡалдырманы. Шунда Бибиков бөтә свитаны үҙенең Костромалағы имение ында ҡунаҡ итте.

Елле әҙәм ул. Государыняға бик яҡын кеше, кәрәк кеше.

...Юл хәүефле. Ләкин бөтә юлға көслө ҡарауылдар ҡуйылған. Арлы-бирле йөрөтмәйҙәр, шлагбаумдар ябыҡ. Ҡаршылыҡ рогаткалары ҡуйылған, ҡапҡалар ябыҡ.

Ә генерал-аншефҡа юл асыҡ, уны аҡлайҙар. Ҡазанға 25 декабрҙә килеп етте ул. Бында хәл бигерәк тә хәүефле. Ырымбур яғынан ҡасҡан дворяндар килеп тулған. Татар байҙары. Хатта башҡорт крайынан почта комиссары ла көтөп тора (Мәндей Төпәйевте әйтә). Эйе, эш шомло. Теге ваҡыт Урал заводтарында йөрөгәндәгесә түгел. Юҡ, ул ҡурҡмай. Ул Ырымбурға икенсе Дәүләт йыйылышы ҡарары менән күп хоҡуҡ бирелеп, губернатор итеп ҡуйылған. Рейнсдорп ҡамауҙа.

Янында генералдар, полковниктар, дворяндар. Ә Ҡазандағы Йәшерен комиссия уң? Ҡазанда уны тикшерҙе: унда Луниндар[3], Мавриндар[4].

Губернаторға:

— Бер бөтөрәләр, бер яңырталар уны.

— Эйе, Йәшерен канцелярия элек тә бар ине, — тине Ҡазан губернаторы, генерал-аншеф Яков Ларионович фон Брант.

— Ә Петр III уны бөтөрҙө. Ә бына кәрәк икән. Екатерина Алексеевна уны Тайная экспедиция итеп ойошторҙо. Бында — шуның бер департаменты. Эш күп буласаҡ уларға.

---

[1] *Ваба киҙеүе – холера эпидемия ы.*

[2] *Бибиков Юрий Богданович – полковник, Великолукск пехота полкының командиры.*

[3] *Лунин А. М. — капитан, Саранск әм Ырымбур Йәшерен комиссияларының ағза ы.*

[4] *Маврин Савва Иванович — гвардии капитан-поручик, Ҡазан әм Ырымбур Йәшерен комиссияларының чиновнигы.*

Ҡарт Брант көлә:

— Шунда Шешковский[1] Петр III-нөң тәү башлап башын өҙөр. Ялғанын. Яуыздыҡын.

— Ашыҡҡан императрица.

— Үҙе иҫән саҡта, таратмай тороп, хөкүм ит ә икән.

— Ә мин бына быны ын үҙем. Үҙ күҙ алдымда, — тине Бибиков.

"Кар көнөнә ҡалырмын", — тип уйламай, әлбиттә. Ә шулай ҙа әжәл төрлө урында була. Башҡорт ерендә лә ихтимал.

Генерал-аншеф Бибиковҡа ғәскәр күп. әр ҡалала, әр крепоста торған гарнизон ғәскәре, еңел командалар ғына етмәне, әлбиттә. Бөгөлмәнең үҙендә генә лә бер корпус уның командиры Ф. Ю. Фрейман менән бергә. Уның ҡарамағында тағы Архангелоград әм Санкт-Петербург карабинер полктары. Владимир әм Томск пехота полктары. Ә гусарҙар ти ә... Изюм, Бахмут полктары бар. Икенсе гренадерҙар полкы, Чугуйҙан килгән казачийҙар. Йәнә дүрт еңел команда.

уңынан Малороссиянан өс полк ебәрелде. Дон казактары ла килде.

Ҡазан дворяндары... Екатерина үҙен яңыраҡ "Ҡазан алпауыты" тип иғлан хәбәр тараҡҡайны. Бына шуның полкы була хәҙер, дворяндарын да, уға ҡараған крәҫтиәндәрен дә.

аман көс орай. Ғәскәр кәрәк, ғәскәр. Ҡорал, дары, йәҙрә әҙерләтә, аҙыҡ-түлек йыя. Ылауҙар — бихисап.

Алдан ҡотҡо таратырға, ҡурҡытырға, ҡалтыратырға... Унан үҙе ҡуҙғалыр. Полковник Юрий Бибиков Кама яғына — Зәй ҡала ына, Өфөгә табан — генерал Ларионов, секунд-майор Гагрин[2] — Екатеринбург тарафына.

Командалар йүнәлде. амар яғына — төп көстәр. Өс колонна — Голицын, генерал Мансуров, генерал Фрейман етәкселегендә.

Ә үҙе — Бөгөлмәгә...

Аҙаҡ Бибиков Бөгөлмәнән Аҡбаш ауылына күсте.

6

Ҡаранай ҡуҙғала.

Үҙенең туғандары — Ырыҫбай, Үтәгән менән. Кеше йыя-йыя баралар.

Ҡыҙрас Муллаҡаев олоҫо. Тәүҙә ауылдарын ҡарай. Ҙур түрә. Баш старшина. Ә Ҡаранайҙа — батша фарманы. Буранғол, Сәрмәсән, Юрмый буйҙарын юллай.

Асылы күл буйҙары. Әүәлдән бында йылҡылар күп уйнаҡлаған. Заятүләк, ыу - ылыу образдары юҡҡа түгел. Егеттәре лә батыр, ҡыҙҙары ылыу булған.

Иртәк[3] шул хаҡта. Әле белмәгән кеше юҡ. Ә ул саҡта?..

Нуғайбәктә Вәлит Торнов менән осрашыу.

Ҡаранай өйләй:

— Минзәлә — башҡорт төрмә е ул. Күпме батырҙар ятты. Армайҙар төйәге. Күсе, Аҡай, Бәпәнәй. Беҙҙең олатай Алдарбай...

Вәлит:

— Беләм. Уның зиндандары ҙур. Башҡа халыҡҡа ла еткән.

— Бына шуны алам.

— Унда ҡорал күп. Туптар, йәҙрәләр. Дары күп. Алғанда шәп булыр ине лә...

Илеш яғы, Сөн ыуы. Ыҡ аръяғы, Аҡтаныш ауылы.

Бөтә юлдарҙы баҫып алалар.

Бөгөн — Аҡай күле яры, иртәгә — Күсем.

---

[1] *Шешковский Степан Иванович — Сенаттың Йәшерен экспедиция ының обер-секретары.*

[2] *Гагрин Дмитрий Онуфриевич — Нарва пехота полкының секунд-майоры.*

[3] *Иртәк – халыҡ ижадындағы эпик әҫәр.*

Башҡорт батырҙары, яу ағалары. Олата ының дуҫтары. Уларҙың аҫылған урындары. Күптәр аҫылған Бөгөлмәлә, Минзәләлә. Олатайҙары Алдар ҙа.

Вәлит менән өйләшкәндә, шуларҙы иҫкә алалар. Ҡасан ғына был генералдар төйәге, Башҡорт комиссия ы үҙәге ине. Шулар болартты илде, яу күтәртте, аҫтыкиҫте. Хәҙер бына шуларҙың ҡонон ҡайтарған кеүек килеп сыға.

Улар килгәнсе үк халыҡ күтәрелгән. Айырым-айырым төркөмдәр. Бер ынтылып, Кама яғына барып ҡайттылар (Үтәгән Моратов[1]), бер — Минзәлә янына.

Боғорослан-Бөгөлмә тирә ендә Гавриил Давыдов йөрөй. Ул Кама тамағындағы кеше. Яңы закондар комиссия ы депутаты.

Минзәләлә Ҡарағайлы Кисеү ауылы кеше е Сәнфин[2] ойоштора.

Минзәлә тирә ендә 10 меңгә яҡын яугир тупланды. Минзәлә йылға ы буйына күрән ҡороп, ҡәлғәне ҡамап алдылар.

Крепость стеналар менән уратылған. Тәрән канау. Башнялар байтаҡ, унда аҡ, туптар, бойницалар. Ҡапҡалар ҙа ныҡ.

Ғәскәрҙә күбе енсә отставкаға сыҡҡан алдаттар, был яҡка күсерелгән поляк конфедераттары.

Ҡаланы баҫып алырға кәрәк! Бында ҡорал запасы күп, бөтә ҡоралдарын алырға, яуыз түрәләрен ҡырырға, зинданын асып, мәзлүм йәндәрҙе ҡотҡарырға.

Ҡаранай Моратов менән Сәнфин гарнизонға батша исеменән манифест ебәрҙе: "Үҙ ирке менән баш ал ын крепость".

23/XII. өйләшергә яҡын уҡ баралар. Аҡ флаг менән. Өсәү. Алда — стена. Дошман шарт ҡуя: офицерҙы тотоп бирегеҙ. Ҡалғандарҙың йәне аҡланыр.

Улар ата. Яҡшылыҡ менән булмаҫтыр.

Төн урта ында ябырылыу. Бер яҡтан бер аҙ алдат сыға, бер нисә поляк конфедераты. Ләкин бында уларҙың байҙары — шляхта...

25/XII — тағы хат. Туп атып ҡаршыланылар. Ҡаранай ҙа. Унының 14 тубы /Сәнфиндә/.

Көн буйы атыш барҙы.

26/XII. Кәңәшләшеп алалар. Штурмды төрлө яҡлап я арға.

Ун мең яугир менән.

Иртәнге сәғәт алты. Әлегә ҡараңғы.

Дүрт яҡтан ут асалар. Минзәлә ыуы аша.

Бер урында стена ташындағы тәрән соҡорҙо үтәләр. Поляктар урамына инергә ынтылыш. аҡсылар крепосҡа сигенә. Уларға ярҙам ашыға. Эстән аталар.

Был юлы ла еңеүгә өлгәшеп булманы. Йорттар янып ҡалды. Минзәлә өҫтөндә — төтөн. Сигенәләр, ауылдарға урынлашалар. Блокада.

28/XII. Бер отряд үтте. Генерал Фрейман капитан Евсевьевты[3] ярҙамға ебәргән.

6/I/. Алабуғаға беренсе штурм я алды. Бында күптән күтәрелгәндәр. Василий Иванов,[4] Алексеев,[5] татар Күзмәт,[6] башҡорттар ҙа күп. Уларҙың башлыҡтары — Шәрип Яҡупов.[7]

Шатландылар. Манифест уҡылды. Дөйөм башлыҡ бар.

— Әмер бир, Ҡаранай полковник, — тип кенә торалар.

Шунда приступ ойошторола. Ҡаранай үҙе Минзәләгә китә. Алабуғала ҡусты ы

*[1] Үтәгән Моратов – Бетке тоҙ пристаныының алдаты, Ҡаранай Моратовтың ҡусты ы, б. к.*
*[2] Сәнфин Юсупов — Минзәләләге б. к. командиры.*
*[3] Евсевьев Николай — Томск пехота полкының капитаны.*
*[4] Василий Иванов — б. к. сотнигы.*
*[5] Алексеев Назар — Ҡазан өйәҙенең крәҫтиәне, б. к. сотнигы.*
*[6] Күзмәт Ишменов — б. к. полковнигы.*
*[7] Шәрип Яҡупов — б. к. отряд командиры.*

Үтәгән Моратов командалыҡ ҡылып ҡала.

Мәсәғүт Ғүмәров — Арса даруға ынан. Йәштән лашмансы[1] булған.

Бөтә Арса тирә ен күтәргән. Туптар ала, шундағы заводтарҙы ала.

Ғинуарҙа Мамадыш яҡтарын ҡуҙғата. Шул айҙа Нуғайбәктә — Торновҡа ҡушыла. Ҡаранай Минзәләгә ҡайта.

12/I хөкүмәт ғәскәрҙәре 15 саҡрым килеп, лагерҙы ҡыйратҡан, кире крепосҡа киткәндәр.

15/I Зәй ҡәлғә ен алыу хаҡында шатлыҡлы хәбәр таралды. Бер меңлек гарнизон ҡыйрала.

Шул көндө Тәвкилевтың Терсә олоҫонан крепостной крәҫтиәне Әбделйәлил Сөләймәнов[2] килде. Уны старшина итеп, полковник чинына батша указы бирҙе.

Был көндәрҙә Бибиков Бөгөлмәгә килгәйне. Тәртип буйынса карат ғәскәрҙәре Татарҙар илен тапап килә. Киң ҡоласлы өжүм.

Тәүҙә Минзәләгә — Ҡаранай төйәгенә. Февраль башында Ҡаранай үҙ отряды менән Нуғайбәк крепосына килә.

Хәл ауыр. Пугачевҡа барып өйләргә булалар. Ғәскәрҙе, яҡындарын ҡалдыралар. Бердаға китәләр.

Ә унда Пугачев юҡ ине. Яйыҡ городогына киткән икән...

7

Ҡарауыл тауынан алыҫ тарафтар күренә. Өфө тауы, ана, ҡаршыла ғына. Тирәяҡ ауылдар. Урман.

— Бынан алыҫҡа күренә... — тип Зарубин уйсан әйтте.

Ҡасҡын:

— Аяҙ көндә...

— Аяҙ көндәме? — тип көлдө Зарубин. — Мин бында... Өйҙә ултыр ам да, күрәм, болот булғанда ла. Ҡара төн, ә мин күрәм. Алыҫ-алыҫҡа... Кама буйын да, Силәбе яғын да. Красноуфим яғын да.

Уның ни әйтерен Ҡасҡын аңланы, әлбиттә. Күрмәй ни... Уға бөтә е ус төбөндәге кеүек. Был яҡтағы бөтә юлдар ошо Чесноковкаға килә.

Грязнов ҡайҙа рапорт ебәргән? Салауат ҡайҙа хәрәкәт итә, Ҡәнзәфәр ниндәй ерҙә...

Бөтә ептәр уға уҙыла.

Әле Кама буйындағы баш күтәреүселәр Уса ҡәлғә е воевода ы Пироговскийҙы[3] ҡулға алып, ҡул-аяҡтарына бығау алғас, башҡорт яугирҙары артынан фельдмаршал "Чернышев"ҡа ебәрҙеләр. Уға, Зарубинға.

Ҡазан яғындағы әсир ителгән офицерҙарҙы Ғүмәров Мәсәғүт уға ебәрҙе. Ҡазан Адмиралтейство контора ының комиссары Наумовты, бер нисә ярҙамсы ын тотҡан.

— Молодец! — тине Зарубин конвойға.

Мәсәғүт Ҡазанға ла ябырылырға итә, тиҙәр.

— Ваҡыт еткәс, алырбыҙ! — тине Зарубин, — әлегә бынау Өфөнө алып булмай әле.

Заводтарҙа алған ҡаҙнаны ла уға ебәрәләр. Батша исеменән ул шуларҙы бүлә, файҙалана, кәрәк яғына ярҙам ойоштора.

Төрлө яҡтан унан кәңәш орайҙар. Нимә эшләргә? Ул етәкселәр билдәләй, айланғандарын раҫлай, үҙҙәренә чин биреп, ҡулдарына ышаныс ярлығы яҙҙырта.

Ғинуарҙың тәүге көндәрендәге өжүмдәр ҙә уңыш бирмәне. Уйлашалар. Көс

---

[1] *Лашман – караптар төҙөүгә ағас ҡырҡҡан дәүләт крәҫтиәне.*

[2] *Әбделйәлил Сөләймәнов – татар, О. Тәвкилевтең крепостной крәҫтиәне, б. к. полковнигы.*

[3] *Пироговский Федор Дмитриевич – поручик, Уса өйәҙе воевода ы.*

тупларға ине.

"Граф Чернышев" ғәскәр йыйырға бойора, “командалар ебәрергә” тигән әмере бар. Хатта Бәхтиәр Ҡанҡаевҡа ла барып етте указы.

Ҡасҡын амар, еләү ен Кинйин, Юлдаш Ҡотлин ғәскәр йыйып ҡайтты.

Ҡаланы ҡыҫырға кәрәк. Сыҡма ындар.

Туптарҙан атыу...

Бер көн ялған атака... Ҡурҡ ындар.

Ҡыҙыл Ярҙан, Вавилов переправа ынан, Сергеев перевозынан, Дим тамағындағы Костарев ауылында ныҡ хәрәкәт, хатта Өфөнөң үҙ янында. Бәхтиәр ярлауында — тау өңөрө. Черкалихин овраг ти әңме — ҡалтырай башлайҙар.

Ә бына Ҡариҙел аръяғы хәрәкәт еҙ. Жилино, Карпово, Йылҡыбай ауылдарында тик яталар.

Губанов Богородский ауылында бур ыҡ кеүек ята. Саҡырттылар үҙен.

— Бына Черкалихаға бара алмайҙар. Ә инең яҡта прогулкала йөрөйҙәр. Шулаймы?

— Йөрөйҙәр... — тине Губанов.

Яңыраҡ Өфөнән, ҡарап-күҙәтеп ҡайтырға тип, унтер-офицер Никита Черников-Онучин үҙенең Богородский яғындағы ерҙәренә киткән. Иптәше Волковты алған да Губанов төйәгенә саҡлы барып еткән. Үҙ яҡтары таныш. Секунд-майор Аничковтың ауылына барып еткәндәр. Потеха, Шөгөр йылғалары буйында йөрөгәндәр. Яугирҙар күп. Әммә күреүсе юҡ.

Ә бына Бәхтиәр өңөрөндә, Черкалиха йырмағында... Воеводаның күҙ ҡаршыында ғына. Исемен әйт әң... Воеводаның ус төбөнә етә.

Эйе, Губанов үтә үлпән. Штурм ваҡытында ла уңлай йә алдан сабаулай.

Зарубин аңлай ҙа бит хәлен.

— ин ҡатыныңды крепостан ҡотҡара алмай ыңмы ни?

— Юҡ. — Губанов нығыраҡ күңел еҙләнә.

— Ә ҡустың? Ниңә хәбәр бирмәй?

— атлыҡ йән миңә кәрәкмәй.

— Эйе... Ҡатының унда, балаларың... Аманаттар. Ныҡлап тотон аң, Борисов бөтөрөр ти еңме?

— Уларҙы бөтөрәсәк.

Ҡасҡын:

— Беҙҙекеләр ҙә эргәлә түгел. Ә инең, граф, ҡатының Яйыҡта түгелме? Ҡурҡмай ың бит.

— Ҡурҡ аң, башыңды түмәргә алмай ың. Ҡыҫырға кәрәк. Баш ҡалҡытма ын.

өйләштеләр. Көнөн билдәләнеләр. Уғаса яҡшылап разведка ойоштороу фарыз.

***

Туптарҙы тиҙ күсеү өсөн тәгәрмәс еҙ — алды арбаға йә былай, йөккә алып, йә санала, йә махсус табандар я ап.

Әҙер лафеттың алдындағы хоботты — танауын киҫеп томалайҙар (санаға яйлы ят ын өсөн).

Картуз тартмалары ла шулай киҫелә. Тәгәрмәстәр алып ташлана.

Быны завод кешеләре шулай эшләне.

***

Таң атты. Оҙон төн үтте. алҡын.

Надворный советник, воевода Борисов ҡалтырана-ҡалтырана торҙо. Слюда тәҙрә туң. ис ни күренмәй тышта. Ҡара томан. Крепость урынлашҡан тауын... элек Торатау тигән исеме бул а ла, хәҙер, унынса әйткәндә, Троицкий тауын шул

ғазаплы томан ҡаплаған. Кешеләр йөрөй, эттәр өрә. Йән бар.

Төнө йоҡо оҙ. Көн борсоулы.

Борисов алдында — Зарубиндың хаты, йәнә е, батша указы.

Ультиматум. Нишләргә?

Беренсе түгел. Тәүге е... Октябрҙә үк. Башҡорт яҙған. Ҡот осҡос ине.

Халыҡ йыйҙы. Ләғнәт бағана ы. Шунда яндырырға. Третьяковтар ҡатындары — Фекла, Татьяна:

— Беҙгә бир, беҙ яндырабыҙ.

Ай, уҫал ҡатындар!

— еҙ икәү.

— Беҙ шыбаға тотабыҙ! — Алды ҡайыш, тоттолар. Ирҙәре ҡарап тора.

— Юҡ, армай ала. Ә еҙ...

Халыҡ йыйылғас. Фекла — Татьяна утын өйөп, ике яҡтан ут төрттө.

Армай яндырҙы.

Бына хәҙер тағы указ. Быны ы — Зарубиндан. Хатты шымсы-алдаҡсы килтергән. Ҡайҙа ул? өйләтәләр, Зарубин хаҡында.

Тағы яндырырғамы? Сенат указы бар. Шулай яндырырға. Был юлы Феклағамы?

Тәүҙә Борисов ныҡ ине. Пугачевтан указ алғас, ҡала халҡын йыйып майҙанда, сиркәүҙәр калакул ҡаҡты. Ҡазан Мәрйәм ана ы, Смоленский Мәрйәм ана ы сиркәүҙәре, яманат бағана ы эргә ендә армай яндырҙы. Шунан тирә-яҡта күберәк. Ҡурҡа ы юҡ. Өфөлә — байҙар, служилыйҙар. Уларға ерҙәр бирелгән. Ныҡ аҡлайҙар.

Бигерәк тә генерал Кар ҡыйралғандан уң. Уға, Өфө провинция воевода ына, ауырлыҡ төшөрҙө. Ул ярҙам итә алманы. Уның ярҙамсы ы асессор Богданов Стәрлетамаҡ команда ын илтеп еткертә алманы. Бик ауыр йыйылғайны. Үҙе ҡайтты. Оҙата барырға ебәргән кенәздәр ҡайтты. Ул Ораҡовтарға асыулы.

Богданов хаҡында рапорт бирҙе. Сенат эштә үҙен ҡалдырҙы, ә ярҙамсы ын сығарҙы.

Рождество алдынан Аничковты[1] билдәләнеләр. Ышаныслы. Дворян. 1767 йыл комиссия ы депутаты. Бында Борисовтың ышаныслы кешеләре:

Премьер-майор Беловин.

Секунд-майор Пекарский.

Комендант Мясоедов.

Капитан Пасмаров.

Унтер-офицер Никита Черников.

Секунд-майор Маршилов... Стәрленән ҡасып килде.

Третьяков — помещик. Чесноковка буйында "Ключи"ҙа йәшәй.

Третьяков Федор Иванович, ҡатыны — Фекла. Федорҙың ата ы Иван — отставной драгун.

Семен Иванович Третьяков – отставной вахмистр, ҡатыны — Татьяна.

Зубовтар, Третьяковтарҙың яңы усадьба ын яр буйлап, мосолмандар биҫтә енә табан. Унда — шишмә. Ҙурая башлағайны. Әле крепость эсенә килделәр. Ҡыҫыҡ бул а ла, тыныс.

Бергәләп тәртип урынлаштырҙылар. Юғи ә, бөтә е имениеларын ташлап Өфөгә килә. Иң баштан Зубовтар. Уларҙы Борисов үҙе күсертте. Бәрҫеүән буйында. Бында өйҙәре ҙур. Ҡаршыла, Иҙел тауында, баҡса. Зубовтар эргә ендә — Третьяковтар. Иван ҡарт, ике улы... Яңы сиркәү. Шунда урынлашып, аҡ ҡуйҙылар. Форштадт кеүек булды. Ары мосолмандар биҫтә е. Уларға Борисов ышанып

*[1] Аничков Сергей И. – секунд-майор, Өфө воевода ының ярҙамсы ы.*

етмәй.

Арыраҡ — тәрән соҡор. Бәхтиәр шайка ы. Шуны бөтөрә алманылар. Черкалиха шунда. Әле инде иркенләп йөрөйҙәр. Ҡасҡындар ғына түгел, түгел...

Ә бына Ораҡовтар... Малдарын килененә — ҡумыр башҡорттарына күсерҙе. Йәнә е, атаман Арыҫланов ҡыҙы, теймәҫтәр. Ә шул килен үҙе оҙатып бөтөр әле, ти воевода.

Унан Третьяковтар күсте, Кадомцевтар... Башҡалар.

Борисов үҙенең ярҙамсы ы менән шуларҙан айырым-айырым рота төҙөнөләр. Крәҫтиәнме, дворянмы — ышаныс бул а, бөтә енә ҡорал.

Башҡорттар, мишәрҙәр бында. Губернатор указы буйынса, крепосҡа йәлеп итергә. Поляк шляхталары байтаҡ ине. Уларҙан бер рота, драгун рота ы булдырылды. Немецмы, латышмы —төрлө өн туплап, тағы бер рота.

әр ҡапҡаға — яуаплы кеше.

Ғәҙәтенсә, ярҙамсы ы иртән үҙе килә. Килде. Бергә тикшереп сығырға. Комендант Мясоедов биләмәләрен. Борисов менән Аничков, көн насар бул а ла, башняларға менделәр. Ҡарайҙар, тикшерәләр. 13 пикет. Шуларҙы ҡарап, сығып киләләр.

Себер ҡапҡа ы.

Арыш сәсеү ерҙәре, сабынлыҡ, көтөүҙәр йөрөй ине. Тәрән йырындар. Уң яҡтағы ын Соҡолоҡ[1] ( уталаҡ) йылға ы үҙенә ҡушып, Ағиҙелгә төшә. Шул йырындар әле бик ҡурҡыныс. Дозорҙар ебәрә-ебәреүен. Шундағы соҡор урмандарында күптәрен әләктереп алалар.

Ары табан тыныслыҡ юҡ. Бөтә Богородский олоҫо сотник Губанов ҡулында. Ҡә әрләйҙәр. Пугачевҡа барып, подполковник чины алып ҡайтҡан.

Усольский ҡапҡа ына баралар. Соҡолоҡ аръяғында. Унда Успенский монастырь ине. Бөтөрөлдө. Әле тыныс түгел, ундағыларға ышанып булмай. Чесноковка лагеры яғына ауып бөткәндәр.

Бөтә тирә-яҡ: Зубов ауылында — ҡараҡтар;[2] Таптыҡ, Жуков ауылында — ҡараҡтар. Вавиловта, Ҡыҙыл Ярҙа аслыҡ, аҙыҡ-түлек юҡ.

Бөтә Өфө ҡамауҙа.

Ҡай тарафҡа, ҡай ы ҡапҡаға ҡарама, бөтә әйләнәлә — ҡараҡтар.

Ҡараҡтар, юлбаҫарҙар... Борисов та, Зубов та шулай ти. Бүтәнсә әйтмәйҙәр.

Ә юлбаҫарҙар. Юл баҫыу хәлдәре элек тә булғылай ине. Йә атты алалар, йә кейем, ҡорал... Ә хәҙер сығып йөрөрлөк тә түгел.

Бында ябырылалар. Эргәлә генә бар Черкалиха соҡоро. Электән юлбаҫарҙар оя ы. Бөтөрә алмайҙар. Урман. Йырын шунда. Хәҙер шулар... хәҙер ҡыҫа, эргәлә.

Күпме кеше ен юғалтты.

Күҙ алдына килеп сығалар. аҡсыларҙы ҡыралар. Аҙыҡ, бесән алып ҡайтып булмай.

Ҡаланан ҡасалар. Ялсылар.

Бер канонир ҡасып сыҡты.

Борисов менән Аничков:

— Утын бөттө. Алып ҡайтырға ирек юҡ.

Семен Третьяков ҡайтты. Был – вахмистр.

— Күпме йөк бесән?

Аслыҡ. Бесән, аҙыҡ алып ҡайтыуы этлек.

Бер төркөм ҡайта. Татьяна алып ҡайтты. Икенсе е юҡ.

---

[1] *Соҡолоҡ йылға ы – р. Сутолока.*

[2] *Ҡараҡ (вор) – бунтовщик; ул заманда яуға күтәрелгән боласыларға ҡарата әйтелгән.*

Икенсе е — Третьяков Федор. Ул тылмас. Федорҙың ҡатыны — Фекла.

Шул Татьяна менән Фекла ирҙәрҙән уҫал. Команда алып китәләр ҙә алып ҡайталар.

Фекла бер крәҫтиәнде алып килгән. Фекла крәҫтиәндәренә үтескә аҡса бирә. Үҙен аманатҡа ала. Устинды тотҡан, өс йыл. Әле яу башланғас, шуны ҡотҡарған. Үҙенә хеҙмәт итергә.

Шуны Чесноковка лагерында йөрөткән икән.

— Осраманылармы?

— Күптәр. Ҡара яу. Ә мин үҙ ауылымда бит. Федор Иванович тирмәненә барам, ти.

— Ниҙәр күрҙең?

— Шул казактар, башҡорттар.

— Крәҫтиәндәр күпме?

— Бөтә е лә.

— Башлыҡ кем?

— Шул, граф Зарубин.

— Граф?

— Эйе, шулай тип ҙурлайҙар. "Фельдмаршал Чернышев" тип тә әйтәләр.

Хихылдап көлөрҙәр ине. Әле — асыу, аптырау.

Аничков шымсы Устинды саҡ-саҡ бәреп осорманы.

— Алдай ың, сволочь!

— Ишеткәнемде әйтәм. Свят, свят, — суҡына теге е.

— аташа ыңмы? Захар Григорьевич Чернышев Хәрби коллегия президенты бит.

Шымсыны ебәрҙеләр. Бындайҙар күп килә. Шулар аша танышып торалар.

Мясоедов:

— Уларҙың башы ла шул ағас Петр бит инде.

Борисов:

— Уны ы уйын түгел. Фельдмаршал тигәнен ебәргәс, тимәк, беҙҙе ныҡлап ҡыҫырға теләйҙәр. Ғәскәре күп.

— Ҙур...

Ябырылалар. (Шул ваҡытта яндырта, күҙ алдында.)

Өфө кешеләре ныҡ тора.

25/I-74. Төн.

Хәҙер воевода менән өйләшеп тороп булмай. атыулаша башлар. Шулай булғас, Ағиҙел ярына тыу текәп тороу түгел, шым ғына...

Буран ҡуҙғалды. Ләкин, буран тип, туҡталып булмай. Билдәле батареялар ата. Уны алдан беләләр, тиҙерәк яҡынайырға. Баҫып алырға ла, кире бороп, атырға.

Зарубин Усолка тауындағы батареяға ынтыла.

Төрлө урындан. 12 мең кеше хәрәкәткә килде...

Усолка тауына Зарубин туптар ҡуя. Тупҡа ҡаршы — туп. 200 сажень ара.

Ҡасҡын — Ҡалмыҡ баҙарынан.

Ярға етеү менән атырға яҫҡына башланы. Йәҙрәләр шартлай. Ләкин алға барыу хәйерле.

Боҙҙо сығып, туҡталмай, ат өҫтөндә янын ҡора.

Тауға сыҡтылар. Илья, Фрол ҡапҡаларына. Саңғыла 4 туп килтергән.

Илья пикетында Ульянов туптары аталар. Ҡалҡандар юҡ. Күптәре эйәр сергеен ҡатлап тотҡан, ул да аҡлай.

...Красный Ярҙан Вавилов пристаненә Ульянов Илья көстәре Ҡазан пикетына ябырылдылар, Ҡазан ҡапҡа ынан.

Зарубин ҡалаға инә. Ҡаршыға күсмә батареяны килтереп өлгөртә. Көтмәгәндә

атыш. Гөр өлдәп ҡалтыранды. Артҡа, Соҡолоҡҡа табан, сигенделәр.
Ҡаланан вылазкала этәләр.
Яҡын килтергән туптар ҙа, улъя итеп алынған дары ла ҡалды.
Атамандар тағы алға әйҙәй. Шунда Өфөнән бер аҙ кеше сыҡты.
Зарубин:
— Ах, ауыр бомбалар осора ы ине. Был пушкалар пушкамы ни?!
Пушкарҙар туҡтаны.
— Ах, черт, ниңә туктаның?
— Йәҙрә юҡ. Бөттө.
— Тап тағын.
Ҡайҙан тап ын?
Шулай ҙа Чесноковка тауынан киләләр.
— Бына йәҙрәләр.
— Давай, дөмбәҫләгеҙ!
Күпме генә.
Губанов был юлы ла уңланы. Дудкин перевозынан килеп сыҡты. Соҡолоҡта ( уталаҡ) тәүге бәрелеш. Ул Себер юлынан килә. Ҡаланың ситке урамдарына инде. Кремль стена ы яҡын.
Тәрән ҡар. Ҡарҙа аттар бата. Өҫтән йәҙрәләр төшөп, ҡарҙы борхотто. Ҡар ҡоймалар менән тигеҙ.
Ҡаланы яртылаш алдылар.
Эстән батарея килтерҙеләр.
Резерв тубын воевода шунда күсертә.
Графтың аты яралана.
Ун сәғәт буйы уғыш барҙы. Сигенәләр.
25/I. Ябырылыуынан уң башҡаса булманы, файҙа ыҙ.
Үлтермәҫкә, ҡырмаҫҡа!
Ҡыҫырға. Сығармаҫҡа. Аслыҡ еңер.
Үҙҙәре ҡул күтәрерҙәр.
Өфө — ғинуар-февраль айы – мародерлыҡ.
Ундай хәлдәр булғылай торҙо. Сара күрелә торҙо. Ә бер аҙҙан, бына февралдә алыҫтан — ҙур эш Рождественский заводынан.
Хәлдәре ауыр, заводта эш туҡталған. Кешеләр ас. Ғинуар. Тулва башҡорто Семен Илешев ҙур отряд менән килгән дә ҡаҙнаны алған, аҙыҡ-түлек мөгәзәйҙәре асҡысын кеҫә енә алған. Алып та китмәгән, әммә Зарубинға ебәрмәгән. Аҡса бит эшләүселәргә түләргә — байҙыҡы түгел, беҙгә тигәне, тиҙәр.
1/II ялыу яҙғандар. Батшанан орайҙар.
Зарубин уҡый Ҡасҡынға (теге хәлде хәтерләп).
— Нимә эшләтәбеҙ?
— Ҡайтарып бир ен!

8

Пугачев хәлдең ауырлашҡанын аңлай. Уның хәрәкәтенә ҡаршы юҡҡа ғына шул саҡлы ғәскәр ебәрелмәй бит! Командующий ҙа бәләкәйҙән түгел. Генерал Карҙың бәләкәс булыуы бик тиҙ күренде: көйәнтә тигеҙ булманы. Буш нәмә булып, бик тиҙ өҫкә ҡалҡынды. Ә был, генерал-аншеф Бибиков...
Ай-ай, ҙур генерал! Уны белә Пугачев. Польша кампания ының башлығы... Тимәк, бындағы уғышты ла императрица шунан кәм иҫәпләмәй. Ҙурыраҡ тимә ә...
Бибиков килә, уға яңынан-яңы көстәр ебәрелә.
Ҡаршы тороуҙары уғата ауыр.
Пугачев армия ын уҡмаштырырға, өйрәтергә теләй. Ойошҡанлыҡ, тәртип

кәрәк. Ләкин уны бөтә полковниктары ла яратмай. Тыңламайҙар, көләләр.

Штурм булғайны, ҡаланан вылазка эшләнде. Валленштернды ҡыйраттылар. 8 туп алынды, 280 кеше ен үлтерҙеләр, күпме яралы... Уны ын иҫкә алмайҙар, ә бына сигенгәйнеләр... Уны ынан көләләр.

Башҡорттар хаҡында өйләшергә булды.

Килеп керҙеләр. Кем нисек: ултыралар, баҫып торалар.

— Тәртип менән ултырығыҙ.

Инде Кинйә, Иҙеркәй. Бил бөгөп иҫәнләштеләр.

— Бадишам хәҙрәттәренә аулыҡ теләйбеҙ.

— Йән тыныслығы бул ын.

Пугачев, казактарға күр әтеп:

— Ана, шулай кәрәк.

Ул батша булып килештерергә тырыша, ә тегеләр:

— Нимә, беҙ ҙә арт менән йөрөйөкмө? — тип телләшә. Кинйә, Иҙеркәй, Садыҡ, Алиев төрки ғәҙәт буйынса батша янынан сыҡҡанда, уға әйләнеп, эйелә-эйелә сығалар ине. Шуны уйлап әйтәләр.

— Тыңла ағыҙ, нисек тә ярай.

— Ә ин беҙҙе хурлама... Уларҙы маҡтай ың, полковник чиндары бирә ең.

— Кемгә? — тине Пугачев.

Ҡай ы берәүҙәре Кинйәгә ҡарап алды. Ул үҙе түгел... Әммә, башҡортонда, татарында, ҡалмығында ла атаман күп, тигән ҡараш ине был.

— Кемдәр килә, шуға атаман биреү кәрәк түгел. Килгән бере енә полковник чины, сотник, полусотник та еткән уларға.

Кинйә:

— Уларҙың үҙ алайы бар. Шуға полковник бирелә.

Кинйә ағайҙы: "Был ни тигән үҙ?" — Йөрәген өйкәне тегеләрҙең үҙе.

Пугачев:

— Улар миңә тоғро хеҙмәт итә. Берәй офицерҙы килтереп ҡуяйыммы? Әллә генералмы? Кемдең янында көс бар — шул сотник, шул полковник. Йәш ти ең. Ана, Салауат. Ул уғышты. Ә ин...

Федулев ҡалтыранды, күҙҙәре аларҙы. Ысын батша түгелен ишетеп ҡалғайны, юҡ, Емелька өсөн үлә е бармы уның.

— Мин уғыша белермен, — ҡыҙҙы теге. — Ну кем өсөн? ин бит... Юҡ, брат!

Бөтә е ағайҙы. Ҡалҡындылар. Пугачев ҡылысын сығарҙы, Федулев та. Кинйә, Чумаков араға килеп керҙе. Тотоп алдылар. Ыҙғыш яҡшыға илтмәҫ.

Федулевты бер яҡтан Хлопуша, икенсе яҡтан Перфильев ситкә елтерәттеләр, ул янурҙыҡҡа[1] лап итеп барып ултырҙы.

— ай, Филин... — тип мыңғырланы.

Кинйә тағы аптырай. Пугач... Филин — өкө, ябалаҡ... Уның олата ының, Михайлоның, ләҡәп ҡушамат исеме шулай булған, имеш.

үҙ еҙ ҡалдылар. Шомло тынлыҡ. Пугачев та өндәшмәй.

Витошнов артҡа янтайып ултырҙы.

— Былай булмай, уйлашайыҡ.

Пугачев үҙҙән бүлдерҙе. Әйтмәй тор он әле әйтерен.

— Ниндәй чиндар кәрәген әйтә еңме? Кем хеҙмәт итә? Ҙурыраҡтары ла булыр. Батша янында генерал да, фельдмаршал да була. Граф, губернатор, сенатор... көллө ө. Тоғро хеҙмәткә мин затлы кенәз ҡыҙҙары бирермен. Әммә үҙ-ара тауыш булма ын. Ашағыҙ-эсегеҙ.

Араҡы килтерҙеләр. Аш. Пугачев попты саҡыртты.

Килеп керҙе. Өҫтәлдәгене күреп, мыйығын ыпырҙы.

Пугачев попҡа ҡарап:

---

[1] *Янурҙыҡ — ишек янындағы тар лавка (автор үҙлегенән).*

— Әйт әле, батюшка, все люди едины у бога, тип ҡайҙа әйтелгән? — Көтөлмәгән ораауын сәпәне.

Старовер скиттарында күп тапҡыр ишеткән үҙҙәре ине, моғайын.

— Ә, шулай, әйтәбеҙ уны... Отец Феодосий Косой әйткән: "Все людие едино суть у бога и татарове, и немцы, и прочие языцы". "Все веры во всех земляц одинаки", — тигән.

— Ул Косой еретик бит, тиҙәр.

Пугач:

— Дөрөҫ әйткән.

— Да, любовь к богу, еси любовь к ближнему.

Тынысландылар. өйләшеп алдылар. Берәү чарканан эсә, берәү йырлай:

*Выплывают расписные*
*Стеньки Разина челны...*

Пугачев:

— Улар уғыша... Ә бына әйтегеҙ: ниңә Яйыҡ крепосы алынмай, ниңә Ырымбур ҙа?..

— Ә алып ҡара.

— Алырмын... Ана, Хлопуша Илек Защитаны алған бит.

Ул шат. Яңыраҡ Тоҙтүбәне алған. Игенде халыҡҡа биргән, Бердаға ла алып ҡайтҡан. Тик шатлығы бынан ғына түгел. Шунда ул үҙенең ҡатынын, улын осрата. Ҡатыны икенсе кешелә кейәүҙә бул а ла, Бердаға алып ҡайта.

— Эштәр насармы? өйлә.

— Эштәр шәп. Еңеү беҙҙеке!

Пугачев Кинйәгә:

— Кинзей, өйлә. Салауат ҡайҙа?

— Ул тағы Красноуфимға әҙерләнә.

— Белобородов?

— . . . . . . . . . . . . . .

— Грязнов?

— Силәбене алдылар.

Кинйә өйләй, ә Максим Горшков дөрөҫләй, Максим Шоғаев эйәк ҡаға. Пугачев, ана бит, тигәндәй, күкрәк кирә.

Пугачев килештерә ине. Губернаторға указдың бере ен яҙғанда:

— Пруссакка пруссак ымаҡ яҙырға! — тине.

Немецса "Peter" тип исемен яҙҙылар. Мисәт эшләтеп алды яҡшынан.

Быны февралдең етеләрендә ҡәлғә нигеҙен икенсегә ҡаҙғанда эшләйҙәр.

Яңы мө өр. Пугач ҡушыуы буйынса көмөштән киҫеп эшләттеләр. "БГППТ императора и самодержца Всероссийского 1774" тип ырыйҙар. Уртала — йәш кешенең күкрәктән үрәте. Профиле, йәғни.

Уның "император" башында — парик, венок менән биҙәлгән, өҫтөндә — ҙур булмаған таж, тәреле, яурынында — мантия. Килештергәндәр!

Хәрби коллегияның мисәте бар хәҙер.

Тик был хәл ҡай ы бер атамандарға оҡшаманы.

— Ай-ай, сыбыҡтан сыбыртҡы булған, — тип көлдө Шибаев Иван.[1] Ә Чумаков:

— Беҙҙең башҡа менеп ултырҙы.

— Беҙгә ҡалай килеп йығылғанын онотҡан, — ти Лысов.

Ҡарт Яков Почиталин кет-кет көлөп алды, тер әге менән Илек казагы Твороговтың ҡабырға ына төрттө.

Беләбеҙ, йәнә е. Уны ы... Пугачевтың кем икәнлеген улар ис шикләнмәй белә, тик улар ғына белә. Шулай ҙа улар үҙҙәре Пугачҡа асыҡ әйтмәйҙәр, ни бары Чу-

[1] *Шибаев Иван – Илек казагы, б. к. полковнигы.*

маков менән Шибаев сәменә тейеп, ҡоторталар ғына.

— Беҙ батша я анын — беҙ бөтөрәбеҙ. Пугач ни, филин ни, ябалаҡ ни!

Бер көндө обходтан ҡайтып килгәндә Шибаевҡа Пугачев бәйләнә башланы.

— Крәҫтиәндәрҙе талаған ығыҙ, — ти Шибаевҡа Пугачев. — Ялыуҙар бар. Ундай эшкә дар ағасы тейеш!

— Минеме?!

— ине лә.

Пугачев та ҡысҡырҙы, ҡулын ҡылыс абына алды. Ҡынынан сығарманы, ә Шибаев сығара биреп, кире тыҡты.

Ул артҡараҡ ҡалды ла өңгө ырғытырға яйланды. Шул саҡ әр ваҡыттағыса арала буталып, Пугачевҡа ыйынып йөрөгән Емеля килеп сыҡты.

— Осударь! — тип яр алды ул, йөрәк ярып.

Пугач тайшанды, өңгө эргәнән генә жыйлап осоп китте. Пугач эйәрҙән эйелеп өңгөнө алды, үҙенә сәнсәм тип боролдо, тик туҡталды. Нишләтергә быны? Үлтерергәме, бығаулап ябып ҡуйырғамы? Бүкәнгә бәйләп, сылбырла аң... Үҙенең дә шундай хәлдә ҡалғаны бар. Ауыр. Ләкин теге ҡасты... Ярамай, юҡ, үҙ ҡулы менән булма ын. өңгөнө Емеляға бирҙе.

— Мә, Емеля, твоя неделя... — Бер ум аҡса бирҙе. — Шулай бул...

— Рәхмәт, атаҡай... Осударь-батюшка.

— Будь послушаше...

Емеля үҙе үк дауам итте.

— ...Яко агнец....

— Был юлы маҡтанып өйләнмә.

— Ослушаше яко...

Ә Шибаевҡа берсә ерәнеп, берсә өтөп алырҙай итеп ҡараны. Витошнов ҡартҡа:

— Коллегия үҙе ҡара ын, — тине. — Ә минең халыҡҡа азатлыҡ яулай ым бар.

...Икенсе көндө Хәрби коллегия Шибаевты аҫырға хөкөм итте. Хәрби коллегия ағзалары — Шибаевтың үҙ казактары: бергә йәшәгәндәр, балыҡ аулағандар, яу сапҡандар... Бөгөн тәртип боҙғас, ис икеләнмәнеләр. Яман ваҡыт, яуаплы ваҡыт, тәртип боҙолорға, сафтар ҡаҡшарға тейеш түгел...

Пугачев халыҡ алдында:

— Мин таларға юл ҡуймам. Бына ошо булыр сара ы, — тине.

Ләкин эш быының менән генә төҙәлмәй. Яйыҡ атамандарының аңлауынса, эште көйләп, бөтә булған хәлде, тарҡала башлауҙы бөтөрөү, бер атаманды аҡлау өсөн улар ис көтмәгән ҙур сара күрергә булдылар. Үҙ-ара өйләшеп алдылар әм өйләндерергә ҡарар иттеләр. Императорға императрица кәрәк бит.

— Беҙгә Яйыҡ ҡала ын алмай булмай, — тине Витошнов ҡарт. — Шартлатам тигәйнең...

Уны башҡалар яҡланы, Пугачев дәртләнде.

— Шартлатам... Алабыҙ.

әм Пугачев китте.

Үҙе менән тағы Витошнов, Перфильев, Иван Фофанов[1], Емеля эйәрә.

— Давай, давай, мели Емеля... — ти Пугачев.

Урам аша ынан ҡаҙыйҙар. Бындайҙы Пруссия уғышында күрҙе. Рәтен белә. Мискә-мискә дары әҙер.

Эште көйләйҙәр... Ҡаҙыйҙар.

Ә Пугачевты гүләйгә алып сығалар. Яйыҡ буйы. Ҡайынлыҡ... Бәлки, үҙ ҡалаларын күр әтергә. Ҡыш әле. Хозурлыҡ күренмәй. Юғи ә, йәй көнө, Сағын буйы... Исеме лә монголса. Аҡ тигән үҙ. Көмөш кеүек аҡ, күҙ сағылдыра.

Әле бүтәнсә башын әйләндермәкселәр.

Өйләнергә?..

---

[1] *Фофанов Иван Алексеевич — Яйыҡ казагы, б. к. Яйыҡ казак ғәскәре старшина ы.*

Уға үҙҙәренән бер ҡатын-ҡыҙҙы государыня итеп, үҙҙәренә ныҡлап бәйләргә. Ташҡа йәбештереп ултыртҡан кеүек булыр, тинеләр.

Пугачев тәүҙә күнмәне. Яуаплы ваҡыт. Ә өйлән ә? Эшкә ҡамасаулай. Ни тиерҙәр?

— Ә беҙ нимә тиербеҙ? — тинеләр атамандар. — Беҙҙе анға уҡмай ыңмы?

Килешәме уң? Килешә. Хәҙер — казак йола ы, Гугня атамандан ҡалған изге йола. Пугачев белә. Бер заман ошонда йөрөгән ҡасаҡтар ғаилә менән йәшәмәгән. Берәй ергә ябырылып, ил баҫып, малын, ҡатын-ҡыҙын алып килгәндәр ҙә, әйттереп-типтереп, икенсе урынға шылғандар. Мал да бөтә, йәриә итеп алып килгәндәре лә бөтә... Ә атаман Василий Гугняның йәриә е — Фатима. Үҙе ылыу, үҙе аҡыллы, ярай ҙа, ярата ла белгән. Гугня үлтермәгән, Коловоротныйҙа (әлеге Яйыҡтан 60 саҡрым) торғандар. Китергә кәрәк. Гугня ылыу Фатима ын унда ҡалдырмаған, башҡалар ҙа... Шунан киткән казакта Гугня йола ы: эйе, ул ҡатынлы булырға тейеш. Ә Фатима — Гугниха-зат, ана булып (прабабушка) ҡала, изге анала, уның хөрмәтенә, табында шарап эскәндә, тәүге үҙ уның хөрмәтенә әйтелә.

Ә батша... Казактар батша ы. Ни эшләп казактар йола ын тотма ын, уны изге күрмә ен. Атамандың — атаман ша ы, императорҙың императрица ы була.

Пугачев белә, уның станица ында элек яу күтәргән Степан Разин да персиянка Шахзадәне алып йөрөткән.

Батша кешегә затлы нәҫелдән тейеш кәләш. Кенәз, баяр ҡыҙы тейеш. Ә быны-ы... Ысын батша түгел, тиерҙәр. Ул — халыҡ батша ы, государыня ла казактан бул а? Тегеләрен — граф, кенәздәрҙе — ҡырып бөтөрөргә.

Күнде. Ҡыҙҙарҙы бер өйгә — уйынға йыйҙылар. Әйҙә, күҙлә ен батша.

Күҙләү. Күптәр. Бере е күңел яр ытып йырлай. Уның халыҡ өсөн йәне көйгәне иҙемләнә:

*Алға ҡара, батыр атла,*
*Беҙ ирекле, тип әйт ин...*

Ҡыҙҙар күңелсәк. Биҙәнгәндәр. Йәй бул а, улар баштарына сәскәнән таж үреп кейә. Әле ҡағыҙҙан килештереп я ағандар, мәрйенле таҫма ураҡкандар, сәс ҡапламай ғына. Бисәләр кокошниктар кейә.

Уйнайҙар, бейейҙәр. Йырлайҙар.

Бере е... Бигерәк ылыу, буйға зифа. Йөҙө балҡый. Күҙҙәре!... Тауышы уң!

Ай, бындай бәхет хаҡында берәй ваҡыт, хатта йәш сағында хыял иткәнме ни ул. Ә хәҙер ул бәхет, ул хозурлыҡ — уның күҙ алдында, уның ҡулының усына бына-бына тамам, тип торған яҙғы тамсы кеүек. Ул атамандарға шуны белгертте.

Петр Кузнецов казактың ҡыҙы Устинья икән теге сибәркәй.

Ата ы, әсә е был айлау үҙ ҡыҙҙары бәхетенә төшкәнгә, ай- ай, шат. Шулаймы-түгелме, бындай ваҡытта шулай булырға ҡушалар.

Устиньяның үҙен дә күндереп өлгөргәйнеләр.

Батшабикә булыу бәхете — әр ҡыҙҙың хыялы түгелме ни?

Ә ул батшамы? Кем уң? Әлбиттә, бөтә е баш эйә уға. Ярай әле, уның күҙе бүтәнгә төшмәгән.

Өлкән атамандар ир баштары менән ышанып ихтирам иткәнде, йәш кенә ҡыҙ нисек илтифатлыҡ күр әтмә ен, ти.

Устинья ораша:

— Екатерина насар булдымы?

— Эсте ул, уйнаш итте. Хыянат. Хилаф...

— Ниңә мине ала ың? Гона ...

— Ете йыл айырып торғас, гона юҡ, балаҡай. Мин... 12 йыл буйҙаҡ. Ул үҙе Орловҡа кейәүгә сыҡмаҡ...

Шулай ҙа Устинья, икәүҙән-икәү ҡалып өйләшкәндә, ялындырған булды.

Ҡыҙҙарҙы бында элек-электән ҡурҡытып өйрәткәндәр. Атамандар ҡыҙҙарҙы ташлап китә лә ә. Элек хатта алып торғандар ҙа яҡты донъянан үткәреп киткәндәр. Борон Яйыҡ казактары шулай иткән, тиҙәр.

— Атамандарға ышаныс юҡ.
— Мин — батша.
— ин дә ташлар ың мине...
— Юҡ, батша алдамай. үҙе бер була уның.
— Ярай ҙа, Гугня атаман кеүек бул аң. Ул беренсе... Фатима ын ташламаған.
Пугачев белә Гугня хаҡында. Фатима ын Гугниха тип атағандар. Күпме-күпме ваҡыт үт ә лә, әле лә үҙҙәренең төп өләсә е итеп иҫәпләйҙәр. Яйыҡта әр табында тәүге чарка шул өләсә е хөрмәтенә күтәрелә.
— Ә ин, Устинья, казак ара ынан беренсе государыня була ың! — тине Пугачев. — Будь послушаше яко агнец.
Ҡыҙ берсә оялды, берсә ҡалтыранды. Шунан йылмайҙы.
— Нимә ул?
— Бәрән...
Ҡыҙ көлә... Ләкин шулай матур, батшаларса йәтеш үҙҙәр. Әлбиттә, тыңлар. Батша ҡатыны... Әллә төш, әллә әкиәт, ожмах ти әң... Ишеткәнме, уйлағанмы...
...Подкоп башланғайны. Яңы ерҙән. Складҡа, дарыға мохтажлыҡ.
Туй ҙа була.
Пугачевты бында оҙаҡ тороу борсой. Икенсе тапҡыр. Шулай булалыр: йөҙ йылдар сама ы элек Степан Разин да, үҙ ватага ы менән Гурьевтан Яйыҡ буйлап күтәрелеп, ошо урында, ана, эргәлә генә, Күрән тигән урында ҡышлаған. Минең дә ҡышым уҙҙы ошонда берсә килеп, берсә Бердаға ҡайтып. Икенсе тапҡыр килдем. Ярай, Стенька бынан Каспийға төшөп, персиянка эҙләп киткән, ә мин... бында таптым.
Тик бына подкоп...
Туйҙа Емеля ла бар. Уға ла өлөш тейҙе. Быны инде ул, ғүмере бул а, туйҙа булдым, бал эстем, мыйыҡтарымды мансыным, ис онотмам, тип әйтер.
Круг йыйҙылар. Ҡотланылар. Пугачев указ уҡытты.
Атаман айлау.
— Кемде теләй егеҙ, шуны айлағыҙ!
Каргин[1] — атаман.
Афанасий Перфильев, Фофанов Иван — старшиналар.
— Любо?
— Любо, любо! — Бүректәр оса.
Үҙенә лә ышанысլы казактар.
Старшина Перфильев шул көндө үк капитан А. П. Крылов[2] менән барышлыҡ өйләшеүе.
— Ҡорал ташлағыҙ! Ысын государь Петр Федоровичҡа баш алығыҙ!
19 февраль. Яйыҡ, икенсе штурм.
Икенсе подкоп әҙер. Архангель сиркәүе аҫтына. Уның баҙында — дары запасы.
20 февраль Пугачевҡа сапҡын хәбәр килтерҙе. Ә шул көндө бер малай хәбәр итә: Крыловҡа дарыны күсерәләр. Икенсе көндө филтәгә ут төртәләр. Шартлау. Сиркәү емерелә. Ә бүтән зыян юҡ.
Шул көндө Яйыҡтан китә Пугачев.

*(Дауамы бар.)*

[1] *Каргин Никита Афанасьевич — б. к. Яйыҡ казак ғәскәре атаманы.*
[2] *Крылов Андрей Прохорович – капитан, Яйыҡ гарнизонының командиры, Симоновтың ярҙамсы ы.*

# ЮҒАРЫ МӘКТӘПТӘ БЕЛЕМ СИФАТЫНА ИДАРА ИТЕҮ КРИЗИСЫНЫҢ СӘБӘПТӘРЕ

Билдәле тарихи дәүерҙәрҙә йәмғиәт үҙенең ижтимағи-сәйәси, социаль-иҡтисади, рухи-мәҙәни ихтыяждарына ярашлы юғары белем биреү мәктәбенә талаптарҙы көсәйтә. Хәҙерге мәғариф донъялағы глобалләштереү, ғилми-техник прогресс, информацияның күп төрлөлөгөнә бәйле үҙгәрештәр кисергәндә, белгестәрҙең оҫталығын даими камиллаштырыу мәсьәлә е ҡырҡыулаша. Тимәк, юғары белемдең, уҡытыусыларҙың йәмғиәттәге урыны киңәйә, дәрәжә е күтәрелә. Яңы социаль-сәйәси шарттар, уҡыу программаларының күп төрлөлөгө, Рәсәйҙең донъя илдәре менән бәйләнешенең көсәйеүе, белем алыусылар менән мәғариф ара ындағы яңы мөнәсәбәттәр белем йөкмәтке енә, уҡыу алымдары әм белем сифатын ба алауға ҡәтғи талаптар ҡуя. Уларға дөрөҫ яуап табыу өсөн барлыҡ уҡыу программаларын да тәртипкә алыу маҡсатҡа ярашлы. Был тәртип Ватан мәғариф өлкә енең бөтөнлөгөн, белем биреүҙең башҡа алдынғы илдәрҙекенән ҡалышмауын, белем тура ында Рәсәй мәғарифы биргән документтарҙың бөтә донъяла танылыуын, граждандарҙың белемгә тиң хоҡуғын тәьмин итеүҙе күҙ уңында тота. Юғары мәктәп үҙ бурыстарын уңышлы атҡар ын өсөн яңы уҡыу йорттары асыу, уҡыу, ғилми-тикшеренеү программаларын заман талаптарына яраҡлаштырыу, уҡыу система ын яңыртыу, юғары белемгә киң юл асыу, белемде ба алау, диплом, ғилми дәрәжәләр биреүҙә яңы ысул әм процедуралар кеүек белемде сағылдырған саралар ғәмәлгә ашырылды.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күпселек осраҡта мәғарифтың әлеге өлгө ө түбән психикалы кешеләргә йүнәлтелеп, теге йәки был шарттарҙа үҙ аллы ҡарар ҡабул итергә әләтле, тәүәккәл, йыйнаҡ, ил тура ында хәстәрләй алырлыҡ белемле, әхлаҡлы кешеләр тәрбиәләргә мөмкинлек бирмәй. Уҡыу предметтары, программаларының аныҡлыҡҡа мохтажлығы, белемде ба алауға, уҡыу-уҡытыу ысулдарына контролдең йомшаҡлығы Ватан мәктәбендә белем алыуҙы планлаштырыуҙағы етди етеш еҙлектәр барлығына ишаралай. Был студенттарҙың сессиялар ара ында нисек уҡыуына элек-электән иғтибарҙың етешмәүенә, уларҙың программаны нисек үҙләштереүенә төп ба аның имтихан алған ваҡытта ғына бирелеүенә ҡайтып ҡала. Уҡыуҙың йөкмәтке е әм өҙөмтәлелегенә ҡарата әле йәшәп килгән талаптар юғары мәктәп тамамлаусыларға килеп тыуған проблемаларҙы хәл итергә, туҡтау ыҙ үҙгәреш кисергән социаль-мәҙәни мөхиткә яраҡлашырға булышлыҡ итмәй. Кире енсә, белем ҡаҙаныштарының аңлайышлы нормативы булмаған саманан тыш " ығылмалы" уҡыу программалары әм пландары юғары белем алыу юлында кәртәләр ҡороп, был норманың юҡҡа сығыуына килтерә.

Мәғарифтың әлеге өлгө ө йәмғиәт әм матди етештереү тармағы тарафынан ҡуйылған талаптарға яуап бирмәй башланы. Уҡыу процесын педагогик әм интеллектуаль йә эттән яңыртыу өсөн заман ихтыяждарына йүнәлтелгән яңы философик әм педагогик башланғыстар етешмәй. Әлеге мәғариф кризисы тура ында ошолай әйтергә мөмкин: элекке индустриаль мәҙәниәтте ҡәнәғәтләндергән белем биреү алымдары иҫкерҙе, бөгөн ул яңы башланғыстарға мохтаж. Бөгөнгө юғары мәктәптең уҡыу процесында ҡатнашыусылар шуны иҫәпкә алырға бурыслы:

хәҙерге кеүек глобалләштереү процестары барған мәлдә кешенең өнәри потенциалын бер юлы әм ғүмер буйына етерлек дәрәжәлә әҙерләп булмай. Мәғариф реформа ы юғары белемде әлеге эше күпләп биреүҙән әр студент менән ижади эшкә күсеүгә ҡайтып ҡала. “Белгес” төшөнсә е лә үҙгәрә, ул заманса технологияларҙы яҡшы белгән, үҙ Ватаны әм сит илдәрҙең ғилми ҡаҙаныштарын ҡулланырға, әүҙем әм яңы ижтимағи шарттарҙа ышаныслы эш итергә әлөтле шәхес булырға тейеш. Рәсәйҙең Болон килешеүенә ҡушылыуы, Европа юғары мәктәбенең берҙәм система ына инеүе илдә мәғарифты үҙгәртеү буйынса етди фекер алышыуға этәргес бирҙе.

Юғары мәктәптең төп йөкмәтке е – белем биреү булып, уға ҡағылышлы реформалар белем сифатына ыңғай йоғонто я аҡанда ғына профессор-уҡытыусылар тарафынан ыңғай ҡабул ителә ала. Белем сифаты – юғары мәктәп тамамлаусының теге йәки был өлкәлә ҡағиҙә булған талаптарға яуап бирерлек өнәри әләте. Студенттарҙы шәхес булараҡ әм өнәри йә эттән әҙерләү сифатын яҡшыртыу мәсьәлә е социаль-педагогик йә эттән бер ҡасан да ә әмиәтен юғалтмай. Белем сифаты йәмғиәт менән дәүләттең милли мәғарифҡа ҡуйған социаль заказы менән дә билдәләнә. Тармаҡтың хәле, граждандарҙың сифатлы белем алыуға ынтылышы дәүләт эшмәкәрлегенә бәйле. Белемдең нигеҙе юғары мәктәптәге уҡыу йөкмәтке е әм сифатына ҡарап барлыҡҡа килә. Белем йөкмәтке е Дәүләттең белем стандарттары тарафынан нормаға килтерел ә, сифат, өҙөмтәлелек уҡыу йортоноң мөмкинлектәренә, уларҙы файҙалана белеүгә бәйле. Уҡыу барышындағы ә әмиәтенә ҡарап, мөмкинлектәр түбәндәге төрҙәргә бүленә: уҡытыусылар әм мәғариф эшмәкәрлегенең социаль стимулдары, студенттар әм уларҙың белем алыуға ынтылышы, матди-техник база, финанстар әм уҡыу йорто коллективының сифаты, белем биреү ысулдары әм педагогик фән. Юғары уҡыу йортон тамамлаусының әҙерлек сифаты и ә уның аҡыл кимәленә, уҡыу программа ын үҙләштереүгә күпме көс алыуына бәйле. Студентттың шәхси тырышлығы белем туплауҙа хәл иткес роль уйнай, ә уҡытыусылар и ә уҡыу процесын ойоштора, тәьмин итә, уҡыусы өсөн теге йәки был стимулдар булдыра. уңғылар рәтенә методик әм техник тәьминәтте, диплом яҙыусыларға ҡарата ҡулланылған матди әм әхлаҡи стимулдарҙы индерергә мөмкин. Был үҙенсәлекле алым – катализатор – уҡыу процесына идара итеү, белем сифатын яҡшыртыуҙа мө им роль уйнай.

Хәҙерге юғары мәктәптә уҡытыу-тәрбиә йөкмәтке е студенттарҙың шәхси әм өнәри үҫешенә етерлек дәрәжәлә булышлыҡ итмәй, сөнки был процестар даими түгел, йоғонто о ла юҡ дәрәжә ендә. Былар, әлбиттә, юғары мәктәптә белем сифатын төшөрә. Ошо йә эттән мәҡәлә башына сығарылған төшөнсәләрҙе асыҡлап китеү урынлы. Тәүҙә идара итеү тура ында. Уның билдәләмәләре байтаҡ булып, бары ын бергә туплағанда шул аңлашыла: идара итеү – кешеләрҙе ниндәйҙер маҡсатҡа өлгәшеү өсөн бергә туплаусы үҙенсәлекле эшмәкәрлек. Идара ителеүсенең (коллектив) идара итеүсе (етәксе) тарафынан бирелгән күр әтмәләрҙең үтәлеүен тикшереү ҙә ошо төшөнсәгә инә. Идара итеү теория ы әм ғәмәленең төп йөкмәтке е – белем биреүҙе уңғы өҙөмтә буйынса ғына ба алау кеүек әле йәшәп килгән ғәҙәттәрҙән баш тартыу. Яңы ҡараш белем сифатына идара итеүҙең дөйөм система ын булдырыуға махсус ба аламалар ярҙамында уҡыу процесының торошон көйләүгә әм аҙаҡ килеп уңғы өҙөмтәгә йоғонто я аған факторҙарҙы иҫәпкә алырға тейеш. Ныҡлы уйлап, оҫта идара иткәндә, иртәгә е көндө, кисәгене анализлай белгәндә генә уҡыу-тәрбиә процесын тулы ынса әм маҡсатҡа ярашлы итеп көйләргә мөмкин. Ғилми мөмкинлектәр етерлек булғанда уҡыуҙы сифат йә әтенән яңы кимәлгә күтәрергә юл асыла. Объектҡа ба а биргән, уны башҡаларҙан айырып торған үҙенсәлектәр йыйылма ы – “сифат” төшөнсә е мәғарифҡа ла ныҡлы үтеп инде. Ҡай ы бер ғалимдар фекеренсә, белем сифаты – я -алма төшөнсә, ул система булараҡ мәғариф үҫешен әр яҡлап сағылдырып, үҙ эсенә педагогик эшмәкәрлектең төрлө яҡтарын ыйҙыра. Педагогик фән күренеше булараҡ “мәғариф сифаты”ның билдәләмәләре байтаҡ, был уны бөтөн итеүсе өлөштәргә лә ҡағыла. Мәғариф – мәҙәниәттең мө им өлөшөнөң бере е, ул билдәле

мәҙәни мөхиттә, фән менән әхлаҡ сигендә үҫешә. Социаль фән әм белем тап мәғариф сиктәрендә ҡабул ителә, үҙләштерелә. Ниндәй мәғәнәлә ҡулланылыуына ҡарап, мәғариф түбәндәгеләрҙе аңлата: 1) ижтимағи күренеш, 2) социаль әм шәхси иммәт, 3) социаль эшмәкәрлек өлкә е, 4) белем алыу өҙөмтә е, 5) шәхестең әм йәмғиәттең ихтыяжы. Күренеүенсә, тармаҡтың күр әтелгән яҡтары күпселек осраҡта шәхестең үҫеүенә, йәғни әр кемдең, йәмғиәттең әм, дөйөм алғанда, дәүләттең социаль, мәҙәни, иҡтисади әм башҡа ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә хеҙмәт итә. Телә ә ҡай ы тауар йәки хеҙмәттең – мәғариф та ошо исемлеккә инә – сифатын ғәҙел ба алау өсөн, уның ҡуйылған талаптарға ярашлы булыуынан тыш, был хеҙмәт күр әтеү процесының сифаты, йәғни камиллығы, ябайлығы, ойошҡанлығы, тотороҡлолоғо, теге йәки был тышҡы йоғонтоға ҡаршы торорға әләтлеге хаҡында ығымта .б. булыуы мотлаҡ.

Юғары мәктәптә белгестәр әҙерләү сифаты ғилми-педагогик йәмәғәтселек тарафынан күптән тикшерелеүгә ҡарамаҫтан, аман сиселеш тапмай, әм яҡын арала уға өлгәшеүгә ышаныс та юҡ. Системалы анализ ҡулланып, уның сәбәптәрен түбәндәгесә асыҡларға мөмкин. Йәмғиәт юғары уҡыу йорттарына белгестәр әҙерләү буйынса социаль заказ бирә әм уны сифатлы итеп атҡарыу өсөн финанс-иҡтисади, социаль әм матди-техник шарттар тыуҙыра. Мәғариф система ына стратегик идара итеүҙә йәмғиәттең үҙенсәлеге тап шуларға ҡайтып ҡала. Тармаҡҡа идара итеү и ә дәүләт власының тейешле хоҡуғы булған органдарына йөкмәтелгән. Үҙенең кадрҙар, финанс-техник, граждандарҙың социаль мөмкинлектәрен иҫәпкә алып, юғары мәктәп йәмғиәттең заказын сифатлы атҡарып сығырға бурыслы. Тейешле сифаттары булған егет әм ҡыҙҙар милли социумдан академик мөхиткә айлап алыу хоҡуғы бирелгән ҡабул итеү комиссия ы аша ғына килеп инә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, абитуриенттарҙың 15-20 проценты юғары уҡыу йорттарына ришүәт биреү арҡа ында килеп эләгә. Юғары мәктәп ә елдәре (ректор, проректор, декан, кафедра мөдирҙәре) ара ында коррупцияның киң таралыуы – белем сифатына идара итеү кризисына бәйле тәүге проблема.

Идара итеүҙең төп йөкмәтке е – юғары уҡыу йортонда барлыҡ элемент әм бәйләнештәрҙе норматив хәлгә килтереү. Тимәк, был нормативтарҙың бөтөн система ы булыу мотлаҡ. Уҡыуҙы ойоштороу нормативтары етерлек булма а, уға идара итеү ауырлаша. Нормативтарҙың сама ыҙ күплеге и ә белем алыусыларҙың башланғысын тотҡарлап, торғонлоҡ, кризис кеүек кире эҙемтәләргә килтерә. Юғары мәктәптәрҙә сифатлы нормативтарға ҡытлыҡ – сифатлы белем биреү менән идара итеү кризисына булышлыҡ иткән тағы ла бер проблема. Телә ә ҡай ы системаға идара итеү өсөн диагностика кәрәк, әм ул эксперттарҙың ба а ына таяна. Бер яҡлылыҡ – был алымдың етеш еҙлеге. Уны кәметеү өсөн нормативтарҙың сифатлы, ә эксперттарҙың юғары әҙерлекле булыуы мотлаҡ. Норматив базаның сифаты уны барлыҡҡа килтереүсе өлөштәрҙе дөрөҫ иҫәпкә алыу, хәл-торошон аныҡ асып биреүгә бәйле. Бынан тыш, уҡыу процесының айырым өлөштәрен, уларҙың үҙ-ара бәйләнешен иҫәпкә алған интеграль ба аламаның әр яҡлап уңайлы методика ы булыуы ла маҡсатҡа ярашлы.

Уҡыу процесының сифаты буйынса норма йәки стандарттар ниндәйҙер дәрәжәлә эшлән ә лә, интеграль ба алама ысулдарына ярашлы уҡыуҙы ойоштороу эксперт ба а ы буйынса нормаға тап килеү-килмәүе йә әтенән – бер нәмә лә юҡ. Был белем сифатын билдәләүҙә тар ҡарашлыҡҡа, уҡыу йорто хакимиәтенең башбаштаҡлығына килтереүе ихтимал. Әгәр ҙә беҙ мәғариф система ын өҫҡорма, ә милли социумды базис тип алабыҙ әм базис хәле өҫҡорма тарафынан билдәләнә икән, йәмғиәттең энтропия (тарҡалыу) хәлендә булыуын күрербеҙ. Был инде бер бөтөн система булырға тейешле дәүләт менән йәмғиәттең тиңлеген, бер маҡсаттар өсөн эшләү әләтен юғалта барыуын аңлата. Тап шул арҡала илдең сәйәси ҡоролошо бер ниндәй әҙерлек еҙ үҙгәрештәр кисереп, дәүләт ижтимағи өлкә, шул иҫәптән милли мәғариф, менән идара итеүҙән ҡапыл ситләште. Тарҡалыу күренештәренең йәмғиәткә йоғонто о түбәндәгеләрҙә сағылыш таба: мәғариф йоғонто онан ситләшкәндәрҙең күбәйеүе арҡа ында йәмғиәттә маргиналлашыу (кеше-

лек сифаттарын юғалта барыу – **М.А.**) күренештәре көсәйә, әхлаҡ иммәттәре емерелә, тормош ауырлаша, продукция етештереү, фәнгә сығымдар ҡырҡа кәмей .б. Бындай шарттарҙа юғары сифатлы белемгә ихтыяж артмай, сөнки уның ба а-ы ла төшә. Шуға күрә юғары мәктәп тә, аяу ыҙ иҡтисади шарттарҙа юғалып ҡалмаҫ өсөн, тар даирәле, ләкин мул табыш бүлешеүҙә ҡатнашыу хоҡуғы биргән “белгестәр” әҙерләүгә тотонорға мәжбүр. Дәүләттән айырмалы был “хеҙмәт” заказ биреүсе тарафынан яҡшы түләнә. уңғы йылдарҙа юғары белем тура ында дипломы булып та, өнәри әләте, белеме әм мәҙәнилеге менән айырылып тормаған кешеләрҙең күбәйеп китеүен ошолай аңлатырға кәрәк. Дипломында ғилми дәрәжә е күр әтелеп тә, үҙенең ғәмәлдә шуға тап килмәүе хәҙер нормаға әүерелеп бара.

Юғары мәктәптәге әлеге социаль көсөргәнешлек унда уҡыусыларҙың академик эшмәкәрлегенә талаптың йомшаҡлығы, ғәҙел булмауы менән аңлатыла. Уҡыу йорттарының финанс тотороҡлоғо унда белем алыусыларҙың түләү әләтенә бәйлелеге көсәйә барған шарттарҙа белемдең сифаты тура ында бәхәс ҡуйыртырға урын да ҡалмай. Юғары белем алыу тулы ынса коммерцияға ҡорола ҡал а, уның академик сифаты диплом алырға теләүселәрҙең “кеҫә ҡалынлығы”на ҡарап билдәләнәсәк. Түләп уҡыған студенттар өсөн белемдән бигерәк диплом алыуҙың мө имлеге сер түгел. Мәғарифтың социаль-иҡтисади статусын әлегесә ҡалдырғанда белем биреүҙе тулы ынса түләүле нигеҙгә күсереү диплом таратыуҙы көсәйтеүгә, уҡыуҙың ба а ы төшөүенә, хатта белемдең юҡҡа сығыуына килтерәсәк.

Юғары белем сифатына йоғонто я ау кризисы мәғариф ә елдәренең көс өҙлөгө менән дә ҡатмарлаша. “Мәғариф ә елдәре” тигәндә мин белем биреү процесына идара иткән кешеләрҙе күҙ уңында тотам. Уларҙың маҡсаты – тармаҡта мөмкин тиклем юғары өҙөмтәләргә өлгәшеү. Ә бына был ҡатламдың сифат мәсьәлә е бер нисә сығанаҡҡа бәйле булып, уға хәҙерге мәғарифта белгестәр әҙерләү форма ының булмауы ҡамасаулай. Ундай белгестәрҙе әҙерләү өсөн махсус, маҡсатлы уҡыу әсбабы кәрәк. Ундай предмет әле юҡ, шуға күрә тармаҡ ә елдәре үҙ тәжрибә е йәки быға тиклем тупланған педагогик өлгөләр менән сикләнергә мәжбүр. Мәғариф менеджменты белгестәр иғтибарына салынып килә генә. Уҡыу процесына идара итеүҙә элекке педагогик ысулдар ғына етмәй, өйрәнелгән процесс әм күренештәргә күҙаллауҙар я ау өсөн аналитик алымдар ҙа кәрәк. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, педагогика дидактик процестарҙы күҙаллау буйынса аналитик ысулдарға эйә түгел, шуға күрә уның мәғариф селтәрен системалы ойоштороу, идара итеү буйынса тәҡдимдәре аныҡлыҡҡа мохтаж, ҡай ы саҡ буш йөкмәткегә генә эйә.

Йыйып әйткәндә, педагогик тәҡдимдәрҙең төҫ өҙлөгө, бер бөтөн ғилми әҙерлектең булмауы, тәжрибәләге айырымлыҡтар тармаҡ эшмәкәрлегенең йоғонто-он төшөрә. Тимәк, Ватан ерлегендә юғары әҙерлекле белгестәргә ихтыяж көслө булып та, уны әҙерләү өсөн ғилми нигеҙ юҡ нисбәтендә. уңғы егерме йылда йәмғиәт системалы тотороҡ оҙлоҡ кисергәндә, тармаҡта ваҡыты-ваҡыты менән булып алған ҡуҙғалыштар белем биреү өлгөләренә етди зыян килтерә. Ҡағиҙә булараҡ, улар белем алыу йөкмәтке ен кризис хәленә яраҡлаштыра әм тармаҡтың үҙендә оялап алған коммерсанттар мәнфәғәттәренә законлы төҫ бирә. өҙөмтәлә юғары уҡыу йорттарында белем сифаты насарая, ә юғары мәктәп үҙе tarҡалыу кисерә.

Мәғариф тотороҡ оҙлоғо шарттарында тармаҡҡа идара итеүҙе дәүләттең үҙ ҡулына алыуы зарур, сөнки кризис мәлдәрендә юғары мәктәптең интеллектуаль ҡеүәтен аҡлап ҡалыу – дәүләт менән йәмғиәттең стратегик бурысы. Дәүләттең юғары мәктәпкә социаль-иҡтисади йә эттән ярҙам күр әтеүе менән бергә, сифатлы юғары белемгә ихтыяж арт ын өсөн, тәрән йөкмәткеле сәйәси, иҡтисади әм социаль саралар күреүе лә мө им. Дәүләттең ҡеүәте әм абруйы хәл иткес дәрәжәлә мәғариф тарафынан билдәләүен дә онотмайыҡ. Дәүләттең бөтөн әм көслө булыуын теләйбеҙ икән, мәғариф сығымдарына аранланырға ярамай. Был фекерҙе мәғарифҡа сығымдарҙың (белгестәр әҙерләү) менән хеҙмәт етештереүсәнлеге (эш өҙөмтә е) артыуы ара ында бәйләнеш булыуы ла раҫлай.

Әгәр ҙә мәғарифҡа сығымдар әлеге кеүек бүлен ә, беҙҙе алда ниҙәр көтә? Әлбит-

тә, яҡшы өҙөмтәләр түгел. Юғары мәктәпкә ҡаҙна сығымдарының бик аҙ бирелеүе белем алыусыларға, уҡытыусыларға, уҡыу-методик тәьминәткә, матди-техник базаға .б. әр яҡлап зыян килтерә. Хеҙмәт хаҡы аҙ булыу арҡа ында юғары әҙерлекле ғилми-педагогик кадрҙар эштән китә, йәштәр яғынан алмаш булмау коллективтарҙың “олоғайыу”ына килтерә. Дәүләттең социаль-иҡтисади иммәттәре ара ында педагогик хеҙмәттең арзан ба аланыуы йәштәрҙең тармаҡҡа ылығыуын тотҡарлай. Шулай итеп, юғары мәктәп илдең ғилми әм мәҙәни үҙәге статусын юғалтыу хәүефе алдында тора. Эш хаҡының түбәнлеге шулай уҡ уҡытыусылар ара ында социаль яҡтан зыянлы күренештәрҙең таралыуына ла килтереүе ихтимал.

Уҡытыусыларҙың хеҙмәт хаҡы ла донъя ғәмәлен иҫәпкә алмай, фәнни яҡтан нигеҙләмәй генә билдәләнә. Дәрес биреү нормаларын мөмкин тиклем арттырырға маташыу ғәмәле уҡытыусыны белемен камиллаштырыу мөмкинлегенән мәхрүм итә. Студенттар алдына сығырҙан элек уҡытыусы үҙ эшмәкәрлегенә ҡағылған барлыҡ яңылыҡтарҙы белергә, уларҙың йәмғиәткә нисек йоғонто я ауын күҙәтеп барырға бурыслы. Бының өсөн, билдәле, ваҡыт кәрәк. Уҡытыусыларға билдәләнгән норманан тыш, бер ниндәй түләү еҙ эштәргә лә тотонорға тура килә, сөнки уларҙың мәнфәғәттәрен яҡлаған механизмдар аман да эшләнмәгән. Ил кимәлендә бындай норматив хоҡуҡи акт ҡабул итеү мотлаҡ, әм ул иң элек хоҡуҡ боҙоусыларға ҡарата сараларҙы үҙ эсенә алырға тейеш.

Эш хаҡын билдәләүсе документтарға ла үҙгәрештәр индереү мәсьәлә е күптән өлгөрҙө. Уҡытыусының ғилми дәрәжә енә ҡарап түләү менән бергә хеҙмәт стажын, уҡыу барышында яңы технологиялар ҡулланыуын иҫәпкә алып өҫтәмә түләү индереү мәсьәлә ен ыңғай хәл итеү зарур. Студенттар ара ында ғилми-тикшеренеү эштәрен ойоштороу буйынса тотош илдә генә түгел, юғары уҡыу йорттарының күпселегендә лә аныҡ концепциялар эшләнмәгән. Был эшмәкәрлек система ыҙ, ҡай ы саҡта исем өсөн генә алып барыла. Курс, диплом, ғилми эштәрҙең йөкмәтке е уҡыу йорто әм уҡытыусыларҙың фәнни мәнфәғәттәре менән ярашып бөтмәй. Был етеш еҙлек и ә студенттар менән уҡытыусыларҙың ойошҡан бер бөтөн мөхит булып өлгөрөүенә ҡамасаулай. Проблеманы ыңғай хәл итеү төрлө ғилми мәктәптәр барлыҡҡа килеүгә, фәнни-тикшеренеү эштәрен маҡсатлы алып барырға ярҙам итер ине. Студенттар ара ында ғилми-тикшеренеү эштәрен йәнлерәк алып барыу өсөн әр юғары уҡыу йорто смета ында махсус сығымдар ҡарап, уларҙы студенттарҙың ғилми эштәренә, хеҙмәттәрен баҫтырып сығарыуға тотоноу файҙа ғына килтерәсәк.

Шулай итеп, юғары мәктәптә белем сифатын көйләүҙәге кризисты бөтөрөү өсөн үрҙә әйтеп үтелгән мәсьәләләрҙе ыңғай хәл итеү фарыз. Был, әлбиттә, күп кенә интеллектуаль әм капиталь сығымдар талап итә, ә мәғарифтың и ә ундай мөмкинлеге юҡ. Әгәр ҙә дәүләт йәмғиәткә лайыҡлы киләсәк әҙерләргә теләй икән, ул мәғарифҡа алдынғы дәүләттәр бүлгән күләмдә даими сығымдар йүнәлтергә бурыслы. Бының өсөн дәүләт менән йәмғиәттең милләтте рухи яҡтан тәрбиәләүҙә нигеҙ ташы аналған мәғарифтың киләсәк ролен тейешенсә аңлауы мотлаҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был мәсьәлә менән шөғөлләнергә теләүселәр әлегә күренмәй.

**Мәжит АЛКИН,**
**За ир Исмәғилев исемендәге Өфө**
**дәүләт сәнғәт академия ы профессоры.**

# ИКМӘГЕБЕҘҘӘ НИҢӘ ӘРЕМ ТӘМЕ?

Бер нисә йыл элек миңә “Сотворение хлеба” тип аталған документаль-публицистик китап өҫтөндә эшләргә тура килгәйне. Бик күп мәғлүмәттәрҙе яңыртыу менән бергә, архив сандарын ҡаҡҡылай торғас, Башҡортостанда иген игә башлауға ҡағылышлы байтаҡ хәбәрҙәргә юлыҡтым. Башҡорт ҡәүеме элекке замандарҙа малсылыҡ, унарсылыҡ, умартасылыҡ менән генә йән аҫыраған икән, тигән фекер бәхәсле. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ игенен дә игә, ер аҫтынан рудаын да таба әм эшкәртә лә белгән.

Икмәктең дәүләт тормошонда, халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙә стратегик ҡоралға әүерелеүен етди аңлау, шулай ҙа, XX быуатта нығынғандыр. Илдең дөйөм ҡеүәтенә ба а биргәндә, унын ҡораллы көстәре, ҡаҙылма байлыҡтары, алтынвалюта запастары .б. менән бергә иген игерлек ерҙәре, ашлыҡ йыйып алыу күләме иҫәпкә алынған.

*Ирендәрем*  
*Башаҡтарға түгел,*  
*Гүйә, байраҡтарға ҡағыла...*  
*Игенселәр,*  
*Тере ҡалҡан булып,*  
*Баҫҡан ығыҙ илем ағына!*

Был шиғыр юлдарының авторы хәтеремдә лә ҡалмаған, уларҙы миңә рус теленән Әнисә Та ирова тәржемә итеп биргәйне. Ас яугир, асыулы бул а ла, дошмандың яға ынан ала алмай, тамағы ашҡа туймаған металлургтың ҡорос ҡайнатып, броня эшләүе лә шикле. Ауыл кеше е генә, арына, алабута ашап бул а ла, ер өрә, сөнки уға ашлыҡ үҫтерергә кәрәк. Икмәк еҙ уғыштарҙа еңеү ҙә, илдең ҡеүәте лә, мәртәбә е лә юҡ.

22 июнь ҡояшы ҡанға мансылып ҡалҡты. Йөҙҙәрсә ҡала-ауылдар күҙ асып йомған арала дөрләп янған усаҡҡа әүерелде. Ватаныбыҙҙың көнбайыш сигендә ергә, алдаттың ал ҡаны менән бергә, бешеп килгән игендәр ҙә түгелде. Икмәк, шулай итеп, тирмәндең ике ташы ара ында ҡалған иген бөртөгөләй, ут әм ҡылыстың төп ҡорбандарының бере е булды.

...Фронт икмәге. уғыш йылдарында, ябай ризыҡ булыуҙан күтәрелеп, дошманды еңеүҙең иҡтисади, хәрби әм сәйәси факторына әйләнгән. Был хаҡта Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең 1941 йылдың 23 августа баҫылып сыҡҡан “Баҫыуға, туғандар!” тигән шиғырында бик тапҡыр әйтелә.

*Яҡшы бел: илдең әм*  
*тормоштоң ныҡлығы —*  
*Колхозда, совхозда*  
*башаҡтар туҡлығы.*

*әр бөртөк — ул пуля,*
*граната, ул — ҡылыс,*
*әр бөртөк Гитлерға*
*бомбалай ҡурҡыныс.*

Шуны дөрөҫ ба алап, ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә комитеты әм Башҡорт АССР-ы Халыҡ Комиссарҙары Советы уғыштың тәүге көндәрендә үк дәүләткә мәжбүри рәүештә ашлыҡ тапшырыуҙың йыллыҡ нормалары тура ында ҡарар ҡабул итә. Был документ республикала ашлыҡ етештереү әм әҙерләүҙе йылдан-йыл арттыра барыуға ҙур йоғонто я ай. әр колхоз әм совхозға әр гектар ерҙән әм әр культуранан уңыш алыу әм дәүләткә тапшырыу күләме еткерелә. Башҡортостан игенселәре хөкүмәттең яуаплы бурысын үтәүҙе өҙөүгә бер ваҡытта ла юл ҡуймай.

Матди мөлкәтте аҡсыл файҙаланыу, баҫыуҙарҙа бер генә башаҡ та ҡалдырмау өсөн ярышҡа бөтә халыҡ ҡушыла. Мәҫәлән, Өфө районының Дмитриевка МТС-ы механизаторҙары Александр Семенов, Николай Викторов, Григорий Арефьев, Яков Иванов туңға өрөүҙә әр ҡай ы ы 107 — 372 килограмм, ә Бөтә Союз Ауыл хужалығы күргәҙмә енең бәләкәй көмөш миҙалы менән бүләкләнгән Василиса Кузнецованың ҡатын-ҡыҙҙар бригада ы 700 килограмм яғыулыҡ экономиялаған. Ҡандра МТС-ынан тракторсы ҡыҙҙар Ғәҙелшина, Лоҡманова, Ямалиева, Шәйәхмәтова, Муллағәлиева, Сәләхова, Махиянова: “Беҙ уғыш осоро талап иткәнсә эшләйәсәкбеҙ”, — тип белдерә әм шулай эшләй ҙә. Шишмә районының “Таң” колхозында сәсеүгә орлоҡ ташыусы Башҡортостандың халыҡ сәсәне Сәйет Исмәғилов (Йәрми Сәйете): “Иртәгәнән башлап йоҡо бөттө, егеттәр, стахановса сәсәбеҙ”, — тип яҡташтарын дәртләндерә. әр тракторҙы тәүлегенә кәмендә — 20, комбайн әм урғысты 16 сәғәт эшләтеү өсөн ярыш йәйелдерелә.

Кескенә патриоттарҙың уңғанлығы ла оҡландыра. Нуриман районының “Ҡыҙыл натиск” колхозынан бригадирҙар Хәмит Хисмәтуллин, Әхтәм Юлдашев, Шамил Ҡузыев эште өлкәндәр кеүек оҫта ойошторорға өйрәнә. Тәтешле районының Шүлгән мәктәбе уҡыусылары — 13 йәшлек Барый Ғәйниәхмәтов, Әнисә Хәмитоваураҡта 70-әр хеҙмәт көнө эшләй.

“Бары ы ла — фронт өсөн, бары ы ла — еңеү өсөн!” уғыш йылдарында тыл хеҙмәтсәндәренең ижади дәрте ик еҙ-сик еҙ булған. Яҙғы сәсеү алдынан орлоҡҡа ҡытлыҡ килеп тыуған саҡтарҙа хеҙмәт коллективтарында “Колхоздың патриотик келәтенә!” тигән хәрәкәт башланғыс ала. Уның асылы шунда: әр ғаилә, хәленә ҡарап, шәхси запастарынан колхозға ашлыҡ бирә. Боҙаяҙ районының “Бүләк” колхозы ағзалары: “Орлоҡто үҙ көсөбөҙ менән табайыҡ. Тыуған илебеҙ өсөн бындай ҡыйынлыҡтар ваҡытында дәүләттән ярҙам көтөп ятмайыҡ”, — тигән әм, иген йыйыуҙы ойошторол, 80 центнер урынына 232 центнер орлоҡ йыйған.

Фронтҡа — икмәк, фронтҡа — ит, фронтҡа — йылы кейем- алым. Ярҙам фондына — аҡса әм алтын-көмөш биҙәнеү әйберҙәре. Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең был йә әттән дә ил алдында йөҙө яҡты. Еңеүҙе яҡынайтыу өсөн улар мөмкин булғанды ла, хатта артығын да эшләгән. 1944 йылда оло хеҙмәттәре өсөн Илеш районының Чеверев исемендәге колхозы рәйесе Андриан Белоусов, Дәүләкән районының “Ҡыҙыл Урал” колхозы рәйесе Ниғмәтбай Зарипов, Саҡмағош МТС-ның тракторсылар бригада ы бригадиры Исмәғил Кашаев, Яңауыл районының “Урал” колхозы рәйесе Ғәлимә Мөжипова, “Йылайыр” совхозы комбайнсы ы Василий Солонин, Ғафури районының “Шишмә”

колхозы ауынсы ы 69 йәшлек Хәҙисә Рәжәпова Ленин орденына лайыҡ була. 1948 йылда Василий Степанович Солонинға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде. Атаҡлы игенсе 1980 йылда 66 йәшендә арабыҙҙан китте.

Данлы совет ғәскәрҙәренең немец фашистарына ҡаршы батырҙарса көрәше, улар ирешкән еңеүҙәр тылдағыларға тағы ла тырышыбыраҡ эшләргә дәрт өҫтәй. “Ашлыҡ – дошманды еңеү өсөн ҡеүәтле ҡорал ул”. “Ашлыҡ өсөн көрәш – дошманды еңеү өсөн көрәш”. Тыл эшсәндәре бына шундай лозунгылар ҡуйып эшләй. “Иген! Иген – беҙҙең бәхетебеҙ. Еңеү, шатлығыбыҙ ул беҙҙең”, – тип яҙа ул йылдарҙа буласаҡ атаҡлы телсе-ғалим Жәлил Кейекбаев. Илеш районының “Ҡыҙыл юл” колхозы колхозсы ы Ғәзимә Йосопованың ул саҡта гәзит хәбәрсе енә өйләгәндәренән: “ өйлә, тип ни, унын нимә ен өйләй ең инде. Таң менән торам. Тырышып эшләйем. Күҙ алдыма фронтты килтерәм, дошманға үс итеп салғымды нығыраҡ елтәйем, ваҡытты бушҡа үткәрмәйем, бына шул”.

Халҡыбыҙҙың алтын йондоҙ оҙ геройҙары, хеҙмәт армия ының погон ыҙ алдаттары – бына шул ғәзимәләр, хәҙисәләр, ир-арыҫландар йөгөн иңдәренә а-лырға ҡурҡмаған арыҫлан йөрәкле ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро, бала-сағалар тылдан тороп Сталинградты аҡлаған, Днепрҙы кискән, Берлинды штурмлаған. “Дүртөйлө районының “Таш йылға” колхозында яҙғы сәсеү башланыр алдынан байтаҡ ыйыр малы егергә өйрәтелгәйне. Шунан бирле уларҙы колхозда төрлө эштәрҙә йөрөтәләр. Хәҙер 12 ыйыр ер өрөүҙә файҙаланыла”.

Йәштәр уйына инеп тә сыҡмаҫ хәтирәләрҙе ниңә яңыртам әле? Беренсенән, икмәк – матди хазина ғына түгел, ул – рухи төшөнсә лә. Икмәккә мөнәсәбәттең әхлаҡи үлсәмдәре лә бар. Икенсенән, дә шәтле уғыш йылдарында Еңеү өсөн бары ын да эшләгән кешеләргә сик еҙ хөрмәтебеҙҙе, оло рәхмәтебеҙҙе белдерергә, бөйөклөк алдында баш эйергә теләү яҙыҡ түгел.

Урал аръяғы райондарының бере енә барған саҡ иҫкә төшә. Матур йорттар күтәрелгән, асфальт юлдар алынған, газ үткән ауылдар. Юлдашым күркәм бер йортҡа сәйгә саҡырҙы. Ир урта ы йорт хужа ы тирә енә барлыҡ ғаилә йыйылған. Шул саҡ түрбаш яҡтан матур көйө ологайған инәй таҫтамалға уралған ҡалас алып сыҡты ла ипләп кенә телеп, өләшә башланы. Кинәнес тә, ағыш та күрҙем мин унын күҙҙәрендә, еребеҙҙең бәрәкәтен, халҡыбыҙҙың ҡаҡшамаҫ ҡеүәтен тойҙом мин икмәк тотҡан шул ҡулдарҙа.

Хәләл көс менән табылған икмәккәй генә кешене күтәрә, рухына ҡанат ҡуя, йөҙөнә нур йүгертә. Икмәкле кеше меҫкен дә, фәҡир ҙә аналмай. Хеҙмәттең бөтә төрҙәре лә, өнәрҙәрҙең бары ы ла ихтирамға лайыҡ. Әммә йәшәйештә тотҡан урыны, матди әм рухи ҡиммәте йә әтенән икмәккә тиңләшерлек ризыҡ, игенсе хеҙмәте менән сағыштырырлыҡ шөғөл донъяла юҡтыр. Икмәктең ябай, ләкин шул ябайлығы менән ғәжәпләндергән әм уйландырған бер үҙәнселеге бар: ул – Хоҙайҙың ерҙәге вариҫы аналғандар өсөн дә, иң бахыр заттарға ла берҙәй үк ризыҡ. Хакимдар алдындағы алтын ауыттарға алынған әллә ниндәй ниғмәттәр эргә ендә лә барыбер икмәк, әпәкәй ята. Донъя кешене, ожмахҡа тиң урындарҙа йөрөтөп-йөрөтөп тә, ахыр килеп, иген баҫыуына килтереп терәй.

“Иген икмәк – тир түкмәк”. Хаҡ үҙҙәр. Иген башағы – тропик урмандарҙағы емеш түгел, бешеп-өлгөрөп өҙөлөп төшөргә тормай. Көньяҡ Уралда йәшәйбеҙ, ҡояшлы Башҡортостан, тип маҡтаныуыбыҙҙы йә йәйге ҡоролоҡ, йә ҡыштың сама ыҙ алҡынлығы ҡыра уға. Иген тура ында үҙ йөрөткәндә,

“көрәш”, “стратегия”, “тактика”, “маневр” кеүегерәк хәрбиҙәр теле йәнәшә йөрөүе үҙ матурлығы өсөн генә түгел. Меңдәрсә кешенең уй-фиғеле, белеме әм ғүмер кисерештәре икмәккә генә арналған. Башҡортостандың дәүләт етәкселәре лә, иншалла, иген- икмәк мәсьәләләрен беренсе сиратҡа ҡуя. Был — дөрөҫ әм халыҡсан сәйәсәт.

Ни сәбәптәндер, АҠШ-тың йәмәғәт эшмәкәре Букер Вашингтондың үҙҙәре иҫкә төштө. Ер өрөүҙең поэма яҙыу кеүек үк хөрмәткә лайыҡлы хеҙмәт булыуын аңламай тороп, бер милләт тә сәскә ата алмай, тигән ул. Был үҙҙәргә ике быуат. Әгәр ваҡыт — ауыт, ә хәҡиҡәт — унда аҡланған шарап икән, был осраҡта ауыт эсендәге матдәнең үҙгәреш кисермәүе ис кенә лә ҡыуандырмай. Ижадсылыҡтың абруйлы хеҙмәт булыуы тура ында фекер йөрөтөү уңай ыҙ. Әммә игенсе хеҙмәте тура ында беҙ йыш ҡына тантана менән ҡысҡырып өйләйбеҙ.

Ҡатын-ҡыҙҙар тура ында яғымлы үҙҙәр әйтергә телә әк, бында бары ы ла аңлашыла: уның әсә булыуына, гүзәллегенә, аҡылына оҡланабыҙ. Уйҙарыбыҙ йыш ҡына Тыуған илгә төбәлә икән, был да тәбиғи: ул — ине йылытыусы әм яҡлаусы дәүләт. Ә бына ер, ауыл тура ында күп өйләйҙәр икән, был осраҡта дәүләт ә елдәренең таҫма теллелегенең сәбәптәрен аңлауы бик ҡыйын: ни ти әң дә, ауыл йылға өҫтөндәге шәфәк балҡышы әм яҙғы баҫыуҙа абан турғайы йыры ғына түгел. Ауылда шундай төйөн хасил булып, йәмғиәттең әм дәүләттең барлыҡ проблемалары уның менән сағыштырғанда бер ваҡыт бөтөнләй ә әмиәт еҙ булып ҡалыуы ихтимал.

Кеше нисек кенә юғарыға осма ын, ул ерҙә, ерҙән ҡөҙрәт алып йәшәй. Уның барлыҡ ҡаҙаныштары ла ерҙән сыҡҡан, сөнки әр ҡай ыбыҙ икмәк ашай әм ыу эсә. Ә был байлыҡтарҙың бары ын да ер тыуҙыра. Апостол Павелдың быңдай үҙҙәре мәғлүм: “Миңә бары ы ла рөхсәт ителгән, ләкин улар бары ы ла файҙалы түгел; миңә бары ы ла рөхсәт ителгән, ләкин минең өҫтән бер нәмә лә хужа булырға тейеш түгел”. Ер тура ында уй-фекерҙәр игенсенең күңелендә мәңге йәшәй алмаймы ни? әм икмәк барыбыҙ өсөн дә файҙалы булған берҙән-бер ризыҡ түгелме ни? Әгәр кеше был донъяла оҙаҡ йәшә ә, уның хәтере әм уйҙары үҙе өсөн дә ғазапҡа әйләнә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙ батша Рәсәйе премьер-министры Петр Столыпин реформаларында соҡоноуҙы, кулактарға ҡаршы көрәш әм күмәк тормош төҙөү осорона ләғнәт уҡыуҙы дауам итәбеҙ. Сөнки уларҙы ба аларға, абаҡ алырға, үҙебеҙҙең әм башҡаларҙың хаталарында өйрәнергә әләт етмәй.

Яугирҙарыбыҙ Бөйөк Ватан уғышында йәрәхәттәрҙән, ауырыуҙарҙан, аслыҡ-йонсоуҙан әм ағыштан күп мәртәбәләр әләк булған. Әсәләребеҙ тылда ауыр эштән, аслыҡтан, сара ыҙлыҡтан, тормош михнәттәренән күпме үлгән?! Көҙөн йыраҡ баҫыуҙарға башаҡ йыйырға, бер-ике ус бул а ла ашлыҡ ыуырға киткән әсәйем ҡайтҡас, мине аслыҡтан шешенгән әм күгәренгән хәлдә тапҡан. Ул башаҡтарҙа күпме күҙ йәше әм тир тамсылары булған? Бәлки, ул тамсылар төйөнсөктәге бөртөктәрҙән дә күберәк булғандыр. Ләкин ул бөртөктәрҙә етем баланы үлем тырнағынан тартып алған, бөтә илде ҡотҡарған көс аҡланған. Был хәлдәрҙе онотоу — гона .

Донъяла беҙҙең хаҡта төрлө өн өйләйҙәр. Билгән еребеҙ буйынса ғәйәт ҙур ил булған өсөн генә түгел. Етәкселәребеҙҙең эштәре, халыҡтың тәртибе, фекерләү әм йәшәү рәүеше етди ығымталар өсөн дә, яманлап өйләргә лә етерлек урын бирә. Рәсәй халҡы үҙе лә аныҡ эштәргә ҡарағанда фәлсәфәүи уйланыуҙарҙы өҫтөн күрә. Шулай итеп, Рәсәйҙә әр ихатаның — үҙ Карл Марксы әм әр рухани — атаҡай, тигән хикмәтле үҙҙәр раҫлана.

Зирәк европалылар, булдыҡлы американдар яңылышмай, тип раҫлау дөрөҫ

булмаҫ ине. Уларҙа дәүләт сәйәсәте тормошта ҡулланырға ярамаған ҡарарҙарға нигеҙләнмәйҙер, моғайын. Тимәк, беҙ цивилизациялы тип атарға ғәҙәтләнгән илдәрҙә сәйәсәт эҙмә-эҙлеклерәк, нығыраҡ уйланылып, унда тормошҡа ашмаҫлыҡ пландар төҙөүсе кешеләр аҙыраҡтыр. Бәлки, беҙ ҙә ҡасан да бул а башта эшләп, ә уңынан аңлатыу ғәҙәтенән арынырбыҙ.

Мин бигерәк тә сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереүҙе, КПСС Үҙәк Комитетының уңғы секретарҙарының бере е Л.Брежневтың аҙыҡ-түлек программа ын күҙ уңында тотам. Ни арҡала тиҫтәләрсә йылдарҙан уң сиҙәм күтәреү фажиғәгә әйләнә? Ни өсөн "аҡыллы баштар" уның өҙөмтәләрен алдан күрә алмаған? Әгәр идара итеүсе партия дәүләт исеменән үҙ халҡы өсөн киләсәктә мул, туҡ тормош тура ында белдерә икән, ни өсөн ул ғалимдарҙың дәлилдәре, иҡтисадсыларҙың иҫәпләүҙәре менән нығытылмаған?

Рәсәй камил ҡоралл ы, ҡеүәтле армия булдыра, технологик үрҙәр яулай, ғәйәт ҙур тәбиғи байлыҡтарын үҙләштерә алыр, әммә уның ауыл хужалығы иҫән ҡалыу өсөн өҙлөк өҙ көрәш хәлендә йәшә ә, ул бер ҡасан да донъяла ҡеүәтле державаға әйләнмәйәсәк. Ғөмүмән, дәүләт тормошон тәьмин итеүсе тармаҡ үҙе йәшәү өсөн көрәшә икән, бындай хәлде айыҡ аҡыл менән аңлау ҡыйын. Игенсе борон-борон замандан үҙенең тормоштағы урынын пәйғәмбәр үҙҙәре менән аңлатҡан: игенсе Ергә кешеләргә ғүмер, тормош биреү өсөн килгән. Улай икән, ни өсөн ер әм икмәк тура ында бәхәстәр тынмай, игенсе тирә ендә ритуаль бейеүҙәр быуаттан-быуатҡа дауам итә?

Дөрөҫ, күп быуаттар дауам иткән ошо бәхәстә игенсе үҙе бер ҡасан да ҡатнашмаған. Быуаттар үтә, сәйәси-иҡтисади ҡоролоштар үҙгәрә, хакимдар алмашына тора, реформа артынан реформа килә, ә бына ауыл кеше енең хоҡуҡи, әхлаҡи-психологик, хатта милек әләте үҙгәреш еҙ ҡала бирә. Беҙ игенсенең бөйөклөгө, дәүләттең уның тура ында арыу-талыу ыҙ хәстәрлеге тура ында өйләйбеҙ, әммә беҙҙең крәҫтиән хәйерселектә йәшәүен, уның хеҙмәте яңы Рәсәй йәмғиәтендә көлөм өрәү, ә күп тигәндә ҡыҙғаныу тойғо о тыуҙырыуын таный алабыҙмы?! Имеш, ул йәшәй белмәй...

Мин – ҡала кеше е, тип әйтергә бер ҡасан да башыма килмәне. Ауылда тыуғас, башҡа психологияға әм башҡа фекерләү рәүешенә эйә булыу мөмкин түгел. Иң ҡәҙерле осрашыуҙар минең өсөн баҫыу ситендә, малсылыҡ фермаларында булды. Унда кешеләр йәнен-тәнен биреп эшләй, шул уҡ ваҡытта күңелдәрендә әйтелмәгән үпкә тойғо о йәшәй. Улар инде, беҙ бик аҙына ла ҡәнәғәт булып йәшәргә тейешбеҙ, тигән фекер менән килешкән. Өҫтөнлөктәр таратылған йәмғиәттә, ғәҙәттә, инҡилап ҡабына, тигән киҫәтеү менән бер кемде лә борсорға теләмәйем. Ләкин, нисек кенә булма ын, крәҫтиәндәр йәмғиәттең иң тотороҡло, төплө ҡатламы булып ҡала. Крәҫтиән кеүек сабыр, түҙемле кешеләрҙе табыу мөмкин түгел. Шулай ҙа яҙмышты сик еҙ ынау урынлымы икән?

Рәсәй-әсәбеҙ, түлле ҡатын-ҡыҙ кеүек, әр ваҡыт төрлө идеялар әм программалар менән йөклө була. Илдең әр башлығы өсөн был милли уйын төҫлө – халыҡҡа ул үҙенең идеяларын бирә. Йәи ә коррупция менән көрәш, йәи ә Президент йөҙҙәрсә мең баланың ташланғанлығын күр әтә, йәи ә беҙ енәйәтселеккә, бюрократтарға ҡаршы сығабыҙ, атлыҡ йән милиционерҙарҙы хурлайбыҙ әм кинәт "бабайсылыҡ"тан ҡаза күргән алдат тура ында ҡайғыртабыҙ. Хәҙерге осорҙа и ә Президенттың дәүләт өсөн ғөмүми-милли ә әмиәтле байтаҡ программалар төҙөү әм ғәмәлгә ашырыу тура ындағы фекере элек тәҡдим ителеп, чиновниктар тарафынан "ерләнгән" байтаҡ фекерҙәрҙән айырылып тора алыр ине. Ошо эшкә юғары пафослыҡ биреү ("ғөмүм дәүләт проекттары" тип атау),

бик күп кәңәшмәләр әм үҙ бутка ы, проекттар тирә ендә күҙ буяу өсөн ығы-зығы тыуҙырыу ағайта. Мин инде аппараттың эш рәтен белмәүе әм сиктән тыш бюрократлашҡан система тура ында өйләп тә тормайым. уңғы ы йыш ҡына хатта Президент власынан да көслөрәк булып сыға. Үҙенең төп эстәлеге буйынса изге маҡсаттың, чиновниктар нығытмаларына бәрелеп, әкренләп абруйы төшә, күптәр, фекер белешеү өҙөмтәләренә ҡарағанда, иғлан ителгән программаларҙың тормошҡа ашырына ышанмай.

Рәсәйҙә ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе биләү мәсьәлә е хәл ителгән, тип иҫәпләнә. Имеш, ер баҙары ойошторолған, закондар ҡабул ителгән, уларҙы ғәмәлгә ашырыу саралары бар. Өҫтәүенә, урындағы хакимиәткә әм йәмәғәтселеккә ергә хоҡуғы булған кешеләр ара ында уны ғәҙел бүлеү хоҡуғы бирелгән, имеш. Әммә ер участкаларын бүлгәндә ғәҙеллекте аҡлау мөмкинме уң?

Сөнки ауыл хужалығы ерҙәре – тип-тигеҙ шахмат таҡта ы түгел, ыҙан буйынса бәхәстәрҙә әр ваҡыт ниндәйҙер хәүеф бар. Был осраҡта хуш күңеллелек әм "бәлки, шулай ҙа барып сығыр" тип уйлау – ышаныслы дәлилдәр түгел. Тотош алғанда, ер яҙмышы әр ваҡыт йәмәғәтселектең иғтибар үҙәгендә торорға тейеш. Башҡортостанда өрөнтө ерҙәрҙең күпселек өлөшөнөң тәбиғи хәленә ҡайтарылыуы беҙҙе шатландыра. Рәсәйҙә уңғы тиҫтә ярым йылда 220 миллион гектар ауыл хужалығы ерҙәренең 100 миллион гектары әйләнештән сығарылған.

Милли проекттарға әйләнеп ҡайтып, тағы бер шигемде белдерәм: ауылға бүленгән 1 миллиард доллар күпме ни ул?! "Реформа" йылдарында агросәнәғәт комплексының 300 миллиард долларлыҡ төп фонды юҡҡа сыҡҡан. Тимәк, Рәсәйҙә ауылдарҙы яңыртыуға 300 йыл кәрәк буласаҡ. Ҡырҡ йылдан ашыу мин ауыл хужалығы предприятиеларында булып, ауыл проблемаларын тикшереүсе төрлө кәңәшмәләрҙә, ултырыштарға йөрөнөм. Әле өйләгәндәрҙең күбе ен мин ҡайҙалыр ишеткән инем инде, бәлки, башҡа варианттар ҙа булғандыр. Тимәк, ярты быуат буйына беҙ бер фекергә тотоноп, иртәгә ен уны онотоп, бер сиктән икенсе енә ташланып, бер урында тапанғанбыҙ, ә ауылда етеш тормош булмаған әм юҡ та.

Әгәр, бөтә ауыл өмөт өҙлөккә бирелгән, эскелек менән ағыулана, ти әм, хаҡлы булмаҫ инем. Ауылда иҫән ҡалған тамырҙар бар әле, яңы үҫентеләр ҡалҡып сыҡты әм нығый бара. Ауыл хужалығы белгестәренең, иҡтисадсыларҙың крәҫтиән хужалығы алып барыуы етди нигеҙгә ҡуйыла, тип әйтергә форсат бирә. Малтабарлыҡты артабан үҫтереү ауылда заманса фекерләргә әләтле яңы кешеләр талап итә. Әлегә и ә республиканың уҡыу йорттары ундайҙарҙы әҙерләй алыуы менән маҡтана алмай.

Ик еҙ-сик еҙ өйләшеүҙәр, ҡағыҙ тауҙары аҡтарып ваҡыт үтә. Власть эйәләре инде нисә тапҡырҙар игенсегә ҡасан, ҡайҙа, нисек сәсергә кәрәклеген аңлатырға маташа. Ул был өгөт-нәсихәттәрҙе үҙ еҙ генә тыңла а ла, уларҙың асылына төшөнөргә тырышып бармай. Улар беләːбер литр өттө эшкәртеүсе 7-8 умға ҡабул итә, ә шул уҡ ваҡытта РФ Дәүләт Дума ы буфетында бер шешә минераль ыу 50 умға тарта, тиҙәр. Иген үҫтерергә тотон аң, зыянға эшләгән булып сыға ың – икмәк ни тиклем күберәк бул а, сығымдар ҙа шул ҡәҙәр арта. "Ашлыҡ интервенциялары" – бер ҡатлы кешеләр өсөн уйын ғына, малтабарлыҡ менән ҡыҙыҡ ыныу уятмай.

Ә ябай игенсенең хеҙмәт хаҡы – айына 2-3 мең ум, уны ы ла ауыл халҡының 10 процентына ғына эләгә. Ә 40 проценты ауыл хужалығы продукция ын алыу

менән ҡәнәғәтләнә, ә ҡалған өлөшө бөтөнләй аҡса күрмәй. Крәҫтиән, әгәр улар янына РФ Ауыл хужалығы министры Елена Скрынник ханым килеп сыҡ а, мө имерәк ораузар бирер ине. Әйтәйек, ни өсөн, яҡшы тоҡомло мал атып алғанда беҙ, нигеҙҙә, сит илдәргә барабыҙ? Нимә, беҙҙең үҙебеҙҙең тоҡомсолоҡ предприятиелары юҡҡа сыҡтымы инде? Элек-электән йылҡысылыҡ традициялары булып та, беҙ итте Латин Америка ынан атып алыуҙы өҫтөн күрәбеҙ. Уинстон Черчиллдең кинәйәле үҙҙәре әле онотолмаған: “Рәсәйҙе икмәк атып алырға мәжбүр итеү өсөн ысындан да да и юлбашсы булырға кәрәк...” — тигән ул заманында.

Хеҙмәте дәүләт сәйәсәтенең иң ныҡлы нигеҙен тәшкил ит ә лә, игенсе — кеше күҙенә лә салынып бармай. Телекамера йә микрофон алдында ҡойолоп төшә, сөнки ҡулынан эш килгән кешене Хоҙай Тәғәлә, ғәҙәттә, таҫма телдән мәхрүм итә. Ғөмүмән, тормош логика ы үҙенсәлекле: берәүҙәр — эшләй, икенселәр — хәбәр өйләй. Әллә экрандарға, гәзит биттәренә бик атлығып тормағанға, батырҙарыбыҙ баҫыуҙан китеүе була, онотола ла башлай. Ҡабатлағандан доға иҫкермәй, бәлки, күңелдә яңыра әм яҡтыра ғына бара. Ниндәй эштәр менән мәшғүл бул аҡ та, ҡайҙарҙа ғына йөрө әк тә, күңелебеҙ менән ауылда икәнбеҙ. Сөнки ҡалала йәшәйбеҙме, ҡанатланып асманға күтәреләбеҙме — табандан ер йылы ы китмәй. Шул йылы, бәлки, беҙгә көс бирәләр. Тыуған йортобоҙҙоң нигеҙе лә ерҙә ята, икмәгебеҙ ерҙә үҫә, ыйыныр уңғы урыныбыҙ ҙа мәрхәмәтле ер ҡуйынында.

Бер нисә быуын ғүмер эсендә генә лә илебеҙҙә ер, игенселәрҙең яҙмышы әллә нисә мәртәбә фажиғәле буталды. Иң булдыҡлы, егәрле игенселәрҙе шахталарға йә урмандарға өрөп, үҙ хужалығын да йүнләп алып бара белмәгәндәр йыйылышып йәшәргә маташып ҡараныҡ, ләкин тормоштоң рәте-сираты булманы. Бөгөн крәҫтиән тағы ла яҙмыш иләген үтә. Белемлебеҙ, ҡорамаллыбыҙ, булдыҡлыбыҙ, тип күкрәк уҡ аҡ та, ауыл тормошон, башлыса, барыбер тәбиғәт көйләй. Ә инде икмәк!.. Уның ҡәҙерен беҙ ас ваҡытта ғына күрә башланыҡ, шикелле. Әлбиттә, мәктәп ашханаларында хәҙер бала-саға булка менән бәргеләшмәй. Был, бәлки, икмәккә хаҡтың туҡтау ыҙ артыуынан, күп кешеләрҙең көндәлек ризығы икмәк кенә була барыуҙан киләләр. Беҙ АҠШ, Германия, Голландия ауыл эшсәндәренең ғәйәт етештереүсәнле эшләүенә, дәртләнеп йәшәүенә әм, иң мө име, ошо кешеләрҙең дәүләттә абруйлы граждандар булыуына ша итбыҙ. Дәүләт уларҙың хеҙмәтенә иғтибарҙы аҙ ғына үрелттеме йәи ә хоҡуҡтарын ҡыҫтымы, улар урамға сыға. Ә еҙгә Мәскәү, Өфө урамдарына тракторҙары әм комбайндары менән килеп ингән демонстранттарҙы күрергә тура килгәне булдымы? Юҡ, сөнки беҙҙә ауыл кеше е үҙ хоҡуҡтарын яҡлап тауыш күтәреп бармай. Ул аман үҙенән өҫтөн түрәләрҙең аҡылына, намыҫына буй оноп йәшәй.

Ауылда барған процестарға ашығыс, киҫкен ба а бирергә ашыҡмайыҡ. Колхоз-совхоздар, хужалыҡ итеү формаларын эҙләүҙән бигерәк, шунда эшләүселәрҙең яңы шарттарҙа, яңы матди стимулдар менән эшләй белмәүенә, хатта теләмәүенә юлыҡты. Ҡай ы бер дәртле, булдыҡлы кешеләрҙең тырышлығы, закондарҙың камил булмауына, тимәк, эшләмәүенә, бюрократияның башбаштаҡлығына юлыға. Был ҡаршылыҡтарҙы ла еңергә булыр ине лә, ауыл кеше ен колхозсы психология ынан арындырыу тағы ла ҡыйыныраҡ. Ул бер ни өсөн дә яуап бирмәүгә, уртаҡ яуап ыҙлыҡҡа, дөйөм ағымға бирелеп йәшәп ятыуға ҡоролған. Ауыл ерендә етеш тормошта йәшәү өсөн хөкүмәттән көтөп ятыуҙың файҙа ыҙ икәнен аңлаған, үҙең тырышып ҡына ниҙер булдырыу мөмкин-

легенә ышанған кешеләр, аҙ-аҙлап бул а ла, күренә башланы. Ошо осҡондо үндермәү кәрәк. Яңыса фекерле, булдыҡлы кешеләр менталитетының өҫтөнлөк алыуына өлгәш әк кенә, ауыл тиҫтәләрсә йылға уҙылған көрсөктән сыға алыр. Әлеге фекерҙәр, әлбиттә, крәҫтиәндәргә ғәйеп ташларға теләгәндән әйтелмәй. Игенсе, малсы хеҙмәтен ҡыуанып эшләрлек, мул тормошта йәшәрлек итеү өсөн әле тауҙай тырышлыҡтар кәрәк буласаҡ.

Совет власы, бөгөн уға кем ниндәй мөнәсәбәттә булма ын, эш кеше ен күтәрә, данлай белә торғайны. Беҙ бөгөн ауыр шарттарҙа ла баҫыуҙарына тоғро ҡалған игенселәрҙең ҡәҙерен ба алап еткермәйбеҙ. Улар хәҙер дәүләттән орден-миҙалдар ҙа көтмәй, был хеҙмәтте ғәҙел ба алау, нефтсе, газсы, банкир өнәрҙәренән кәм күрмәү кәрәк.

Былтыр яҙ Учалыла иң мул ауымға өлгәшкән ауынсыларҙы хөрмәтләү тантана ы үтте. Иң алдынғы ауынсыға еңел автомашина асҡысын тотторған Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының генераль директоры Абдрахмановҡа: “Маладис, рәхмәт, Ильяс Әхмәтович!”– тип әйтке килә.

Миңә ауылдың төрлө хәлдәргә төшөүенә ша ит булырға тура килде. Гигант малсылыҡ комплекстарын төҙөп, улар бер мәл бушап ҡалғас, хәҙер уларҙы йәнә мал менән тултырырға маташабыҙ. өрөнтө ерҙәрҙе киңәйтәбеҙ, тип ҡош-ҡорт, йәнлек оя ҡорған ҡыуаҡлыҡтарҙы аҡтарҙыҡ, аҙлыҡтарҙы киптерҙек. Артабан республика Президентының ихтыяры менән өрөнтө ерҙәрҙе кәметергә, туғай-болонлоҡтарҙы кире тергеҙергә булып киттек. Беҙҙең ауыл хужалығында шулай: ыйырҙар ишәй ә – арыҡтар ҡорой, сусҡа арт а – йылҡыға көн бөтә. Халыҡтың көнкүреш традицияларын анламау – бер, икенсенән, белгестәр аҙ ғына бул а ла алға ҡарай белмәй.

Ер борон-борондан бөтә халыҡтарҙа ла крәҫтиәндең иң ҡиммәтле мөлкәте аналған. Ауыл кеше ен бөтөрөргә телә әләр, мотлаҡ ерен тартып алғандар. Шуға күрә “ер уны эшкәртеүсе ҡулында булырға тейеш” тигән фекер иҡтисади яҡтан да, әхлаҡи йә әттән дә дөрөҫ. Ергә ереккән кеше ғүмере ахырынаса уға тоғро ҡала әм, зарурлыҡ тыу а, уны уңғы улышына ҡәҙәр яҡлаясаҡ. Игенсе хеҙмәте, романтик рух менән уғарылма а, ябай бер шөғөл генә булып ҡалыр ине. Әлбиттә, донъя икмәккә генә терәлеп ҡалмаған. Кешемен тигән кеше музыкаға ла, китапҡа ла, зауыҡлы күңел асыуға ла мохтаж. Әммә күпселек халыҡтың көн айын ауыҙ иткән ризығы әллә ниндәй ниғмәттәр түгел – икмәк. Шуға ла мин, йәшәүебеҙ менән бары тик икмәккә бурыслыбыҙ, тип раҫларға йөрьәт итәм. Тик икмәктең ҡәҙере әм игенсе хеҙмәтенең мәртәбә е китмә ен ине.

Рәсәй, әйтеүҙәренсә, йәй айын океан ҡәҙәр ашлыҡ үҫтерә, тау-тау иген уғып ала. Тимәк, икмәкле ил халҡы аслыҡ-мохтажлыҡ кисермәүсе дәүләт булырға тейештер. Ул ғына ла түгел, 143 миллион кеше йәшәгән илгә 75 – 80 миллион тонна иген – күмелеп ятырлыҡ Хазина. Ә ниңә уң кибет кәштәләрендәге икмәктең хаҡына күҙ эйәрмәй, ниңә икмәктән ысын икмәк тәме юғала? Хикмәтле замандың икмәккә ҡағылышы әкәмәтле ораուҙары күп инде ул.

**Марсель ҠОТЛОҒӘЛЛӘМОВ.**

# “БАШҠОРТТАР ИСЕМЕНӘН...”

Күк көмбәҙендә, күҙ ҡамаштырырлыҡ нурҙар ирпкән йондоҙҙар менән бер рәттән, үрәнерәк янған, кешегә бик үк билдәле булмаған есемдәр ҙә бар. Әммә уларҙың Йы ан киңлектәрендәге урыны башҡа яҡтылыҡ есемдәренекенән бер ҙә кәм түгел. Тарихта ла үҙ ваҡытында халыҡ хәтеренә нығыраҡ еңеп ҡалған исемдәрҙе беҙ йыш ҡабатлайбыҙ, йәш быуындың аңына ла улар нығыраҡ еңә бара. Ләкин йәмғиәт тормошонда ғәйәт ҙур роль уйнаған ҡай ы бер шәхестәр, битарафлыҡ арҡа ында, бигүк иҫкә алынмай. Күрәләтә гәҙел еҙлек был.

Башҡортостан Автономиялы Республика ының тәүге аҙымдары тура ында өйләгәндә беҙ элегерәк ялҡынлы революционерҙар Б. Нуриманов, Б. Шәфиев, Ш. Хоҙайбирҙиндарҙы телгә ала инек. Йәш Совет власының башҡорт, татарҙарға, ғөмүмән, Рәсәй халыҡтарына ҡарата милли сәйәсәте хаҡында өйләгәндә, башлыса М. Вахитов, Ғ. Ибра имовтарҙы иҫкә төшөрөп килдек. Улар хөрмәткә хаҡлы, әлбиттә. уңғы осорҙа, бигерәк тә 90-сы йылдарҙан башлап, тарихсыларыбыҙ бөтә көсөн Әхмәтзәки Вәлиди шәхесен данлауға алды. Ә ни өсөн уң әле шундай уҡ ҙур дәүләт эштәре башҡарған, улар менән ҡулға-ҡул тотоношоп халыҡ бәхете өсөн көрәшкән Шәриф Манатов, мәҫәлән, онотолдо тиерлек? Унның эшмәкәрлеге, тормошо тура ында ентекләберәк яҙылмай. Ҡатмарлы осорҙа ваҡиғаларҙың үҙәгендә торған, 1918 -1919 йылдарҙа Башҡорт автономия ын ҡороуҙа арымай-талмай эшләгән сәйәсмәнгә тейешенсә ба а бирелмәй. Ә унның тура ында сәсмә мәғлүмәттәр аҙ түгел бит. Халыҡ хәтерендәгеләрен генә алайыҡ. “Шәриф Манатов ғалим булған. Башҡорттар ара ынан тәүгеләрҙән булып профессор дәрәжә е алған. В.Ленин менән бергә эшләгән”,– тигән хәбәрҙе еңел генә әйтеп үтәбеҙ. Ни өсөн унның мәйете “ер аяғы – ер башы” Учалы яғына, йәмәғәтселеккә билдә еҙ Әй-Көсөк зыяратына килеп ыйынған? Тыуған төйәге Ҡурған өлкә ендә, йә булма а Башҡортостан Республика ын ойоштороп йөрөгән кешегә урын Өфөлә йәки Стәрлетамаҡта табылмаған?

Муса Мортазинныбыҙ ҙа бит, атып үлтерелеп, ҡайҙалыр Мәскәү тарафтарында ерләнгән, Оло Башҡортостандың ВЦИК рәйесе Хафиз Ҡушаев та – шул яҡтарҙа. Салауатыбыҙ – Балтик буйында, Шакирйән Мөхәмәтйәнов (Александр Матросов) – Великие Лукиҙа .б. Учалы районының хеҙмәт ветераны Рамаҙан Ниғмәтуллин бер йылды, генерал М. Шайморатовтың Украинала ятып ҡалған мәйетен үҙебеҙгә алып ҡайтайыҡ, тип кеше йыя башлағайны ла, изге ынтылыш яҡлау тапманы.

Ниндәй игелек еҙ халыҡ уң беҙ?!



## Тыуған төйәк туп а ында

Шәриф Әхмәт улы Манатов – 1917 йылда башланған башҡорт милли хәрәкәтенең күренекле эшмәкәре, Башҡорт Үҙәк шура ының (советының) беренсе рәйесе. Шураның иң мө им 1-се әм 2-се фармандарына тап ул ҡул ҡуйған. Беренсе документ – башҡорт халҡына үҙидара хоҡуғы биреү, икенсе е – Рәсәй составында Башҡортостан автономия ын иғлан итеү хаҡында.

Төплө архив материалдары булмағанлыҡтан, эҙләнеүҙе мин Силәбе өлкә енең Мейәс яғынан башланым. Сөнки Манатов 1935-1936 йылдарҙа Мейәс районының Учалы районы менән сиктәш “Черновское” совхозына ҡараған Смородиновка ауылында йәшәгән. Хатта Манатовка ауылы ла ошо тирәлә бул а кәрәк.

... 1970 йылдың томра июне. Смородиновканың ҡап урта ындағы быуала малай-шалай, сыр-сыу килеп, ыу инә. Өй алдарында ҡарт-ҡоро ҡояшҡа арҡа йылыта. Шулар янына килеп, был ауылда Манатовтар йәшәү-йәшәмәүҙәрен орашам.

– Манатовтар?– орауға орау менән яуаплай бер ҡатын.– Ундай кешеләр юҡ беҙҙә. Элегерәк Ғәзизулла Манатов тигән ҡарт бар ине. Күптән күсеп китте, бәлки, иҫән дә түгелдер. Манатовка урамына барығыҙ ҙа Сиражетдинованы орағыҙ. Унық белеүе ихтимал. Өйө күк тәҙрәле булыр.

Манатовка – машина-фәлән бик йөрөмәгән, күгүләнле иркен, киң урам. Йорттар бейек, заманса. Урам буйлап электр бағаналары теҙелгән, шифер, ҡалай түбәле өйҙәрҙә – телевизор антенналары.

Урам буш. Көтә торғас, бер ҡатын күренде.

– Беҙҙең ҡаршыла ғына Манатов Ғәзизулла бабай йәшәй торғайны, – тине ул, барыр ерен дә онотоп. – Үҙе күсеп киткәс, өйөн үттеләр. Тағы бер Манатовтың – ҡусты ының өйөн Тихоновтар атып алды.

Сиражетдинова апай – сәстәрен тигеҙ итеп артҡа тараған йомро битле ҡарсыҡ – йомошобоҙҙо белгәс, теҙеп алып китте: эйе, ул быңдағы өс туған Манатовтарҙы яҡшы белә. Бер еңеләре әле лә Учалы районының Кәрим ауылында йәшәй, шикелле. 1933 йылда “Миасзолото” идаралығы комбинат асҡандан уң Манатовтар ошонда күсеп килде, беренсе булып өй алып инделәр. уңынан урам ҙурайып, “Манатовка” тип йөрөтөлә башланы. Манатовтар аҙаҡ ҡайҙа киткәндер, иҫләмәй. Моғайын, Бибиниса ҡарсыҡ беләлер.

“Манатовтар” үҙен ишетеү менән Бибиниса Юнысованың йөҙө яҡтырып китте. Ул бында 30-сы йылдарҙа ҡусты ы Ғәзизуллаға Шәрифйәндең килеүе тура ында кисә булған хәл кеүек өйләп алып китте.

– Ифрат ғалим кеше ине Шәриф. Ҡаты ауырыны, ауыға алманы. “Ленин янында ла эшләгән”,– тинеләр. Яҙышты ла ултырҙы. Йыл үттеме-юҡмы, үлеп ҡалды... Уҡымышлылығы өсөн Ғәзизулланы ла “Ҡөрьән Ғәзиз” тип йөрөттөләр. Был турала Рәйсә өйләр.

Тыҡрыҡтан кире китәбеҙ. Юл ыңғай шуны асыҡлайым: Бибиниса Учалы районының Илтабан ауылында тыуып, йәшләй ошо яҡҡа килгән.

Аяҡ кейемен алып, арыға баҫҡыстан алҡын соланға үтәбеҙ.

– Рәйсә! иңә ҡунаҡ килтерҙем! Манатовты орашалар.

Бәләкәй буйлы, ыҡсым кәүҙәле, яғымлы йөҙлө Рәйсә Әхмәҙиева берсә

самауырына тотона, берсә комодынан ниҙер эҙләп маташа. Сәйҙән баш тартҡас, бер төргәк ҡағыҙҙар ара ынан Ғәзизулланың ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған хаттарын сығара. Манатовтарҙың яҡшы кеше булыуҙарын, үҙен бик яҡын күреп, бынан киткәс тә, хаттар яҙып тороуҙарын, Мейәс, Учалы яҡтарын ағыныуҙарын өйләп ташланы ул.

– Күп уҡып, яҙышып ултырыр ине. Ғалим булды бит ул. әр кемгә иғтибарлы булды. Әкренләп Әй-Көсөк яғына сығып йөрөнө.

– Ә унда ни өсөн барҙы?

– Тәбиғәтен оҡшатты кеүек. Кешеләрҙе лә күрге е килгәндер.

Ғәзизулла Манатовтың Ҡурған өлкә ендәге адресын, Рәйсә Әхмәҙиеваға яҙған уңғы хатын алып, Әй-Көсөккә йүнәләм. Унда ла Шәриф Манатовты күреп белгән кешеләр табылды.

Әй-Көсөк, өйөндөк, Мулдаҡай ауылдарында элек-электән алтын йыуғандар, ниндәйҙер кимәлдә эшселәр синыфы ла тәрбиәләнгән. Алтын шахталарында эшләгән төрлө милләт кешеләре Граждандар уғышы йылдарында Совет власын урынлаштырыуҙа терәк булған. 30-сы йылдарҙа и ә бында алтын сәнәғәте әлегә күрелмәгәнсә үҫеш ала. Ш. Манатовтың эш ҡайнап торған Әй-Көсөк ауылына ынтылыуы бер ҙә ғәжәп түгел.

Шәрифте ерләргә килтереүҙәрен ишеткәс тә, Графир участка ы начальнигы Ша ишәриф Бүләков (Кәрим ауылынан – **Р. Н.**), ик әнләгән эшсене эйәртеп, ошонда килеп етә. Алтын сығарыу артеле Манатовты ерләүгә 110 ум бүлә. Ауылда ҙур митинг булып, унда Бөтә Рәсәй Үҙәк башҡарма комитеты ағза ы Бүләков телмәр тота.

– Ни өсөн уны бында ерләгәндәр?

Манатовтың ҡәрҙәше Зәкәриә Саҙиҡов былай аңлата:

– Шәриф ҡайнаға үҙе, мине ошо зыяратҡа ҡуйыр ығыҙ, тип васыят иткән. Ерыуыбыҙҙы, кешеләрен оҡшатҡан, күрә ең. Шул ваҡиғанан уң комбинат ҡасабаында йәшәгән әр башҡорт үлер алдынан, мине Шәрифйән ағай эргә енә алып барыр ығыҙ, тип әйтер булып китте. Смородиновка башҡорттарын әле лә ошонда ерләйҙәр.

З. Саҙиҡов, уның ауылдашы Әхмәтнур Шәрипов менән Ш. Манатовтың ҡәберен эҙләп таптыҡ. Үкенескә ҡаршы, ул тәрбиә күрмәгән, убылып ер менән тигеҙләнгән. Ваҡытлыса ғына бул а ла обелиск кеүек нәмә эшләтеп ҡуйыуҙарын орап “Поляковка” совхозы етәкселегенә мөрәжәғәт итергә булдыҡ.

Тиҙҙән Ғәзизулла мулланан да хат алдым. Ләкин унда ҡыҙыҡлы бер мәғлүмәт тә яҙылмағайны: ҡарт нимәнәндер шикләнгән, буғай. Шуны ы ҡыуаныслы: Шәриф Манатов ғаилә енең адресын ебәргән. Мәрхүмдең ҡатыны Литва ССР-ында йәшәй икән. Тыуған яҡты өйрәнеү музейы директоры С. Ш. Ғиззәтуллин шунда уҡ, уны Учалы ҡала ына саҡырып, телеграмма уҡты.

Көтмәгәндә килеп төшкән телеграмма Ғәйшә апай Манатованы тетрәндергән, ахыры ы, ул аяҡтан йығылған. Ҡапыл өҫкә ауған шатлыҡ: тыуған яҡтың сәләмен күтәреүе лә еңел түгел икән. Хәйер, Ғәйшә Сәйәх ҡыҙы бындай хәбәрҙе күптән көткән. Иренең ҡәберен рәткә килтереүҙә, әйкәл ҡуйыуҙа ярҙам итеүҙәрен орап ВООПИК-тың Башҡорт Республика ы бүлеге рәйесе Ғилемдар Рамазановҡа ғариза ла яҙып алғайны. Яуапҡа ла өмөтләнде. Ҡарасы, ҡунаҡҡа саҡыралар бит, Шәриф айлаған тупраҡты күреп кит ен, тигәндәрҙер.

Шәриф менән татыу йәшәнеләр, бөтә ауырлыҡтарҙы бергә күтәрҙеләр. Халҡының яҙмышы хаҡында күп уйлаған, большевиктар партия ы ҡушҡан әр эште еренә еткереп үтәргә тырышҡан Шәрифте поездарҙа, саңлы юлдарҙа Ғәйшә оҙатып йөрөнө бит. Балалары ла аслы-туҡлы булды, ике е мәшәҡәтле сәфәрҙәрҙә мәңгелеккә күҙҙәрен йомдо. Йәш ҡатын йәмәғәт эштәренә лә ылығып китте: Урта

Азияла ҡатын-ҡыҙҙар ара ында аңлатыу эштәре алып барҙы, халыҡ йолаларын дин шауҡымынан айырырға тырышты. Выжданы саф булды. Шулай ҙа йөрәгенниҙер маҙа ыҙланы, хәтирәләрҙең ҡай ы ылыр тынғылыҡ бирмәне.

Бәләнең иң ҙуры 35-се йылдарҙа килде, Шәрифтең аулығы күҙгә күренеп насарайҙы. Сир 20-се йылдарҙа уҡ үҙен иҙҙергәйне, ә Фрунзе (хәҙерге Бешкәк – **Р.Н.**) ҡала ына күсеп барғас, ул бөтөнләй аҙҙы. Шәриф, ҡымыҙ эсеп дауаланып ҡайтайым тип, Башҡортостанға китте. Шафран санаторийына барышлай ул Өфөгә лә уғыла.

Манатов эшмәкәрлеген өйрәнгән Өфө авиация университеты уҡытыусы ы Ю. Ергиндың раҫлауынса, ул, бында эшкә урынлашып булмаҫмы тип, педагогия институты директоры Ғөбәй Дәүләтшинға инеп сыға. Фольклорсы Г.Вилданов әм Яҙыусылар союзының яуаплы секретары Т.Йәнәби менән дә осраша.

Күп тә үтмәй, ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә комитетынан Фрунзе ҡала ына хат китә: ни өсөн, ауырыу кеше, Өфөлә шикле кешеләргә инеп йөрөй? Партияның Ҡырғыҙстан Республика комитетында ла сәйәси яҡтан "уяу" кешеләр табыла. "Контрреволюцион буржуаз милләтсе" тип, Манатовты 1935 йылдың октябрендә партиянан сығаралар. Ғәҙел еҙлек, ғазаплы кисерештәр ауырыу кешене тамам аяҡтан йыға. Институттағы эшенән дә бушаталар. Ҡатынын, өс бала ын етәкләп, ул тағы Башҡортостанға ыңғайлай. Мейәскә еткәс, поездан төшөп ҡала.

– ин Өфөгә барып ет, балаларҙы уҡыт,– ти ул ҡатынына.

Мейәстән 15–20 саҡрымда Учалы районы менән сиктәш Смородиновка ауылында Ҡурған өлкә енән килеп төпләнгән ағалары Ғәзизулла, Фәйзрахман, ҡусты ы Зыя йәшәй. Иң кескәйҙәре Хафиза.

1936 йылдың йәйендә Ғәйшә апай Ғәзизулла ҡайнаға ынан, Шәриф үлеп ҡалды, тигән хәбәр ала. Эйе, Манатов Башҡортостан тупрағынан урын айлай. Ә Ғәйшә күп йылдар үткәс кенә иренең ҡәберен күрергә китеп бара. Уларҙың йәшлеге аяу ыҙ осорға, киҫкен боролоштар мәленә тап булды бит. Иң мө име: Шәрифтең башын юғалтмауын, үҙ халҡына тоғро ҡалыуын, йәшлектә айлаған юлын ташламауын аңлау ине...

Ул юл сыҡҡанға тиклем үк район гәзите өсөн байтаҡ ҡына иҫтәлектәр яҙғайны. Уларҙы тағы бер барлап, тикшереп сыҡты.

... Шәриф бала саҡта уҡ теремек, зи енле малай булған икән. Шулай булма а, әллә ҡайҙағы Ялан кантонынан (ул 1922 йылда – Ырымбур губерна ына, аҙағыраҡ Ҡурған өлкә енә бирелә.–**Р. Н.**) бер тин аҡса ыҙ Өфөгә сығып китер инеме? Ниндәйҙер таныштар аша "Ғәлиә" мәҙрәсә енә уҡырға инә, уны тамамлағас, Семипалатинск ҡала ындағы (Ҡаҙағстан – **Р.Н.**) семинарияға китә. Йәйҙәрен эшләп тапҡан аҡсаға егет тамаҡ аҫырай, китаптар атып ала.

Артабан Шәриф Петроград ҡала ына килеп, Бехтерев исемендәге институттың тарих-филология факультетына имтихан тота. Элеккесә дәрес биреүен дауам итә, гәзиттәргә мәҡәләләр яҙа. Шулай ул революцион йәштәр менән аралашып китә.

Әлбиттә, Ғәйшә апай хәҙер Шәрифтең Петроградта саҡта ни тура ында яҙғанын әйтә алмай. Үҙенең үҙҙәренә ҡарағанда, батша хөкүмәтенең милли сәйәсәтен фашлап, империалистик уғышҡа ҡаршы сығыш я ағандыр. Шул арҡала ул властар эҙәрләүенә эләгеп, Швейцарияға китергә мәжбүр була. "Кеҫәмдә өс ум ғына бар ине" тип иҫкә ала торғайны Шәриф. Революцион демократтар төйәгенә әйләнгән Швейцарияла Шәриф сәйәси эмигранттар, шул иҫәптән 1915 йылда В. И. Ленин менән осраша. Уның аңындағы үҙгәрештәр шунан уң башлана ла инде. Уҡырға, революцион теорияны өйрәнергә – шуны аңлай Манатов. Шоколад фабрика ында 12–14 сәғәт эшләп ҡайтҡандан уң сәйәси әҙәбиәт уҡый, сит телдәр өйрәнә. Өс йыллап ғүмере шулай үтә. Хәҙер Шәриф сәйәси тормошто анализлай белә, инглиз, немец, швейцар, француз, ғәрәп телдәрен үҙләштерә. 1917 йылда,

батша тәхетенән төшөрөлгәс, ул да, башҡа революционерҙар кеүек, Рәсәйгә ҡайта.

Яҡташтарының яҙмышы тура ында йыш уйланған Шәрифтең урыны, әлбиттә, халыҡ ара ында. Ул сәйәси тормош үҙәге булған Ырымбурға килә. Әммә Февраль революция ы ең ә лә, күп хыялдар тормошҡа ашмаған, башҡорттарҙың элеккесә үҙ идаралығы ла, милли дәүләтселеге лә юҡ. Шул турала уйланыуҙар Шәрифте демократик зыялылар даирә енә алып килә. Башҡорт өсөн милли азатлыҡты буржуаз-демократик үҙгәрештәр түгел, ә социалистик революция ғына бирә, тип аңлай ул. Бер милләттең икенсе енән өҫтөн булыуын, икенсе ененең хоҡуҡ яғынан сикләнгәнлеген фәҡәт ошо революция ғына юҡ итәсәк, халыҡтарҙың тиңлеген, үҙ аллы йәшәү мөмкинлеген бирәсәк.

...Ғәйшә Сәйәх ҡыҙының уйҙары йәшлегенә әйләнеп ҡайта. Улар Шәриф эмиграциянан ҡайтып дүрт йыл үткәс танышҡайны. 1921 йылда Мәскәүҙә эшләгән сағында Шәриф "башҡорт эштәре" буйынса Стәрлетамаҡҡа килгәйне. Уны Ғәйшәләргә бер хәрби танышы (аҙаҡ унының хәрби комиссар Ибра им Ҡыпсаҡ булыуы асыҡланасаҡ – **Р.Н.**) килтерҙе, ахыры ы. Ғәйшәләрҙең пианинолары бар, ә Шәриф музыка ярата. Бер кис ул ҡыҙҙың ни өсөн уҡымауы тура ында орашты. Ҡара, үткер ҡарашлы ылыу егеттең орауына батырсылыҡ итеп әйтте лә алды:

– Мәскәүгә алып барығыҙ – уҡырмын.

– Ә ниңә, була ул,– тип көлдө Шәриф.

Күпмелер ваҡыт уҙғас, ул тағы килде.

– Әйҙә, алып китәм,– ти.– Урынлашырға ярҙам итермен.

Ғәйшә Шәрифкә ышанды ла ҡуйҙы. Ауыр саҡ: станцияларҙа тығыҙ. Ҡайҙа поезда, ҡайҙа юл ыңғай машинала, ун көндән Мәскәүгә барып еттеләр.

– Шәриф ике бүлмәле фатирының бере енә мине урынлаштырҙы. Үҙе таң менән киске ҡараңғыға тиклем эштә. Ҡайҙа, нисек туҡланып йөрөгәндер, паегын миңә бирә торғайны,– тип иҫләй Ғәйшә Сәйәх ҡыҙы.– Кистәрен уҡырға, яҙырға өйрәтә. Шулай итеп, Шәриф мине аслыҡтан да ҡотҡарҙы, белем дә бирҙе. Хәйер, күп кешегә ярҙам итте ул. Киң күңелле, йомарт булды.

Бер аҙҙан өйләнештек. Шунан бирле ул ҡайҙа – мин дә шунда. Тәүҙә Мәскәүҙә йәшәнек, унан Төркөстанда. 1925 йылда Әзербайжандың Баҡы ҡала ына күстек. Ҡырым, Фрунзе ҡала ы... Алты балабыҙ тыуғайны, икәү е Фрунзела ауырып үлде. Аҙағыраҡ өсөнсө ө лә үлде, унан Шәриф... Берҙән-бер улым ҡалғайны, 1959 йылда вафат булды.

Ғәйшә Сәйәх ҡыҙы Вильнюс ҡала ынан Уралға килеп еткәнсе бөтә тормошон башынан үткәрҙе кеүек. "Ҡыҙыл партизан" колхозында ҡымыҙ эсеп, бер аҙ ял итеп алғас, кәйефе күтәрелде. Тыуған яҡты өйрәнеү музейын асып, Шәриф тура ында иҫтәлектәр йыя башлауҙарын күргәс, арыуынан бер нәмә лә ҡалманы.

## Алыҫ сәфәргә

Ғәйшә апай менән Учалыла оҙаҡ өйләшеп ултырҙыҡ. Төп мәсьәләләрҙең бере ен асыҡларға теләп, мин уға шундай орау бирҙем:

– Шәриф ағай автономия юллап Стәрлетамаҡтан Петроградҡа киткән еренән ҡайтмаған. Был сәйер күренә. Зәки Вәлиди ҙә уны үҙенең "Хәтирәләр"ендә ғәйепләнкерәп иҫкә ала. Уларҙың "борсаҡтары бешмәнеме" әллә?

– Эйе, уртаҡ тел тапмаған улар.

– Ни өсөн?

– Маҡсаттары бер бул а ла, юлдары төрлөсәрәк. Вәлиди Төркөстанға ынтылған. Ул бит типтәр ине. Ә Шәриф башҡорттарҙы яратты. "Минең иң ныҡ ба алаған кешем Муса Мортазин, уға ғына ышанам",– тигәне хәтерҙә ҡалған.

Башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдарға сығырға булғас, Мортазин: “Был хаҡта миңә Манатов әйт ен, мин уға ышанам”,– тигән.

Был яңылыҡ шуның менән бәйле: 1920 йылда Тамъян-Ҡатай кантонында башҡорттар Совет власының продразверстка ына ҡаршы ихтилалға күтәрелә. Уны баҫтырыу өсөн Белорет, Силәбе ҡалалары большевиктары ҙур ҡоралллы көс ҡуллана, халыҡты ҡырырға тотона. Ошо мәлдә илдең көнбайышында аҡ поляктарға ҡаршы уғышҡан Муса Мортазин, бригада ын ваҡытлыса ҡалдырып, Тамъян-Ҡатайға ҡайтып төшә әм тиҙ арала ихтилал утын үндереүгә ирешә. Кемдең күр әтмә е, кемдең кәңәше буйынса ҡайтҡан комбриг тыуған яғына? Моғайын, Шәриф Манатов кәңәше буйынсалыр, тигән фекер тыуа.

– Ни өсөн партияның Үҙәк Комитеты Шәриф ағайҙы буржуаз милләтселәр иҫәбенә индергән? – тип орайым.

Апай тоҡанып китте. Урынынан икереп торҙо ла, миңә төртөп:

– еҙ ҙә Шәрифте “ашаған” кешеләрҙең бере еме әллә?– тине лә сығып та китте.

– Апай, еҙ мине яңылыш аңланығыҙ,– тип артынан йүгереп сыҡ ам да, ул артабан өйләшергә теләмәне.

Апай мине КГБ (элекке Дәүләт именлеге комитеты – **Р.Н.**) кеше е тип ҡабул итте, ахыры ы. Күпме нәфрәт аҡланып ҡалған унда!

КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитеты архивында Ғәйшә Сәйәх ҡыҙы ебәргән ҡай ы бер документтар табыл а ла, Манатов биография ын асыҡлау өсөн улар етерлек түгел ине. Ғәйшә апай менән тағы осрашырға “Башҡортостан” гәзитенең 80-се йылдар аҙағындағы мөхәррире Мансур Әйүпов ярҙам итте. Мин Литва ССР-ына юлға сыҡтым. Бына Вильнюс ҡала ының Ғәйшә апай йәшәргә тейеш булған Альгирдос урамы.

– еҙ Манатова Ғәйшә тигән ҡарсыҡты белмәй егеҙме? – тип орайбыҙ бер ҡатындан.

Ул оҙаҡ ҡына өндәшмәй торҙо ла:

– Уның үлгәненә өс йыл инде, – тине.

– Бәлки, берәй ағай-эне е барҙыр? – тип өмөт өҙмәйбеҙ.

– Бар. Ләкин килене Зинаида икенсе урында йәшәй.

Ҡатын беҙҙе фатирына саҡырҙы. Шулай итеп, беҙ бик тә ярҙамсыл Пугачевтар ғаилә е менән танышып киттек. Ғәйшә апай менән улар күрше булып, күп нәмәне белеп-ишетеп торғандар. Пугачевтар ҡарсыҡтың Башҡортостан менән йыш хат алышыуын, унда барып ҡанатланып ҡайтыуын, элек Сталин ҡул ҡуйған бер танытмаға таянып пенсия ын арттырыуын, уңғы йылдарҙа пансионатта әйбәт кенә йәшәүен өйләп алдылар. Килендәре ҙур квартира алғас, ҡарсыҡты үҙе янына ҡат-ҡат саҡыр а ла, улы Шамил йәшәгән бүлмәне ҡалдырып китке е килмәгән. Федор Пугачев Шәриф Манатовтың берҙән-бер улы Шамил менән 1946 йылда Вильнюс авиаотрядында бергә эшләгән.

Зинаида Константиновна – Закира Хөсәйеновна беҙҙе үҙе килеп тапты. Дзуку урамындағы биш ҡатлы йортта ике бүлмәле яҡты, матур йы азландырылған фатирҙа йәшәй икән ул. Пенза ҡала ында татар ғаилә ендә тыуған, уғыш юлын үткән. Осоусы булып хеҙмәт иткән Шамил менән 1943 йылда танышып, уғыштан уң өйләнешкәндәр. Тәүҙә Харьковта йәшәгәндәр, 1946 йылда Литваға күсерелгәндәр.

Хужабикә карауат аҫтынан ҡәйнә енең ҡара сумаҙанын тартып сығарҙы. Ҡағыҙҙар менән таныша-таныша, мин Стәрлетамаҡта үҫкән татар ҡыҙы Ғәйшә Сәйәховнаның уңғы көндәренә тиклем ире иҫтәлегенә тоғро ҡалыуына, унын ту-

ра ында саҡ ҡына шик белдергән әр кемгә арыҫландай ташланырға әҙер тороуына оҡланып бөтә алманым. Ә инде уның ысын коммунист булыуын төрлө документтар раҫлай ине.

Сумаҙандағы ҡағыҙҙарҙы, фотоларҙы ҡарайбыҙ.

1. Шәриф Манатов – Бехтерев институтының тарих-филология факультеты студенты.

2. Ш. Манатовтың фото ы. Петроград, 1918 й.

3. Ш. Манатовты РСФСР-ҙы районлаштырыу буйынса Башҡортостан Республика ы вәкиле итеп тәғәйенләү тура ындағы мандат. 1921 й.

4. Ш. Манатовты Хөкүмәт (Үҙәк башҡарма комитеты әм Халыҡ Комиссарҙары Советы) эргә ендә Башҡорт Автономиялы Совет Республика ының тулы хоҡуҡлы вәкиле итеп тәғәйенләү тура ындағы мандат. И. Сталин ҡул ҡуйған. 1920 й. 21 декабре.

6. БАССР-ҙың Мәғариф халыҡ комиссариатында академия үҙәге мөдире булып хеҙмәт итеүе тура ында танытма. 1924 й.

7. РСФСР-ҙың I Бөтә Союз тюркологтар съезы делегатына бирелгән билет. 1926 й. .б.

Былар – 20-се йылдар башына ғына ҡағылышлы документтар. Ә Ш.Манатовтың мәҡәләләре, шиғырҙары баҫылған гәзиттәр ҡайҙа? 60-сы йылдар аҙағында Ғәйшә апай, Шәриф ағайҙың ҡульяҙмалары ҡалмағанмы, тигән орауға шулайыраҡ яуап ҡайтарғайны: “Ҡульяҙмалар күп ине, тик мин уларҙың бары ын да утҡа ташланым. Уның мәҡәләләре баҫылған гәзиттәр ҙә тулы бер кәрзин ине, ҡайҙалыр тороп ҡалды. Золом башланған саҡ ине лә ә. Етмә ә, мине лә, ниңә Башҡортостанға ҡайттығыҙ, тип ҡурҡытып бөттөләр. Ғәйеп еҙ кешеләр әрәм булды...”.

Өҙөк- урыҡ йыйылған документтарҙан Шәриф Манатовтың тыныс йәшәмәгәнен, ә, кире енсә, ҡаршылыҡтар тулы тормош алып барыуын күҙ алдына баҫтырырға мөмкин. Уның үҫмер сағында уҡ әле матди ҡыйынлыҡтар кисереүе, сит илдә йәшәгәндә ҡара эштә йөрөүе, сит ил эшселәре тормошон күҙәтеүе сәйәси ҡараштарына нигеҙ алған. “Фәҡәт улар йәш демократҡа тиҙ арала азатлыҡ хәрәкәте идеологтарының ҡараштарын аңларға ярҙам итә”,– тип яҙғайны миңә Ғәйшә Сәйәх ҡыҙы. Ҡомартҡылар ара ында Манатовтың Башҡорт автономия ы тура ында мәҡәләләре осрама а ла, ейән-ейәнсәрҙәрен килеп күреү бушҡа булманы. Закира Хөсәйеновнаның балалары, ейәндәре өйгә бишәү булып килеп инде. Шәриф ағай ынтылған, әммә күрергә яҙмаған бәхетле тормош сағыла ине уларҙа. Йәштәр үҙҙәре тура ында ла өйләне, Башҡортостан менән ҡыҙыҡ ындылар, олатайҙарының ҡәберен барып күрергә теләүҙәрен белдерҙеләр. Ә беҙ уларҙың юғары мәҙәниәтле, төрлө фән өлкәләрендә мәғлүмәтле кешеләр булып үҫкәнен, илдә барған үҙгәрештәр хаҡында ҡыҙыҡлы ғына фекерҙәр йөрөтөүен самаланыҡ. Бына бит ул оло Манатовтар быуыны алған тырышлыҡтарҙың гүзәл емеше!

Манатовтарҙың алты бала ы булған, тип әйткәйнек инде: 1922 йылда Мәскәүҙә тәүге малай – Шамил тыуған, 1925 йылда – Камил. Ул үлгәс, бер малай тыуып, уға ла Камил исемен бирәләр. Артабан ҡыҙҙар китеп, уларға ата теләге буйынса немец коммунистары Роза Люксембург менән Клара Цеткин исемдәре ҡушыла. Иң уңғы бала – Рәшит. Үкенескә ҡаршы, балалар бер-бер артлы вафат була. Шамил ғына иҫән ҡала. Ғәйшә апайҙың өйләүенсә, Шамилды дауахананан алып ҡайтырға В. Ленин үҙенең машина ын бирә. Уларға Ф. Дзержинский ҙа килеп йөрөй...

1936 йылда Ғәйшә Сәйәх ҡыҙы өс бала ы менән Өфөгә килә. Шамил ошонда

уҡый. Артабан ғаилә Стәрлетамаҡҡа күсә. уғыш йылдарында әсә Ишембай ҡалаында йәшәй, китапханала эшләй. Шамил и ә, осоусы булып, Сталинград, уңынан II Украина фронттарында уғыша, Румыния, Венгрия, Чехословакия күген иңләй. Батырлығы өсөн ул Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ, II дәрәжә Ватан уғышы ордендары, "Хәрби хеҙмәттәре өсөн" миҙалы менән наградлана. Капитан Манатов корабль командиры булып хеҙмәт итә, халыҡ-ара рейстарҙа миллион километрҙан ашыу ауа юлы үтә.

Кремль дауахана ында тыуған Шамилды, 37 йылдан уң, яман шеш ауырыуы менән шул уҡ дауаханаға алалар. Танылған хирург, профессор Огнев операция я ай, әммә осоусыны ҡотҡара алмай. Офицер Манатовтың оҫта осоусы, тоғро иптәш булыуын Вильнюс аэропортында яҡшы хәтерләйҙәр әм уның иҫтәлеген мәңгеләштереү өсөн документтар туплайҙар.

## Ялҡынлы сәйәсмән

Бала саҡтан уҡ халҡының ыҙа сигеп йәшәгәнен күреп, үҙе лә кәм етелеүҙәр кисергән Шәриф Манатов Көнбайышта ла хеҙмәт кешеләренең төрлө йәберләнеүҙәргә осрауына ша ит була. Цюрихта ул В.Ленин үткәргән әңгәмәләрҙә ҡатнаша. Ошо танышлыҡ арҡа ында ул 1918 йылдың башында Башҡорт хөкүмәте үткәргән сәйәсәттән баш тартып, Советтар яғына күсергә мәжбүр булғандыр, тип уйларға нигеҙ бар.

1917 йылғы Февраль инҡилабынан уң Манатов тыуған иленә ҡайтып, Өфөлә революцион эшкә ҡушыла. Ошо уҡ йылдың икенсе яртыында милли азатлыҡ хәрәкәте йәйелеп китә.

1917 йылдың 20–27 июлендә Ырымбурҙа Өфө, Ырымбур, амар, Пермь әм Силәбе губерналарының 70 вәкиле ҡатнашҡан I Башҡорт ҡоролтайында Башҡортостан автономия ын ойоштороу буйынса тәүге аҙым я ала: алты кешенән торған Башҡорт Үҙәк (өлкә) шура ы айлана. Уның составына Ш. Манатов, бер туған Мутиндар, С. Мерәҫов, У. Ҡыуатов, Х. Йомағолов инә. Иң күп тауыш йыйып, Ш. Манатов Шура рәйесе итеп айлана.

Ошо уҡ йылдың 20–30 авгусында Өфөлә үткәрелгән II Башҡорт ҡоролтайы Ваҡытлы хөкүмәткә башҡорт халҡы исеменән талаптар әҙерләй. Унда сығыш я ап, Ш. Манатов унитар дәүләт ҡоролошоноң иҫкергәнлеге, Рәсәйҙең Федерация нигеҙендә ҡоролорға тейешлеге тура ында белдерә, милләттәрҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғын танырға теләмәүселәргә ҡаршы сыға.

1917 йылдың 15 ноябрендә үткән III Башҡорт ҡоролтайында башҡорт халҡының милли дәүләт тура ындағы күп быуатлыҡ өмөттәрен сағылдырған 1-се фарман донъя күрә. Уға Шура рәйесе Шәриф Манатов әм уның ете ағза ы (шул иҫәптән рәйес ярҙамсы ы Ә. Вәлидов) ҡул ҡуя. "... Беҙ ерле автономия алырға, илдә тәртип урынлаштырырға, илебеҙҙе, еребеҙҙе аҡларға ынтылабыҙ",– тиелә тарихи документта. Унда ике миллионлы башҡорт халҡының сәйәси ыҙғыштарға ҡатнашмаясағы, үҙ мәнфәғәттәре, үҙ ихтыяждары, үҙ ҡарашы булыуы әм башҡорттарҙың башҡалар йоғонто онан сығыу ихтыяжы тура ында әйтелә.

Башҡорт Өлкә шура ы Ырымбур, Өфө, Пермь, амар губерналарының башҡорттар йәшәгән биләмәләрен Рәсәйҙең автономиялы өлөшө тип иғлан итә әм Ырымбур губерна ында автономия (Бәләкәй Башҡортостан – **Р.Н.)** төҙөй башлай. "Азатлыҡ фарманы" тип йөрөтөлгән был документҡа беренсе булып Шура рәйесе Ш. Манатов ҡул ҡуя.

8–20 декабрҙә Бәләкәй Башҡортостан сиктәрендә Башҡорт автономия ын иғлан иткән ҡарар раҫлана. Башҡорт хөкүмәте 1917 йылдың ноябрь-декабрендә

Совет власы менән контрреволюция ара ында барған көрәштә битарафлыҡ аҡлауы тура ында белдереү я ай. Ш. Манатов 1918 йылдың ғинуар башында Рәсәйҙе Ойошторою Йыйылышында ҡатнашыу, шулай уҡ Башҡорт автономия ын раҫлатыу тура ында РСФСР Хөкүмәте менән өйләшеү өсөн Петроградҡа китә. Башҡорт хөкүмәтенең ҡалған ағзалары шул уҡ мәсьәлә буйынса тиҙҙән... аҡ казактар менән бәйләнешкә инә.

7 ғинуарҙа В. И. Ленин менән осрашып, Ш. Манатов Башҡорт автономия ы әм башҡорттарҙы милли ҡыҙыл байраҡтар аҫтында тупланырға, кантондар урынына Советтар төҙөргә саҡыра. Был дәүерҙә комиссариат тараҡҡан байтаҡ документтарҙа беҙ "Башҡорттар исеменән Ш. Манатов ҡул ҡуйҙы" тигән үҙҙәрҙе уҡыйбыҙ. Үҙәк Мосолман комиссариаты илдең 70 ҡала ында үҙ бүлектәрен ойоштороп өлгөрә. Шуға күрә Ш. Манатов милли ойошма булған Башҡорт хөкүмәте менән бәйләнешен өҙөп, И. Сталин тәҡдиме менән большевиктар партия ына инә.

Яңы комиссариат башҡорт хеҙмәтсәндәренә Совет идеяларын индерергә, Халыҡ Комиссарҙары Советы исеменән Ҡазан, Өфө, Ырымбур әм башҡа губерналарҙа милли ҡоролош менән шөғөлләнергә тейеш була. 1918 йылдың мартында ул Татар-Башҡорт Автономиялы Совет Республика ы ойоштороу тура ында положение эшләп сығара. В. И. Ленин да уны хуплай. Был сара ул осорҙағы тәғәйен тарихи шарттарҙа башҡорт, татар халыҡтарының РСФСР эсендәге үҙаллылығының мөмкин булған бер төрө тип ҡарай ул. Ләкин Граждандар уғышының башланыуы был планды тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирмәй.

Ш. Манатов Үҙәк совет аппаратында күп эшләй, Башҡортостан автономия ы тура ында Совет хөкүмәте ҡарары проектын әҙерләй. 1918 йылдың ғинуарында Манатов Петроградтан: "Комиссарҙар менән өйләшеү миндә Башҡортостан автономия ының раҫланасағына ҙур өмөт тыуҙыра",– тип яҙа. Ә февралдә ул, Совет хөкүмәте Башҡортостан автономия ын танырға риза, ләкин ҡай ы бер мәсьәләләрҙе асыҡлау өсөн бөтә документтарҙы алып өс вәкилдең килеүе кәрәк, тип Ырымбурға хәбәр итә. Тик вәкилдәр килә алмай: 17 февралдә Башҡорт хөкүмәте ҡыҙылдар тарафынан ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Ошо уҡ көндәрҙә, Манатовты ла ҡулға алырға кәрәк тип, Башҡорт хәрби революцион советы (БВРС) Петроградҡа телеграмма уға, ләкин уның Башҡортостан файҙа ына эшләүен күреп, тиҙҙән үҙе үк уны яҡлап сыға. 1918 йылдың 12 мартында "Яңы ваҡыт" гәзитендә, мәҫәлән: "Хәҙер Петроградта большевиктар хөкүмәте эргә ендә эшләгән Шәриф әфәнде Манатов был эште башҡарыу өсөн (Башҡорт автономия ын төҙөү – **Р.Н.**) күп көс ала, тигән хәбәрҙәр бар",– тигән юлдарҙы табабыҙ.

Ш. Манатов әҙерләгән план менән БВРС проекты В. И. Ениндың милли сәйәсәтен танырға теләмәгән урындағы органдарҙың ҡаршылығы арҡа ында ла ғәмәлгә ашырылмай. Өҫтәүенә, татар интеллигенция ы Татар-Башҡорт Республика ын төҙөү мәсьәлә ен күтәреп сыға. Был тәңгәлдә В. И. Ленин бик аҡ булыу кәрәклеге тура ында иҫкәрт ә лә, И. Сталин тәҡдиме буйынса был мәсьәләне тикшереүгә ҡуялар. 30 мартта үткәрелгән тәүге ултырышта Ш. Манатов ҡатнашмай. 31 мартта Милләттәр эштәре буйынса халыҡ комиссариаты тағы йыйыла. Фекер алышыуҙа сығыш я ап, Ш. Манатов Татар-Башҡорт Республика ын төҙөүгә ҡаршы сығыуын белдерә. Мосолмандар комиссариатының 3 апрелдә үткәрелгән кәңәшмә ендә лә ул, татарҙар менән башҡорттар ара ында милли ҡаршылыҡтар йәшәп килеүен әйтеп, проекттағы республика тормошҡа аша ҡал а, мәҙәниәте юғарыраҡ булған татарҙарҙың хакимлыҡ итеүе ихтимал, тип иҫкәртә. Ләкин кәңәшмә, Татар-Башҡорт Республика ы ҡороу йә әтенән башҡорттар ара ында

өгөт-нәсихәт эштәрен көсәйтергә кәрәк, тигән фекер белдерә.

Майҙа Мәскәүҙә ошо республиканы ойоштороу съезын саҡырыуҙы ҡараған кәңәшмәлә лә күпселек Башҡорт автономия ын таныуға ҡаршы сыға. Унда Ғәлимйән Ибра имов, башҡорттар татар халҡының бер өлөшө генә ул, телдәре бер үк, айырма ҡай ы бер өндәрҙә генә, тип иҫбатларға тырыша. Шәриф Манатов был хата ҡарашты ҡаты тәнҡитләп сыға. Ул башҡорт халҡының сығышын асып бирә, тарихын аңлата, башҡорттарҙың IX быуат урта ына тиклем үк әле билдәле бер үҙаллылыҡ менән файҙаланыуын иҫкә төшөрә. Манатов был йыйылышта кәңәш биреү хоҡуғы менән генә ҡатнаша, асылда башҡорт халҡы мәнфәғәтен бер үҙе генә яҡлай әм... еңелә. Ул арала Ойоштороу съезына әҙерлек башлана. РСФСР-ҙың Милләттәр эштәре халыҡ комиссариаты съезды Өфөлә үткәреү хаҡында ҡарар сығара. Ете кешелек комиссия төҙөлөп, уға Ғ. Ибра имов та, Ш. Манатов та индерелмәй.

Өфөлә Татар-Башҡорт Республика ын яҡлап сығалар. Ике халыҡ зыялылары ара ында барған бәхәсте көсәйтеүсе “ел” дә ошонан иҫә. Татар буржуаз милләтселәре: “Ҡай ы бер башҡорт шәхестәренең башҡорттарға ерле автономия тәьмин итергә тырышыуы – буш хыял”,– тип өҙөшә. Манатов И.Сталинға түбәндәге хатты ебәрә.

“Вятка губерна ының Сарапул ҡала ы. Халыҡ Комиссарҙары Советына, халыҡ комиссары Сталин иптәшкә.

Хөрмәтле иптәш Сталин.

Өфөгә килеүем менән үк Крәҫтиәндәр советы ҡарары буйынса Ғәлимйән Ибра имов мине ҡулға алды әм төрмәгә оҙатты. Советта бары ы ла – С.Р.-ҙар (эсерҙар – **Р. Н.**) (“ улдар”, “урталағылар” әм хатта “уңдар”). Төрмәнән мине Сарапул ҡала ына оҙаттылар. Ике ай тиерлек ошонда интегәм. Өфө тикшереү комиссия ы яғынан минән орау алынғаны юҡ. Ғәйепләүҙәрен дә белдермәйҙәр.

Ошаҡ әм татар милләтселәренең көнсығыш интрига ының ҡорбаны булып сығыуыма бер ниндәй шигем юҡ: улар эсерҙар әләменә ышыҡлана. Ә беҙҙең тормошто бик аҙ белгән Советтар быға битараф ҡарай.

Әгәр мине чехословактар өжүме менән бәйле ҡулға ал алар, мин Өфө ҡала ы буржуаз синыфының вәкиле түгел. Ул саҡта мин, Үҙәктәге Совет власы вәкиле булараҡ, Өфө контрреволюционерҙары тарафынан беренсе булып атылыр инем. аулығым көндән-көн насарая. Ике ай буйына язаланыу миңә бик насар тәьҫир итте.

Артабан нимә булырын белмәйем. Тиҙ генә сығарыуҙарына ис ышанысым юҡ, сөнки үҙҙәрен эсер тип атаған татар милләтселәренең бөтә е лә миңә ҡаршы. Ә башҡорттарға килгәндә, уларҙың демократик өлөшө татар эсерҙары тарафынан ҡыйратылған, ә буржуаз өлөшө минең тотҡонлоҡҡа эләгеүемә ҡыуана ғына – миңә шуны еткерҙеләр.

Иптәш Сталин, еҙ Көнсығыш тормошон, шулай уҡ мине лә, татарҙар менән башҡорттар ара ындағы ҡаршылыҡтарҙы ла яҡшы беләегеҙ. Мине ҡотҡарыу әм Мәскәүгә килтереү тура ында тейешле күр әтмә бир әгеҙ ине.

Ялҡынлы сәләм. еҙҙең Шәриф Манатов. Сарапул ҡала ы, төрмә”.

Манатовты иреккә сығарыуҙа Сталиндың роле ниндәй булғандыр – был хаҡта документ юҡ. Шуны ы асыҡ: Татар-Башҡорт Республика ын төҙөүгә ҡаршы сыҡҡан кешене яҡлашырға Сталин бигүк ынтылып та тормағандыр. Был йә әттән Манатов тормошон өйрәнеүсе башҡорт тарихсылары Р. Ә. Дәүләтшин менән С. Б. Сәйфуллин уны “данлы герой түгел, ә эҙәрләнеүсе герой” тип атаны. Был ба а менән килешмәү мөмкин түгел: Манатовтың И.Сталин күҙенән төшөп, Өфөгә

ҡайтыуы, артабан арлы-бирле йомоштарҙы үтәүгә күсеүе лә шул хаҡта өйләй.

“1919 йылдың башында Шәрифте кем менәндер Төркиәгә партия эшен яйға алырға ебәргәндәр,– тип бәйән иткәйне Ғ.С. Манатова.– Унда Шәриф журналистика менән шөғөлләнә. Ләкин уны ҡулға алып, большевик тип ултыртып ҡуялар. Бик ауыр йәшәгәнен өйләгәйне лә, оноткәнмын. Бик аҫтында ултыра торғас, аҡса биреп, төрмәнән сыға. Уны сығарған төрмә аҡсы ы Шәрифте өйөнә алып ҡайта ла тағы ... бикләп ҡуя. Йәнә аҡса талап итә. Хужа өйҙә булмауҙан файҙаланып, Шәриф ялсы ҡыҙҙы өгөтләп, тәҙрәне астыра ла сығып ҡаса... Ҡайтҡанында диңгеҙҙә батып саҡ үлмәй ҡала”.

Был мажаралы ваҡиғаны бер ни тиклем раҫларлыҡ документ та табылды. Ул Төркиә коммунистар ойошмаларының Үҙәк бюро ы биргән 1850-се танытма: “Был танытма Шәриф Манатов иптәшкә бирелә. Ул Төркиәлә булған ваҡытта ысынлап та коммунистик ойошма менән етәкселек итте әм Төркиәнең “Ени донъя” коммунистик гәзитенең редакция коллегия ы рәйесе булып торҙо. Рәйес: М. Субхи”.

Ш. Манатов Төркиәлә йөрөгән йылдарын, моғайын, яҙып та ҡалдырғандыр. Сөнки 1923 йылдың ғинуарында, “Башҡортостан” гәзитендә баҫтырған “Мөстәкил Курдстан” тигән мәҡәлә ендә Ш. Ә. Манатов сәйәси күҙәтеүсе сифатында сығыш я ай, уның “Ван Бетлис, Харпут, Диабакр шәрҡи губерналарында, Эрзрум, Мусил вилайәттәрендә (провинцияларында) әм Ҡанғал өйәҙендә йәшәүсе курд халыҡтарының кәсебе, көнкүреше тура ында өйләүендә, ошо халыҡтарға ҙур теләктәшлек белдереп, уларҙың а -зарҙарын тәрән аңлауын төҫмөрләргә була...

Төркиәнән Манатов Башҡортостанға ҡайта. И. Сталин ҡул ҡуйған мандатта: “Халыҡ Комиссарҙары Советының 1920 йылдың 21 декабрендәге декреты нигеҙендә Манатов иптәш РСФСР Милләттәр эштәре халыҡ комиссариатының Башҡортостан Автономиялы Социалистик Республика ы Хөкүмәте (Башҡарма комитет әм Совнарком) эргә ендә тулы хоҡуҡлы вәкиле итеп тәғәйенләнә”,– тиелә. Уға урында милли сәйәсәттең нисек үтәлеүен күҙәтеп барыу, РСФСР әм Башҡортостан Республика ы органдары, шулай уҡ уларҙың айырым вәкилдәре ара ында ыңғай мөнәсәбәт булдырыуҙа ярҙам итеү, Башҡортостанда йәшәгән аҙ анлы милләттәрҙең хоҡуҡтарын аҡлауға булышлыҡ итеү, Үҙәктән барған әм урындағы шарттарҙы белмәгән йәки совет милли сәйәсәтен дөрөҫ аңламаған хеҙмәткәрҙәрҙең аҡ ыҙ эш итеүе арҡа ында Башҡортостан автономия ының боҙолмауын тәьмин итеү кеүек ҙур бурыстар йөкмәтелә. Ул кәңәш биреү хоҡуғы менән Башҡортостан хөкүмәтенә лә индерелә.

Ш.Манатов 1936 йылда иҫән булып, ҡара сумаҙан төбөнән Муса Мортазиндың фото ы килеп сыҡ а, ул барыбер ҡулға алыныр ине, тигән уй тыуа. Сөнки кешенең кем менән бәйләнеш тотоуын йәшереп булмай.

Тулы мәғлүмәттәр булмағанлыҡтан, артабан Манатов эшмәкәрлегенең ҡай ы бер биттәрен анап ҡына үтәбеҙ. 1923 йылдың мартынан 1924 йылдың ғинуарына тиклем ул – Төркөстанда Ғилми совет рәйесе, Халыҡ мәғарифы комиссариаты коллегия ы ағза ы. 1924 йылдың башында – Башҡортостан Халыҡ мәғарифы комиссариатының академик үҙәге мөдире. Был үҙәк ҡыҫҡа ваҡытта башҡорт телендә 20-нән артыҡ уҡыу-методик әм фәнни әсбап баҫтырып сығара. Улар ара ында әлифба әм уҡыу китаптары, математика, тәбиғәтте өйрәнеү, Башҡортостан география ы әм тарихы буйынса әсбаптар бар. Математика, тел ғилеме, тәбиғәт фәне, физика әм география буйынса терминдар эшләнә. Милли уҡытыу-

сы кадрҙар әҙерләү өсөн Ш. Манатов башланғысында Өфөлә Халыҡ мәғарифы институтын асыу буйынса саралар күрелә. 1925 йылда Манатов, ни сәбәптәндер, Башҡортостандан китеп, бер аҙ Ярославль педагогия институтында эшләп ала, 1925–1932 йылдарҙа Баҡы, Тифлис, Ҡырымда, Әрмәнстанда партия эштәрен башҡара. 1932–1934 йылдарҙа Ш.Манатов Ленинградта СССР Фәндәр академия ы аспирантура ында уҡый.

“Шәриф  унҕы эш урыны – Фрунзе ҡала ының педагогия институтында профессор булды, донъя тарихын уҡытты,– тип яҙҙы Ғәйшә Сәйәховна.– Ныҡ сырхау сәбәпле, бер ҡыш ҡына эшләне лә Шафран санаторийына дауаланырға китте”.

1936 йылдың башында уҡ әле Шәриф Әхмәт улы ВКП(б)-ның Үҙәк Комитетына үҙ  ғәйебен танымауы тура ында белдерә  әм аҡлауҙарын  орап ғариза ебәрә. Өс кешелек махсус комиссия 25 мартта “Манатовтың эшен аҙағына тиклем тикшереп, Партия контроле комиссия ының коллегия ултырышына ҡуйырға” тигән ҡарар сығара. Ләкин ул көндө Манатов көтөп  ала алмай.

26 йыл үткәс, ире исеменән юғары органдарға Ғәйшә Сәйәховна мөрәжәғәт итә. Ахыр сиктә КПСС Үҙәк Комитеты Ш.Ә. Манатовтың биография ында шикләнерлек, “контрреволюцион эшмәкәрлекте” раҫларлыҡ бер нәмә лә тапмай. Ул тулы ынса аҡлана.

1917 йылдың августа уҡ Башҡорт Өлкә шура ы рәйесе итеп  айланған сәйәсмән Ш. Ә. Манатов эшмәкәрлеге әлегәсә тейешенсә  ба аланмаған. Был ғәҙел түгел. Манатовтың элекке урынбаҫары Ә. Вәлидовтың “Хәтирәләр”ендәгесә, бәлки, ул “оло” сәйәсәттә ҡай ы бер нәмәләрҙе башҡа төрлө аңлағандар, мыйығысәстәре лә килеш еҙ булғандыр. Ләкин былар ғына тарихсыларыбыҙға уны уратып үтергә нигеҙ бирмәй. Сөнки был шәхестәрҙең ике енең дә маҡсаты  уртаҡ була: Башҡортостанды үҙаллы республикаға әүерелдереү. Ш.Манатов большевиктар партия ына, В.Ленинға ышана  әм мөстәҡиллекте Советтар ғына тәьмин итә ала, тип уйлай. Әхмәтзәки и ә автономияны буржуаз нигеҙҙә төҙөргә йыйынып, тәүҙә Советтар яғына сыға, аҙаҡ уға ҡаршы ҡорал күтәрә  әм сит илгә ҡасып китергә мәжбүр була. Ш. Манатов та  уңыраҡ үҙенең хата ын аңлай  ымаҡ, шуның өсөн ул да золом  улышын тоя  әм  уңғы көндәрен Учалы яғында рәсми властарҙан йәшеренеп йәшәй.

1960 —1970 йылдарҙа Мейәс  ҡала ында Мөхәммәт Байбурин тигән бик мәғлүмәтле кеше йәшәй ине. 30-сы  йылдарҙа ул Әй-Көсөк,  өйөндөк ауылдарында старателдәрҙән алтын ҡабул итеү менән шөғөлләнгән, был яҡтың кешеләрен дә яҡшы белгән. Был ағай менән миңә лә  өйләшеп ултырырға тура килгәйне. Сәйәси золом йылдары, Ш.Манатов тура ында  үҙ сыҡҡас, Байбурин:

– Шәриф бында ҡасып, йәшенеп ятты бит,– тигәйне.– Уны атырға тейештәр ине, ә ул алданыраҡ үҙе үлеп өлгөрҙө.

**Рәүеф НАСИРОВ.**

***

Өфөлә Башҡортостан халыҡтары ассамблея ының II съезы үтте. Сара алдынан Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов, Хөкүмәт Премьер-министры Раил Сарбаев, Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев .б. рәсми кешеләр. Дуҫлыҡ монументына сәскә гөлләмәләре алды. Пленар ултырыш Конгресс-холда уҙғарылды.

Съезда 600-гә яҡын делегат ҡатнашты. Форумға килеүселәр ара ында Рәсәй халыҡтары ассамблея ы советы рәйесе Рамазан Абдулатипов, Татарстан Республика ының Дәүләт Советы Рәйесе, Татарстан халыҡтары ассамблея ы советы рәйесе Фәрит Мөхәмәтшин, Рәсәй халыҡтары йәштәр ассамблея ы рәйесе Нәзиржон Абдуганиев, Берләшкән Милләттәр Ойошма ының гуманитар эшмәкәрлекте координациялау буйынса идаралығы директоры Рәшит Халиҡов, Чечен Республика ының мәҙәниәт министры Дикалу Мурзакаев, Германияның Баден-Вюртемберг еренең «Көнсығыш — Көнбайыш» йәмәғәт ойошма ы рәйесе Ганс Эренфрид Мате етәкселегендә ГФР делегация ы бар ине.

Рамазан Абдулатипов Башҡортостан халыҡтары ассамблея ы советы рәйесе Нияз Мәжитовты әм М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры, «Ватаным» татар йәмәғәт ойошма ының Башҡортостан бүлексә е рәйесе Раил Әсәҙуллинды халыҡтар дуҫлығын нығытыуға индергән өлөштәре өсөн «Рәсәй халыҡтарының дуҫлығы әм берҙәмлеге» миҙалы менән бүләкләне.

Съезда Рәсәй Федерация ы Президентына, Рәсәй Федерация ының Федераль Йыйылышына, Рәсәй Федерация ы Хөкүмәтенә мөрәжәғәт ҡабул ителде, шулай уҡ Башҡортостан халыҡтары ассамблея ы советы, уның рәйесе айланды. Килә е туғыҙ йылда был абруйлы йәмәғәт ойошма ына Башҡортостан Фәндәр академия ының вице-президенты Әхәт Мостафин етәкселек итәсәк.

...Шулай уҡ баш ҡалабыҙҙа бер юлы өс байрам – Рәсәй көнө, Салауат Юлаевтың тыуыуына 255 йыл тулыу әм Өфө ҡалғаенең 435 йыллығы киң билдәләнде.

***

Сибай ҡала ында уҙғарылған «Башҡорт халҡының матди әм рухи мәҙәниәтендә, этнология ында әм антропология ында Евразиялыҡ феномены» тип исемләнгән конференцияла Өфө, Сибай, Төмән ҡалаларынан, республика районда рынан 145 кеше ҡатнашты. Унда БР мәғариф министры Зиннәт Аллаяров, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Зөфәр Еникеев, БДУ-ның тарих факультеты деканы, профессор Марат Ҡолшәрипов, БДУ профессоры Ирек Аҡманов, Тарих, тел әм әҙәбиәт институты директоры Фирҙәүес Хисамитдинова .б. сығыш я аны. Фәнни конференция киләсәктә донъя күрәсәк 7 томлыҡ «Башҡорт халҡы тарихы» китабына арналды.

– Күп томлы китап үҙанды үҫтереү, халыҡта ватансылыҡ тойғолары тәрбиәләү, милли ҡиммәттәрҙе, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларыбыҙҙы өйрәнеү әм аҡлап ҡалыу маҡсатында яҙыла. Быға ҡәҙәр ҙә монографиялар, тарихи мәҡәләләр тупланған китаптар сығып торҙо. Әммә уларҙың бары ын да ыңғай ба алап булмай. Ҡай ы берҙәре өҫтән генә өйрәнелгән, бәғзеләрендә и ә тарих боҙоп күр әтелгән. Тарихты академик кимәлдә яҙырға кәрәк,– тине М. Ҡолшәрипов үҙенең сығышында

Конференция ҡунаҡтары талантлы башҡорт яҙыусы ы әҙиә Дәүләтшинаның ын- әйкәлен асыуҙа ҡатнашты.

***

Республика журналдары баш мөхәррирҙәренең даими эшләүсе ҡороноң сираттағы кәңәшмә е Баймаҡ тарафтарында матбуғатҡа яҙылыу барышына арналды. Йыйынға ауыл биләмәләре башлыҡтары ла саҡырылғайны, уларҙың әр бере е теге йәки был журналды таратыу буйынса фә емле сығыш я аны. Ә төбәктә матбуғатҡа яҙылыу буйынса дөйөм анализды ҡала әм район хакимиәте башлығы урынбаҫары Радмир Иҫәнбаев я аны.

Шул уҡ көндө «Тамаша» журналының (баш мөхәррире – Наил Ғәйетбаев) эшмәкәрлегенә, йөкмәтке енә, биҙәлешенә ҡарата сарала ҡатнашыусылар тарафынан төплө тикшереү я алып, файҙалы тәҡдимдәр әйтелде. Кисен «Талҡаҫ» санаторийы китапхана ында әҙәбиәт өйөүселәр менән осрашыу уҙғарылды.

***

Хәбәр итеүебеҙсә, Ғәлим Хисамовтың 60 йәшлек юбилей кисә е апрель айында Башҡорт дәүләт филармония ында уҙғарылғайны. Июнь урта ында уны көйөргәҙеләр саҡырып ҡотланы.

Көйөргәҙе районы муниципаль районы хакимиәте башлығы Әхәт Ҡотләхмәтов, килгән ҡунаҡтар, Кинйәбай ауылы халҡы алдында сығыш я ап, районда барған ыңғай үҙгәрештәр хаҡында әйтеп үтте әм яҡташ яҙыусыларҙың халыҡты рухи яҡтан тәрбиәләүҙәге роленә ҙур ба а бирҙе.

Фәнир Малбаев етәкселегендәге район әүәҫкәрҙәре, ауыл клубы хеҙмәткәрҙәре Флүрә менән Рәжәп Шәриповтар ойоштрған концерт та байрамға йәм өҫтәне.

Юбилей тантана ына Өфөнән Тамара Ғәниева, Рәмил Йәнбәк, Әхмәр Үтәбай, Нурия Ирсаева, Земфира Күсәрбаева, Иршат Аҫылғужиндар килгәйне.

***

Башҡортостандың халыҡ яҙыусы ы Ноғман Мусин, педагогия колледжының саҡырыуы буйынса, Салауат ҡала ында булып ҡайтты. Уны ҡалаға Германиянан немец делегация ы килеү уңайы менән саҡырғайнылар.

Яҙыусы тәүҙә колледж студенттары, уҡытыусылары менән осрашып, башҡорт әҙәбиәте әм әҙәби ижад тура ында өйләне, бик күп орауҙарға яуап бирҙе.

Немец делегация ы билдәле йәмәғәт әм сәнғәт эшмәкәрҙәре – Баден-Вюртемберг еренең “Көнсығыш – Көнбайыш” дуҫлыҡ йәмғиәтенең рәйесе Ганс Мате әм уның ҡатыны, ошо йәмғиәттең ағза ы Маршт Мате, Штутгарт музыка институтының профессоры Герди Собак, уның ире, юрист, дуҫлыҡ йәмғиәте ағза ы Бернт Собак, кинорежиссер Дитер Циммермандарҙан тора ине. Улар Беренсе империалистик уғыш, уның эҙемтәләре әм шул уғышта ҡатнашыусыларҙың төрлө яҙмыштары тура ында документаль фильм эшләргә әҙерләнә икән. Уларҙы Ноғман Мусиндың " айлап алған яҙмыш" романындағы Зилда-За иҙә менән Карамдың (үҙ исеме – Кәримов Сәйфетдин) яҙмышы ҡыҙыҡ ындырған.

Студенттар ҡунаҡтар өсөн матур концерт әҙерләгәйне. Уларҙың " айлап алған яҙмыш" буйынса эшләгән инсценировка ы ла немец дуҫтарға бик оҡшаны. Ә уңынан үткәрелгән "түңәрәк өҫтәл"дә Ноғман Мусин Кәримовтарҙың тормошо, ғаилә хәлдәре, романдың яҙылыу тарихы тура ында өйләне. Әле уларҙың бер бала ы – өлкән ҡыҙҙары Фәрхиә Кәримова ғына иҫән әм Ишембайҙа йәшәй. Немецтар уның менән осрашырға бик теләгәйне лә, сирләп китеү сәбәпле, Фәрхиә апай килә алманы.

Ноғман Мусин немец делегация ына " айлап алған яҙмыш"тың башҡортса китабын әм рус теленә үҙмә- үҙ тәржемә ителгән вариантын бүләк итте.

Был сараға аталары, олаталары йәки яҡын туғандары Беренсе империалистик уғышта ҡатнашҡан кешеләр ҙә саҡырылғайны. Улар ата-бабаларының яҙмыштары тура ында өйләне, фото үрәттәр, ҡай ы бер яҙма иҫтәлектәр менән таныштырҙы.

***

Ҡырмыҫҡалы районында фронтовик шағир, РСФСР-ҙың әм БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Шәриф Бикҡолдоң (1924 – 1996) тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған әҙәби саралар уҙғарылды.

Шағирҙың тыуған ауылы Ҡарламанда ла хәтерҙә оҙаҡ аҡланырлыҡ кисә булды. Байрамға Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе урынбаҫары, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты Ҡәҙим

Аралбай, шулай уҡ Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты шағир Ирек Кинйәбулатов килгәйне.

Район хакимиәте башлығы урынбаçары Азамат Ғәйфуллин, кисәне асып, әҙиптең оло ижады әм яҡташтарының уға ҡарата булған йылы ҡарашы хаҡында өйләне.

Өфө ҡунаҡтары ла, ошонда йәшәүсе әҙәбиәтсе Рим Исхаҡов та Ш. Биҡкол ижадының ә әмиәте тура ында сығыш я аны. Районды̇ң әүәçкәр артистары Дамир Әхмәтов, Фәрит Яҡшығолов әм башҡалар Ш. Биҡкол шиғырҙарына яҙылған йырҙарҙы йырлап ишеттерҙе.

Ш. Биҡколдоң тормош иптәше Рәйсә ханым, ҡыҙы Ләйсән яҡташтарына оло рәхмәттәрен белдерҙе.

***

Стәрлетамаҡ ҡала ында арабыҙҙан иртә киткән күренекле шағирә Зөбәржәт Йәнбирҙина ижадына арналған хәтер кисәләре уҙҙы.

Әҙәбиәткә үткән быуаттың 70-се йылдарында килгән шағирә артабан «Йөҙөк ҡашы», «Күк мунсаҡ», «Ил инә е», « андал», «Даға сыңы» әм башҡа китаптары менән шиғриәт өйөүселәрҙең ихлас мөхәббәтен яуланы.

Химия технология ы техникумында уҡыу йортоноң директоры, ҡала башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Риф Дәминев, Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошма ының яуаплы сәркәтибе Кәбир Аҡбашев З. Йәнбирҙинаның ижады әм тормошо хаҡында өйләне.

С. Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаттары, шағирҙар Ҡәҙим Аралбай әм Ирек Кинйәбулатов иçтәлектәре менән сығыш я аны.

Кисәлә шағирәнең әçәрҙәренә яҙылған йырҙар башҡарылды, шиғырҙары уҡылды.

***

Башҡорт дәүләт опера әм балет театрында Рәсәй Федерация ының әм Башҡортостан Республика ының атҡаҙанған артисы, М. Аҡмулла исемендәге премия лауреаты Йәмил Әбделмәновтың ижади эшмәкәрлегенә 15 йыл тулыуға арналған концерт булды.

Йырсыны ҡотларға яҡташтары – ҡырмыçҡалылар ҙа килгәйне. Район хакимиәте башлығы урынбаçары Азамат Ғәйфуллин, мәҙәниәт бүлеге етәксе е Хәниф Батталов, шағир Ирек Кинйәбулатов сәхнәнән барса яҡташтарының сәләмен тапшырҙы.

***

Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры коллективы Төркиәлә уҙғарылған «Йәш көндәр» халыҡ-ара фестивалендә уңышлы сығыш я ап ҡайтты. Улар был ҙур форумға Т. Миңнуллиндың «Диләфрүзгә дүрт кейәү» комедия ын алып барғайны.

– уңғы йылдарҙа Төркиәлә театр сәнғәтенә ҙур иғтибар бүленә, шуға күрә төрлө фестивалдәр үткәреп, сит коллективтарҙан тәжрибә уртаҡлашырға ынтылалар. Был юлы Македония әм Башҡортостан театрҙары саҡырылғайны. Коллективтар, ижади алымдар төрлөлөгө ҡәрҙәштәрҙә ҡыҙыҡ ыныу уятты, ҡыҙыҡлы сағыштырыуҙар я аныҡ,– тине театр режиссеры Илнур Муллабаев.

Килә е миҙгелдә театр Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл тулыуға арнаясаҡ.

***

Республика йортонда 2008 йыл өсөн Ш. Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премия ын тапшырыу тантана ында БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев, уның урынбаçары, мәҙәниәт әм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев, Йәштәр сәйәсәте, спорт әм туризм министры Александр Никерин, башҡа рәсми вәкилдәр ҡатнашты. Лауреаттарҙы: прозаик, тәржемәсе, сценарист Зө рә Бураҡаеваны, Башҡорт дәүләт опера әм балет театры солисы Ил ам Вәлиевты, Стәрлетамаҡ рус дәүләт драма театры артистка ы Светлана Ғиниәтуллинаны оло бүләктәре менән ҡотлайбыҙ, киләсәккә уңыштар юрайбыҙ.

# МИЛЛИ БАТЫРЫБЫҘҒА РУХИ ӘЙКӘЛ

уңғы йылдарҙа күренекле фольклорсы-ғалимә, филология фәндәре докторы Фәнүзә Айытбай ҡыҙы Нәҙершина халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларын донъя кимәлендә танытыу йә өтенән ғәйәт ҙур эштәр башҡарҙы. 1995 йылда уҡ ул танылған йырсы Флүрә Килдейәрова менән берлектә башҡорт, рус әм инглиз телдәрендә “Халҡым йыры” тигән китап әҙерләп сығарғайны. Аҙаҡ, айырым тәржемәселәрҙе йәлеп итеп, “Башҡорт халыҡ йырҙары әм йыр-риүәйәттәре” (1997), “Башҡорт халыҡ риүәйәттәре әм легендалары” (2001), “Башҡортса-инглизсә-русса мәғәнәләш мәҡәлдәр әм әйтемдәр үҙлеге” (2002), “Урал батыр”, “Башҡорт халыҡ ҡобайыры” (2003, 2005) исемле хеҙмәттәр яҙҙы. Был китаптарҙа ла фольклор әҫәрҙәре өс телдә тәҡдим ителгән, әр әҫәргә тейешле аңлатмалар, иҫкәрмәләр бирелгән, йырҙарҙың ноталары урынлаштырылған, боронғо әм диалект лексика ына үҙлек төҙөлгән.

Мәғлүм ки, быға са башҡорт фольклор үрнәктәре рус теленә тәржемәлә донъя күргелә ә лә, халыҡ-ара аналған инглиз телендә нәшер ителгәне юҡ ине. Ошо мө им эште башлап, Фәнүзә Нәҙершина фольклористикабыҙҙа ғына түгел, ғөмүмән, филологиябыҙҙа өр-яңы йүнәлешкә нигеҙ алды, халҡыбыҙҙың рухи ынйыларын бөтә донъя уҡыусы ына еткереү эшенә юл асты.

Был үтә лә ауыр, яуаплы әм изге эштәрен әле лә әүҙем дауам итә ғалимә. Күптән түгел генә “Информреклама” нәшриәтендә уның 2 томдан торған “Салауат башҡорт фольклорында” исемле хеҙмәте баҫылып сыҡты. Фольклор ҡомартҡыларын рус әм инглиз телдәренә тәржемә итеүҙә уға Й.А. Буранғолов, А.П. Майоров, Ғ.Ғ. Шафиҡов, Р.Й.Ғарипов, Н.Н. Әхтәмова, А.П. Маслова, А.Р. Мөхтәруллина, А.В. Нуриева, С.Ж. Нухова әм Э.М. Созинова, инглизсә текстарҙы редакторлауҙа Б.Т. Ғәниев ярҙам күр əткән.

Хеҙмәттә башҡорт халҡының милли геройы, шағир-импровизатор Салауат Юлаевҡа бәйле легендалар, риүәйәттәр, эпос, йырҙар әм бәйеттәр тематик төркөмдәргә бүлеп бирелгән. Тәүге том “Салауат (ҡиәфәте, көс-ҡеүәте, рухи донъя ы)”, “Салауаттың ғаилә е (ата-әсә е, ҡатындары, балалары)”, “Салауат – ихтилал етәксе е. Яу ваҡиғалары”, “Салауаттың яу ҡорамалдары, әйберҙәре”, “Салауаттың тотолоуы, яуҙан уңғы ваҡиғалар”, “Ихтилалға, Салауат исеменә бәйле ер- ыу атамалары, хазиналар” әм “Мәңге тере Салауат” исемле бүлектәрҙе үҙ эсенә ал а, икенсе том “Эпос”, “Йырҙар” әм “Бәйеттәр” тигән бүлектәрҙән ғибәрәт. Йыйынтыҡҡа барлығы 300-ҙән артыҡ фольклор әҫәре тупланған. Уларҙың тексы башта башҡорт телендә, аҙаҡ рус әм инглиз телдәренә тәржемәлә бирелгән, әр бүлектең аҙағында сығанаҡтар, йәғни ҡомартҡыларҙың аҡланыу урыны, шифры әм биттәре күр әтелгән әм текстарға тейешле аңлатмалар, иҫкәрмәләр бирелгән.